## ПАРТБИЛЕТ

Мине дауалаған врач, беҙҙең кеүек урта йәштәрҙәге, тәбәнәк буйлы тумалаҡ ҡына ир, ни өсөндөр Талханы үҙ бүлмәһенә алып инеп китте. Мөһабәт кәүҙәле «ҡара сорнай» Талхам янында уны дәү айыуға эйәргән һөйкөмлө сусҡа бәрәсенә оҡшатып, көлгөм килде. Үҙем ауыҙ йырам, үҙемә бөтә сирлеләр Аллалары кеүек табынған шөһрәтле хирург хаҡында шулай мәрәкә уйлауым өсөн уңайһыҙ. Шырғыя ҡыҙҙар ише торғансы тип, палатаға йүнәлдем: бүлмәләш ҡатындар менән хушлашайым да төйөнсөгөмдө алып сыға торайым.

— Хафизова, — тип туҡтатты шул саҡ дорфа ғына шәфҡәт туташы. Ҡулыма больницанан сығыу ҡағыҙын тотторҙо ла, доктор бүлмәһенең ишеген асып, эскә һонолдо. Саҡ ҡына эйелеүе булды, сонтор халатының итәге күтәрелеп, бөтөн зиннәте күренде суҡынсыҡтың. «Ай эттәгенәһе, — тинем күҙҙәремде сылт-сылт йомоп. — Бройлер тауыҡтарының шулай йөнө ҡойолоп, арт һындары асылып йөрөй торған». Был хәлде шапылдағын лаштыр-лоштор һөйрәп, коридор буйлап тәнтерәкләгән сирләшкә бер абзый ҙа абайлап ҡалды. Тик етем быҙауҙың ауыҙы һөткә тейһә, мо-

роно ҡанай, тигәндәй, саҡ йөрөгән байғоштоң күҙе аҡайыуы булды, быуылып йүтәлләргә керешТе.

— Ирҙәр үлем түшәгендә лә ҡыж-ҡыж тип ятыр, ти. Үҙ хәлеңде үҙең белмәй, ҡыҙҙар күҙләп йөрөгәс, шулай була инде, — тип мәхлүктең елкәһен төйәм. Үҙем тыйыла алмай ҡөләм. Шәфҡәт туташы иһә беҙгә өтөп ҡарап, шарт-шорт баҫып үтеп китте. Минең күңелемә үртәлде. Нишләйем һуң?! Иртә таңдан ауыҙымды йыйып ала алмайым. Мине сығаралар!.. Бөгөн өйөмә, балаларым янына ҡайтам! Ике ай буйы больницаның түшәменә текләп, аһ-зар араһында ятҡан кеше генә аңлар ҡыуанысымды. Сығаралар. Сабыйҙарымды һөйөп туя алмам. Талхамдың киң яуырынына башымды һалып йоҡлап китермен дә йылы ҡосағында уянырмын.

Доктор бүлмәһе янынан уҙғанда ныҡлап ябылмай ҡалған ишектән һыңҡылдап илаған тауышты ишетеп, тертләп китәм. Талха бит... «Балаларға бер-бер хәл булғанмы?»

— Ир була белегеҙ, — тип өгөтләй доктор.— Ҡайғырғанығыҙҙы белдермәгеҙ. Ул үҙенең һауығырына ышана.

«Ышана? Ышанам шул...» — тип уйлайым аптырап.

— Хәле һәйбәт, күңеле көр кеүек бит һуң?— ти ирем.

— Ҡайтам, тип йөрәкһегәнгәләр. Уҙа барһа, өс ай ғүмере ҡалған. Хәлен еңеләйтергә тырышығыҙ.

Һүҙҙең үҙем тураһында барғанын аңлап еңел тын алдым: балалар имен-аман. Шулай тип уйланым да доктор әйткәндәрҙең аяуһыҙ мәғәнәһе саҡ башыма барып етте.



«Мин үлһәм, балалар нишләр?»

Башым әйләнеп киткәнгә, һалҡын стенаға нығыраҡ һыйынам. Ә Талха һаман илай. Доктор уға һыу эсереп маташа, үҙе йыуата.

— Үҙегеҙҙе ҡулға алығыҙ. Ҡайғыға бирешмәгеҙ... Үлгән артынан үлеп булмай...

«Талха нишләр минһеҙ?.. Балалар нишләр? Бигерәк бәләкәйҙәр бит: туғыҙ ҙа, ун ике. Етмәһә, икеһе лә малай. Ҡыҙ балалар, исмаһам, үҙ-үҙҙәрен ҡарай ала. Әсә наҙына тилмереп үҫерҙәрме?»

Талханың ултырғысты шығырҙатып ҡалҡынғаны ишетелә. Күреп ҡалмаһындар, ишеткәнемде белмәһендәр тип тиҙерәк палатаға инәм. «Ә, бәлки, доктор яңылышалыр. Минең ғүмеремде һанап ултырырға Алла түгел дә инде ул», — тип уйлайым да күңелем асылып китә. Тыныс күренергә тырышып бүлмәләштәр менән хушлашыуыма, йөҙөн ҡара һөрөм баҫҡан Талхам инде. Күтәрелеп ҡарарға ла ихтыяры етмәне. Өндәшмәй генә әйберҙәремде ҡулымдан алды ла, эре-эре атлап, алдан китте. Абына-һөрөнә артынан эйәрҙем. Сентябрҙең һалҡынса саф һауаһына башым әйләнә. Күптән йүнләп атламаған аяҡтар балауыҙ кеүек. Етмәһә, больницанан сыҡҡан юлға һапһары ҡайын япраҡтары ҡойолған, тайҙыра. Трамвай туҡталышына илла-алла менән саҡ барып еттем. Еттем дә хәлһеҙләнеп бағанаға һөйәлдем. Елкәм менән тоям: Талха миңә текләп тора. Күҙҙәре менән осрашҡым килеп ҡапыл боролдом: ҡарашында — йәлләү ҡатыш ытырғаныу. Әйтерһең дә мине түгел, мәйетемде күрә.

Докторҙың аяуһыҙ хөкөмө менән ҡайһылай тиҙ ризалашҡан, күнгән. «Мин теремен бит

әле, — тип әйткем килә Талхаға. — Йәнем сыҡмаҫ борон ерләргә ашыҡмаһаң ине». Әйткем килә лә, ниңәлер өндәшмәйем. Үҙемә лә, уға ла йәнем көйөп, рәнйеп тумһаям. Үпкәләшкән бала-саға кеүек үҙ алдыбыҙға мыш-мыш килеп ҡайтып еттек. Быға тиклем ҡыуанышып йәшәп ятҡан бәләкәй генә фатирыбыҙға инеү менән тамағыма төйөр тығылды. Бында бөтә нәмә ҡотло, бәхет өсөн, матурлыҡ өсөн. Бөтөн тормошобоҙҙо тағы ла йәмлерәк итеү өсөн һайлап, яратып алғанбыҙ һәр әйберҙе. Көн үҙәгендә тәҙрәнән ҡояш төшкән, ебәк пәрҙәләрҙәге эре ҡыҙыл мәктәр тағы ла матурыраҡ күренә. Гөлдәрем шау сәскәлә. Береһен дә һулытмағандар. Бүлмә уртаһына баҫып нурға ҡойонғом, онотолғом килде лә алға талпындым. Шул саҡ был яҡты донъяға артымдан һөйрәлеп килеп ингән ҡара ҡайғының шәүләһен абайланым. Нимә эшләргә белмәй Талхама ҡарайым, ә ул минән дә былай бөлөнөп, ҡойолоп төшкән. Башҡа ваҡыттағы кеүек бер-беребеҙгә терәк булһаҡ, һыйынышып йылыбыҙҙы бергә ҡушһаҡ, бөтәһе лә рәтләнер кеүек. Талханың ҡуҙғалғанын абайлап, мин дә елкенгән булам...

— Ярай, мин эшкә барып киләйем, — ти ул ауыр көрһөнөп. — Төшкә тиклем тип кенә һорағайным. — Ишекте асҡас ҡына өҫтәй. — Балалар мәктәптә. Ҡайтырынды әйтмәнем. Атыу ебәреп булмаҫ ине...

Унан, өрләктәй һынын саҡ һөйрәп, көмөрәйеп сығып китте. Ә бит беҙ шул тиклем һағынышҡайныҡ...

Тәҙрәгә барып артынан ҡарап ҡалдым, бәлки, боролор, ҡул болғар. Ул урам аша сығып бара, башы түбән эйелгән, бер нәмә лә күрмәй, ишетмәй, ҡайғыһына батҡан. Әйтерһең, әсәһенә рәнйегән дә, кемгә барып һыйынырға белмәй үкһегән сабый. Нимә булғанын да белмәй аптырап, бүлмә уртаһында тик торам. «Талха мине ярата ине бит». Ниңә «ине»? Уның әле башын юғалтып, аҡылын юйып минең өсөн ҡайғырып йөрөүе яратыу билдәһе түгелме ни? Минең өсөн ҡайғырып, тигән булам. Улай икән — ниңә ҡурсаламай, терәк булырға теләмәй? Шунда уҡ миңә ҡул һелтәне, яңғыҙымды әжәл менән күҙмә-күҙ ҡалдырҙы?! Нишләп асыуланды ул миңә? Үлергә йыйынып бәхетле донъябыҙҙы бөлдөрәм, шуға күрә уға енәйәтсе, хыянатсы булып күренәмме? Шулай еңел генә ваз кисергә булалмы икән? Талха бит һәр саҡ минең менән ғорурлана торғайны. «Хәләлемде көмөш ҡалаҡҡа һалып йоторлоҡ», — тип мәҙәк итеп ҡупырая ине. Әйтерһең дә мине үҙе тыуҙырған...

Хәйер, мине күптәр сибәргә һананы. Өрөлөп, алма кеүек бешеп торған тулы сикәләр, «мә, уп» тигәндәй бүлтәйеп торған ҡарағусҡыл ҡыҙыл ирендәр. Сиртһәң ҡаны атылып сығырҙай тулы тән, балтырҙар. Әсе телле хеҙмәттәшем Сәбилә әйтмешләй, барыһы ла минең эшсе-крәҫтиән синыфынан сыҡҡан ябай бисә икәнемде күрһәтеп тора. Үҙемә ҡалһа, ысынлап та шулай ине. Нindәйҙер нәфислек, нәзәкәтлек етмәй ине минең һылыулыҡҡа. Ә Талхаға оҡшай инем. Мине һөйөп туя алмай ине. Ә ни өсөн бөгөн ҡағылырға ла сикәнеп сығып китте? Әллә сырайыма ысынлап та үлек төҫө ингәнме?

Кәүҙәмде ҙур көҙгө янына саҡ һөйрәп барам, һуйырға илткән мал кеүек... Ҡарарға ҡурҡып торам. Һирпелеп бағам... Ябығыуын

ябыҡҡанмын. Күҙҙәрем ҙурайып, тәрәнәйеп киткән. Йөҙөмә үҙем күптән ҡыҙығып йөрөгән нәзәкәтлек яғылған. Битемдең тиреһе һарғайыбыраҡ тора ла, больница касафаты ғына ул. Саф һауала йөрөй бирһәм, тағы алһыуланыр. Юҡ, үҙемә көҙгөнән ҡарап торған уйлансан ҡатын оҡшаны миңә. Ҡәнәғәтлектән күтәрелеп китте. «Хирург булһа ни, целем күтәрелеп китте. «Хирург булһа ни, Алла түгел әле, — тип уйлайым тағы. — Минең ғүмеремде бизмәнләп ултырырға. Хәлем барҙа бирешмәм әле».

Өй йыйыштырырға, бешеренергә тотондом. Балаларыма бер байрам булһын бөгөн.

Уландарым ҡайтып үҙҙәренең ҡыуанысы менән фатирыбыҙҙы ғына түгел, бөтөн ишек алдын тултырҙы. Күршеләр берәм-берәм инеп хәл белешеп сыҡты. Мәғрифә апай, бер таба эсе ҡоймағын күтәреп, ҡыуанып килеп инде. Ҡосаҡлап, арҡамдан һөйөп туя алманы. Уның менән оҙаҡлап ултырып сәй эстек. Күңелем күтәрелгәндән-күтәрелде: «Шул тиклем кеше мине яратып, һағынып торғанда, ниңә әле үлергә тейешмен?» — тип эстән генә доктор менән бәхәсләштем. Талханың эштән һуҡмыш булып йәмерәйеп ҡайтып инеүе генә ҡояшлы көндә офоҡ ситендә асылынып торған ҡара болот кеүек тәьҫир итте. Тик әхирәтем Мәүлиханың киске ут алыуға ашығып, көләп-ҡыуанып килеп инеүе тағы барыһын да онотторҙо.

Уның менән институтта бүлмәләш булдыҡ. Ике курсҡа түбәнерәк уҡыһа ла, әллә нишләп миңә эҫенде. Егет-елән менән йөрөмәй, баш баҫып уҡыуын белә. Хәйер, һирәк-һаяҡ оҙатырға килгән егеттәренең дә күҙе миңә төшәлә ҡуя торғайны. Шуны ла ауыр алмай, үпкәләмәй, өҙөлөп тора ине. Дуҫ ҡына түгел, һеңле булырға тырышты. Ҡайһы берҙә үҙемде тормошоноң берҙән-бер мәғәнәһе кеүек итеп күреп ҡурҡып та, йәлләп тә китәм. Сөнки Талха уны тере биреһе кеүек күрә, шул тиклем яратмай торғайны. Уның шул рәүешле мине ҡатын-ҡыҙҙан да ҡыҙғаныуын аңлап көлә инем. Үҙемде шулай яратыуына һөйөнөп бөтә алманым. Яратыуына...

Уйҙарымды ситкә һирпеп тоғро дуҫыма ҡарайым. Табаҡ бите ялтырап тора, шешмәк ҡабаҡлы күҙҙәре йондоҙ кеүек балҡый. Кейәүгә сығып балалар үҫтерһә, ҡайһылай һәйбәт бисә, һәйбәт әсәй булыр ине ул. Уйымдан күңелем келт итеп ҡалды. Ниндәйҙер эске ҡалтыраныу менән Талхаға күҙ ташлайым. Сынаяҡтағы һыуып бөткән сәйен ни эсмәй, ни түкмәй болғатып баш баҫып ултырған Талха ҡаш аҫтынан ғына Мәүлихаға төбәлгән. Ҡарашында ялтлап киткән саҡҡы әйтерһең дә йөрәгемә сәсрәп барып төшә. Ҡыуанысын йәшерә алмай ҡосағын йәйеп торған әхирәтемә иремдең күҙҙәре менән ҡарайым: тамылйып бешкән, өлгөрөүҙән уҙған утыҙ дүрт йәшлек ҡыҙ янында мин ысынлап та баҙҙа үҫкән картуф һабағы кеүекмен. Мәүлиханың тулы кәүҙәһенән тормош һуты һирпеп торғанда, минең һүнеп барған шәфәҡ кеүек һылыулығымды күрер өсөн башҡараҡ зауыҡ кәрәк. Талханыҡы түгел...

...Шәпләнеп маташыуым оҙаҡҡа барманы. Ни тиклем сәмләнеп, тешләнеп тырышһам да май шәм кеүек шиңдем. Тәүҙә һиҙҙермәҫкә тырыштым. Мәғрифә апайға серемде асҡайным, рәхмәт яуғыры, ул инеп өйҙө йыйыштыра, тамаҡ әҙерләй, ә мин, йәнәһе, шулар-

ҙың барыһын да үҙем эшләгәнмен дә, кискелеген арып ятҡанмын. Шулай хәйләләшәм. Тик кемде алдайһың? Талханың һынсыл ҡараштары хәлемдең мыҫҡаллап түгел, ботлап сыҡҡанын самалап торған кеүек. Бахыр балалар ғына, әсәйҙәренең өйҙәлегенә риза булып, бер нәмә лә аңламай, шат йөрөй. Тәүҙәрәк уларҙы йәлләп илай-илай күҙ йәштәрем ҡороно. Әммә бер ваҡиғанан һуң яҙмышыма күндем.

Ҡайтыуыма ун-ун биш көн үткәндер. Бер үҙем генә ятам. Ишек шығырҙап асылды ла улымдың уҡытыусыһы инде. Ул минең тәүге, иң яратҡан уҡыусыларымдың береһе ине. Инде лә ишек яңағына һөйәлде. Күҙенән йәштәре субырҙап аға ла аға...

— Үт, һылыу, — тип шыбырҙайым. — Бына шул көнгә төштө инде апайың.

— Күптән киләйем тинем. Бер һөйләшеп ултырырбыҙ тип хыялландым. Был донъяның эшен йырып сығып китеп буламы ни? — Фәриҙә карауатым янына килеп тубыҡланды.

Нимә тип әйтәһең инде, ҡулдарымды һыйпап, йыуатып ултырған булды, балаларҙың мәҙәктәрен һөйләп көлдөрөргә тырышты. Үлем алдында нимә һөйләһәң дә килешһеҙ кеүек бит. Шулай ҙа янымда байтаҡ булды, күҙенә йәш алып сығып китте.

Аҙна үттеме-юҡмы, улым мәктәптән илап ҡайтып инде. «Фәриҙә апай үлгән, беҙҙе иртә ебәрҙеләр», — тип һушты алды.

— Эшенән ҡайтҡан да аш һалған. «Ит ҡайнап сыҡҡансы ғына ятып торам. Әллә нишләп бөгөн бик арыным», — тигән иренә. Ҡуҙғалмағас, ярай, йоҡоһо туйғансы йоҡлаһын тип, өндәшмәгәндәр. Иртәгеһен эшкә торғоҙмаҡ



булһалар... — Мәғрифә апай илай-илай шулай һөйләне. — Эй, һине йәлләгән булғайны, меҫкенкәй...

Йәп-йәш ҡатындың өс йәшлек балаһын ҡалдырып үлеп китеүе башыма һыйманы. «Ауырыу үлмәҫ, һау ҡалмаҫ», — тип ҡат-ҡат ҡабатлайым.

«Тәҡдир, — ти Мәғрифә апай. — Тәҡдир. Күрәһеләрҙе күрмәй, гүргә кереп булмай».

Шулайҙыр. Ошонан аҙаҡ балалар тип тә ул ҡәҙәрлем ҡайғырмаҫҡа кәрәк тип уйланым. Хоҙай бәхеттәрен бирһә, бирешмәҫтәр. Имсәк тә ҡапмай әсәйҙән ҡалған сабыйҙар, ғүмерҙәре булһа, буй еткерә. Йән биргәнгә йүнен дә бирер. Икәүҙәр, бер-береһенә терәк булырҙар. Аталары бар. Мәүлиха улар тип өҙөлөп тора.

Мәүлиха...

Талханың һуңғы ваҡытта уға йыш-йыш ҡына яндырай итеп ҡарап алыуын һиҙенеп ятам. Эшһеҙ кеше бит мин, уйымда боҙоҡлоҡтан башҡа нимә булһын инде. Иремдең кисерештәрен аңлау өсөн дә артыҡ зирәклек кәрәкмәй. Ул минең арҡала емерелеп төшөргә торған донъяһын үҙенсә һипләргә, яңы нигеҙ ташына ҡорорға самалай. Башҡа саҡ булһа, быны төшөнөү ҡыйын булыр ине. Әммә һуңғы осорҙа ябырылған аяуһыҙ һыҙланыуҙарҙан зиһен ҡорой башланы. Инде әжәл дә ғазаптарҙан ҡотҡарыр мәрхәмәткә әйләнеп бара. Ярай әле Мәүлиха укол һала, ул юҡта — улдарым. Улар ҙа оҫтарып алды.

Эргәмдә бөтөрөлгән Мәүлихаға ҡарап: «Талханың мөнәсәбәтен һиҙә микән?» — тип уйлай инем. Бер төндө ләззәтле ыңғырашыуға тертләп уяндым. «Шым», — тип шыбырҙа-

ны Талха. «Йоҡлай ул. Морфий — йоҡо аллаһы тигән һүҙ бит», — тип яуапланы татлы, иркә тауыш. Мәүлиханы тәүҙә танымай торҙом: наҙ шулай иретә икән. Талханың шифоньер артындағы карауатының хаяһыҙ шыфырҙағанын ишетмәҫ өсөн бармаҡтарым менән ҡолағымды тығам, уртымды сәйнәйем: ир бирмәк, йән бирмәк. Ауыртыныуҙан илергәндә: «Инде бынан да ауырыраҡ ғазаптар юҡтыр»,— тип һыҡраным. «Бар әле, — тигәндер Хоҙай. — Йән ғазаптарын да татып ҡара», — тигәндер. Үлем түшәгендә ятҡанда ла ауыр була икән йәндәй күргән ике кешеңде бер юлы юғалтыу. Йөрәккә ике бысаҡты бер юлы ҡаҙаған кеүек. Тик түҙәһең, сей иткә ут тоҡанмай.

Икенсе көндө йәкшәмбе булған икән. Иртүк эшкә китмәнеләр. Көн яҡтыһында нисек йөҙҙәренә ҡарармын тип ятам. Мәүлиха сәсемде тарарға тип тараҡ тотоп килде. Күҙ төптәре күгәреп, бите һурылыңҡыраһа ла, күҙҙәре янып тора. Үҙе лә һиҙмәҫтән бүртенеп ҡыҙарған ирендәрен йыш-йыш ялап ала. Шул мәлдәрендә эске ләззәте йөҙөнә сыға. Ҡулдарының үҙемә ҡағылғанына ытырғаныуымды йәшерергә тырышам.

— Ҡырҡып ырғыт шул толомдарҙы, — тинем тағатып һалғас, мендәрҙе болот кеүек япҡан сәсемә ымлап.

— Ҡуйсы, шул тиклем матурлыҡты... — тип һиҫкәнде Мәүлиха. Ул ғүмер буйы шул толомдарға ҡыҙыҡты.

— Миңә уларҙың кәрәге булмаҫ. — Ҡарашымды тойоп әхирәтем енәйәт өҫтөндә тотолған уғры кеүек ҡыҙара. — Теләһән, үҙеңә шиньон яһап алырһың...



— Ярар һуң, — тип ашығып ризалаша ул.— Һинеке ҡабат үҫер әле, ибет.

Мөхәббәтле төндәр дауам итте. Ә мине, әйтерһең дә, кемдер юрый мыҫҡыллай: бер мәл етеү менән төртөп уята. Һаташып килеп күҙемде асам да ҡыбырҙарға ла ҡыймай төн ҡараңғылығына текләп ятам.

Аҡылым менән уларҙы аңлайым: ошо ҡыҫҡа ғына ғүмерҙә ярым мәйет ниңә тереләргә ләззәтләнеп йәшәргә ҡамасауларға тейеш?! Һәр кемдең үҙ мәле. Бигерәк тә Мәүлиха өсөн. Ул былай ҙа бәхетен бик оҙаҡ көттө. Минең өсөн һанаулы көндәр уның наҙға сарсап ҡорғаҡһыған күңеленә бөткөһөҙ оҙаҡ тойолалыр.

Элек Талха миңә йыш ҡына үтә һалҡынһың, битарафһың, ярата белмәйһең, тип үпкәләй торғайны. Ысынлап та, уның яндырайлығы, түҙемһеҙлеге, ҡомһоҙлоғо янында минең сабырлығым вайымһыҙлыҡ кеүек тойолғандыр. Уның битәрҙәренән һуң үҙем дә: «Әллә яратыу кеүек көслө тойғоларға һәләтем юҡмы икән?»—тип үҙемде ғәйепле тойҙом. Әле иремдең ҡайнар һөйөүенең ысын баһаһын күргәндән һуң, яндырайлыҡтан Хоҙай мине үҙе аралаған, тип шөкөрана итәм. Бына ирем әхирәтемдең ҡолағына: «Йәшел ҡамыш араһынан йөҙөп сыҡҡан аҡкошом һин минең», — тип ярһыулы бышылдай. Мәүлиханың шифоньер кеүек кәүҙәһенә йәбештерелгән шар кеүек муйынһыҙ башын күҙ алдына килтерәм дә иҫәүән кеше шикелле көлгөм килә. «Бешкән сейә кеүек тәмле ирендәреңде...» — тип артабан һамаҡлай ул.

— Талха, — тип өндәшәм үҙем дә һиҙмәҫтән. — Һин бит — фән кандидаты, һүҙ оҫтаһы.

Икенсе йөреңә миңә әйткән һүҙҙәреңде теҙмәй, башҡа һүҙҙәр тапһаң ни була?

Минең тыныс ҡына әйткәндәрем икеһенә лә йәшен һуҡҡан кеүек тәьҫир итте, буғай. Шыпшым булдылар.

— Асылыкүлдә ял иткәндә шулай тип иркәләй инең мине, иҫеңдәме? «Муйының оҙон булғас, балыҡ кеүек түгел, аҡҡош кеүек йөҙәһең», — тип мәрәкәләй инең.

Талха түҙмәй, шығыр-шоғор тороп тартырға сыға.

— Мәүлиха, — тим мин оҙаҡҡа һуҙылған тынлыҡтан ялҡып. — Бер ҡуҙғалғанда миңә укол һал инде. Әле түҙерлек тә, таңға тиклем сыҙай алмам.

Талханың ҡайнар үбеүенән бүрткән иреңдәрен ҡымтып яныма сыҡҡан Мәүлиханың табаҡ битенә күкле-йәшелле булып тимгелтимгел таптар ҡалҡҡан. «Уның урынында булһам, морфийҙың дозаһын саҡ ҡына арттырыр инем дә...» — тигән уй килә башыма. Тик өндәшмәйем. Әхирәтем быны хаяһыҙлыҡ тип аңлап үпкәләр ине, моғайын.

Икенсе көндө ул яныма килеп ултырҙы. Ҡулымды усына алмаҡсы булды. Оҙон-оҙаҡ һүҙ башларға йыйынды. Аңлашырға, серләшергә йыйынғаны ҡиәфәтенән күренеп тора. Нимәнән башларға белмәй генә аптырай.

— Тыныслан, Мәүлиха, — тиергә ашығам. Сөнки нәмә әйтһә лә ытырғаныс булыр кеүек, әйтерһең дә ҡулы менән эсәктәремде аҡтарырға йыйына. — Нишләйһен ас ҡәҙерен туҡ белмәй. Донъям теүәл булғанда һинең яңғыҙлығыңдың ни тиклем әсендергес булғанын мин дә аңлап еткермәгәнмендер. Ғәфү ит мине. Ә бөгөн һинең урамыңда байрам. Тик мин һиңә ҡарағанда аламараҡ булып сыҡтым. Һин минең бәхетемә ҡыуана белдең. Ә минең һинекен уртаҡлашырға көсөм етмәй. Шуға күрә күңелемә тығылмаҫҡа тырыш, йәме.

«Хоҙай нишләп һаман йәнемде алмай ыҙалай икән», — тип үрһәләнһәм: «Күрәһене күрмәй, гүргә кереп булмай», — тип йыуата мине Мәғрифә апай. Раҫ әйткән икән. Бер көндө, ҡәҙимге хәлләнеп, кеше күрерлек булып ятҡан мәлемдә Талха ҡайтып инде. Ярһып, енләнеп, өйҙөң аҫтын-өҫкә килтереп ниҙер эҙләне. Баш аҫтымдағы мендәрҙе һелкетә тартып алып ҡапшаны. Зәһәр итеп, нәфрәтләнеп текләп торҙо ла:

— Ҡайҙа ҡуйҙың? — тип ыҫылданы. — Һинең эшең, һинеке генә. Һаман дөмөгә алмай ағыуыңды сәсеп ятаһың. Үҙең менән бергә мине лә үлер тип көткәйнең дә, килеп сыҡмағас, сағып ҡалайым, тиһеңдер.

Күп әрләне. Тағы әллә нәмәләр һөйрәп сығарҙы. Мәғрифә апайға әсәйемдән ҡалған көмөш балдағымды биргәйнем: «Бик мохтаж булып йөрөгән саҡтарында балаларға ярҙам итерһең. Тыуған көнөмдә ҡәберемә алып барырһың», — тигәйнем. Шуны ла иҫенә төшөрҙө.

— Кеше иренә мал ҡалдырып үлә, һин булғаныңды таратып ятаһың. Исмаһам, балаларыңды уйлар инең, — тип ҡысҡырҙы. Ун биш йыл бергә йәшәп иремдең былдай сағын күргәнем юҡ ине. Иҫем китеп, бер нәмә лә аңламай тик яттым. Аҙаҡтан Мәүлиха төшөндөрҙө. Партбилетын юғалтҡан да минән күрә икән. Был юғалтыуҙың ирем өсөн ниндәй ҙур фажиғә икәнен мин белмәй, кем белә. Түрәһе бына-бына пенсияға китергә торғанда, бы-

на-бына урынына ултырам тип өмөтләнгәндә, партиянан сығарып ырғытһалар ул нимә эшләр? Шулай тип көйәләнәм. Тик был хаслыҡты минән күреүенә хәтерем бик ҡалды.

Тере һөлдәнән йөҙ бороп, сәләмәт ҡатынды ҡосоуын ир нәфсеһенә һылтарға була. Нишләйһең, тәндең үҙ ҡануны. Әммә нисәмә йыл бергә донъя көтөп, түшәк бүлешеп, бөтөндөң бер яртыһына әйләнеп бөткән ҡатынынды, балаларыңдың әсәһен, ҡәбәхәт тип нисек уйларға мөмкин?

Күпме йәшәп, бер кемдең дә шул тиклем түбәнһеткәне юҡ ине әле. Ғәрлегемдән ни эшләргә лә белмәнем. Һау сағым булһасы, ислаһам, атлап йөрөрлөк хәлем булһа... Үс алғым килде. Үс алғым да уның үрһәләнгәненән кинәнеп ҡарап торғом килде.

— Ҡесаҙна көндө иртәнсәк райком бюроһында тикшерәләр, — тине Мәүлиха бер көн.— Үҙҙәрендә тикшереп, партиянан сығарырға, тип ҡуйғандар инде. Бына-бына үрләйем тип торғанда...

Ул да эстән генә мине ғәйепләй. Ә мин нисек үс алырға тип баш ватам. Хатта йәшәүҙең дә ҡыҙығы бар кеүек тойолоп китте.

Ҡесаҙна көндө былар эшкә, балалар мәктәпкә юлланды. Ғәҙәтенсә янына Мәғрифә апай инде. Уны түҙемһеҙләнеп көтөп ята инем. Ниәтемде аңғарттым. Ул шунда уҡ сәбәләнеп ҡаршы төштө.

«Үлемгә хөкөм ителгән енәйәтсенең дә һуңғы теләген үтәйҙәр. Һиңә ялынырлыҡ та көсөм юҡ, апай. Тыңла инде, — тием. — Һинән башҡа күҙ төбәгән кешем дә юҡ».

Ризалашмай ҡайҙа барһын инде. Хәл ҡәҙәренсә мине матурлаған булды. Матур күлдәк кейҙерҙе. Шунда ғына үҙемдең кибеп бөткәнемде күрҙем: кейемем ҡолғаға эленгән кеүек асылынып тора. Ишек төбөнә такси саҡыртты. Күрше менән күтәреп тигәндәй саҡ алып төштөләр. Был фатирыма, бәхетем менән бәхетһеҙлегемдең шаһитына, ҡабат ҡайтып инмәсkә ҡарар иткәйнем инде. Шуға ҡайғырырға ла хәлем ҡалмаған икән.

Таксист егет үҙебеҙҙең башҡорт булып сыҡты. Хәлемде аңлап райкомдың тупһаһына терәлеп туҡтаны. Унан Мәғрифә апай менән ике яҡтан ҡултыҡлап алып инделәр. Алғы бүлмәлә бюроға саҡырылған байтаҡ кеше ултыра. Талха юҡ. Тимәк, уны тикшерәләр. Секретарь ҡыҙ аңламай ҙа ҡалды — таксист мине эскә алып инде. Асыҡ ишектән Мәғрифә апайҙың: «Уны саҡырғайнылар ул», — тип тыштағыларҙы тынысландырғаны ишетелде.

Үлемдең имәнес ҡиәфәте һәр саҡ тереләрҙең ҡотон ала. Башҡа тағы нимә беҙҙең тормошта шундай ҡөҙрәтле көскә эйә икән? Белмәйем. Әле лә партия район комитетының беренсе секретары кабинетына йыйылған егермеләп кеше араһында иң көслөһө мин инем. Беренсенең ҡарашынан шунда уҡ аңланым, мине бынан тиҙерәк сығарып ебәреү өсөн улар ни теләһәм, шуны эшләргә әҙер. Күңелемде тантана биләп алды, әйтерһең дә еңмешләнеп үҙенекен иткән холоҡһоҙ баламын.

Йәһәт кенә ултырттылар, һыу бирҙеләр. Бөтәһе лә тулҡынланған, ҡаушаған, мин генә тынысмын. Талхам иһә бөтөнләй ҡойолоп төшкән. Ҡарасман йөҙө — көл төҫөндә.

— Мин Талха Хафизовтың ҡатынымын, — тип һүҙ башланым. — Бөгөнмө, иртәгәме тип өсөнсө ай инде үлем көтөп ятам. Ирем минең

өсөн өҙөлөп тора. Һуңғы ғазаптарымды еңеләйтер өсөн ҡулынан килгәнде лә, хатта килмәгәнде лә эшләй, — үҙемдең шул тиклем килештереүемә һыным ҡатҡансы көлгөм килә, сәләмәт булһам, ҡысҡырып көләр инем. Талхаға ҡарайым. Уның күҙҙәре әйләнеп сығып барған кеүек. Гүйә мылтыҡ тоҫҡағанмын да хәҙер-хәҙер атып ебәрергә торам. «Тыныслан, йәнекәш», — тип күҙ ҡыҫҡым килә. Саҡ тыйылам. — Ә мин бик һыҙланам. Ҡайһы берҙә түҙгеһеҙ ауыртыуҙан аҡылдан шашҡан кеүек булам. Ҡулыма нимә эләгә, шуны ватаемерә, йырта башлайым. Шундай ваҡытта иремдең партбилетын ботарлап ырғытҡанмын. Иҫемә килгәс, нимә ҡылғанымды төшөндөм дә, ҡурҡышымдан уны унитазға ағыҙып ебәрҙем.

Яңынан көлөп ебәреүҙән ҡурҡып өҫтәл тирәләй ултырған кешеләргә ҡарайым. Берәһе — күҙе ташбайып, һушһыҙ йығылырҙай булып ултырғаны — таныш. Ул Талхаларҙың партком секретары. Минең ҡарашты осратып, ниҙер әйтергә уйлай ҙа тауышы сыҡмай. Ирендәре генә ҡыбырҙай. «Һин йыртмаының бит, һин йыртмаының. Нишләп ғәйепте үҙеңә алаһың?» — тип әйткеһе килә. Хәҙер эште боҙа инде, тип уға тексәйәм. «Үҙең йырттыңмы ни, тик кенә ултыр!» — тип бойорам уйымдан. Ул иҫенә килмәҫ борон тип, ғәйепте нинә үҙ өҫтөмә алғанымды аңлатырға ашығам.

— Ошондай гонаһ менән ҡәбергә инә алмайым мин, иптәштәр. Ярҙам итегеҙ. Иремә былай ҙа ауыр. Ҡулында ике бала ҡала. Уларҙы үҫтерергә, уҡытырға, кеше итергә кәрәк. Һуңғы үтенесемде йыҡмағыҙ, уға яңы партбилет бирегеҙ.



— Яҡшы, яҡшы, тик һеҙ тынысланығыҙ, — тип ризалаша һала секретарь. — Хәҙер һеҙгә «Ашығыс ярҙам» саҡырайыҡ.

— Юҡ, юҡ, хәлем һәйбәт. Һеҙ билетты минең күҙ алдымда яҙып бирегеҙ инде, зинһар, — тип баҫым яһап ҡуям. Тауышымда янау ишетеп баш ҡағалар. Иҫерек кеше кеүек аяғында саҡ баҫып торған Талхаға өр-яңы билет тоттторҙолар.

Хәҙер минең өсөн иң ауыры ҡалды — нисек тороп сығырға? Ярай әле партком секретары янымa йүгереп килә. Икенсе яҡтан Талха ҡосаҡлай. Ҡосаҡламай нишләһен, уның «хәстәрлекле» ир икәнен бюро белә бит. Алғы бүлмәгә сығабыҙ. Мәғрифә апай ҡайһылай зирәк. Талхаға аҫылынып торғом килмәгәнен әллә ҡайҙан тойоп, үҙе терәк була. Рәхмәт яуғыры, таксист та һаман көтөп тора. Хәҙер ултырам да китәм. Тик уға тиклем тағы бер эшем бар.

— Талха, — тием, — һин аңлағанһыңдыр инде, мин бюроны алданым. Һине яҡшы ир тип нисек алдаһам, партбилетты йырттым тип тә шулай ялғанланым. Ун биш йыл бергә йәшәп, яратам тип анттар әйтеп тә мине белмәгәнһең икән. Аллаға шөкөр, мин һин уйлағандан һәйбәтерәкмен.

Машинаға алып сығып ултыртҡас, партком секретары күҙҙәремә мөлдөрәп ҡарап бышылдай:

— Мин бит кем йыртҡанын беләм, апай, — ти. — Һинең әйттергең килмәгәнгә генә өндәшмәнем. Талханың, ҡара йөрәктең, етәкселеккә үрләүен теләмәгән кешеләр йыртып әбрәкәйгә ташлаған бит уны.

— Белгәнең үҙеңдә ҡалһын, — тип бүлде-

рәм. Сөнки тоям, хәлем бөтөп бара, укол кәрәк.— Изгелек эшләгең килһә, мине ауылдағы апайыма алып барып ҡалдыр. Үҙемде яратҡан кешеләр янында үлгем килә. Унан тәрбиәләп ерләш.

Ул ашығып баш ҡаға. Аҡтыҡ көсөмдө йыйып күтәрмәгә сығып баҫҡан Талхаға ҡарайым. Ҡарайым да үҙәгем өҙөлә: ул шул тиклем бәхетһеҙ, бахыр. Әгәр ҙә ауырып, үлергә йыйынып ҡайғыға һалмаһам, ул һаман да ғорур, көслө, киң күңелле Талха булып, күкрәген киреп, кинәнеп йәшәп ятыр ине.

Бер бөртөк кенә эҫе йәшем сикәмдә яндырып ағып төштө. Ҡисер, Талха, тойғоларға шулай һаран, һалҡын кешемен инде.

## ҺӨЙӨҮЕМ ДОҒАҺЫ

Зифа буйлы медсестра уға эйелеп ниҙер эшләй, шуға күрә Хәйҙәрҙең йөҙө күренмәй. Әммә мин шунда уҡ уның терһәккә тиклем ҡырҡылған сулаҡ ҡулын күреп ҡалдым. Тәбиғи булмаған бөтә нәмә, ғәриплек миндә ытырғаныу ҡатыш йәлләү уята. Ошо тойғонан күңелем болғанып палата ишегенең тотҡаһына йәбештем. Тиҙерәк китергә кәрәк, сөнки ошо мәлдә генә ниндәй хата яһағаным башыма барып етте. Әммә аяҡтарым тыңлаймай. Мине иркәләргә яратҡан матур ҡулдарының ҡалдығы — йөйө ҡып-ҡыҙыл, йәмһеҙ булып сөрөшкән утын ағасы... Ул минең бөтә донъямды томаланы. Шул саҡ Хәйҙәр медсестраға ниҙер әйтте. Нисәмә йылдар моңо менән минең аҡылымды юйған гөрөлдәк таныш. Уның яғымлы ағымы күңелемә килеп



яғылды ла күҙҙәремде йәш менән йыуҙы. Тағы берәй нәмә әйтһәң ине... Һағайып тыңлайым. Ҡыҙ ҙа көлөп ниҙер яуаплай. Көләләр.

Минән башҡа ғына көләләр. Ҡөтмәгәндә әллә ҡайҙан көнсөллөгөм ҡутарылып сыға, уның менән бергә асыу ҡабара.

«Һин бында көләһең... Көләһең!» Яһиллығымдан көс алып атлар хәлгә килдем. Ишекте астым. Шул саҡ тыным быуылып көрһөнөүем ишетелдеме — икеһе лә миңә боролдо.

Йә хоҙа, ҡайһылай матур ул... Хәйҙәр! Үҙәгемде өҙөп һаташтырған һөйкөмлө ҡаҡса йөҙөнә өлкәнһыу төҫ ингән, ҡырыҫланған. Кисергән ғазаптары уның булмышына моңһоу яғымлылыҡ булып яғылған. Көлөүе лә һүнеп өлгөрмәгән әле. Миңә төбәлгән ҙур ҡара күҙҙәрендә ана һаман елпенеп тора.

Хәйҙәр! Төштәремә инеп ҡуҙ кеүек өткән, тормошомдоң балҡышы булған күҙҙәрендән кисерештәрендең елеп уҙғанын хайран ҡалып ҡарап торам. Ғәжәпләндең, таныйың, тетрәнеп киттең. Йәшен уты кеүек һыҙырып алған һыҙланыуың әҙәм күтәргеһеҙ ғазапҡа әйләнеп сырайыңды боҙҙо. Ыңғырашыуың ҡарлығыу булып тамағыңа торҙо, йөҙөң көлһыуланып мәйет төҫөнә инде.

Аптырап миңә теклән торған медсестра ҡыҙ ҙа, ыңғырашыуҙы ишетеп, Хәйҙәргә боролдо. Аяныс итеп ҡысҡырып ебәрҙе:

— Нимә эшләттегеҙ уны?

Ҡотом осоуҙан ҡужрайып ишек яңағына сытырман йәбешкәнмен дә һис ни ҡылыр әмәлем юҡ. Үлмә ҡабат! Күҙ алдымда үлмә!

— Һин уны үлтерҙең! — Медсестра илапҡысҡырып мине бәрә-һуға коридорға атылды.

«Ә ул бик матур ҡыҙ», — тип ирекһеҙҙән

башыма теркәп ҡуя булмышымдағы көнсөл ҡатын.

Ә Хәйҙәргә мәйет төҫө кергән. Һушһыҙ. Эргәһенә барырға ине, ҡосаҡларға ине. Елпелдәк керпектәренә ирендәрем ҡағылыу менән ул күҙҙәрен асыр. Тик... юрған өҫтөндә ятҡан аяныс сулаҡтар!

«Ҡағылыуым дауамы, ыумы — белмәйем бит», — тип үҙемә аҡлау эҙләйем. Енәйәт өҫтөндә тотолған йәлләт кеүек мөйөшөмә боҫҡанмын.

Бына ике-өс медсестра менән йүгереп килеп ингән врач ҡатын талапсан, ҡырҡыу итеп: «Шок, ауыртыу өйәнәге, укол!» — ти, һәр береһенә эш ҡуша.

Мин стенама һырығып язаға сират көтәм. «Ҡотҡарығыҙ уны! Эй, аллам!» Ә ул һаман мәйет кеүек ята. Мәйет кеүек. Әллә ҡайҙан килеп йәбешкән был ытырғаныс һүҙҙе мейемдә әйләндерәм дә тулғандырам. Мәйет кеүек. Был һүҙ йөрәгемә бысаҡ кеүек ҡаҙала ла... Йәне елпендә кеүек. Күбәләк ҡанатылай ғына. Бына йөҙөнә ҡото ҡайтты. (Мин быны унын фәрештәләренән алдараҡ тойҙом.) Күҙҙәре генә йомоҡ.

Ҡотҡарыусылары ла еңел тын алды. Ни өсөндөр бөтәһе бер юлы мине хәтерҙәренә төшөрҙө — боролдолар.

— Һеҙ һаман бындамы ни әле?! Бер юлы үлтереп сығайым тип көтәһегеҙме? — Шөҡәтһеҙ врач ҡатындың тауышы тупаҫ, мыҫҡыллы, зәһәр. Эргәһендә һаҡсы кеүек баҫҡан медсестра ҡыҙҙарҙың ҡарашында — үлән ҡыуартырлыҡ нәфрәт. Ҡурҡышымдан әлеге лә баяғы мөйөшөмә боҫтом. Сөнки хәҙер улар миңә ташланыр ҙа сәсемде йолҡҡослай, битемде



тырнай башлар кеүек. Шул мәл зиһенем зирәкләнде: улар барыһы ла Хәйҙәрҙе ярата бит! Шул тиклем ярһыу бары ғашиҡтарға ғына хас. Ә бындай госпиталдәрҙә, зәғифтәр йортонда тормошо китек, бәхетһеҙ ҡатын-ҡыҙ эшләүсән. Асышымдан тиҫкәрелегем ҡуба.

— Мөхәббәттән үлмәйҙәр, — тип әйтеп һалам маңлайыма төшкән сәстәремде елпеп. Был ишарам нишләптер ҡатын-ҡыҙҙы гелән сығырынан сығара.

— Хәҙер үк сығып кит, — ярһыуҙан врачтың тыны ҡыҫыла, шуға күрә тауышы йыландыҡы ише ыҫылдап сыға.

Ә мин яһилланып үҙемде уғата тыныс, тәкәббер тотам. Тик артыҡ киреләнһәм, улар мине һөйрәкләй башлар ҙа ситтән үтә мәрәкә күренермен, тигән аҡыллы уй арҡаһында ғына палатанан сығам. Башты текә тотоп.

...Һаман иҫерек кеүекмен. Бары Хәйҙәр янынан былай ғына китергә ярамауын аңлайым. Баш врачты эҙләп киттем. Уныһы был «ҡаҡланған балыҡ» кеүек төҫһөҙ, енесһеҙ бер йән эйәһе булмаһа ярар ине, исмаһам. Шөҡәтһеҙ кешеләр ни өсөндөр мине тере биреһе кеүек күрә...

Бәхетемә күрә госпиталь башлығы урта йәштәрҙәге олпат, күркәм кеше булып сыҡты. Сибәр ирҙәрҙе йылан арбағандай мөкиббән итә беләм мин. Ниңә, нисек? Үҙем дә аңламайым. Аңларға бик теләмәйем дә. Үтенесемде кире ҡағып сығармаһалар — шул.

Баш врачтан Хәйҙәр янында күпме теләйем шул саҡлы булырға рөхсәт ҡағыҙы алып, палатаға кире индем. Мөйөшөмә ҡабат һыйындым. Ә ул баяғыса ята. Өнһөҙ-тынһыҙ. Әммә киәфәтендә хәүеф уятырҙай нәмә юҡ. Тора

торғас ҡына төшөнәм, моғайын, уға йоҡо дарыуы һалғандарҙыр.

Медсестраларҙың әле береһе, әле икенсеһе туҡ-туҡ баҫып инеп сыға. Йә маңлайын һыпыра, йә пульсын ҡапшай. Юрый йөрөйҙәр кеүек.

Хәйер, уны ҡыҙҙар һәр ваҡыт үлә яҙып ярата торғайны. Дөрөҫөрәге, уға бөтә кеше лә тартылды. Йәше-ҡарты. Ниндәйҙер бер шифалы нурға ынтылған кеүек. Ә минең уны ҡыҙғаныуҙан йәнем ҡарая торғайны. Хатта был тамуҡта ла (миңә ул үлгән дә тамуҡҡа эләккән, ә мин уның янына төшкәнмен кеүек) уның, бер ғәриптең, ихтыяр көсө үҙенә тарта, тимәк. Ул һынмаған. Ул һаман да көслө. Ә юрған өҫтөндә ятҡан сулаҡ ҡулы йәнемде теткеләй.

Күҙҙәре менән өтөрҙәй булып йөрөгән медсестра, ҡарашымды абайлап (унда, моғайын мытырғаныу яҙылғандыр — ҡайһылай оят миңә!) сулаҡтарҙы юрған менән ябып ҡуя.

Бысраҡ көҙҙөң ҡараңғы эңере донъяны баҫты. Коридорҙа ла тауыш тынды.

Иҙән йыуған санитар әбей өндәшмәй генә алып инеп биргән иҫке матрасты иҙәнгә түшәп яттым. Баш аҫтыма ҡулымды һалып һушәп яттым. Баш аҫтыма ҡулымды һалып һуҙылғас ҡына үҙемдең ни тиклем йонсоғанымды тойҙом. Талсыҡҡан тәнемә ял рәхәте йүгергән ыңғайға айныған дай булдым. Нисәмә ай эсендә тәүге тапҡыр уйлау һәләте ҡайтты, ахыры. Быға тиклем бер генә теләк бәғеремде көйҙөрөп, һушымды алды: «Уны күргем килә!» Бына килдем, күрҙем. Ә хәҙер: «Ни эшләнем мин?» — тигән һорау, аҙаплы үкенес булып, йәнемде кимерә башланы.

...Студент саҡтағы дуҫым Вәсиләнән көтмәгәндә хат килеп төштө. Заманында беҙҙе энә ҡайҙа, еп шунда тип йөрөтһәләр ҙә яҙмыш айырғайны.

Химия факультетын тамамлағас, ул Мәскәүгә аспирантураға уҡырға инде, шунда кейәүгә сыҡты. Һирәк-һаяҡ осраштырһаҡ, йылы тойғолар һаҡлаһаҡ та, хат алыша торған ғәҙәтебеҙ юҡ ине — аптыраным.

«Студент ваҡытындағы көндәлегемде ҡарап ултырғанда күҙгә салынды: «Шул тиклем яратып та Райхан да Хәйҙәре менән ҡауышмаһа — был донъяла хәҡиҡәт юҡ!» — тип яҙып ҡуйғанмын». Сәләм юҡ, ни юҡ, хатын шулай сәйер башлаған Вәсилә.

«Хәйҙәрҙе һөйләп бөтәбеҙҙең дә башын ҡатырып бөтә торғайның. Хатын алған көндө үк яуап яҙаһың да һанай башлайһың. Йәнәһе, биш көндән ала, шунда уҡ яуап яҙа, бишалты көн килә. Йәмғеһе — 10—11 көн. Ошо ваҡытҡа хат килеп өлгөрмәһә, үҙеңә урын таба алмайһың. Инде лә нығыраҡ оҙаҡлаһа, ҡайғыңдан ҡара көйөп: «Цинк табутҡа ғына һалып алып ҡайтырҙар инде», — тип илай башлайһың. Шул мәлдәрҙә һине ғазаплаған вайымһыҙ Хәйҙәрҙе йолҡҡослап ырғытырҙай була торғайным.

Ҡайҙан беләйек инде ул саҡтарҙа беҙҙең егеттәрҙең Афғанда нишләп йөрөгәнен. Хәйҙәрең дә хаттарын шаян, ҡыҙыҡ итеп яҙа торғайны: йәнәһе, ағас ултыртҡандар, афған малайына борғо ҡысҡыртырға өйрәткән, афған баҙарында һиңә бүләк һайлап йөрөгән. Уларға шулай яҙырға ҡушылған булғандыр. Күрәһеңме, ҡайһылай яҡшы хәтерләйем. Шул осорҙа үҙем йөрөгән егеттең исеме иҫемдә юҡ, ә Хәйҙәрҙең хаттары күҙ алдымда.

Һинең шундай ғазапланып яратыуындың, һағыштан сәсәп йәшәүендең шауҡымы беҙгә лә теймәй ҡалмағандыр, моғайын. Мөхәббәттең илаһилығын төшөндөрөп биргәнегеҙ өсөн рәхмәтлебеҙ һеҙгә, Райхан».

Хатты артабан уҡырға хәлем етмәне. Ырғытып бәрҙем. Вәсиләнең, нескә күңелле, наҙлы Вәсиләмдең бәғерһеҙлеге хайран ҡалдырҙы мине. Йылдар үтте, яраһы бөтәшкәндер тип ҡабат ҡанға туҙҙырмаҡсымы? Хәйҙәрҙең үлем хәбәре килгәс, йәшәүҙән ваз кисеүемде тасуирлағанмы артабан?

Венамды ҡырҡып, реанимацияға эләккәс, ярты институттың мине ҡотҡарыр өсөн ҡан биреп йөрөүен иҫемә төшөрмәксеме?

«Ҡурҡмағыҙ, мин бер нәмәне лә онотманым!»

Шулай һамаҡлай-һамаҡлай илап, шешенеп, буҫлығып бөткәстен, хатты ҡабат ҡулыма алдым. Юҡтыр, уның шулай тәфсилләүе тиктәҫкә түгелдер.

«Ҡайғыңды яңыртҡаным өсөн ғәфү ит, Райхан, — тип дауам иткән Вәсилә, әйтерһең дә, кисерештәремде алдан күреп тороп. — Быларҙың барыһын да мин үҙемдең икеләнеүҙәремде еңер өсөн шулай теҙеп яҙам. Оҙаҡ уйланым, бер яҙайым, тинем, туҡталдым, йәнә уҡталдым. Яҙам инде, һин белергә тейешһең. Хәйҙәрең иҫән. Аяҡһыҙ-ҡулһыҙ хәлдә афған һуғышы ветерандары йортонда йәшәй».

Бына мин Хәйҙәрҙе килеп таптым. Ғүмерлек әрнеүемдең тын алышын тыңлап эргәһендә иҙәндә ятам. Ул яҡында, ҡул һуҙымында ғына, әммә ҡағылып наҙларға ла, сығып ҡасырға ла дарманым юҡ.

«Күргем килә!» тигән дыуамал теләккә бер уйһыҙ буйһоноп, мин уны йәнә ғазап донъяһына быраҡтырҙым, ахыры. Ҡайһылай үкенес.

— Килдең, күрҙең. Инде хәҙер нишләп килдем, ни ҡылдым мин тип аптырап ятаһыңмы?

Ҡараңғылыҡта яңғыраған әрнеүле тауышты мин ҡапылда үҙемдең уйым кеүек ҡабул иттем. Бары карауаттың шығырҙап ҡуйыуынан ғына Хәйҙәрҙең өндәшеүен аңланым. Ҡаушап тороп ултырҙым. Күҙҙәре асыҡ. Тик ул миңә түгел, ҡайҙалыр алыҫҡа ҡараған. Моғайын, байтаҡтан уянып минең уйҙарымды уҡып ятҡандыр.

— Эйе, — тип яуаплайым ирекһеҙҙән. Хәйҙәрҙе бер тапҡыр ҙа алдай алғаным юҡ. Ул һәр ваҡыт мине үҙенә тулыһынса буйһондора белде. — Минең һине күргем килде. Түҙгеһеҙ.

Ҡалҡынып, уға ҡағылырға теләнем. Тик унан һалҡынлыҡ, ятһыныу ипкене бәрелеп тора. Әйтерһең дә, арабыҙға боҙ быяла ҡороп ҡуйҙы. Тауышы өшөткөс.

— Бөтөнләй үҙгәрмәгәнһең. Уйламай эшләп, аҙаҡтан үкенә торған холҡоң да шул килеш ҡалған. Һин теләнең дә — бөттө китте. Ҡалған донъя сәсрәп ятһа ла була!

Беҙҙе ҡараңғылыҡ солғап алған. Епшек ҡара төн һырып алған беҙҙе, бысраҡ, күшектергес. Ҡара ғәрип, шөкәтһеҙ яҙмыш үҙенең ҡосағына алып быуған. Хәйҙәрҙе баҫҡан, иҙгеләй, ә мине киҫәктәргә йолҡҡослай: йәнем тегендә, йөрәгем бында...

— Нимә етмәй ине һиңә? Нимә эҙләп килдең? Һине күрергә теләмәгәндәрен аңламаныңмы ни? — Ул шул тиклем ҡырыҫ.

Ул, ғөмүмән, миңә талапсан булды. Үҙен мине үтәнән-үтә күргәндәй тота ла, ихтыярына буйһондороп кинәнә торғайны. Минең химия

менән мауыҡҡанымды белгәнлектән: «Һин башҡалар янында маңҡа кеүек лайлалы шыйыҡсаһың. Мин генә һине кристалға әйләндерә алам», — тип мәрәкәләй ине. Мин ысынлап та магнитланған кеүек уның артынан ҡалмай йөрөйөм, уның янында ғына үҙемде матур, һөйкөмлө, саф итеп тоям. Әйтерһең дә, ул әйтмешләй, кристалға әйләнәм. Хәйҙәрҙең нурында яҡтыра, йымылдай башлайым.

— Мин үҙемде эҙләп килдем һинең янына, — тип яуап бирәм үҙемә лә, Хәйҙәргә лә. Ниһайәт, төнө буйы мейемдә серетқән һорауҙың яуабын таптым. — Һинең янында ғына мин үҙемә үҙем оҡшайым. Донъяла бары һинең янында ғына, башҡа ундай кеше юҡ.

— Һин һәр ваҡыт ҡот осмалы эгоист булдың. Шулай булып ҡалғанһың. — Хәйҙәр көлә. Ә мин йылан һиҙгерлеге менән унан үҙемә табан ағылған йылылыҡ тулҡынының тирбәлгәнен тоям. Уның мыҫҡыллы һүҙҙәре мине башҡа ҡурҡытмай. «Һөйлә, һөйлә генә».

— Нисә йыл күрешмәнек беҙ?

— Ун ике йыл. Һинең үлгәнеңә лә ун йыл тулды, — тинем.

— Ун ике йыл саҡ ҡына ла үҙгәртә алмаған. Донъя кендегендә һин һаман үҙең тораһың.

— Бөтә нәмә кешенең үҙен үҙе яратыуынан башлана бит, — тип ҡаршы төшәм. — Әгәр ҙә һинең янында миңә ҡыйын булһа, һине ярата алмаҫ инем. Ә яратмаһам, бер тойғо ла: миһырбан, ҡыҙғаныу, борыс — бер нәмә лә мине һинең янында тота алмаҫ ине.

Мин үҙемде һинең эргәңдә генә ярата, хатта ихтирам итеп китә инем. Шул «үҙемде», үҙемә оҡшаған үҙемде юғалттым, шуға күрә



арып, йонсоп бөттөм. Һинһеҙ мин бөтөнләй икенсе кеше, ҡотһоҙ, нурһыҙ, йәмһеҙ, алйот кеше.

Һинең нурында бриллиант булһам, әле бер ябай быяла ярсығымын. Һин кәрәкһең миңә. Шул алып килгән мине бында. Әле генә шуны төшөндөм. — Шулай тием дә, төндөң йәбешкәк ҡараңғылығы ҡәтрә ҡәҙәре генә сигенә.

— Ә һинең елбәҙәк башыңа: «Мин уға кәрәкменме һуң?» — тигән уй һыймай инде, ибет.

— Һыймай түгел, инеп тә сыҡмай. Һин бит беләһең: мин һәр ваҡыт үҙем тураһында ғына уйлайым.

— Хатта балаларың тураһында ла уйламайһыңмы? Һин әсә бит, шулаймы?

— Балалар минең өлөшөм. Улар һыҙланғанда мин икеләтә нығыраҡ әрнейем. Тимәк, улар хаҡында ҡайғыртҡанда, мин үҙемде ҡурсалайым. Һин битәрләгән эгоизмда — бөтә донъям, минең бөтә донъям, хатта һин дә.

— Ҡот осҡос йән эйәһе һин! Һинең миңә кәрәгең юҡ! — Хәйҙәрҙең тауышы ҡырҡыу, сәнскеле. Хатта мин унан ағылған йылыны ла тоймайым. Ул нишләп тағы үҙгәрҙе? Сәбәбен аңлай алмайым. Шуға йәнем көйә.

— Уныһы һинең ҡайғың! — тием.

Моғайын, сәбәп теге һылыу медсестралыр. Көнләшеүҙән эсем өҙөлә, унан үс алғым килә.

— Ярай, мин йүнһеҙмен. Мин кәрәкмәйемдер. Ә һин, кеше хаҡында ҡайғыртҡан изге йән, эгоист булмағас икәс, ниңә тере икәнеңде әсәйеңдән йәшерҙең? Үлем хәбәрең менән уны ҡәбергә илтеп тыҡтың? — тип йөҙөнә бәрәм.

...Мин уны тағы үлтерҙем. Ул ярҙа тыбырсынған балыҡ кеүек тонсоға башланы. Ба-

шын саңҡайтып бер аҙ ята биргәс ҡарлыҡҡан ҡурҡыныс тауыш менән һораны:

— Әсәйем үлдеме? Ҡасан?

— Һин белмәй инеңме ни?

Йә хоҙа, ҡалай иҫәүән мин! Әлбиттә, ул белмәгән. Уға үҙем һалған яраның әрнеүе минең үҙемдең күкрәгемдә телде. Һыҙланыуҙан аҡылымды юғалтып мин уға ташландым.

Ҡулдарым унын сикәһен һыйпаны ла уларҙың йылыһын хәтеренә төшөрҙө. Бармаҡтарым сәстәренә ҡағылғайны — һәр күҙәнәге уларҙың наҙлы йомшаҡлығын таныны. Ирендәрем унын күҙҙәренең төпһөҙ ҡоҙоғонан тартырлы тамсыларҙы ҡомһоҙланып эсте. Тәнемдең уны таныған һәр бер күҙәнәге: «Был ул, ул бит!!!» — тип кинәнде. Бер ниндәй аҡыл да ул ләззәт дауылын тыйып, туҡтатып ала алмай ине инде. Мин юғалтҡан бәхетемде ҡалмай ине инде. Мин юғалтҡан бәхетемде ҡабат таптым. Шунда ғына мин ул юғалтыуҙың дәүмәлен төшөндөм. Төшөндөм дә ҡысҡырып илап ебәрҙем.

— Әсәйең башымды күкрәгенә терәй ҙә, икәүләшеп илайбыҙ. Илайбыҙ ҙа илайбыҙ. Ул минең янға больницаға иң тәүҙә килеп етте. Әсәйем менән атайымдан да алдараҡ. Көнө-төнө эргәмдә ултырҙы. Беҙ өҙлөкһөҙ һинең турала һөйләшәбеҙ. Ул һинең бәп-бәләкәс саҡтарыңды, тормошондағы мин белмәгән мәлдәрҙе иҫенә төшөрә. Мин — икәү бергә булған саҡтарҙы. «Үҙ-үҙенә ҡул һалып мине иң һуңғы йыуанысымдан мәхрүм итергә теләгәнһең», — тип миңә бик рәнйене. «Беҙ икәү йәшәһәк, ул унда үҙен бәхетлерәк тойор», — тип мине өгөтләй торғайны. Ә һин ул ваҡытта тере булғанһың. Һин дә ғазапланғанһың. Ниш-



ләп һин айырым, үҙең генә ғазапланырға иттең? Аңламайым, аңлат миңә!

— Һушыма килеп, хәлемде белгәс тә һине уйланым. Шунда уҡ йәлләү ҡатыш ытырғаныу тулы ҡарашың күҙ алдыма килде. Әле бөгөн, ишек төбөндә торғанында мин һине тәүҙә таныманым: ифрат та нәзәкәтле ханымға әйләнгәнһең. Екһенеү ҡатыш йәлләп ҡарауыңдан ғына таныным.

Нимә тиһең. Дөрөҫ һүҙгә яуап юҡ! Минең ҡаушап өнһөҙ ҡалыуым Хәйҙәрҙе кинәндерә.

— Ҡайһылай һәйбәт беләм мин һине, әйе бит! — тип дауам итте ул. — Юҡ, һин минән баш тартмаҫ инең. Тешеңде ҡыҫып, геройҙарса үҙеңде ҡорбан итер инең. Ә мин **һинең бәхетһеҙлегеңде** күреп үртәлеп ятыр инем.

— Ярар, һин мине беләһең, ти. Ярар, мин ысынтылап яратырға һәләтле лә түгелмен икән. Ә ни өсөн һин әсәйең хаҡында ла шулай уйланың? Ҡайғынан гүргә кергән әсәйең хаҡында...

Хәйҙәр тештәрен шығырҙатып, урттарын сәйнәп оҙаҡ ҡына өндәшмәй ятты.

— Хәсрәт күрмәгән иркә бисә, һин аңлайһыңмы ни кеше хәлен, — тип үртәлде. — Үлемдең йәшәүгә ҡарағанда ләззәтлерәк булған мәлдәрен белерлекһеңме?!

Әле ул үлеп ҡотолған. Әгәр мин күҙ көйөгө булып янында ятһам, ул хатта үлергә лә ҡыймаҫ ине, форсат тапмаҫ ине.

Ғүмер буйы кеше ярауын түгеүҙән бушатмаған ниндәй аяуһыҙ яҙмыш һуң ул... Йылдар буйы өлкән кешенең ярауын түгеү генә лә... Ғәфү ит, һиңә былары ят нәмә.

— Һин мине елбәҙәк күбәләк, еңел-елпе бисә тип уйлайһың. Ә, бәлки, мин һинең был

медсестраларындан бер ҙә кәм түгелмендер. Мин дә үлеп терелдем, белгең килһә! Һин үлгәс, минең дә йәшәгем килмәгәйне. — Ярһыйым. Туҙынам.

— Сигенергә урының ҡалмаһа, һин тешләшә башлайһың. — Хәйҙәрҙең тауышы тағы тыныс.

— Ә һин ғүмер буйы мине ыҙалайһың. Һәр ваҡыт! — Үҙемә үҙем шул тиклем йәл булып киттем. Күҙемдән йәшем сорлап аға башланы. Аға ла аға. Һөрткө лә килмәй. Илауы шул тиклем рәхәт.

Хәйҙәр мине йәлләргә уйламай ҙа, күҙҙәрен көлдөрөп ҡарап тик ята. Ул элек тә шулайта торғайны. Ҡулдары менән яңағына таяна ла. Ҡулдары менән... Илауҙан шып туҡтаным.

— Ила, ила, — ти ул. — Дауам ит. Һинең илауыңа ҡарап ултырыу шул тиклем күңелле. Хатта матур...

Тағы илайым. Тик был юлы әрнеп үкһейем.

— Бала-саға... Елбәҙәк түгелмен тигән була бит әле, — ти Хәйҙәр.

Уның наҙынан күңелем бөтәйә.

— Ҡатын-ҡыҙ елбәҙәк булырға тейеш инде ул, — тигән булам, мырш-мырш танау тартып.

— Нишләп тейеш?

— Елбәҙәклек шампанскийҙың күбеге кеүек. Күбекһеҙ шампанский булмай бит инде.

— Ҡайҙан уҡының?

— Әллә ишеттем, әллә үҙем уйлап сығарҙым, иҫләмәйем инде.

— Үҙеңә файҙа булғанды ғына иҫләп, ҡалғанын онотораға оҫта инде һин. — Хәйҙәр һынап ҡарап торҙо ла кинәт кенә:



— Тынысландыңмы? — тип һораны. — Тыңла, улайһа.

...Үҙең беләһең, атайым ун бер йыл буйы түшәктә ятты. Уның кисергәнен ул да, уны ҡараған кеше генә беләләр. Шулай ҙа ул тормошҡа сытырман йәбешеп ятты. Үҙенә тәтер-тәтемәҫ ҡыуаныстарҙы өҙөп-йолҡоп булһа ла алып ҡалырға тырышты. Кеше көнләләргә хас булғанса, ул ифрат ғәрсел, рәнйеп барыусан, ныҡ шиксел булды.

Үҙе өсөн өлтөрәп торған әсәйемдең ихласлығына ла ышанмай ине атай. Үлгәс, туғандарына яҙған васыятын уҡының: «Үлеп китһәм, нисек кенә булмаһын, больницаға алып барып ярҙыртығыҙ. Вазифа ағыулап үлтермәһен тип ҡурҡам», — тигән. Шунда ғына үҙенә биргән һәр ризыҡты иң тәүҙә миңә ауыҙ иттереүенең серен төшөндөм.

Әсәйемде шул тиклем ҡыҙғана, һәр һүҙенән сөй табып бәйләнә торғайны. Ул саҡ ҡына оҙаҡлаһа, ҡурҡыныс итеп ярһый. Уны хатта ахирәттәре, күрше-күлән менән дә аралаштырмаҫҡа тырышты.

Һөйләгәндәремә ышаныуы ҡыйындыр, сөнки бөтә кеше уны итәғәтле, йомшаҡ һүҙле, алсаҡ тип белә. Хатта ил ағаһы тип йөрөттөләр.

Донъялағы хәлдәргә уның кеүек хәбәрҙар, уҡымышлы, оҫҡор аҡыллы кешене үҙебеҙҙең ауылда, ысынлап та, мин белмәйем. Сир бына шундай кешенең дә тәнен генә түгел, холоҡ-фиғелен дә ғәриплəй икән. Ул бит үҙенең генә түгел, беҙҙең тормошто ла ғазапҡа әйләндергәйне. Ирекһеҙҙән йыш ҡына: «Ошолай йәшәгәнсе үлеп ҡотолоу яҡшыраҡ түгелме

икән?» — тигән ҡурҡыныс фекер башыма килә лә үҙ-үҙемде әрләп йөрөй торғайным.

* * *

Хәйҙәр уйға батты. Мин һәр ваҡыт уларҙың сынъяһау итеп йыйыштырылған өйөн, тәҙрә төбөндә йәйен-ҡышын сәскәлә ултырған гөлдәрен күҙ алдына килтерәм. Һәр ваҡыт таҙа итеп кейенгән, ҡырынған, хушбуй еҫе аңҡытып торған атаһын күрәм. Уның йөҙөндә гелән мөләйем йылмайыу ине. Һөйләшеп һүҙе бөтмәне. Әсәһе лә көләс, күңелсәк. Мин һәр ваҡыт улар хаҡында, ҡайһылай бәхетле ғаилә, тип уйлай торғайным.

Хәйҙәр ҙә ҡараңғылыҡҡа төбәлгән. Уның да күҙ алдынан бала сағы үтәлер. Бер үк ваҡиғалар кеүек, әммә икебеҙҙең ҡабул итеүебеҙ араһында ер менән күк. Ғазап даръяһы. Тормоштоң уңы менән тиҫкәреһе. Әммә минең тиҫкәрене лә улай ҡурҡыныс итеп танығым килмәй. Мин барыбер йәшәйештең һауыҡтырғыс ҡеүәтенә ышанам. Ышанысымдың иң ҙур дәлиле булып ҡаршымда Хәйҙәр үҙе ята.

— Ә һин үҙең ошо хәлдә лә йәшәйһең дә баһа, тип әйткең киләме? — Ул миңә ҡыҙыҡ итеп ҡарай. Мин һоҙлап илар мәлдәрҙә лә уның тыныс ҡалыуы шундай шомландырғыс.

— Афған өҫтөнән самолетта осоп барғанда, бигерәк тә төндә, үҙеңде табут эсендәге кеүек тояһың. Үлем һине һәр яҡлап һағалай. Юл туп-тура ҡәбергә илтә.

Душмандарҙа американдарҙың «стингер» ракетаһы күбәйгәс, быңдай үлемдәр бигерәк тә йышайҙы.

Шулай ҙа ул көндө тәғәйен урынға имен-



аман барып еттек. Ергә һикерҙек. Тик минең парашют асылманы. Баҡа кеүек лап итеп барып төшкәнемде хәтерләйем. Шул арҡала ғына тере ҡалғанмын. Парашют менән төшкән һәр бер десантсыны «дух»тар автоматтан атып торған.

Ташкентта госпиталдә иҫемә килдем. Йәшәргә һис теләгем юҡ. Ҡуҙғала ала башлағас, тумбочка өҫтөндә ятҡан бысаҡты тешләп венамды астым. Тағы алып ҡалдылар үлемдән. Иҫ белә башлағас, мине киҫәктәргә йыйып, ямап, ҡоршап ҡуйған ҡарт профессор янына инде. Балаһы кеүек итеп ҡосаҡлап, үкһеп-үкһеп иланы ул. «Бына ҡырҡ көн инде тормошомдоң мәғәнәһе һин, улым. Күңелемә ярылдың. Етем итмә мине», — тип һамаҡланы. Үткән һуғышта ғаиләһен юғалтҡан, шунан бирле толҡа таба алмай, Ер йөҙөндәге бер һуғыштан икенсе һуғышҡа йөрөгән бәхетһеҙ әҙәм балаһы булып сыҡты был изге кеше.

Бына шулай ғүмер һөрәм. Янымдан кеше өҙөлмәй. Хатта баш врач та йыш инә. Хәсрәтен-ҡайғыһын һөйләй. Күңел төшөнкөлөгөнә бирелгән, һарыға һабышҡандарҙы минең янға һалалар. Ҡарап торһаң, робот-психотерапевт кеүекмен инде.

— Һин барыһын да йыуатаһың. Һеҙҙең ҡайғы миндә булһын ине, тиһең...

— Башҡа бер ниндәй ҙә дәлил ярҙам итмәгәндә әйткеләйем. Ғөмүмән, кешенең тиреһе үтә йоҡа. Күңелен китеүе лә еңел. Ниңәме? Үтә күпте теләгәнгә. Ә һәр бер теләктең юлдашы — әрнеү. Теләгеңә ынтылаһың, ә тормош ағымы һиңә ҡарышлаша, туҡмай — ауыртынаһың.

Ә һеҙ һәр ваҡыт ниҙер теләйһегеҙ. Тере ке-

ше шулайҙыр инде. Юғалтыуҙарҙан дер ҡалтырайһығыҙ. Шул ҡурҡыуҙар сиргә һабыштыра, фажиғәләргә килтерә. Тағы әрнеү, тағы һыҙланыуҙар. Минең иһә теләгем дә, хыялым да, ынтылышым да юҡ. Мин үҙемде бөтәһен дә юғалтҡаныма ныҡлап күндерҙем. Шунан бирле бер генә ауыртыныу ҙа тоймайым. Сөнки тормош мине урап үтә.

— Ағымды ярып торған ҡая кеүекһеңме?

— Ҡая ҡарышлаша бит. Һыу ыңғайына елберләгән ҡыу ҡамыш тиһәң, отошлораҡ булыр.

— Ул бит серей...

— Ҡәҙерен белгән кешегә тәбиғи үлемдән дә татлы нәмә юғын аңлар өсөн һин үтә бәхетлеһең, Райхан.

Ниһайәт, ул исемемде әйтте. Үҙенсә, матур итеп. Ә шулай ҙа миңә уны тыңлауы ҡурҡыныс.

— Кешеләр һинән көс-ҡеүәт алыр өсөн килә. Һинең йылыңда имшей. Һинән нур алған кеүек, — тип өгөтләйем.

— Юҡ, мин үҙемде йыуынты һыу соҡоро кеүек тоям. Кеше миңә бар ғазабын бушатырға инә. Үҙемдең тормошом булмағанлыҡтан, мин, әйтерһең дә, ул кешенең үҙенә әүерелəм. Уның игеҙәге кеүекмен. Кешеләр бит шундай яңғыҙ. Шундай ярҙамһыҙ. Мин уларҙың зарын тотошлайы менән йотам. Физикалағы «ҡара тишектәр» кеүек, иҫләйһеңме? Шуның өсөн мине яраталар. Айырыуса ҡатынҡыҙ. — Хәйҙәр минең көнсөллөктө белә, шуға юрый үсекләй.

— Үле ҡыяҡ, — тип мыҫҡыллайым. — Ауыртыуҙы һиҙмәй, имеш. Ә ни өсөн мине күреү



менән һуштан яҙҙың? Саҡ аяҡ һуҙманың. Фәрештәләрең көскә алып ҡалды.

— Үҙем дә аптыраным. — Ул ысынлап та аптырай. — Үҙ-үҙенде белеп булмай икән...

— Кипкән ҡаҙыҡты ундырышлы ергә ҡаҙаһаң, көтмәгәндә ул япраҡ яра. Шуның кеүек...

— Юҡ, өҙөлмәй ҡалған иң һуңғы ҡыл шартлағандыр, моғайын.

Минең улай тип уйлағым килмәй. Уны япраҡ ярҙырғым килә. Ҡөсһөҙлөгөмә асыуланып уның эргәһенән тороп китәм. Уны әрнеткем килә: илаһын, ярһыһын, битараф булмаһын ине. Мине элеккесә ратһын ине. Элеккесә...

— Гонаһтар өсөн фанилыҡта яуап бирергә кәрәк тиҙәр бит. — Хәйҙәрҙең тауышының һалҡынлығы йөрәгемә килеп сәнсә. — Ғәҙәти тормошта кеше үлтереүселәргә үлем язаһын ҡайһылай ярһып талап итәбеҙ. Ә ниңә һуғышта үлтергәндәрҙе аҡлайбыҙ, хатта маҡтайбыҙ. Мин бит һуғышта бик күп кешенең йәнен ҡыйҙым. Шуның өсөн миңә орден бирҙеләр. Ә беләһеңме, кеше һуйыу — суҫҡа салған кеүек. Имәнес, әммә күнегәһең.

— Һин бит врач булырға тейеш инең. Институттың икенсе курсынан Афғанға олағырға кем ҡушты һиңә? — тип асырғанып тимер карауатҡа һуғам. — Беҙ бит шул тиклем бәхетле инек. Мин һине ҡайһылай яраттым.

— Унда һуғыш барғанын белгәйнем. Шуға ашҡындым. Илдең хәлен хәтерләйһеңдер. Брежнев хакимлығының һуңғы йылдарындағы һаҫыҡ һаҙлыҡты... Шунда тонсоғоп йәшәгәнсе, утта яныуы һәйбәтерәк тигән тойғо алып киткәндер. Ысын ирҙәрҙе осратырмын

тип тә өмөтләндем. Ялған тормош, меҫкен кешеләр шул тиклем ялҡытҡайны...

— Үҙен ир тип тойор өсөн ир-атҡа мотлаҡ һуғыш, ҡан ҡойош кәрәк инде, — тип туҙынам.

— Ә үҙегеҙҙе ҡатын-ҡыҙ тип тойор өсөн һеҙҙең эргәгеҙҙә мотлаҡ ир булырға тейеш инде. — Хәйҙәр көлә.

— Теләһә ниндәй ир түгел. Ҡатынын ҡол да, алла ла итә алырлығы ғына. Ә ундайҙар юҡ. Башҡалар йә ҡол йәки илаһи йән генә итә белә...

— Ә һине ирең бик ярата...

— Ҡайҙан беләһең?

— Үҙем хасил иткән аҫылташ бит һин, Райхан. Һинән бөркөлгән һәр бер нур ҡыяғын беләм кеүек. Тик һәр саҡ яңылышам, яңыса балҡыйһың. Һине асыҡ китап кеүек уҡый алам. Әммә унда һәр саҡ миңә таныш булмаған биттәр осрай. Бер ҡаршылыҡһыҙ күңелеңдең барлыҡ шырлыҡтарына, упҡындарына, шарлауыҡтарына сәйәхәт ҡылам, тик һәр саҡ аҙашам.

Ҡолаҡтарыма ышанмай йөҙөңә текәлгәнмен. Һинең ауыҙыңдан сығамы был һүҙҙәр, Хәйҙәр?!

Күҙҙәрең мөлдөрәп көлөп торған ҡара рауза гөлө. Һәр ваҡыт, һәр саҡ миңә шулай ҡараһаң ине һин?!

— Мин хушлашам һинең менән, Райхан. Таң һыҙылғанда уянайыҡ. Төнгө һаташыуҙар еңелерәк онотола, — ти Хәйҙәр.

— Минең һинең янында булғым килә. Киткем килмәй минең. Ҡыумаһаң ине, — тип ялбарғым килә. Әммә унын ашығып-ашығып арабыҙға боҙ ҡәлғәһен ҡорғанын тоям.



— Иҫәрләнмә. — Хәйҙәрҙең тауышы ҡәтғи, хатта уҫал. — Алма кеүек балаларың, өҙөлөп торған ирең бар. Улар юғалтҡандыр. Ҡайт.

Уларҙы онотҡаным юҡ. Иремдең яратып, аңлап баҡҡан һөйкөмлө ҡараштарын күҙ алдыма килтерәм дә үҙәгем өҙөлә. Йәнемде уртаға телер инем. Ә шулай ҙа:

— Киткем килмәй. — Мин Хәйҙәргә кәрәгерәкмен кеүек. Әлегә мин шуны ғына беләм, шуны ғына ҡабатлайым. Күңелемдән генә: «Мине ҡол да, алла ла итәһе кеше ул һин генә бит, Хәйҙәр», — тип ҡысҡырам.

— Теләктәрҙе үлтереү ҡыйын түгел, — тауышы хисһеҙ, төҫһөҙ.

— Юҡ, ауыр, ғазаплы!

— Ғөмүмән, үлтереүе еңел. Күнегергә генә кәрәк. — Ул минән торған һайын алыҫлаша. Арабыҙға ҡорған диуарынан үрелеп-үрелеп ҡарайым. Саҡ-саҡ күрәм.

— Мин тағы килермен! Хәйҙәр! — Йәш аралаш бышылдап ҡысҡырам, һүҙҙәрем һиңә барып етерме?!

— Мин көтмәм. Хуш.

Ул күҙҙәрен йомдо. Йөҙө үлек. Ул үлтереп өйрәнгән.

...Госпиталдән сыҡтым. Ҡара көҙҙөң алһыу таңына табан һуҡмаҡ менән барам. Үҙемә юлдаш итеп доғамды алдым. Һөйөүем доғаһын. «Әй, Хоҙайым! Мин ялбарам һинән: ул мине ратһын! Уның мине яратыуын теләйем. Ысын яратыуҙың ғазаплы ләззәтен татып киләндер уны, әй Аллам!

Мине оноторға теләп ҡыр талашһа, тыңлама уны, Хоҙайым. Мине һыйындырған мөйөш, мине әйҙәп уның янына алып барған көҙ, көҙгө ямғырҙың һәр бер тамсыһы, һәр бер там-

сының меңәр ярсығы хәтерендә мине яңыртып тик торһон. Ирендәре ирендәремде һағынһын. Һәр күҙәнәге ҡулдарымдың наҙына шатланһын. Йөрәге минең йөрәгемдең ауазын ишетәм, тип зарыҡһын. Әрнет уны, терелт уны, йәшәт уны, эй илаһым!

Ул мине яратһын! Ул яратһын мине, йә Хоҙа!»

## ҠӘҘЕРҺЕҘ

— Күңелең тартмағанға үлтерәм тиһәләр ҙә, өйләнмә, улым. Йәнең дә, тәнең дә екһенгән кеше менән ун йыл йәшәгәнсе, яратҡаның менән бер көн бергә булыуы артыҡ. Заманында миңә ошо аҡылды биреүсе булманы. Шуның һөҙөмтәһен — әсәң менән ни рәүешле йәшәгәнебеҙҙе үҙең күреп үҫтең. Минең хатаны ҡабатлама.

Ябыҡ ишек үтә Сабиттың тауышы әллә ҡайһылай тоноҡ, ҡарттарса булып ишетелә. Ә мин, уның йәне лә, тәне лә екһенгән кешеһе, йөрәгемде услап улыбыҙ Мансурҙың яуабын көтәм. Нисәмә йылдар буйы ҡустыһы менән уны атайлы булһындар тип йөҙөмдө йыртып, эт ҡайышы булып йәшәнем, — ул нимә әйтер?

— Аңлайым, атай, — ти баш балам. — Аңлайым. Икегеҙ ҙә шул тиклем йәлһегеҙ, һин дә, әсәйем дә.

«Һин дә», — ти бала. Ир бала шул. Ҡыҙ булһа, әсәһенең әрнеүҙәре нығыраҡ аңлашылыр ине.

Тамағыма төйөлгән әсе төйөндө йотоп ебәрә алмай, күҙҙәремә тығылған йәш томаны аша үткәнемде күрәм.



...Тау кеүек ҡорһағымды кәпәйтеп китеп барышлай силос ташыған «Беларусь» тракторын осраттым. Уны Сабиттың йөрөткәнен күреү менән ҡысҡыра-ҡысҡыра ҡул болғайым. Ә ул мине таныу менән газға баҫып тиҙлекте арттыра ла алға елдерә. Ә мин, рәнйеүҙән, асыуҙан аҡылымды юйып, уның артынан ҡыуа төшәм дә ҡырсынлы юлда сосайып торған ташҡа абынып йығылғансы йүгерәм. Ярһыуҙан шашып шартларға еткән мәлемдә эсемдәге балам тулап иҫемә ҡайтара. Сеңләп илай-илай юл ситендәге ереклектән аҡҡан инештә һыҙырылған терһәк-тубығымды йыуам. Башҡа кейемем һыймағас, әсәйем аптырап мендәр тышлығына тип алған эре сәсәкле ҡыҙыл ситсанан тегеп биргән күлдәгемдең итәге бер яҡ ситенән бүҫелеп сыҡҡанын да күргәс, ошонда йәшен генә атып үлтерһәсе, тип һыҡтағаным һаман иҫемдә. Шул мәлдәрем өсөн мине кемдәр йәлләр икән?

Бешергән ашыма тып-тып йәшем тама, тик бала хаҡы бар. Юлға сыҡҡан саҡтарында рәнйемәйем тип ярһыуымды йотам. Сабит менән йәшәгән йылдар бынан яманыраҡ мәлдәргә бай булды — өйрәнәһе түгел.

Йәйге имтихандан һуң үҙе кеүек талип иптәштәре менән эшләп алырға булған Мансурым хушлашҡанда күҙемә ҡарамай. «Әсәй» тип өҙөлөп, талаш, тартыш мәлдәрендә гел минең яҡлы булған таянысым атаһы яғына ауған өсөн үҙен ғәйепле тоя.

«Тормоштоң алды ла, арты ла бар. Һинең бәхетең кешегә бәхетһеҙлек килтергән саҡтар ҙа күп. Йәшәй-йәшәй аңларһың әле», — тип әйткем килә лә, өндәшмәйем. «Нимә уйлаһа

ла, иҫән-аман йөрөһөн». Шулай тием дә, тынысланам. Эшем дә күп.

Тик берәй ваҡиға булырға мотлаҡ тейеш икән, бар нәмәһе гелән тура килеп кенә тора бит ул. Әйтерһең дә, ниндәйҙер көс, ихтыярыңдан тыш, һинең менән идара итергә, йүнәлеш бирергә тотона. Бына әле лә, берәүҙәргә шылтыратырға йыйынып, һанын йыйғайным, бөтөнләй башҡа телефонлы Сафияның ҡыҙы яуап биргәс, аптырап ҡалдым.

— Әсәйем өйҙә юҡ, Фәнүзә апай, — тине бала мине тауышымдан танып. «Өйҙә юҡ икәнен үҙем дә беләм, — тип уйланым күңелемде көйҙөрөп сәсрәгән шик осҡононан һиҫкәнеп. — Өфөгә китте».

— Ә һин нишләп унығ менән барманың?

— Ҡустым менән беҙгә машинала урын етмәне. Беҙ атайым менән иртәнән һунға поезда китәбеҙ, — тигәнде ишетеп, трубканы ташланым. Башыма ҡара ҡан һикерҙе.

Тимәк, иң яҡын әхирәтем баш ҡалаға иремдең машинаһына ҡушарлап ҡына ултырып һыпыртҡан. Әйтәм, Сабит: «Шоферҙың бисәһе ауырыҡһына. Әллә рулгә үҙемә генә ултырырға инде», — тип һөйләнә ине. Имеш тә, теләһәң биш кеше лә ултырмалы «Волга»ла ике балаға урын етмәгән?

Тиремә һыя алмай бер торам, бер ултырам. Эш ҡайғыһы ла, донъя ҡайғыһы ла китте. Шул тиклем ярһыным, бына-бына шартлармын, йә гөрф итеп ҡабынып дөрләп янырмын кеүек. Сафияның иренә шылтыратам, секретары тоташтырмай: «Мөһим кәңәшмә бара», — йәнәһе лә.

Сабиттың һөйәркәләренән ғүмер буйы мыҫҡыл ителеп йәшәнем: әхирәт ҡиәфәте сығарып күңелемә инәләр ҙә өйөмә килеп иремде арбарға тотоналар. Хәйер, үтә тырышырға ла кәрәкмәй, ирем һәр ваҡыт күҙен-башын уйнатып стартта тора. Ымлаусы ғына булһын. Тик кемдән-кемдән, Сафиянан быны көтмәгәйнем. «Апай» тип өҙөлөп тора, һүҙебеҙ ҙә, серебеҙ ҙә берегә. Бында күсеп килгәс, ошондай күңелгә күңел ярылып торған яҡыным осрауына ҡыуанып бөтә алмаған сағымда...

Тағын телефонға тотондом. Ниһәйәт, бушаған.

— Низам ҡусты, — тип ҡысҡырам ярһыуымды тыя алмай. — Ҡатынынды минең күпте күргән күн ҡата менән ҡушарлатып ултыртып ебәрергә башыңа тай типкәнме әллә?

Низам гөрһөлдәтеп рәхәтләнеп көлә.

— Ҡуйсәле, Фәнүзә апай, — ти ул пырхылдауына быуыла-быуыла. — Бабайыңа ҡара ла миңә ҡара. Әллә ҡартың минән шәп күренәме? — Шунан етдиләнеп өҫтәне. — Сафия менән йән дуҫтарбыҙ тип йөрөгән булаһығыҙ түгелме? Ярай, апай, ғәфү итегеҙ, минең кабинетта кеше күп, һау булығыҙ, — тип трубканы һалып ҡуйҙы. Миңә һүҙ әйтергә лә ирек бирмәне. Түҙмәнем, алйот ирҙе һүгә-һүгә өйҙәренә йүнәлдем. Балаларынан һораштырайым: ни рәүешлерәк ултырышып киттеләр икән?

Йүгерә-атлап барам, эй үҙемдең талағым таша. Ярһып килеп индем дә, үҙем дә һиҙмәҫтән, ун ике-ун дүрт йәшлек балаларға ҡысҡыра башлағанмын. Улары ҡурҡыштан ҡатып ҡалды, ауыҙҙарынан һүҙ алырлыҡ түгел. Улы илай башланы. Аптырап ҡул һелтәнем дә, борҡоп, йәнә сығып йүгерҙем.

Янам, дөрләп янам. Хәлемде үҙе ошондай

мәсхәрәгә тарыған кеше генә аңлар. «Инде баçылғандыр был абыштҡа, — тип ышанғайным бит, юғиһә. — Ике улды ир еткерҙек, тәүбәгә килергә ваҡыт», — тип уйлағайным. Ә Сафия һуң? Әхирәт тигән һүҙ әхирәткәсә тоғро дуçлыҡ тигәнде белдерә, тип күлдәктәр бирешеп, байрам һайын йөрөшөп... Һүгеп-һүгеп хат яҙып һалайым ул албаçтыға. Ауылына ялға ҡайтмаҡсы ине, артынан ҡыуып етеп ҡанына тоҙ һалһын әле. Мине иçәргә сығарып ҡыуана алмаһын.

Ирем менән әхирәтемдең оҙон юлда, шәп машинала икәүләп кенә бәүелешеп, ихахайлап барыуын күҙ алдына килтерәм дә, утҡа май һипкән кеүек үҙемде ҡыҙҙырғандан-ҡыҙҙырам, уның һайын әшәкерәк, эт ашамаçтай һүҙҙәр теҙәм хатыма. Күп яҙҙым. Инде булды, тип асыуым буçкәреп торһам — конверт юҡ. Ике-өс киоскыны бер итеп саҡ таптым. Почта йәшнигенә ырғытып кире ингәйнем, шөғөлөм бөткәс, йәнә ярһый башланым. Ғәрлегемдән, көсһөҙлөгөмдән гөл кеүек йыйылған өйөмдөң аçтын-өçкә әйләндергем килә.

Сафия бүләк иткән, хатта яратып кейгән күлдәгемде йыртҡыслап ырғыттым, 8 Мартҡа алып биргән гәлсәр һауытын иҙәнгә селпәрәмә бәрҙем. Шунан бер аҙ үсем ҡанды кеүек. Күҙ йәштәремдең ташҡыны күңелем быуаһын ярып сыҡты ла хәтеремде гелән һағыш та рәнйеш тулы үткәнем менән хәҙергем араһында юнысҡы кеүек өйөрөлтөп йөрөттө. Бөгөн икенсе тапҡыр бәхетһеҙ йәшлегемә ҡайттым.

Сабитты тәү күргән мәлемде хоҙай ҡарғағандыр. Шулайҙыр. Юҡһа ул тиклем дә гонаһлы бала түгел инем... Аҙып-туҙып, тәмәке тартып, эске ойоштороп йөрөгән ҡыҙҙар бына



тигән кешеләр менән ғаилә ҡороп уйһыҙ ғүмер итә. Ә мин?!

Институтта гел дүрткә-бишкә уҡыным. Аҡылым да камил, төç-башҡа ла төшөп ҡалғандарҙан түгелмен, мин-минлек менән нығышмалыҡ инде баштан ашҡан.

«Тиреç ҡорттары» менән (ауыл хужалығы институты талиптарын мыçҡыл итеп шулай атай инек) аралашҡан кеше түгел инем. Бергә уҡыған ҡыҙ туйына саҡырҙы. Ғөмүмән, һуңғы курста туйҙан башыбыҙ сыҡманы. Был һабаҡташымдың кейәүе буласаҡ агроном ине.

— Бында танау сөйөп йөрөгән булаһығыҙ ҙа, ауылға ҡайтҡас, шуларға көнөгөҙ төшәсәк. Уҡытыусы кем инде? Ә былар гел түрә: йә баш, йә урынбаçар. Шуға күрә сос булығыҙ. Араларында алтындай егеттәр бар, — тип өгөтләне һабаҡташыбыҙ. — Сабит тигәненә генә ымһынмаһағыҙ ҙа була. Юҡҡа ваҡыт әрәм итмәгеҙ. Ауылда йәрәшкән ҡыҙы бар.

Киçәтмәһә, бәлки, иғтибар ҙа итмәгән булыр инем... Юҡ, итер инем. Шәп ине егет: оҙон буйлы, төçкә лә матур, өçтәүенә, гармун тарта. Хәйер, әле йылдар үткәстен барлап ҡараһам, башҡалары ла Сабиттан ҡайтыш булмаған. Беҙҙең тағы өс ҡыҙыбыҙ шунда танышып кейәүгә сыҡты, гөрләтеп йәшәйҙәр. Ә миңә, ҡара тырышҡа, мотлаҡ утлы боғалаҡҡа баш тығырға кәрәк бит инде. Сабитты күрҙем дә ҡапландым.

Бер ҙә фәтеүәһеҙ түгел, тип кинәнәм. Сөнки ул да минән күҙен алмай. Һуңынан оҙата килде, тағы, тағы осраштыҡ.

— Был «упр» малайы башыңды ашамаһын, ҡыҙый, — тип иçкәртте һабаҡташым.

Атаһы совхозда управляющий булып эшләй икән. — Ауылда бик яратҡан ҡыҙы бар.

— Ҡемдең ауылда яратҡаны булмаған. Мин дә беренсе мөхәббәтемде илай-илай армияға оҙатҡайным. Ике йылдан осрашҡас, уртаҡ ике һүҙ таба алманыҡ.

Ҡөлдөм генә. Шунда туҡтарға булған да бит. Ә мин, йәнәһе, егетте тоҙаҡҡа эләктерәм. Уға ҡорған ҡапҡаныма үҙем ҡабып урлеҡырлы һикергәндә иһә һуң ине. Ут йотоп, йәш түгеп һуңғы имтихандарымды бирҙем, диплом яҡланым. Ә практикаға тип яҙғы сәсеү мәлендә үк ҡайтып киткән Сабит һыуға батҡан кеүек юҡ булды.

Хат яҙам — яуап юҡ. Телефонға саҡырам — килмәй. Ә минең хәлдәр хөрт. Ауылға ҡайтһам, яңғыҙ әсәм әрләй-туҙа илай: «Һөйөклө балам, көйөклө булдың...»

Йәй үтеп бара, көҙ етеүгә миңә тәү тапҡыр уҡытыусы булып мәктәпкә барырға кәрәк... Нишләйһең, үҙем эҙләп киттем егетемде. Ауыл осона еткәс, икенсе яҡҡа боролған машинанан төшөп ҡалғайным — «Беларус»та елдереп үтте. Ә мин ереклектә байтаҡ буҙлағас, Сабиттарҙың ауылына кис ҡорон, көтөү ҡайтҡас ҡына барып еттем. «Былай тиермен, тегеләй тиермен», — тигән булып юл буйы батырайып, ярһып барһам да, уларҙың йәшелгә буялған бейек ҡапҡалы ҙур өйҙәре янында ажарым ҡайтты. Тыңлап та тормай, «битһеҙ» тип ҡыуып сығарһалар, төн йөҙөндә ҡайҙа барырмын? Итәге тубыҡтан өҫтөн булып тырпайып торған сатин күлдәгемде әй тартҡылаған булам. Ҡарынымдағы сабый йәлләгән, ҡеүәт биргән кеүек тулай башлағас ҡына бөтөн ихтыярымды йыйып ҡапҡаны астым.



Йыйнаҡ, киң ихата, ныҡлы кәртә-ҡура, емештәре һығылып торған бейек алмағастар — барыһы ла Сабиттың ҡараулы донъяла ҡәҙерләп үҫтерелгән аяулы бала булыуын күрһәтеп тора. Минең кеүек йәтимә түгел инде. Ундай ата-инә балаһы өсөн үңәсеңдә лә сәйнәп өҙөр. Ҡаушауҙан башым әйләнеп китте, аяғым атламаҫ булды. Әмәлгә күрә, ҡапҡа эргәһендә бер бүкән торған икән, шуға терәлдем. Ул арала һарайҙан оло биҙрә күтәргән өлкән генә ҡатын сыҡты. Сабиттың әсәһелер... Уға оҡшап эре һөйәкле, оҙон буйлы. Хужабикә лә мине абайланы, шешмәк ҡабаҡлы күҙҙәрен ҡыҫа биреп һынсыл ҡарай. Йөҙө ҡырҡыу, талапсан.

— Ойомос һорарға килгән бала кеүек нишләп унда туҡтаның? Уҙып кит. Эт юҡ. Үҙебеҙ ҙә тешләшмәйбеҙ.

Ҡыйыуһыҙ ғына ҡалҡындым.

— Әллә нишләп аяғым ҡорошто ла китте, — тигән булдым.

Әсә кеше бит ул, хәлемде шунда уҡ аңланы. Буй-һыныма һирпелеп баҡҡандан һуң тауышы йомшарҙы:

— Ауыр аяҡлы саҡта шулай ҙа була ул. Ярай, ултырып тор, мин аласыҡҡа һөттө генә индереп сығам да...

Тәүге минуттан уҡ бәлә һалыуҙы килештермәй, аҡһап-туҡһап булһа ла үҙем барып күрештем.

Бер аҙҙан «уазик»та елдертеп атай кеше лә ҡайтып төштө. Шулай ҙа Сабит уның яғына ныҡырап тартҡан икән: ҡара һылыу йөҙ, ҡая ҡараш.

Ҡиске аш ашағансы бер нәмә лә һорашманылар. Әммә бер-береһенә мәғәнәле генә ҡа-

рап ҡуйыуҙарынан уҡ шик-шөбһәләре аңлашыла ине. Хәйер, өйләнмәгән берейһенән-берейһе мөһабәт дүрт улы булған кеше тағы нимә уйлаһын инде. Минең Сабит тиеүем генә уларҙы шаңҡытты. Артыҡ һүҙ ҡуйыртманылар, әммә ҡәйнә булаһы кешемдең йөҙө яҡтырыбыраҡ киткән кеүек тойолғас, ғәжәпләндем. Яңылышҡанмындыр тиер инем, урын һалып биргәндән һуң арҡамдан һөйөп ҡуйҙы.

Икенсе көндө уларҙың аш бүлмәһендә ҡыҙып-ҡыҙып һөйләшкәненә уянып киттем. Көтөү ҡыуып, иртәнге сәй эсәләр.

— Әллә кемдең ғәзиз балаһын шул хәлгә ҡалдырған икән, нимәһен уйлап тораһың инде, алабыҙ ҙа бирәбеҙ, — ти әсәһе.

— Ай-һай, Сабит үҙе бер ҙә улай уйламайҙыр. Вәғәҙәләшкән ҡыҙы бар ҙа.

— Уйлар урын ҡалдырмаған инде. Үпкәләре юҡ, — тип үҙ яғын ҡайыра һаман әбей.

— Һин бигерәк ҡыҙыҡһың инде, Бибикамал, — тип ҡыҙа башланы атай кеше лә. — Бәлки, ул аҙып-туҙып йөрөгән бер нәмәлер. Тыумаған баланың Сабиттыҡымы, түгелме икәнен кем белә? Ҡешегә бер күреүҙән мөкиббән булаһың да китәһең... Ыштанһыҙланып.

Иренең тупаҫыраҡ һалдырыуы булды, быға тиклем нисек тә йомшартырға тырышып ултырған әбей сабырлығын юйҙы.

— Ғүмер буйы көндәш бисәләр шул бер ҡатлылығым арҡаһында мыҫҡыл итте лә инде. Үҙемдең намыҫым таҙа булғас, был балаға ла ышандым. Ғоманлы килеш алдашып гонаһ алмаҫ. Ә һин, үҙең йөрөмтәл булғас, башҡаларҙан да шикләнәһең. Улың да үҙеңә оҡшағандыр...



— Әсәһе, һин башыңдан себен осорма. Сабиттың аҙып-туҙып йөрөгәне булманы. Бишенсе кластан бирле шул Зөһрәһенән башҡаға ҡалҡып ҡарағаны юҡ.

«Еңде был ҡарт. Мине ҡыуып ҡына ҡайтаралар инде», — тип йөрәгемде тотоп ятам, сөнки әсә өндәшмәй, самауырҙан һыу ағыҙғаны ғына ишетелә. Бабай ҙа һүҙҙе теүәлләнем, тип уйлағандыр, сынаяғын түңкәреп, рәхмәт әйтеп ҡуҙғалғаны ишетелде.

— Улының бәхетен ҡайһылай ҡайғырта атаһы... Ай-һай... — Әбейҙең тауышы күкрәгенән ҡыҫылып шым ғына сыға. — Ғәзиз баламдың туйында көндәште ҡоҙағый итеп түргә ултыртып, һеҙҙең мине мыҫҡыллап йымылдашҡанығыҙҙы ҡарап ултырырмын тип уйлағайнығыҙмы?! Был бисара бер нәмә лә күрмәне лә, күрмәй ҙә, тип уйлағайнығыҙмы? Үлһәм дә быға күнмәйәсәгемде белмәй инегеҙме?

Ғүмер буйы рәнйешен үпкәһенә йомоп йөрөгән ҡатындың ҡайһылай үҫал итеп асылғанына тетрәнеп, тын алырға ла ҡурҡып, юрғаныма боҫтом. Бабай ҙа быңдай күҫәкте көтмәгән булғандыр, ахыры, бер һүҙ әйтә алманы, сығып китте. Ҡүтәрмәнән төшкәнен пәрҙә ситенән генә ҡарап ҡалдым. Йөҙөнә эҫе һыу һипкән кеүек ине. Йәтеш булды.

Шул килеүҙән бейем мине ҡайтарманы, ҡанаты аҫтына алды. Стажым өҙөлмәһен тип мәктәпкә бер нисә сәғәткә генә эшкә урынлаштырҙы. Ике-өс йыл элек кенә ялға сыҡҡан абруйлы уҡытыусының, етмәһә, түрә бисәһенең, һүҙе үтемле.

Сабит та ҡарышҡаҡ икән, күрше ауылда эшләп йөрөй, ҡайтып морон күрһәткәне юҡ. Ураҡты бөтөрөп һуңғы имтихандарын тапшы-

рырға китте, ата-әсәһе менән хушлашманы. «Ҡем-кемде»гә китте хәҙер еңмешлек.

Декабрь башында Мансурым тыуҙы, бәхетемә күрә һуйған да ҡаплаған олатаһы ине. Больницанан әсәйем менән бейем икәүһе генә килеп алғайны, ҡайтҡас, ҡайным, биләүҙәге бәпескә бер генә һирпелеп баҡты ла сығып китте, ике көнгә юҡ булды. Өфөгә барып, Сабиттың ҡолағынан тотоп машинаһына ултыртҡан да, алып ҡайтҡан. Бәпәй туйы менән бергә үҙебеҙҙең туйҙы ла үткәрҙеләр.

— Еңдек! — тине бейем икенсе көндө. — Баланың ырыҫы еңде. Теге бисураһы Себер яғына сығып киткән!

...Уйҙарымды бүлеп, бөгөнгөмдә ишек ҡыңғырауын зыңғырҙаталар. Көткән кешем юҡ, китер әле, тип асмайым — ныҡыш бәндә булып сыҡты.

«Ай, хәйерһеҙ, кәрәгең генә бар ине», — тип албаҫты кеүек ярһып асһам, Сафияның Низамы тора.

Илап шешенгән йөҙөмә йәлләп ҡараны ла итәғәтле генә итеп:

— Бая аңғартып һөйләшмәгәнемә ғәфү үтенәйем тип килдем. Икәүләшеп кенә китмәнеләр бит, апай. Унан көнләшеүегеҙ ҙә мәрәкә тойолдо. Шофер ҡатынын больницаға алып китте. Сафия унды бөтөп университетҡа йыйынған уҡыусыһын алдына ултыртып тигәндәй алды. Саҡ һыйыштылар. Сабит ағай юлда Мансур менән бергә төшөп ҡалам, — тип һөйләнде.

Низам йәлләп тә, сәйерһенеп тә күҙемә ҡарай, минең сикһеҙ көнсөллөгөм уны ытырғандыра булыр. Мин дә, уның һүҙҙәрен ишетеп, оялышымдан бурҙаттай тоҡандым: «Эй ауһарлыҡ! Мансурҙың эшләйәсәк еренә төшөп ҡалып, ҡарап китергә йыйыныуын белә инем бит иремдең».

— Ғәфү ит, ҡустым. Шулай аңды-тонды белмәй ҡыҙып китә торған холҡом бар шул. Өлкәнәйгән һайын нервылар бөтә...

Шулай тигәс, Низам аңлайым, тигәндәй баш ҡаҡты ла кеҫәһенән бер гәзит сығарып һондо:

— Бөгөнгө «Башҡортостан»ды күрмәгәнһегеҙҙер әле. Унда Сафияның һеҙҙең уҡытыу оҫталығығыҙ хаҡында мәҡәләһе баҫылған икән, — тип хушлашып китеп барҙы. Башыма суҡмар алғандай һеңгәҙәп тора бирҙем дә тышҡа йүгерҙем. Нишләргә белмәй йөрөйөм почта йәшниге тирәһендә өйөрөлөп.

— Ҡиске хаттарҙы алдылар. Етеләә үк алалар бит, — тип «ҡыуандырҙы» мине ихата һепереүсе ҡарт.

Өйгә инеү менән үкенестән, асыуҙан ни эшләргә белмәй йәнә үкереп илап ебәрҙем. Шул Сабит тип кеше менән боҙолошоуҙарым... Шуның хыянаттары, минең янъялдарым арҡаһында урындан урынға күсенеүҙәр. Ярай әле түрәләрҙең ултырғысы күп, береһенән икенсеһенә күсә. Шуныһы йәл: тағы бер тигән эхирәтемде юғалттым.

...Үҙенсә килеп сыҡмағастын, мине ауыҙлыҡлап алмаҡсы булды Сабит йәш ваҡытыбыҙҙа. Бер-бер артлы тыуған ике бала бәләкәй саҡта йөҙөмә сәркеүен алып өйҙә ултырҙым. Ә ул, һине уҡытайым әле, тигәндер, йөрөнө бәйеле аҙып. Мин дә тырабуз. Улдарым ҙурайып ҡына алғайны, артынан бер тотам ҡалмай йөрөмәһәмме... Мәжлескә барып берәйһе менән һүҙ йә күҙ уйната башлаһа, аңдып

ҡына ултырам да теге ҡатындың сәсенә йәбешәм. Һөйрәкләп алып ҡайтып күк талаҡтай туҡмап ташланы тәүге тапҡыр, ҡурҡытырмын тигәйне, үҙенә насар, миңә йәтеш булды. Шул килеш хужаларына илаулап барҙым. Уның ҡанһыҙлығына хайран ҡалдылар. Айырам, тигәйне — коммунистар партияһы бар. Шунан бер аҙ баҫыла, тартыла бирҙе. Йәшәй килә икенсе алым һайланы: аҫтан ғына итәккә ут төртә лә, һинең өҙгөләнеп туҙынғаныңа аптырап ултырған була: «Ғәфү итегеҙ. Минең ҡатындың холҡо еңелерәк шул...»

Егерме йылдан ашыу бер-береһенә бығаулап ҡуйған ике ҡан дошман кеүек ғүмер итәбеҙ. Әйтерһең дә, кем-кемдең башына етә, тигән маҡсат ҡуйғанбыҙ. Үҙем дә белмәйем, нимә күберәк миндә уға ҡарата: яратыумы, нәфрәтме? Бөтөн донъяны үҙемдән биҙҙереп нимә өсөн шулай айҡашам һуң мин? Балалар ҙа ҙурая килә атайға нығыраҡ эҫенде. Ана бит, Мансурым: «Аңлайым, атай», — тип тора. Үҙемдән хатта үҙем дә бүгеп бөттөм, ахыры, мин.

Тып-тып күҙ йәшемде тамыҙып иҙәндән теге күлдәк йыртыҡтарын, гәлсәр һауыттың ярсыҡтарын йыям. Бармаҡтарым ҡанға туҙҙы. «Ҡаным менән бәхиллегемде яҙып, ҡайтыуына ваннала үлеп ятайыммы икән әллә? — тигән хәтәр уй төштө башыма бер мәл. — Үлеп үс алайым, ҡалған ғүмеренә ҡаным сәсрәһен әйҙә». Бик тә оҡшап китте миңә был һүҙҙәр. Уларҙы йыр кеүек ҡабатлап былай ҙа йыйыулы өйөмдө йыя башланым.

Ҡерҙәрҙе үтекләп, таҫлап өйҙөм. «Ҡасып китһәң дә, сәсеп кит», — тип өйрәтә торған бейем. Үҙенең ике бала менән ҡайнымдан айырылырға йыйынғанын бер нисә ҡат иҫкә төшөргәне бар ине: «Бөтөн өйҙө ҡырып йыуып, таҙалап, иремдең күлдәктәрен үтекләп, төймәләрен тағып (түрә кешегә кейем мөһим бит инде) мәктәп өйөнә күсеп сыҡтым. Алдымда тубыҡланып тороп кире алып ҡайтты».

Әйҙә, Сабит та ҡара гүрҙәргә төшөп алдыма тубыҡланһын. Эшемде бөтәйем дә үлә һалайым тип ашҡынып йөрөгәнемдә, телефон шылтыраны.

— Төн уртаһында бимазалаусы беҙ, — тине ауылдағы килендәшем. — Бейем насарланып китте бит. Ҡайта һалығыҙ. Сабит менән һине бигерәк тә күргеһе килә.

Һикһән алты йәшендә лә салт зиһенен һаҡлаған бейем менән бәхилләшергә бурыслы инем. Беҙҙең бәхетһеҙлегебеҙгә үҙен дә ғәйепле тойған кеүек йәшәне бит ул. Ҡарты вафат булғас, беҙҙә ҡышлар булды. Үҙебеҙ йылыта алмаған донъябыҙға ҡотон ҡундырырға тырышты.

...Ни тиклем ашыҡһам да, тере сағында өлгөрмәнем. Уны һуңғы юлға оҙатырға кеше шул тиклем күп йыйылды.

«Матур йәшәне, матур итеп донъя ҡуйҙы, һуңғы төйәге лә матур», — тип уны бабайы эргәһенә ҡарт ҡайын аҫтына ерләп ҡайттылар.

Әллә ниндәй сәйер йоғонто яһаны миңә был үлем. Ҡыҙған мәлемдә тормош менән иҫәп-хисапты өҙөргә йыйынып бөткәнгәме, ҡәйнәм менән үҙемде сағыштырып ҡарайым да, кем минең өсөн шулай өҙәләнеп илап ҡалыр икән, тип уйлайым. Ул ниндәй булды ла, мин ҡайһылай? Ул бәхетһеҙлегенән дә бәхет яһап йәшәй алды, ә мин... «Ҡайырылып ҡарайым

да хайран ҡалам. Ҡалай алйот булынған. «Шаһи ағай башайының һыңарын минекенә алмаштырып кейеп ҡайтҡан, шуны ғына бир әле», — тип килгән йөрөмтәл яңғыҙ ҡатынға:

— Ә шулаймы ни? — тип башай сығарып биргәнмен.

Хәҙер килеп шуны уйлайым да, әллә нишләп китәм. Ҡумәк бала, өй эше, мәктәп — гел арып йөрөгәнгә шулай вайымһыҙ булынғандыр инде», — тип хәтерләп алыр ине.

Ысынлап та, кеше алдында бер ваҡытта ла иренең йөҙөн йыртманы, балаларына ла гелән: «Атайығыҙҙың һүҙе — һүҙ», — тип кенә торҙо.

Ә бит шартлап торған уҫал ине. Аҡыллы уҫал. Кешене үтәнән-үтә күреп тора. Берәйһе менән аралаша башлаһаң: «Килен, бынынды яҡын юлатма», — тип ҡырт киҫә. Икенсе берәүҙе иһә әйҙүкләп ҡаршылай: «Килен, самауырынды ҡуй», — тип өлтөрәп тора. Аҙаҡтан ишетәһең, теге тыйып ҡуйған ҡатындың Сабитҡа ысынлап та берәй бәйләнеше булған, йә бергә эскәндәр, йә шиҡандаған.

Нишләп мин уның кеүек була алмайым был тормошта? Өҙгөләнәм дә йолҡколанам?

...Бейемдең өсөн уҡытырға бөтөн ауылды йыйҙыҡ. Йәштәр ихатала, өлкәндәр өйҙә ултырышты. Мулла Ҡөрьән уҡыны. Мул итеп хәйер тараттыҡ. Йәштәр һурпа индерә башланы.

«Бигерәк күп йүгерҙең, арыныңдыр», — тип мине ҡуҙғатманылар. Сабит, ғәҙәтенсә, миңә ҡабырғаһын ҡуйып кем менәндер гәпләшә ине, ҡапыл тертләп ишеккә табан боролдо. Әсәһен ерләгәс һурылып, ҡарайып киткән йөҙөнөң ҡа-



пыл ниндәйҙер эске балҡыш менән нурланғанын ғәжәпләнеп ҡарап торҙом. Ул күҙ алдында терелеп киткән һәм тормош дәртенә һуғарылған мәйет, шытым ебәргән кипкән ҡаҙыҡ кеүек тойолдо миңә.

Ул ҡараған яҡҡа боролдом — ишектә Зөһрә тора. Ҡасандыр мин еңеп, ауылдан ҡыуған ҡыҙ... Ҡартайған, элекке матурлығын юғалтҡан, арыған, бәхетһеҙ яҙмышы сырайына уҡ яҙылған. Тик уға сибәр ҙә, йәш тә, көләс тә булырға кәрәкмәй. Бары ишектә ошолайтып торорға ла торорға ғына кәрәк. Сөнки ул Сабит өсөн берҙән-бер... Уға шул етә. Сабиттың күҙҙәре уны үҙҙәре матурайта, Сабиттың тойғолары уны йәшәртә, Сабиттың зиһене үҙе уны аҡыллы итә. Ә Сабит үҙе уны бәхетле итәсәк. Тик Зөһрә әлегә быларҙың береһен дә белмәй, ҡаушай биреп, төшөнкө генә тора. Шул саҡ әллә йөрәге һиҙенде, әллә ҡарашты тойҙо — ул да Сабитҡа баҡты. Ҡарағайны... Әйтерһең дә сарсап, бәжеп ултырған гөл һыуға туйынды. Япраҡтары ҡалҡып, таждары асылды, төҫө сағыуланды.

Ниндәй көс ҡуҙғатҡандыр мине урынымдан, писек өйҙән сыҡҡанмындыр?! Аласыҡ янынан үткән саҡта һурпаға һалма һалып торған бер килендең икенсеһенә «ҡәҙерһеҙ» тип ниҙер һөйләгәне ҡолағыма салынды. Шунда ғына мин бәхетһеҙлегемдең сәбәбен аңланым. Ысынлап та, ғүмер буйы ҡәҙерһеҙ булдым... Ирем генә түгел, үҙ баһамды үҙем дә белмәнем бит. Кешеләр менән дә гелән тәмһеҙләшеп йәшәнем.

Зәңгәр эңер төшкән ауыл урамынан аңҡытинке китеп барғанымда яҡтыһы менән күҙҙе сағылдырып бер машина килеп сыҡты. Ҡу-

лым менән күҙемде ҡаплап юл ситенә сыҡтым. Ул көтмәгәндә туҡтаны. Бәләкәй генә автобус ине, индем дә ултырҙым.

Алда ғына ултырған ир ҡиәфәтемдән хәлемде аңланымы — урын бирҙе. Йәйге кис булһа ла, күлдәксән һалҡын ғына икән. Ят кешенең ултырғыс күнендә ҡалған йылыһы рәхәт булып тәнемә йүгерҙе. Ҡыр талашып, өҙгөсләнеп алмаған яҡшылыҡ ҡына ҡәҙерле булалыр, тигән уй килде. Ә мин быға тиклем бөтә нәмәне көрәшеп, йолҡҡосланып алдым. Ҡапыл былай ғына, бер кемдән бер нәмә көтмәй, өҙгөләнмәй, йолҡҡоланмай ғына йәшәп ҡарағым килде. Үҙемдең ҡәҙеремде белеп, кемгә кәрәкмен, шуларҙың ғына тормошон йәмләп...

«Теләгәнеңсә йәшә, ратканың менән йәшә, — тиермен Сабитҡа, — ратҡаның менән, — тиермен. — Баҡһаң, мин дә күптән инде һине ратмайым икән. Бәлки, ратмағанмындыр ҙа. Шул тиклем һинән, һинең яныңдағы үҙемдән арығанмын».

Был ҡарарым зиһенемдә төйнәлеү менән өҫтөмдән ауыр йөк төшкән кеүек булды. Йөрәгемде быуып торған боҙ шауҙырлап ҡойолғас, диҡҡәт менән эргә-тирәмдәге кешеләргә ҡараным. Уларҙың мөләйем мөнәсәбәте күңелемде йылытып ебәрҙе. Күп йылдар элек үҙемде-үҙем тышап ҡуйған бығауҙарҙан арынғас, тын алыуы иркен, йәшәүе рәхәт тойолдо. Ер менән күк тоташҡан ерҙә шәфәҡтең ана юйылам, бына һүнәм тип торған һуңғы нуры күңелемә шыуып инде лә булмышымды яҡтыртты. Күкрәгемә ҡунған йән тыныслығы ҡутарылып осоп ҡына китмәһен, хоҙайым.



## ТҮЛҺЕҘ

Үлем ғазабы ярылып ятҡан ҡот осҡос ауаз бала табыу йортоноң биш ҡатын бер юлы айҡап сығып, унда ятҡан ҡатындарҙың йөрәген өшөттө. Төнө буйы ҡабат-ҡабат яңғырап йәндәрҙе телгеләгән был тауышҡа башҡалар күнегә төшкәйне. Ә бына иртәнге аштан һуң ғына урынлашҡан бойоҡ ҡатын былай ҙа ҙур күҙҙәрен түңәрәкләндереп һикереп торҙо.

— Нимә был? — тип хәүефләнеп бышылданы ул.

— Ун өс йәшлек бер ҡыҙыҡай кисәнән бирле бушана алмай.

Иртәнге аштан һуң күңеле уғата көрәйеп, иренең тәҙрә сиртҡәнен көтөп ятҡан мөләйем мәрйәнең тауышында көтөлмәгән ҡырыҫлыҡ, хатта аяуһыҙлыҡ ишетелде.

— Ун өс йәшлек?

— Ун өс кенә шул, — тип ҡыҫылды палатағы ҡатындарҙың икенсеһе — сәсен тура ярып, ыҫпай итеп артҡа йыйнап ҡуйғаны.

Унан оҙайлы хәбәргә тейешергә йыйынғандай, ҡулындағы китабын ситкә һалып, уйсан ғына өҫтәне:

— Атай булаһы кешегә ун дүрт кенә, ти. Бына бит ниндәй көнгә төштөк.

Ул арала баяғы тауыш тағы ла аянысыраҡ булып, күкрәкте йыртып сыҡҡандай яңынан ҡабатланды.

— Бәпәйләүе шулай ҡыйынмы ни? — тип шыбырҙаны моңһоу ҡатын карауат тимеренә оҙон, матур бармаҡтарын күгәрткәнсе йәбешеп.

— Ваҡытынан алда, укол менән көсләп ҡыу-

ғанға шулай. Сабыйҙың етлекмәйенсә тыуғыһы килмәй. Шуға күрә әжәле менән ҡырталашып айҡаша. Ҡисә кис үк тыуырға тейеш тиҙәр ине. Әсәһен ун ике сәғәт ҡысҡырта бит инде. — Мәрйә аҙапланыусыны, шул кәрәк уға тип үсәгәндәй, уҫал итеп һөйләнде. — Йәнә өс ай сыҙап әҙәмсә тапһа, былай йонсомаҫ ине.

— Нисек инде тапһа? — тип ғәжәпләнде ҡатын. — Ул үҙе бала ғына бит әле. Бына минең ҡыҙыма ун бер, улыма ун өс. Улар бөтөнләй бала ғына...

— Бала ғына... Күрһәң ине ул баланы. Ат( кеүек уйнаҡлап тора. — Мәрйәнең ярһыуының сәбәбен төшөнмәгән «бойоҡ» ғәйепле төҫ менән ауыр һуланы ла урынына баҙнатһыҙ ғына барып terәлде.

Ә тегеһе рәнйегән ҡиәфәт менән сығып уҡ китте.

— Валяға үпкәләмә, — тине ҡатындарҙың икенсеһе. — Уның ҡырыҫлығын үҙеңә алма. Ул бала төшөрткән, етлекмәгән сабыйына ҡул һалған йәки балаһын ташлаған һәр бер ҡатынды күрә алмай, сөнки үҙе баланан мәхрүм. Ете тапҡыр ауыры төшкән. Былтырғыһын мең бәлә менән һигеҙ айға тиклем һаҡлағандар. Инде иҫән-аман табам тигәндә, кендеге үңәсенә уралып сабыйы үле тыуған. Күҙ алдына килтерәһеңме? Һигеҙ ай түшәктә ятып, көн түгел, сәғәт һанап, ыҙаланып, түҙеп, ғазапланып тапҡан бәпәйең үҙ кендегенә быуылып үлһен әле.

— Күҙ алдына килтерә алам, — тине «бойоҡ» шым ғына. Унан: — Ә ире? — тип аңлайышһыҙ ярһыу менән һораны.

— Ире бик һәйбәт, аҡыллы кеше, күрәһең.



Ыңғайына ғына тора. Көн һайын килеп тәүлек буйы өс литрлы банкаға йыйған кесе ярауын ҡаланың теге осондағы лабораторияға ташый. Бер фән кандидаты Валяны күҙәтеп докторлыҡ диссертацияһы яҙа икән.

— Әле нисә айлыҡ?

— Өс. Хоҙай ҡушһа, тағы алты ай ятырға кәрәк. Яңыраҡ бында туғыҙ ай түшәктә ятып сабыйын иҫән-аман табып алған бер ҡатын ҡайтып китте. Шуны күреп Валя ла уғата рухланып йөрөй.

Моңһоу ҡатын уйсан ғына баш ҡаҡты ла йәнә бәләкәс кенә булып йомарланып ятты.

Шул ваҡыт баяғы ғазаплы тауыш тамаҡ төбөнән ҡарлығып осоп сыҡты ла иң юғары нотала ҡапыл өҙөлдө...

— Үлдеме? —тип ҡобараһы осоп һораны «бойоҡ».

— Юҡтыр, тыуҙырғандыр, тыныслан. Хәҙер Валя белеп инер. Әйткәндәй, танышайыҡ, мин — Мәрйәм.

— Нәфисә, — тине тегеһе иғтибарһыҙ ғына. Үҙе тартылған кереш кеүек көсөргәнеп ишеккә текләне.

— Бушанды, — тип килеп инде Валя ишекте шар асып. — Ҡотолдо. Инде йәнә ҡыҙ булып һикерәңләп йөрөй ала.

Хәҙер Нәфисә уның күҙҙәренән сәселгән зәһәр осҡондарҙың сәбәбен төшөнә ине.

— Әсәһе ҡарсыҡты ҡотлайыҡ әле, — тине Валя тәҙрәне асып. — Ҡисәнән бирле мәйет көҫәгән ҡоҙғон кеүек ошонда өйөрөлә...

— Валя, — тине Мәрйәм ялыныслы тауыш менән. — Ярар инде. Ҡуйсәле...

— Ҡуймайым да, нитмәйем дә... — тип

ҡырт киҫте Валя. Үҙе Мәрйәмгә көлөмһөрәп, яратып ҡарап алды.

«Асыулы булһа ла күңеле һәйбәт икән», — тип уйланы Нәфисә. Ул да тәҙрә янына барып баҫты. Ҡоҙғон кеүек ҡатынды уның да күргеһе килде.

— Ана тора. Йәшел күлдәкле бөҙрә сәсте күрәһеңме? Үҙе лә бала табырлыҡ әле. Йәп-йәш, сибәр. Ире лә... Байҙар. Ҡара әле, һәр бармағында икешәр алтын балдаҡ. Бер сабыйҙың йәнен ҡыйғансы, күмәкләшеп үҫтерһәләр ни булған?!

Инә ҡаҙ шикелле муйынын һоноп, хәүеф һандығандай торған сибәр ҡатын былар яғына башын борҙо.

— Ейәнегеҙ менән ҡотлайбыҙ һеҙҙе, — тип өндәште Валя татлы тауыш менән мыҫҡыллы итеп.

— Әллә тереме? — тип күгәренеп китте ҡатын.

— Ҡыуанығыҙ, ҡыуан, үлде, — тип ҡысҡырҙы Валя ҡапыл ҡыҙып.

Ҡатын ҡыуаныстан балҡып китте:

— Аллаға шөкөр...

— Ҡеше үлтереүсе хәшәрәттәр, — тип ярһыны Валя тәҙрәне шартлатып ябып. — Үлгән тигәс, ҡалай шатланды.

Сикәләре яныи киткән Нәфисә шым ғына урынына барып ятты.

— Ҡайһылай бөтәһен дә уйлап эшләгәндәр, әй. Башта уҡ алдыртһаң бүтән балаһы булмай ҡуйыуы бар, йән кергәс табыр, тигәндәр. Уҡымышлылар, хәшәрәттәр. — Валя һөйләнә-һөйләнә лап итеп карауатына барып ултырҙы.

— Тыныслан инде. Былай һәр нәмәгә ярһып үҙеңде бөтөрәһең. Башҡаларҙы ла бор-



сойһоң, — Мәрйәм күҙҙәре менән генә Нәфисәгә ымланы. — Һәр кем үҙенсә йәшәй. Бына беҙ түлһеҙлектән йонсойбоҙ, бәхетһеҙбеҙ. Ҡемдәрҙеңдер түле ташып бара, улар ҙа бәхетле түгел.

Уның һүҙҙәрен раҫлағандай, палата ишеге шар асылып китте лә, ике дәү ир үлем төҫө кергән ҡатынды бейек арбаға һуҙып һалып алып инде. Уны Нәфисә эргәһендәге буш карауатҡа күсерҙеләр. Акушерҙарҙың баҙарҙағы ит сабыусыларҙыҡы кеүек йәшел клеенканан тегелгән алъяпҡыстарына ҡан сәсрәгән.

— Ит турағыс эшләй башланы, — тип ҡуйҙы Мәрйәм. Унан күҙҙәрен түңәрәкләндереп ҡабат тороп ултырған Нәфисәгә аңлатты. — Бөгөн шәмбе бит. Танышлыҡ буйынса аборт яһатҡандарҙы беҙҙәге буш карауаттарға һалып торалар. Аҙна һайын шулай.

— Үлмәгәнме? Ҡарағыҙ әле, — тине Нәфисә ап-аҡ булып өнһөҙ ятҡан ҡатынға ымлап. — Мин ҡурҡам.

— Юҡ. Наркоздан сыҡмаған әле. Йоҡлай, — тип тынысландырҙылар уны. — Быныһы тәртипле әле, — тип көлөштөләр.

Ул арала теге ике ир, тағы ла нығыраҡ ҡанға батып, арбала икенсе ҡатынды алып инде. Быныһы иҫерек кеше кеүек: ҡысҡыра, тулай. Ирҙәр сабыр ғына ҡыланып уны буш карауатҡа күсереп һалды ла сығып китте. Арттарынан ингән шәфҡәт туташы ҡатындың өҫтөнә япма ябып, ҡулынан һыйпаны, һаман тыбырсынған бисараҡайҙы тынысландырырға тырышты. Тегеһе һаман туланы. Уның балтырынан ағып төшкән ҡанды күргән Нәфисәнең башы әйләнеп китте, күңеле болғана башланы.

— Эй хоҙайым, — тип уны ҡосаҡланы Мәрйәм. — Иғтибар итмәҫкә тырыш, йәме. Бына шулай эт көнөндә йәшәйбеҙ инде. Тик йәшәйбеҙ бит, бирешмәйбеҙ.

Тулаған ҡатын өгөтләүгә бирелепме, бер аҙ баҫылды.

— Берәр сәғәттән айнып. Тауышлана башлаһа инде, саҡырығыҙ, — тип шәфҡәт туташы үҙ эше буйынса сығып китте.

Күпмелер ятҡас, наркоздағы ҡатындарҙың тәүгеһе сеңләп кенә илай башланы. Үҙәк өҙгөс итеп: «Һин аңламайһың мине, аңламайһың, — тип һамаҡлай-һамаҡлай үкһене ул. — Һиңә барыбер. Һин балаңдың иҙәндә аунап ятҡан ҡанлы киҫәктәрен күрмәнең бит. Ҡанлы киҫәктәрен... Тас тулы ҡыҙыл ҡан»... — тип ярһып иренә үпкәләне ҡатын.

Нәфисәнең был тиклем әсенеүҙе тыңлап тәҡәте ҡороно, үҙ-үҙен тыя алмай һикереп торҙо ла палатанан сығып китте.

— Уның да бәпәйен етлекмәҫ борон таптыралар икән. Врачтар йөрәге лә, бөйөрө лә сирле тип ныҡ ҡурҡытҡан, — тине Нәфисә артынан йәлләп ҡарап ҡалған Валентина. — Шуға ҡайғыра инде, бисараҡай. Иренән тороп ҡалғас, врач бүлмәһендә шул тиклем илаған.

— Өйҙә ике балам бар, тине бит. Ҡыҙ менән малай...

— Еткән инде. Уларҙы үҫтереп кеше итергә лә кәрәк бит... — Шулай тип һөйләштеләр.

Ә ситлектәге януар кеүек ҡайҙа барып һуғылырға белмәй йөрөгән Нәфисә өлкән генә табибәне туҡтатты:

— Ниңә һаман укол һалмайһығыҙ? Сыҙар әмәлем ҡалманы...



— Саҡ ҡына сабырлыҡ кәрәк, балаҡай, — табибә Нәфисәне яурынынан ҡосаҡланы ла эйелеп күҙҙәренә ҡараны, әйтерһең дә, күңеленең иң төпкөлөнә баҫтырыҡлап йәшергән уйын күрергә теләне. — Ҡан баҫымың рәтләнһен. Ә уколды кискә яһарбыҙ. Әйҙә, аҙыраҡ минең янымда ултырып тор.

Бүлмәгә ингәс, пульсын тикшерҙе, бәпәйҙең йөрәк тибешен тыңланы. Унан ишеклетүрле йөрөп әйләнде. Нәфисәнең сырылып эсен тотоуын абайлап һынсыл ҡараны:

— Әллә ауыртамы?

— Юҡ, тыбырсына, — тине ҡатын ғазаплы йылмайып.

«Тиҙҙән үлерен һиҙгән кеүек», — тип уйланы икеһе бер юлы ирекһеҙҙән.

— Оҙаҡ буламы? — тип һораны Нәфисә.

— Нимә оҙаҡ?

— Оҙаҡ ыҙаланырғамы?

— Ә-ә, шунһыҙ булмай инде. Ыңғай ғына булһа — таңға ҡотолорһоң.

Табибә халатының кеҫәләренә ҡулдарын тығып тағы йөрөп әйләнде. Унан Нәфисә ҡаршыһына туҡтап кинәт кенә:

— Әллә кире уйлайһыңмы? — тип әйтеп һалды.

Көтөлмәгән һорауға тертләп киткән ҡатындың күҙҙәрендә керпек ҡағып ҡына алыр мәлгә өмөт сатҡылары ҡабынғайны, атылып сыҡҡан күҙ йәштәре уларҙы бик тиҙ һүндерҙе.

— Юҡ, юҡ! — тип ярһып башын сайҡаны ул. — Юҡ!

— Ярар, балаҡай, ярар. Үҙегеҙ беләһегеҙҙер... — тине табибә. Арҡаһынан тапап ятты. — Бар, көс йый. Аша. Йоҡлап ал. Һиңә көс күп кәрәк буласаҡ әле.

3 Заказ 343

Палаталағы барса ҡатын-ҡыҙ тәҙрәләрҙе шар асып тыштағылар менән һөйләшә, бау төшөрөп кустәнәстәрҙе тартып ала. Мәш киләләр. Хатта яңы ғына ҡысҡырышып, илашып ятҡан ике ҡатын да тәҙрә эргәһендә. Илағаны оҙон буйлы хәрбигә ҡул болғай:

— Бөтәһе лә яҡшы. Ҡискә кил, кискә. Мине алып ҡайт, — тип ҡысҡыра.

Үҙенә бер кемдең дә килмәгәнен белһә лә, Нәфисә лә тышҡа ҡарай. «Бәлки, — тип өмөтләнә ул. — Бәлки... Юҡ, Исмәғил уны иртәгә килеп алыр. Иртәгә тиклем ҡотолһа... Тәүҙә врачтарҙан шылтыратып белешер ҙә килеп алыр». Шулай тип үҙен йыуата-йыуата Нәфисә урынына барып ятты ла, йоҡларға маташып ҡараны. «Ял итеп ал, — тине бит уға доктор. — Ихтимал, төнөң йоҡоһоҙ үтер».

Маташты ла, тик онотола алманы: бисәләр сыуылдашты, унан бигерәк үҙенең уйҙары тынғыһыҙланы.

...Бөгөнгөләй шәмбе ине. Исмәғилде кискә табан ғына килеп: «Бик ауыр сирле килде. Оҫта хирургһыҙ булмай», — тип операцияға алып киттеләр. Ул клиниканан төн уртаһы ауғас ҡына ҡайтты. Ҡыҙмаса ине, кәйефһеҙ. Тик, ғәҙәттәгесә, һомғол, ыҫпай. Затлы плащын ултырғысҡа быраҡтырҙы, асҡыстар бәйләмен өҫтәлгә ырғытты, тәмәкеһен тоҡандырғандан һуң йомшаҡ диванға барып сумды ла телевизор ҡабыҙҙы.

— Ипләп, — тиәһе итте йоҡо бүлмәһенән сығып ирен хәүеф ҡатыш һоҡланыу менән күҙәтеп торған Нәфисә. — Балаларҙы уятырһың. Яңы саҡ йоҡлап киттеләр.

—Балаларҙы? — Исмәғил дуға кеүек ҡаштарын сөйөп ҡатынына ҡараны. — Ә-ә-ә, балаларыбыҙҙымы? — Нәҙек ирендәрен килешле генә ҡыйшайтып йылмайҙы ул. Һиҙгер бармаҡтары араһына ҡыҫтырған ҡиммәтле сигаретын асырғанып һурғанда матур күҙҙәре зәһәр ҡыҫылды. Унан һомғол кәүҙәһен һығылдырып ҡатынына ныҡлап боролдо:

— Минең стериль бисәкәйем, түлһеҙ һөйөклөм әллә ниндәй иҫерек баштарҙың ташландыҡ балалары өсөн ҡайһылай өҙгөләнә. Шулай изге йән бит ул минең бушҡыуығым.

Иренең һәр һүҙен, мыҫҡыллы тауышындағы һәр бөгөлдө ятлап бөткән Нәфисәгә был битәрҙәргә күптән күнегергә лә, күнергә лә ваҡыт ине кеүек.

— Түлһеҙ түгел! — тип үҙе лә көтмәгәндә ҡаршы төштө ул. Рәнйеүҙән башына ҡан һикерҙе, ҡурҡыуы ла ҡапыл онотолдо. — Түлһеҙ түгел! — тип ярһып бышылданы.

Ҡатынының сынаяҡ аҫты кеүек ҙур күҙҙәрен түңәрәкләтеп ғәйепле ҡиәфәт менән күндәм генә үҙенә ҡарап тороуына өйрәнгән Исмәғил көтөлмәгән ҡаршылыҡҡа ҡыуанып китте.

— Түлһеҙ түгел?! — Ир матур башын артҡа саңҡайтып рәхәтләнеп көлөп алғандан һуң, зөбәржәт кеүек йәшел күҙҙәрен ҡыҫа биреп, ҡатынына ҡыҙыҡһынып ҡарап торҙо. Әйтерһең дә, сысҡандың йоҙроҡ күрһәткәненә ғәжәпләнгән бесәй. Ә Нәфисә иренең үткер ҡараштары аҫтында үҙен хирург бысағы телгеләгән ҡорбан кеүек тойҙо, шуға нисек тә һаҡланырға теләп ҡулдары менән ҡосаҡланы. Ә Исмәғил тәмәкеһен асҡаҡ яңаҡтарын соҡорайтҡансы тәрән итеп, рәхәтләнеп һурҙы ла, төтөндө йайлап ҡына, дуңгәләкләтеп өҫкә өрҙө.

— Тағы берәй ҡортҡаға алтын балдағыңды бүләк итеп, йыуаныслы хәбәр ишетеп ҡайттыңмы?

— Юҡ. Мин ауырлымын.

— Һаташа башланыңмы әллә? — тине Исмәғил. Тауышында мәсхәрә яңғыраһа ла, күҙҙәрендә хәүеф ялтлап китте.

— Юҡ, ысын.

Исмәғил һеләүһен кеүек һикереп ҡатыны алдына килеп баҫты. Унан профессиональ врач ҡарашы менән баштан-аяҡ күҙҙән үткәрҙе. Алдамағанын төшөнгәс, аяуһыҙ ҡулдары менән ҡатынының башын ҡыпһыуыр кеүек ҡыҫып тотто ла тишерҙәй итеп күҙҙәренә текләне.

— Ҡемдән?

— Һинән, — тип бышылданы Нәфисә. — Күптән әйтергә йөрөй инем. Яңылышыуҙан ҡурҡып һуҙҙым, — тип һөйләнгән булды.

— Алдашаһың... — Ҡыпһыуыр нығыраҡ ҡыҫты.

— Һинән, — тип йән асыуы менән ҡарышлашты Нәфисә.

— Дөрөҫөн... — тип дер һелкетте ире. — Дөрөҫөн әйт. Минән бала булмай.

— Нисек инде булмай? — тип ҡаушап төштө ҡатын. — Нисек инде?! Һин бит һәр ваҡыт мине ғәйепләнең...

— Һантый булғаның өсөн ғәйепләнем. — Исмәғил ҡатынының башын туп кеүек итеп стенаға ырғытты ла ҡабат сигаретын ҡабыҙҙы.

Унан һис нәмә булмағандай йомшаҡ диванға сумды.

— Бына бында баҫ, — тине ул бәрелгән башы зеңкеп сайҡалып торған ҡатынына тыныс ҡына ҡарап. — Бындараҡ баҫ, битеңә



яҡтылыҡ төшһөн. Ә хәҙер һөйләп бир. Ҡем менән буталдың?..

...— Ҡыҙыҡайҙар! Баҙар бөттө! Әйҙәгеҙ, ашарға! — тип ҡысҡырҙы шаян санитарка ишектән башын тығып. Уның майлы ҡоймаҡ кеүек ялтырап торған ҡәнәғәт сырайынан уҡ төшкө аштың тәмле икәне һиҙелде.

Бер тәғәм ҡапҡыһы килмәһә лә торҙо Нәфисә. «Ҡөс күп кәрәк буласаҡ», — тине бит доктор.

Төшкөлөктән һуң ҡатын йоҡо дарыуы һорап алды. Уйҙарын ҡыуалап, ҡатындарҙың гәпләшеүен тыңларға тырышып ята торғас, ҡап-ҡара баҙға ҡапыл ҡолап төшкән кеүек ҡыйын итеп онотолдо. Әңер төшә башлағас, үҙенә укол һалырға ингән шәфҡәт туташы менән табибтың ҡағылыуынан ғына уянды ул.

— Аллаға тапшырабыҙ инде, — тине табибә. — Үҙ мәйлең... — Шулай тине лә күҙенә мөлдөр йәш алып үлемесле һағыш менән ҡарап торған Нәфисәне ҡыҙғаныуҙан эсе янып китте, ахыры. Ҡосаҡлап күкрәгенә ҡыҫты, ҡолағына: «Бөгөн менән генә ғүмер бөтмәй. Теләһәң, тағы булыр. Һин йәшһең бит әле...» — тип бышылданы.

Уларҙы күҙәтеп ятҡан Мәрйәм менән Валяның да ирендәре ҡалтыранды. Шәфҡәт туташы тилбер генә итеп укол ҡаҙағас, барыһы ла үкһеп ҡуйҙы. Үлем яҙаһын ғәмәлгә ашырыуға оҡшап китте...

— Һин музыкантмы әллә, Нәфисә? — тип өндәште Валя бер аҙ ятҡас. Моңһоу тынлыҡты нисек тә боҙорға кәрәк ине.

— Эйе, — тине тегеһе, ниһәйәт, тирә-яғына

ҡарарлыҡ хәлгә килеп. — Ә былар ҡайҙа булды? — тип буш карауаттарға ымланы.

— Ирҙәре ҡосағында йоҡлап яталар, — тип көлдө Валя. — Йәнә бында килергә әҙерләнәләр. Скрипкала уйнайһыңмы?

— Эйе, ниңә?

— Ҡулдарың матур, нәфис. Шунан керпектәреңдән дә моң ағылған кеүек. Уйнай белмәһәң мотлаҡ өйрән, тип әйтергә ята инем әле.

— Хирургтарҙың да бармаҡтары көслө, һиҙгер була, — тип ҡуйҙы Нәфисә һүрәнке тауыш менән. Унан Валяға өндәште. — Ә һин шағирәме?

— Таптың шағирәне, — тип көлдө Валя. — Бухгалтер мин, һандар ҡорто.

— Ә Мәрйәм — уҡытыусы, эййеме?

— Ҡиәфәтемдән күренеп торамы? — тип йылмайҙы Мәрйәм.

— Һөйләшеүеңдән дә... Мин дә уҡытыусы, музыканан...

— Беҙгә йоҡлап алырға кәрәк, Мәрйәм, — тип тәмле итеп, ауыҙын ҙур асып иҫнәне Валя. — Нәфисә ҡысҡыра башлағансы серем итеп өлгөрәйек.

— Мин һеҙҙе бик борсомаҫҡа тырышырмын, — тине Нәфисә.

— Өсөнсө баланы табыуы еңелерәк, тиҙәр, — тип тынысландырҙы уны Валя.

Утты һүндерҙеләр. Урам фонарҙаренең стенаға төшкән нурына ҡарап ятҡан Нәфисә, Исмәғиленең һөйкөмлө, нәфис сырайлы йөҙөн күҙ алдына килтереп, ыңғырашып ҡуйҙы. Ире шундай талапсан, ҡырҡыу итеп ҡарай. Шуға күрә баланан тиҙерәк ҡотолоп, сафланып, унын нескә ирендәренә йылмайыу нуры ҡундыра һалғыһы килде. Теләге ҡабул булды тиерһең, биленә ҡыҙған тимер менән сәнскән кеүек ауыртыуҙан тешен ҡыҫты. «Башланды...»

Тәжрибәле ҡатындарҙың тулғаҡ хаҡында һөйләгәндәрен ишеткәне бар ине Нәфисәнең. Күпмелер ваҡыттан һуң ауыртыу тағы, тағы ҡабатланды. Башындағы бөтә уйҙары был ғазаптан ҡурҡып ҡайҙалыр сығып ҡасты. Бары тик: «Түҙергә, түҙергә...» — тигән һүҙәр генә өйөрөлдө. Ваҡыт төшөнсәһе бөттө. Күренмәгән йәллэттең ҡулындағы утлы тимер ҙә, уның ҡасан килеп ҡаҙалырын ҡурҡып көткән йән остоғо ғына бар.

— Нәфисә, — тип өндәште шул саҡ Мәрйәм төн ҡараңғылығынан. — Һин йоҡламайһың бит...

— Юҡ, юҡ.

— Йөрөй алаһыңмы әле?

— Аламдыр ул...

— Докторҙы саҡырып ҡына кил әле. Мин киттем, буғай...

— Нисек киттең? Ҡайҙа? — тип үҙ хәлен онотоп һикереп торҙо Нәфисә.

— Шым. Валя уянмаһын, — тип иҫкәртте Мәрйәм. — Ағып киттем.

Бары шунда ғына Нәфисәнең йонсоған мейеһенә Мәрйәмдең һүҙҙәренең аяныслы мәғәнәһе барып етте. Ауыртыуҙан ыңғыраша-ыңғыраша, аҡһай-туҡһай палатанан сығып йүгерҙе. Тиҙ генә табибә, носилка тотҡан санитарҙар килеп инде. Мәрйәмде йәһәт кенә алып сығып киттеләр ҙә, ярты сәғәт үттеме, юҡмы, кире индереп тә һалдылар.

Бер-бер артлы ябырылған һыҙланыу менән айҡашып хәле бөткән Нәфисәнең бер аҙ оно-

толоп ятҡан мәле булғандыр, үкһегәнгә терт- ләп күҙен асты.

— Һин илайһыңмы, Мәрйәм?

— Саҡ ҡына илайым инде, йәме, — тип һулҡылдап бышылданы сабыр ҡатын. — Шул тиклем йәл. Мин уға ниндәй күлдәктәр тегеремде уйлап бөткәйнем. Ысынлап та ҡыҙ булған....

Нәфисә, үҙәге өҙөлөп, Мәрйәмдең эргәһенә тубыҡланды, үҙе лә үкһеп уның еүеш яңаҡтарын һыпырҙы, сәсенән һыйпаны. Валяны уятмаҫҡа тырышып шым ғына илаштылар.

— Башҡа балам булмаҫ инде — тине Мәрйәм әрнеүе бер аҙ баҫылғас. — Ҡырҡ ике йәш бит инде миңә. Ҡырҡ ике йәшлек ҡарт ҡыҙ. Ҡыҙыҡмы?

— Нисек инде ҡарт ҡыҙ? Бая ирең килгәйне түгелме һуң?

— Бар урыныңа ят, өшөрһөң, — сабыр ҡатын ғәҙәтенсә үҙенән бигерәк башҡаларҙы ҡайғыртты. — Мин тынысландым инде. Рәхмәт һиңә. Шым ғына һөйләшеп ятайыҡ... Һинең хәлең нисек?

Бары шунда ғына Нәфисә байтаҡтан ауыртынмағанын абайланы, әммә шулай кәрәктер, тип уйлап урынына ятты.

— Ҡилгәйне, — тип һүҙен дауам итте Мәрйәм. — Тик әле ул ғаиләһенән рәсми рәүештә айырылмаған. Ике арала аңҡы-тиңкә килеп йөрөп ята. Тегендә ике балаһы бар. Тапҡан табынғанын унда ҡайтарып бирә лә миндә тамаҡ туйҙырып йөрөй...

Әсәйем ете йыл түшәктә ята бит минең. Ике ай элек һеңлем йәш балаһы менән иренән айырылып ҡайтты. Шул хәлдә бала табырға йыйыныу, бәлки, алйотлоҡ та булғандыр. Хоҙай үҙе беләлер әле, ибет.

Өҫтөнә тулғаҡ ғазабы яңынан ябырылғанға Нәфисә яуап бирә алмаған. Тешен генә шығырҙатты. Баяғынан да аяуһыҙыраҡ һыҙлаңыуҙан тыны ҡурылды. Әжәле алҡымынан алғандай булды.

— Эй Алла, былай ыҙалағансы үлтер ҙә ҡуй, — тип ялынды ла тәүлек буйы аҡырып сыҡҡан теге ҡыҙ баланы иҫенә төшөрҙө. Гонаһы ебәрмәйҙер кеүек тойолдо.

— Мин дә кеше үлтереүсе бит, Мәрйәм,— тип бышылданы ул төн ҡараңғылығына, ҡайҙандыр ярлыҡау өмөт итеп.

— Үҙеңде өҙгөләмә. Өйҙәге ике балаң өсөн йәшәргә тейешһең бит һин, — тине мәрхәмәтле тауыш.

— Улар минеке түгел. Сабыйҙар йортонан алған етемдәр. Ә мин, йылдар буйы Алланан ялбарып, енәйәткә батып алған баламды үҙ ихтыярым менән үлтереп ятам.

— Нишләп был хаҡта көндөҙ әйтмәнең?— Быға тиклем уларҙы шым ғына тыңлап ятҡан Валя урынынан һикереп килеп торҙо. — Нишләп өндәшмәнең?

— Һинән ҡурҡтым. Үҙемдән ҡурҡтым. Ҡире уйлап ҡуйырмын, тинем...

— Ҡире уйларға кәрәк ине... — Валя ашығып аяҡ кейемен эҙләй башланы, унан, таба алмауына йәне көйөп, ниҙер мығырҙаны ла ялан аяҡлап сығып йүгерҙе.

— Нимә булды тағы?! — тине уның артынан ашығып килеп ингән табибә. — Нимәне туҡтатырға? Ҡан киттеме әллә?

— Процесты туҡтатырға кәрәк, — тип өтәләнде Валя.

— Ниндәй процесты?

— Ай алла, нисек аңламайһығыҙ?! Нәфисәнең балаһы тыумаһын, тыумай торһон. Ҡәҙерле сабый, ғәзиз сабый бит ул...

Хәүефләнеүҙән аһылдап төшкән табибә, хәлдең айышына төшөнгәс, асыуланып китте:

— Бына нәмә, Полякова, — тине ул йәне көйөп. — Һин әптән үҙәккә үттең. Ҡыҫылмаған ерең юҡ. Нимәгә ятаһың бында: иҫән-һау ғына бала табып алырғамы, әсәләре табырға теләмәгән ҡәҙерһеҙҙәрҙе ҡурсаларғамы? Кемгә кәрәк ул бәхетһеҙҙәр? Уйлағаның бармы?

— Доктор, — тип һаман өтәләнеүен белдегенеһе, киҫәргә уйлап та бирмәйенсә. — Һеҙ аңлап етмәйһегеҙ. Был юлы бөтөнләй башҡа бит, тыңлағыҙ әле...

— Әйҙә, былай һөйләшәйек, — тип үҙенекен тылҡыны табибә лә. — Иҫән-аман бушанып ал да бындағы бөтә ташландыҡ балаларҙы ла ҡуша алып ҡайт. Юғиһә, һин генә миһырбанлы ла, беҙ ҡан эскес... Шулай килеп сыға. — Доктор һөйләнә-һөйләнә Нәфисәнең пульсын тыңланы, ҡан баҫымын үлсәне, унан: «Тиҙ түгел әле», — тип сабырлыҡ теләп сығып китте.

...Табибтан табибҡа йөрөп йонсоған, төрлөсә диагноз ишетеп буталып бөткән Нәфисәне Исмәғил үҙенең дуҫы эшләгән больницаға һалды. Ҡатынды ун көн буйы ентекләп тикшерҙеләр. Ун беренсе көндө, иртәнге аштан һуң (үлем язаһын раҫларҙармы, әллә аҡларҙармы тип көткән енәйәтсе хәлендә булғанғамы, Нәфисә туғыҙ йыл элекке был ваҡиғаларҙы кисәгеләй хәтерләй) уны врачҡа саҡырҙылар.

Барышлай елпенә ине әле Нәфисәнең өмөтө. Әммә кабинетта Исмәғилде күреү менән шомланды. Ә инде ире үҙенә хас булмаған илгәҙәклек менән ишек төбөнә үк килеп ҡаршылағас, шиге тағы ла нығыны. Табибтың үҙенә тура ҡарарға ла ҡыймай: «Ҡыҙғаныс, тик һеҙҙе ҡыуандырырлыҡ һүҙ әйтә алмайым», — тип ауыҙ эсенән генә мығырҙауын тәүҙә ныҡлап аңламай торҙо.

Аңлағас, йөрәге өҙөлөп төштө, үҙе лә, донъя ла буп-буш, мәғәнәһеҙ булып ҡалды. Тик үлтереп йоҡоһо килде. Бары шул ғына. Илар, ярһыр тип хәүефләнеп көткән ирҙәргә ҡалҡып та ҡарамайынса ишеккә йүнәлде. Бүлмәһенә ҡайтып шым ғына йомарланып ятҡайны, артынан Исмәғил инде. Ҡарауаттың ситенә ултырып, ҡатынының ҡулынан һыйпаны: «Илап ал, — тине ул. — Илап ал». Нәфисәнең гер аҫылған кеүек ауыр ҡабаҡтарын көскә күтәреп ризаһыҙлыҡ менән: «Йоҡом килә, илағым килмәй», — тиеүенә бөтөнләй шомланды. «Ила инде. Ике төрлө стресс була: ҡоро стресс, еүеш стресс. Еүеш стресс ваҡытында күҙ йәше менән бергә эндоморфин тигән гормон бүленеп сыға. Был кемделер яратыуға бәрәбәр икән. Был гормондар кешегә йән тыныслығы бирә, күңелен күтәрә. Шуға күрә илаһаң, еңелерәк. Ә ҡоро стресс бик ҡурҡыныс. Ул күңел төшөнкөлөгөнә килтерә, — тип лекция уҡып ташланы ире. — Шуға күрә һиңә иларға кәрәк», — тип ҡыҫтаны. Әйтерһең дә, «кәрәк» тип кенә илап була.

«Йоҡом килә, — тине Нәфисә тағы. — Илағым килмәй». Ҡитһәң кит инде, ти ине ул был һүҙҙәре менән, сөнки балалары булмаясағын белгәс тә Исмәғил уны ташлап китер тип ҡурҡа ине. Шуға күрә иренең: «Мине

ике көнгә командировкаға ебәрәләр. Ҡайтыу менән һине килеп алырмын», — тигән һүҙҙәренә лә ышанманы, хәйләләшеп, мәңгелеккә хушлаша, тип ҡабул итте. Әммә уға барыбер ине. Иренең сығыуын да көтмәй, күҙҙәрен йомдо.

Йоҡлап китеү менән һаташа башланы. Имеш, ул Исмәғилдең түшенән матҡып тотоп алған да ебәрмәҫкә тырыша. Ә ире ытырғанып уны йолҡоп ырғытмаҡсы, шуға күрә бармаҡтарын берәм-берәм шаҡарып нисек тә ысҡындырырға маташа. Тик Нәфисә бирешмәй, тағы ла нығыраҡ йәбешә. Айҡаша торғас, Нәфисә иренең сәсенән эләктереп алды. Әммә сығырынан сыҡҡан Исмәғил уны йән асыуы менән һелкетә тартып ала ла әллә ҡайҙа бырғай. Ялпашып барып ятҡан ҡатын саң араһынан мүкәйләп килеп иренең аяғынан ҡосаҡлай, хатта үлем дә уны айырып ала алмаҫ кеүек.

Тертләп уянып киткән Нәфисә төш менән өндө айыра алмай байтаҡ ятты. Ныҡ тетрәнһә лә үҙ хәле үҙенә саҡ булғанлыҡтан, онотолған, әле килеп төшөнә ингән ваҡиға хәтерендә яңырҙы.

Бер нисә көн элек тышта аҡырып илаған бала тауышына тәҙрәнән ҡараһа, йәш-йәш ярымдай бер сабый үҙен күтәргән ҡатындың сәсенә сат йәбешкән дә, алып китергә маташҡан шәфҡәт туташына бирелмәй тыбырсына, ҡолаҡ ярғыс итеп аҡыра. Уның бәләкәс кенә йоҙроҡтарын бер нисек тә яҙа алмайҙар.

Аптырағас, ҡатын үҙе баланы йән көсөнә тартып алды ла, сәсенең услам-услам булып йолҡоноп сығыуына һыҙланыуҙан сытрайып, ҡыҙыҡайҙы шәфҡәт туташына тотторҙо. Ә сабый үҙен алып китергә теләүсенең битен тырнай, тешләшә, әйтерһең дә, ситлеккә ерергә теләмәгән йыртҡыс.

«Сабыйҙар йортонда тәрбиәләнгән йәтимәне ярты йыл элек үк ниндәйҙер сир менән һалғандар ҙа оноҡҡандар. Үҙенең сиренән дауаланғас, больницалағы балаларҙан башҡаларын йоҡтороп ауырыуҙан башы сыҡмай. Тиҫтерҙәре күптән атлаһа, был карауат ситенә йәбешеп саҡ баҫып тора, күберәк ситлектәге януар кеүек үткән-һүткәнде аңдып шым ғына ултыра. Эргәһендә саҡ ҡына туҡтаныңмы, итәгеңдән эләктереп ала ла ысҡындырмай, илаш-тартыш китә. Тарыма, тарыһаң — арыма, тигәндәй, ҡулыңа алдыңмы — бөттөң. Ысҡындырырмын тимә. Аҡыртып саҡ йолҡоп алаһың. Унан инде һуйырға алып барған сусҡа балаһыныҡы кеүек имәнес тауышынан ҡолағыңды тығып ҡасаһың». Был бала хаҡында шулай һөйләгәйнеләр.

Төшөндә үҙен ошо ташландыҡ сабый рәүешендә күреп баҫлығып уянған Нәфисә ҡапыл етемлектең аянысын бөтөн булмышы менән тойҙо. Ташландыҡ булыуҙың әсенешен... Шуға күрә икенсе көндө үк, Исмәғилде көтөп тә тормай (хәйер, иренең үҙен айырғанына шикләнмәй ҙә ине), теге баланы ҡосаҡлап ҡайтты ла китте Нәфисә. Ирен яҡшы белгәнлектән, больницала ҡаршы килмәнеләр. Бәлки, бер-ике көн әүрәтеп алып килһә лә сауап тип уйлағандарҙыр.

— Сабыйым, карауатына эйәлеүем булды, яғамдан матҡып тотоп алды ла бүтән ысҡындырманы. Үҙе арбарға маташҡан булып ҡара мәрйен кеүек күҙҙәрен тултырып-тултырып күҙемә ҡарай. Үҙе инде йылмая, инде йылмая.

Өйгә ҡайтҡастын да арып йоҡлап киткәнсе аҫылынып йөрөнө. Йоҡлағастын урынға һалыуым була, тертләп уяна ла ҡабат йәбешә. Шул килеш ҡосаҡлашып йоҡланыҡ. Иртәнсәк балағынамдың ипләп кенә битемдән һыйпауына уянып киттем. Ә ул, күҙемде асҡанымды күреү менән, сәсемдән умырып тотоп алды.

Исмәғил баланы алырға ҡаршы булманы. Сабыйҙар йортона документтарҙы рәсмиләштерергә барғайны, беҙҙең ҡыҙсыҡтың бер туған ағаһы барлығын әйткәндәр. Шулай итеп беҙ, көтмәгәндә, ике балалы булып киттек.

...Нәфисә үткән йылдарын тиҫбе тартҡан кеүек берәм-берәм барлап кисерештәрҙе, ваҡиғаларҙы аҡтара, наҙҙарына сәсәп сабый көҫәгән өс ҡатын — Валя, Мәрйәм һәм үҙе алдында әле ҡылған гонаһын аҡларҙай сәбәп эҙләй. Таба алмай.

— Шунан һуң да нисек... Нисек ихтыяр иттең? — тип ярһып тауыш бирә Валя. Берећенән-береће аяуһыҙыраҡ әллә күпме һорау бирер ине, сабыр Мәрйәм:

— Валя, Валентина... — тип уны бүлдерә, аяу һорағанды типкеләргә ирек бирмәй.

...Ҡайһы бер ир-ат бит хатта үҙ балаларына ла оҙаҡ өйрәнә. Исмәғил етемдәрҙе бөтөнләй үҙ итмәне. Ҡулына алғанда ла микроблы әйбергә ҡағылғандай һағайып, сирҡанып тотондо. Ә бала күңеле былай ҙа һиҙгер, ә аҙмы-күпме етемлекте татығаны айырата. Сабыйҙарҙың наҙға сарсаған яралы күңеле эсәгә яғылды. Улар үҙҙәренең рәхмәтле һөйөүе менән уның йәрәхәтен дауаланы. Үҙен бәхетле тойорға Нәфисәгә Исмәғил менән балалар араһындағы битарафлыҡ ҡына ҡамасаулаһы. «Үҙ балаһын һөйөү бәхетенән мәхрүм иттем». Ошо тойғо үтмәҫ бысаҡ кеүек гелән бәғерен телгеләп, үҙен ғәйепле тойоп йәшәргә мәжбүр итте. Үҙәгенә үтеп әрнегән ваҡытта һүҙ башларға маташып та ҡараны хатта: «Үҙеңде ҡорбан итеп, беҙҙең менән йәшәмәйһеңме әллә, Исмәғил? Тиңеңде табып өйләнһәң, балаларығыҙ булһа»...

Бөгөнгөләй хәтерендә: үҙе яратҡан моңһоу көҙҙөң ҡотло бер эңерендә, тышта шыбыршыбыр ямғыр илағанда, аш-һыу еҫе таралған өйҙөң рәхәтен тойған һил мәлдә әйтте был һүҙҙәрен. Исмәғил ҡара көйөп, ҡырыҫланып китте: «Нимә етмәй һиңә?» — тип екереп ҡуйҙы. «Һинең бәхетең етмәй», — тип әйтеһе килгәйне Нәфисәнең, тик һүҙҙе ҡуйыртырға ихтыяры етмәне. Хәйер, Исмәғилдең үҙен ташларға теләмәүен белеү ғәйәт ҙур бәхет ине. Шул бәхеттең ҡәҙерен белеп, иренең әйтелмәгән, зиһенендә яңы ғына ялған теләктәрен дә ауларға өйрәнеп, теләһә ҡасан йәнен йолҡоп бирерҙәй булып йәшәне ҡатын. Тик кемдеңдер күңел китегендә үҙеңде ғәйепле тойоу уғата ауыр нәмә, яурынды ғына түгел, рухты баҫа. Баҫылғайны, күңгәйне кеүек. Әгәр ҙә Исмәғилдәрҙең больницаһына яңы табибә, анестезиолог ҡыҙыҡай килмәһә...

Яңы ғына медицина институтын тамамлаған был ҡыҙ ысынлап та бик сибәр һәм, сибәрлеген яҡшы белгәнлектән, үтә тәкәббер ине. Уның һауалы ҡарашында, башын текә тотоп, бәүелә биреп атлап йөрөүендә ир-аттың тыныслығын юҡҡа сығара торған арбағыс, сәмен ҡайната торған ҡоторҡос көстө ҡатын кеше булып та Нәфисә лә тойҙо. Сөнки уның үҙенең дә ошолай дорфа һылыу,

«мин-мин — мин кем» тип йөрөгән саҡтары бар ине.

Шул мәленән кәмһенеүле бөгөнгөһөнә, күтәргеһеҙ ғәйеп йөкмәгән төшөнкө яурындарына ғәрләнеп ҡарап торҙо. Исмәғилдең ғәҙәттә хирург бысағы кеүек һалҡын йөҙө һуңғы осорҙа ҡояш нуры төшкәс йылҡылдап уйнаған тутыҡмай торған ҡорос кеүек балҡый. Нәфисә бының сәбәбен белә һәм уның йөҙөнә үҙенең нуры яғылыуын теләй. Ә Исмәғил, киреһенсә, уның һәр еренән йөй эҙләй: көләс булһа ла, моңһоуланһа ла, хәүефләнеп шымһа ла сәнсеп алырға тора. Бының да сәбәбен төшөнә Нәфисә: Исмәғилдең күңел бизмәне тирбәлә. Бер яҡта — Нәфисә, уның мөләйем сабырлығы, мөлдөр наҙы, икенсе яҡта — йәш һылыуҙың ылыҡтырғыс дәрте, балҡып торған сағыу сибәрлеге, яндырай шаянлығы. Ҡайһыһы еңер тип баш ватҡан Нәфисә ҡайһы берҙә тыныслана яҙа: ҡыҙыҡай бигерәк елбәҙәк, еңел холоҡло. Ә Исмәғил ҡатынының сабыр аҡылына күнеккән. Улай тиһәң, Нәфисә янында Исмәғилдең барлыҡ өмөттәре йә ғәмәл, йә төңөл. Ә йәшлек уға өмөт тулы өр-яңы яҙмыш тәҡдим итеүе менән отошло. Отошло. Ә инде ул ҡыҙыҡай Исмәғилгә бәпәй ҙә табып бирһә... Көнләшеүҙән Нәфисәнең күҙ алдары ҡараңғылана, йәне тулай.

Шунда үҙенде туңырға ла, күнергә мәжбүр итергә булған да бит. Ә ул көрәш ҡомарына бирелеп китте.

Бер нисә йыл элек таныш ҡатын үҙенә ярҙам иткән имсе ҡарсыҡтың адресын биргәйне. Шуны әллә ҡайҙан табып, эҙләп китте. Бөгөнгөләй хәтерендә — ҡара көҙҙөң ҡотһоҙ



бер көнө ине. Асфальт түшәлмәгән бысраҡ, тар урамдан тая-тая йөрәкһенеп атланы. Юлы уңмаҫын һиҙенгән һайын нығыраҡ ашыҡты. Адрестағы өй урынына емерек мейес менән ҡыйшайған рәшәткә генә ҡаршы алды уны. Алдағы көндәренә ишара кеүек ҡабул итте Нәфисә был һөмһөҙ күренеште. Иң яҡын кешеһенең күкрәп торған донъяһы урынына ҡара ҡәбергә тап булған кеүек ҡайғырып, бер ботағы һынып аҫылынған ҡарт ағастың кәкре олонон ҡосаҡлап, ҡысҡырып-ҡысҡырып иланы. Яҡын-тирәләге өйҙәр урыны ла буш: сәсеңде йолҡоп олоһаң да ишетеүсе булмаҫ кеүек тойолғайны. Ҡайҙан килеп сыҡҡандыр — бер әбей яурынына ҡағылды. Белә икән имсе әбейҙең күскән ерен, ялындырып ҡына булһа ла әйтте. «Бик бөлөнгән, ҡарармы икән?» — тип шикләнде.

Такси ялланы ла юллап китте Нәфисә. Бер илар, бер көлөр көнө булған икән. Ҡортҡа тәүҙә ишек асмай ыҙалатты. Ә эскә индергәс, тәфсилләп, ентекләп ҡараны. «Сәләмәтһең бит, — тине. — Бәпәй тапмауың — гонаһ». Ҡолаҡтарына ышанмай ҡат-ҡат ҡабатлатты был һүҙҙәрҙе Нәфисә. Ышаныр ине — үтә ҙур ҡыуаныстан аҡылын юйыуҙан хәүефләнде, ышанмаҫ ине, әрнеүҙән бүккәйне.

«Ирең менән бергә килегеҙ, — тине әбей. — Сәбәп унда түгелме икән?»

Исмәғил тәүҙә был хәбәргә асыуланды, унан көлкөгә һабыштырҙы. Әбейгә барыу ҡайҙа, ишетергә лә теләмәне. Аптырап яңынан китте Нәфисә. Әбей түшәктә ята ине инде. Кешегә һыуһап, яңғыҙ зарығып ятҡан мәле булғанғамы, ихласлап бик оҙаҡ һөйләште. «Төрлө хәлдәр була. Йә ирең сирлелер, йә ике-

геҙ ҙә һау-сәләмәт тә, бер-берегеҙгә тап килмәйһегеҙҙер».

«Тап килмәйһегеҙҙер», — тигән һүҙҙәр Нәфисәнең йөрәгенә беҙ булып ҡаҙалды. «Теге ҡыҙ менән тап киләләрҙер», — тигән кеүек булды.

«Нишләйем һуң?» Йәнде әсеттереп ялбарып баҡты, тонйорап ҡараған күҙҙәре тәгәрәп кенә төшөр ҙә селпәрәмә ярылыр кеүек тойолдо.

«Улай ҡарама әле һин, — тине имсе. — Донъя емерелгәндәй ҡайғыраһың. Бөтәһенә лә еңелерәк ҡарарға кәрәк. Был тормошта ҡалҡыуыс кеүек өҫтән генә йөҙмәһән, йәшәүе ай-һай.

Үҙеңде һынар өсөн күңелең тартҡан башҡа менән ҡушылып ҡара. Күпме ҡатын-ҡыҙ китек донъяһын шулайтып түңәрәкләне. Бер кем, бер нәмә белмәҫ».

Был хаҡта ишеткеһе лә килмәгән Нәфисә ытырғанып баш сайҡаны ла өмөтөн ҡабат йыназалап ҡайтып китте. Әммә аңының иң төбөндәге бер күҙәнәгенә барып боҫҡан был мәғлүмәт, алманы кимергән ҡорт кеүек, үҙ эшенә тотонғайны инде. «Бер кем белмәҫ... Түңәрәкләне. Аналыҡтың түлен мәхрүм итеү — гонаһ».

Ә тормошо ауа-түнә бара. Исмәғилдең һалҡын ризаһыҙлығы боҙ ҡаяға дыңғылдатып бәрә лә... ғәрлек, рәнйеш, көнсөллөк тойғолары бергә ҡушылып үлемесле ыуға әйләнә. «Ни эшләргә? Ни ҡылырға?»

Аңы өҙгөләнеп һорау ҡуйғанда, төпкө аң аҫтыртын ғына яуап әҙерләй. Нәфисә үҙе аңғармай, ә зиһене һәр ваҡ-төйәгенә тиклем иҫтә тотоп хаслыҡ ҡылырға әҙерләнгән тәжрибәле енәйәтсе кеүек киләсәкте әүәләй. Ҡа-



тын үҙе лә һиҙмәҫтән ир-аттың һоҡланыулы ҡараштарын аулай. Элек, Исмәғилдең һөйөүенә ышанған мәлендә, йәнен генә көйҙөргән был ҡараштар әле уға һулар һауа, яраһына япҡан юл япрағы кеүек.

— Исмәғилгә оҡшап ҡына торған һомғол буйлы, оҙонса битле, ҙур күҙле йәш кенә егет ине ул. Беҙҙең мәктәпкә килгәс тә миңә ғашиҡ булғанын, осраған һайын оялсан ҡыҙҙар кеүек ҡыҙарынып, аңшайып ҡалыуынан уҡ тойоп ытырғана торғайным. Уның менән бер тапҡыр бергә булғандан һуң, бөтөнләй күрә алмаҫҡа әйләндем. Ә ул, ҡыуанысынан күктең ете ҡатында йөрөгән кеше, бер ни аңламай ҡалды. Шуға күрә һыуынныуымдың сәбәбен үҙенән эҙләп өҙгөләнде.

«Башҡа бер тапҡыр ҙа күҙемә күренмәһәң ине», — тип үтенгәсем, ҡаланан бөтөнләй китеп барҙы. Яратмаһаң, һинең өсөн утҡа ташланырға, һыуға батырға әҙер кешегә лә шул тиклем аяуһыҙ булып була икән. Хәйер, мин Исмәғилдең үҙемде яратмауының, үҙемдең уны онота ла, әүрәтә лә алмағанымдың үсен донъялағы бөтөн ир-аттан алырға, һәр береһен өҙгөсләп ырғытырға әҙер булып ҡыҙғайным. Балаға уҙырмын тигән уй ҙа күптән башымдан сығып осҡайны. Шуға күрә күңелем болғана башлағас, ярамаған нәмә ашағанмындыр, тип врачҡа барып йөрөнөм. Ауһарлыҡ инде.

Нәфисә ҡаны ҡасҡан нәҙек ирендәрен ҡыйшайтып күңелһеҙ генә йылмайып ҡуйҙы.

— Баланан ҡотолорға нисек өгөтләй алды һуң һине ирең? — тип һораны баянан бирле бер һүҙ өндәшмәй тыңлап ҡына ятҡан Мәрйәм.

— Ул бит һалҡын ҡанлы, айыҡ аҡыллы кеше. «Бәхетһеҙ бала тыуасаҡ. Һинең мәсхәрәңде икебеҙгә лә хәтерләтеп торған ҡәҙерһеҙ бала, бысраҡлыҡтан яралған йән эйәһе, — тине. — Беҙгә бер-беребеҙҙе яратыр өсөн ул баланың һис кенә лә кәрәге юҡ...»

— Әҙәм аҡтығы ул. Хәшәрәт.

— Валентина...

— Тыйма әле мине, Мәрйәм, — тип йәне көйөп ҡулын һелтәне Валя. — Һин шул әҙәм аҡтығын тыңланыңмы? Ә, Нәфисә?!

— Минән бала булмай, тигәнен ишеткәс кенә уның мине ни тиклем ратҡанын аңланым. Ул нисәмә йылдар буйы тышҡы ҡырыҫлығы артында мине юғалтыуҙан ҡурҡып, ғазапланып типкән йөрәгенең әрнеүен йәшереп йөрөгән. Ә мин, ғүмер буйы, балабыҙ юҡ тип үрһәләнеп, уның ҡанһыраған яраһына тоҙ һалып торғанмын. Серен белгән булһамсы... Ғүмер буйы бер-беребеҙҙең тойғоларына шикләнеп әрәм булғанбыҙ. Шуның арҡаһында ниндәй көнгә төштөм. Әйтерһең дә ратҡан кешеңә хыянат итеп бәхет яулап була?

— Балаңды үлтереп бәхетле була алырмын тип уйлайһыңмы?

— Полякова, — тип ҡырыҫ ҡына туҡтатты уны палатаға килеп ингән табибә. — Былай булһа, һине өйөңә ҡайтарып ебәрергә тура килер. — Унан Нәфисә янына туҡтап ҡулын тотто. — Йә, балаҡай, хәлең нисек?

— Ебәреп тора ла тағын тота, тағы ебәрә.

— Оҙаҡҡа һуҙылды был, — тип хәүефләнде табибә.

— Сабыйҙың үлгеһе килмәй... — Валя ҡыҫылмай булдыра алманы. Ул һаман, үҙе әйтмешләй, «бөтәһен дә туҡтатып» була, тип өмөтләнә, шуның өсөн ҡырталаша ине.

— Полякова...

— Тыуғыһы килмәй, үлгеһе килмәй, — тип көсһөҙләгәнән үкһеп үҙенекен тылҡыны тегеһе.

— Юҡ, бында аҡылдан шашырға мөмкин, — тип асыуланған доктор Нәфисәне алып сығып китте.

Нәфисәне иртәнсәк кенә арбаға һалып алып инделәр. Ниһәйәт, тән ғазаптарынан ҡотолған ҡатынды алҡымынан алған йән ғазаптары хатта йоҡоһонда ла ысҡындырмай ине. Таңға ҡаршы ғына йоҡлап киткән Мәрйәм менән Валя уның үкһеүенән уянды. Һулыған йөҙө йәлләүес итеп сырышҡан, сикәләренән субырҙап йәш аға, үҙе һулҡылдай. Валентина өндәшергә уҡталғайны, Мәрйәм тыйып өлгөрҙө:

— Йоҡлаһын әйҙә, уянһа тағы ла ҡыйыныраҡ булыр.

— Эй, йәл дә инде, ибет. — Нәфисәнең карауаты янына сүкәйгән Валя мәрәкә күреп тупыҡ бармаҡтары менән тырпай керпектәргә тейеп ҡараны. Унан матур танауына ҡағылды, дуғаланып торған ҡаштарын һыпырҙы, аҡ мендәр өҫтөндә туҙраған сәстәрен рәтләп һалды.

«Ҡара тулҡын өҫтөндә тирбәлгән аҡ томбойоҡһоң һин, — тип бышылданы үҙе. — Ҡарынымдағы балам һинең кеүек һылыу, аҡыллы булһын, һинең кеүек мөкиббән ярата белһен. Ә һин минең сабыйым кеүек бәхетле бул. Икегеҙ ҙә бәхетле булығыҙ. Мин ҡыҙымды нисек яратам, һине лә берәү шулай ратһын, аяп, ғәфү итеп, йәнен фиҙа ҡылып. Улдары-

ғыҙ, ҡыҙҙарығыҙ тыуһын. Яратыр, әлбиттә, яратыр. Тыуыр, әлбиттә. Шул тиклем матурлыҡ был донъяға ғазап өсөн генә яратылмаған бит инде».

Был һүҙҙәрҙе ишеткәндәй, Нәфисәнең үкһеүе баҫылды.

— Һин нишләйһең унда? Әллә доға уҡыйһың инде, — тип һораны быға са йоҡомһорап ятҡан Мәрйәм.

— Бәхеткә ойотҡо һалам. Миңә психотерапевт ошолай итеп баламдың иҫән-һау тыуасағы хаҡында ышаныс һендерә бит.

Нәфисә төш етәрәк ҡапыл тертләп уянды ла, ҡайҙалығына төшөнә алмағандай ята биргәс, ҡапыл тороп тәҙрәгә ябырылды. Ҡатындарына ҡысҡырып хәбәр һөйләгән, күстәнәс ебәргән ир-ат араһынан эске ярһыуын тыйырға тырышып ирен эҙләне. Унан врач бүлмәһенә йүгерҙе: Исмәғилдең шылтыратмағанын белеп, саҡ аяғын һөйрәп килеп инде лә бер һүҙ өндәшмәй йомарланып ятты. Төрлөсә күңелен табырға маташҡан ҡатындарға ла һүҙ ҡатҡыһы килмәне. Тағын тәҙрә янына барып баҫты, ҡабат ятты. Унан ҡайтырға йыйына башланы. Табибә асыуланып та, өгөтләп тә ҡараны.

— Ҡайтарығыҙ инде, — тип ялынды Мәрйәм менән Валентина ла. — Такси саҡыртайыҡ та.

Валя иренән аҡса һорап алып бирҙе. Шәүлә кеүек кенә ҡалған ҡатынды машинаға оҙатып моңһоу ғына ҡул болғап ҡалдылар.

Өйөндә үҙен ҡот осҡос һәләкәт көтөп торғандай ҡурҡыулы ашҡыныу менән ҡайтты Нәфисә. Хатта уға ни өсөндөр йорттары ла урынында булмаҫ кеүек тойолдо. Күргәс, еңел



һуланы. Лифт эшләмәй ине. Ни тиклем ярһыһа ла, кәүҙәһен ташлап сыға алмай бит инде, хәлһеҙлектән башы әйләнеп, һәрмәнеп кенә менде.

Нимәгә ашҡынғанын белмәһә лә, ашығырға кәрәклеген һиҙҙе. Һуңлаһа, ниндәйҙер ғәзиз нәмәһен мәңгелеккә юғалтыр кеүек ине.

Ниҙәлер ишек бикләнмәгән. Шым ғына килеп инде лә, бүлмәгә һонолдо. Исмәғил теге һылыуҙың яурынан ҡосаҡлаған да, күҙҙәренә ҡарашып йылмаялар. Иренең йөҙөндәге бәхетле йылмайыу шул тиклем матур тойолдо ҡатынға. «Скальпелдә сағылған ҡояш нуры кеүек...» — тип уйланы ла ишек төбөндәге ике ҙур сумаҙанды абайлап, сайҡалып ҡуйҙы. Тегеләр ҙә уны күреп тертләне. Ағарынып киткән Исмәғил йығылырға бирмәй килеп ҡосаҡлағас, өмөтө ялтлап ҡуйғайны... Диванға ултырттылар. Һыу, дарыу бирҙеләр. Табибтар рәтен белә бит инде.

— Ятып торһаң, үтер, — тине Исмәғил. — Мин китәм инде. Был хәлдән һуң барыбер бергә йәшәй алмаҫ инек. Мин барыһын да яңынан башлап ҡарамаҡсы булдым. — Унан эргәһендәге һылыуҙың арҡаһынан һөйҙө. — Ул бөтәһен дә белә. Уға бала кәрәкмәй.

— Шулай булырға тейеш, — тип бышылданы Нәфисә. — Барыһы ла дөрөҫ. — Үҙ-үҙен ҡосаҡлап диванға ятты. — Дөп-дөрөҫ. Шул кәрәк миңә, — тип өҫтәне. Шунан үҙе лә аңламаҫтан: «Ҡара тулҡын өҫтөндә тирбәлгән аҡ томбойоҡ һин, — тип әйтеп ҡуйҙы. — Бәхет өсөн яратылған аҡ томбойоҡ».

— Әү, — тип эйелде сәйерһенгән Исмәғил.— Әү, ишетмәйем.

— Үҙемә әйтәм, — тине Нәфисә вайымһыҙ

киәфәт менән. — Үҙ алдыма һөйләнеүем. Һеҙ китә һалығыҙ. Балалар мәктәптән ҡайтҡансы китеп өлгөрөгөҙ...

## «ҠАЙТ, ҠОТОМ, ҠАЙТ...»

Ҡил, ҡотом, кил, ҡотом,
Эйәләрең бында, ҡотом,
Ағын һыуҙай ағып кил,
Аҡ балыҡтай йөҙөп кил.

*Ҡот ҡайтарғанда әйтелә торған һүҙҙәр.*

— Эй яратам да инде ағайыңды, белһәң ине, — ти Сәғиҙә. Беҙ уның менән йүгерә-атлай фермаға киске һауынға китеп барабыҙ. Дөрөҫөрәге, Сәғиҙә йүгерә: аяғы тейгән ерҙә тейә, теймәгәндә — юҡ. Мин уның артынан ҡалмаҫҡа була ғына бышлығып йүрмәләйем.

— Иртәнсәк уянып уны янымда күрәм дә ҡыуанысымдан көлөп ебәрәм. Шатлығым эсемә һыймай. Осоп китмәй саҡ-саҡ түҙәм, хас та эсенә тын тултырылған шар кеүек, — Сәғиҙә тештәрен йылтыратып шыңғырҙатып көлә. Унан, ҡапыл етдиләнеп, күҙемә ҡарай. Эсем янып, йәнем ҡарайып килгәнде һиҙгән кеүек. — Ысын. Төндә, баҫып килгән татлы йоҡоно ҡыуалап, айҡашып ятам. Уның янында булған ваҡытымдың ҡәтрәһен дә әрәм иткем килмәй. Их, әхирәт-бикәс, минең ни тиклем бәхетле булғанымды белһәң икән!

Уның булмышынан бөркөлгән нур көлтәһе тос табаҡсаларын аҫҡа эйгән көнбағыш баҫыуын яҡтыртып ебәрә, юлдың уң яғындағы ҡайындарҙың тәлгәштәрен алтынға мансый.

— Белһәң икән!



Әхирәт-еңгәм йылмая-көлә мине ҡосаҡлай, ағайыма булған һөйөүе ташып түгелә, унан миңә лә, аяҡ араһында буталып эйәреп килгән ерән көсөккә лә өлөш сыға.

«Белмәһәм икән. Ни тиклем бәхетһеҙ буласағыңды ла белмәҫ инем, — тип уйлайым мин күңелем тулып. — Бәхетеңдән шул саҡлы кинәнмәһәң, ул тиклем бәхетһеҙ ҙә булмаҫ инең, бәлки».

Алҡымымды йыртып алып барған төйөрҙө көслөк менән йотоп ебәрәм дә, үкһеүемде йәшерергә теләп, һөрләгөп киткән булам. Ә ҡолағымда Тимерхандың тауышы: «Һылыу, мин Сәғиҙәне яратмайым. Әнисәне яратам. Бөгөн кискә уның менән Себер сығып китәбеҙ. Әйберҙәр соланығыҙҙа тороп торһон инде. Һеҙ киске һауындан ҡайтҡансы ҡустылар поезға матас менән алып сығып ҡуйыр. Әлегә бер кемгә лә әйтмә, йәме?»

Сәғиҙә көлә-шаярта өҫ-башымды ҡаға ла сикәмдән яратып ҡына үбеп ала. Унан, ҡулдарын ҡанат кеүек итеп йәйеп, туңдан түбәнгә йүгереп төшөп китә, аҡ күлдәгенең киң итәге матур итеп елберҙәй. Ул бына-бына ерҙең тартыу көсөнән арыныр ҙа, аҡҡошҡа әйләнеп алыҫҡа осоп китер кеүек. «Китһәң ине», — тип теләйем мин әсенеп.

— Белһәң икән, — тип ҡысҡыра-ҡысҡыра йүгерә ул. — Тыумаҫ борон ҡартайып, тигеҙ ерҙә абынып йөрөмәҫ инең.

«Ә һин саҡ ҡына уяуыраҡ булһаң, аңғармаҫтан килеп ингәнеңә тертләп солан мөйөшөндәге әйберҙәр өҫтөнә кейеҙ ырғытҡанымды абайлар инең...»

Йәшемде тыя алмай үкһейем. Үҙем тыйыла алмағаныма йәнем көйөп юл ситенә сығып

ултырам: бәлки, Сәғиҙә көтөп тормаç, китер. Ҡайҙа инде ул. Елдереп килеп менә лә: «Әлдә үпкәләнең инде», — тип борсолоу ҡатыш көлөп мине ҡосаҡлай. Ҡүҙ йәшемде һөртә, тубығымды һыйпай.

— Түҙгеһеҙ ауырта, — тип бала кеүек бәлә һалам мин. — Һеңере тартылғандыр.

Үҙем уның эске нурҙан балҡып торған һөйкөмлө йөҙөнән күҙемде айырып ала алмайым.

— Нишләп улай ҡарайһың? — ти ул сәйерһенеп.

Тиленең теле өлгөр була бит ул, үҙем дә һиҙмәçтән:

— Һинең бәхетле сағынды хәтерләп ҡалғым килә, — тип әйтеп һалам.

Алай ҙа аңғарып өлгөрмәй, мотоциклда фермаға китеп барған хисапсыны туҡтатып, мине ултыртып ебәрә.

— Ҡарточкаға төшөрөп ал һуң, миңә лә бирерһең, — тип шаяртып тороп ҡала ул. Ә минең шул тиклем үҙәгем өҙөлә: иң яҡын кешемде ерләгән кеүек. Тәүбә, тәүбә...

* * *

Минең алғы өйҙөң мейесе эргәһендә маташыуымды абайламаған Сәғиҙә туп-тура төпкө бүлмәгә үтте лә эйелеп карауат аçтын ҡараны, мейес башына үрелде, унан шифоньерҙың ишеген асып япты. Эҙләгәнен күрмәгәс, аптырап ҡарап тора бирҙе лә, башына ниҙер килеп, яңынан шифоньерға уҡталды. Уның уйын аңлаған ыңғайға, шаршау артынан яҡтыға атланым. Иҙән таҡтаһының шығырҙауын ишетеп һиçкәнгән Сәғиҙә алып өл-



гөргән нәмәһен усына йомдо ла, эскеселәргә хас йәлләүес ялағайлыҡ менән йылмайған булды.

— Берәй ҡаҡһыған балың булһа ла ултырмаймы тигәйнем?

Үҙе ҡулдарының ҡалтырауын ҡайһылайтып йәшерергә белмәй аптыранды. Йыбытҡыға әйләнеп барған эскесе бисәләрҙеке кеүек тәпәрләнгән йөҙөнә хаяһыҙлыҡ яғылған. Ҡиәфәтенән ерәнеүемде тыя алмай:

— Ҡулыңдағы хушбуйҙы бир әле бында, — тип һонолам. Үҙемә шул тиклем оят, үҙем өсөн дә, уның өсөн дә... Ә ул, урлап алған уйынсығын йәшергән уғры бала кеүек, хәйләһеҙ төç сығарырға маташа. Үҙе тамырҙары ҡалҡып торған ҙур, көслө ҡулдарын артына йәшергән, сырайын боҙоп, иламһыраған.

— Бирһәң, бер йөҙ грамм ҡоям, — тип ныҡыштым мин. Йөҙ грамды ишетеү менән ауыҙы йырылып киткән Сәғиҙә хушбуй шешәһен усыма йомдорҙо ла саҡырылып килгән ҡәҙерле ҡунаҡ кеүек эре генә өçтәл артына барып ҡунаҡланы.

Тимерхан (ул миңә ике туған, тик ағайым тиһәң, хәтере ҡалыр, теп-теүәл ете айға оло) ташлап киткәндән бирле мине күрһә, урамдың икенсе яғына сыҡҡан, лайыҡын сағында ла беҙҙең өйҙө урап уҙған элекке дуçым беҙгә инер көнгә төшкән икән, хәле ныҡ мөшкөлдөр. Сигенә етмәһә, ул минән «пахмил» һорап инмәç ине. Утын алдырырға кәрәк булыр тип келәткә йыйған яртынан бер стакан ҡойоп алып индем. Шешә асҡанды күрһә, төбөнә төшмәйенсә сығарып булмаç.

Уға, ашамай эсеп, ҡараһына ҡатып йонсоп бөткән әҙәмгә, шул етә ҡалды. Эскән кешенең

һөмһөҙләгенә хайран булырлыҡ. Сәғиҙәнең, йән серҙәшем Сәғиҙәнең, сәсе лаулайып, мәғәнәһеҙ күҙҙәрен кәпселәтеп ултырыуына ҡарап тора алмайым. Ни эшләргә белмәй, йомош табып тышҡа сыҡкан булам.

Ҡараһам, сатан аяғына ҡыйшайтыбыраҡ баҫып урамдан Нурғәле ағай атлай. Ҡатынының беҙгә ингәнен берәйһе әйткәндер, күрәһең. Туп-тура бында төбәп килә. Оялышымдан, ҡаушауҙан өйгә инә һалып, мейес араһына боҫам. Үҙем ҡотом осоп шаршау ярығынан Сәғиҙәге ҡарайым. Ул башын уңайһыҙ итеп өҫтәл ҡырына терәгән дә йоҡлап киткән.

Соланда мөһабәт кәүҙәнең ауырлығына иҙән шығырҙай. Нурғәле ағай ишек ҡаға. Өндәшмәйем. Инеү менән Сәғиҙәне күреп ауыр көрһөнөүенә йәнем әсенеп уртымды сәйнәйем. Өйрәнеп бөткән: иҫерек бисәһенең ҡулын йәтеш кенә итеп яурыны аша һала ла өҫтөрәп тышҡа алып сыға. Арттарынан солан ишеге ябылғанын ишетеп, тәҙрәгә йомолам. Сәғиҙә иләмһеҙ ҡыланып тыбырсына, үҙе йәмһеҙ тауыш менән аҡыра. Нурғәле ағайҙың түҙемлеге сигенә сыҡҡандыр, күрәһең, ҡатынын ҡапыл ситкә этеп ебәрә лә айыуҙыҡы кеүек дәү усы менән уның сикәһенә һуға. Утынлыҡтағы түмәр өҫтөнә барып төшкән Сәғиҙәнең ирен ситенән ағып сыҡҡан ҡып-ҡыҙыл ҡанды күреп улар араһына атылам. Күҙҙәре аларып ҡыҙышып киткән Нурғәле ағайҙың беләгенә барып аҫылынам. Уны тынысландырып маташҡан арала, Сәғиҙә, типкеләнгән эт кеүек шыңшый-шыңшый шыуышып, мунса соланына йәшенә.

— Уны ғүмер буйы күтәреп йөрөргә әҙермен тип анттар әйткән кеше һин түгелме



ни? — тип Нурғәле ағайҙың күҙенә текләйем. Ул Сәғиҙәгә һуҡҡан ҡулын ҡамсы кеүек һәләндергән килеш башын эйеп өй нигеҙенә барып ултыра.

— Уға һуҡҡан ҡулым бер көн килеп ҡорор инде тип үҙем дә уйлап ҡуям, — ти ул ғәйепле төҫ менән. Ирендәренә ҡыҙғаныс йылмайыу ишараты ҡуна. Уның йәнһеҙ кеүек аҫылынып торған уң ҡулын һулы менән тубыҡтарына һуҙып һалғанын күреп тәнем эҫеләһыуыҡлы булып китә. — Һул аяҡһыҙ, уң ҡулһыҙ ир́... — ул шоҡорайып ултырған килеш башлаған һүҙен йотоп тына. Булмышынан бөркөлгән һағыш... Йән ғазабы... Күңел төшөнкөлөгө...

— Ул тәки мине үҙ күреп китә алманы. — Тауыш әллә ҡайҙан һаңғырау ғына ишетелә. — Ә мин әҙәм балаһының ни тиклем көсһөҙ икәнен төшөнә барам, төшөнә барам. Ә бит кеше булдыра алмаған бер генә нәмә лә юҡ тип уйлай инем. Был ҡулдар... — ул көрәк кеүек дәү ҡулдарын тубығына һалып тәүгә күргәндәй әйләндереп-тулғандырып ҡарай. — Был ҡулдарҙың эшләмәгәне юҡ.

Һүҙҙәре раҫ. Нурғәле ағайҙың нисәмә йылдар буйы ҡуҙғала алмай ятҡан Мөслимә инәйҙе, күлдәк-ыштанына тиклем йыуып, үҙе икмәк һалып, һалма ҡырҡып, өф итеп ҡарағанын бөтә ауыл белә.

— Ике аяғым да имен саҡта белмәгәнде, сатан ҡалғастын һәпте юҡ бейергә өйрәнелде. Сәғиҙәгә был зәғиф телем менән күңелдәген төшөндөрөп биреү ауыр булырын һиҙемләгәстен, шиғыр ятланым, ҡалын-ҡалын китаптар уҡыным. Был беләктәрҙә таш ярырлыҡ көс. Ҡураныс ҡына Сәғиҙәмде ҡул осо-

на ғына күтәреп Ноҡас тауының иң түбәһенә алып менерҙәй ҡеүәт бар миндә. Был йоҙроҡтарҙа уны бер һуҡҡанда сәсрәтә һуғырлыҡ тослоҡ та бар. Ә бына унан үҙемде нисек яраттырырға белә алмайым... Нишләп улай ул, һылыу? — Ул миңә ҡуңыр күҙҙәре менән тишерҙәй итеп ҡарап яуап көтә. Ә мин нимә әйтә алам?

— Бөтәһе лә яйланған кеүек ине бит. Үҙебеҙгә күрә ҡотобоҙҙо ла, ырыҫыбыҙҙы ла тапҡайныҡ. Тимерхандың ҡайтып күренеүе булды, бер нәмәнең дә ҡәҙере ҡалманы. Хатта күҙ нуры кеүек ҡыҙыбыҙҙың да. Әсәнән берҙән-бер балаһын да онотторорлоҡ нindәй мөхәббәт һуң ул, һылыу?!

Әгәр ҙә бала Тимерхандан булһа, һөйөп туймаҫ ине, билләһи! Ә минең баламда бер ҡайғыһы юҡ. Шул хәҙәрлем дә һөйкөмһөҙ бәндәменме ни һуң мин? Улай түгел инем кеүек. Һөйкөмлө һөйәгем Ҡабра төбөндә өҙөлөп ҡалған аяғымда булды микән? Нимәһе артыҡ һуң шул Тимерхандың?

Ул йәнә күҙҙәремә аяныслы итеп ҡарай. Әйтерһең дә мин уларҙың тормошона хөкөмдар ҙа, яуабым яҙмышын хәл итәсәк.

— Баш осомда әллә ниндәй ҡарғыш аҫып ҡуйылған, ахыры, минең. Ул мораҙыма еткәнемде аңдып ҡына тора ла, инде үрелеп алам тигәндә аҫҡа ҡолата һуға ла төшөрә.

Шулай тигәндә икебеҙҙең дә уның, тубығы тәңгәленән өҙөлгән аяғынан шабырлап ҡан аҡҡанына ла ҡарамай, тештәрен ҡыҫып, Ҡабраның текә битенә сат йәбешеп үҫкән селеккә тотона-тотона өҫкә шыуышҡаны күҙ алдына килә.

— Ҡолата һуға, — тип ҡабатлай ул ауыр



һулап. Шунан алдындағы ҡурҡыныс шәүләне ҡыуып ебәргәндәй башын сайҡап ҡуя ла урынынан тора. Уның ҡапҡа яғына киткәненән бер һүҙ әйтә алмай ҡарап ҡалам да, киләгә йәбешкәс кенә үҙем дә һиҙмәҫтән:

— Ул бигерәк көләс бит, — тип ҡысҡырып ҡуям.

— Нимә тиһең, һылыу? — ти ул боролоп. Уның йонсоу ҡараштарының ауырлығынан бөрөшөп төшәм, тик, ни хәл итәһең, әйткән һүҙ — атҡан уҡ. Ҡабалана-ҡарһалана уйымды төшөндөрөргә маташам:

— Тимерханды әйтәм... Ул донъя тик рәхәттән генә торған кеүек итеп ҡыуанып йәшәй белә бит, тием. Моғайын, уның мөхәббәтле булыуының сере шундалыр. Яғымлы, көләс кешегә йәшәү нуры үҙе килеп яғылалыр.

Хәсрәтле уйҙарына батҡан Нурғәле ағайға әйткәндәрем барып етмәне, буғай. Ул миңә бер килке текләп тора бирҙе лә, хушлашып, ҡайтыу яғына ыңғайланы. Мин иһә ни ҡылырға белмәй аңшайған килеш уның артынан ҡарап ҡалдым. Мөһабәт ир яурындары төшөп, башын һәлендереп саҡ атлап бара, ә артынан бөткөһөҙ хәсрәте ҡара томан булып туғарланып эйәрә кеүек тойолдо. Ә мин, иҫәүән, көләс, ҡыуаныс тип хәбәр һөйләйем...

...Теге йылды уларҙы икенсе көндө кисләтеп кенә табып алып ҡайттылар. Киткәндәрен абайлап ҡалған йылҡы көтөүсеһе әйтмәһә, ул ерҙе ҡарарға бер кемдең дә башына килмәҫ ине. Сөнки текә тау биләнә йылышып тәрән йырындың ситенән генә үткән хәтәр юлдан аҡылы бар кеше машина менән үтмәҫкә тырыша.

Барһалар — күрәләр: текә ҡырланан ҡола-

ған йөк машинаһы әллә нисәмә тапҡыр аунап, түңкәрелеп барып төшкән. Ҡанға туҙған Нурғәле ағайҙы, дуҫы Рәмилдең үле кәүҙәһен ҡосаҡлап ибәтәйһеҙ итеп ултырған килеш, яҡындағы шишмә буйынан тапҡандар. Яурынына килеп ҡағылғас күтәрелеп ҡарап йән әсеһе менән:

— Ул тере ине бит, тере ине, — тип бышылданы ла ике сикәһенән берәр бөртөк кенә йәше ағып төштө тип һөйләнеләр. Ҡалғанын Нурғәле ағай үҙе һөйләне.

Рәмил машина ҡырыная башлау менән тышҡа һикергән. Рулдә ултырған Нурғәле кабинаның ишегенән һыңар аяғын ғына тығып өлгөргән дә, үҙәк өҙгөс ауыртыуҙан һушын юйған. Башҡаса бер ни ҙә хәтерләмәй. Иҫенә килгәндән һуң шыуышып сыҡһа, машинаның бортына ҡыҫылған дуҫы ята. Уны нисек һөйрәп сығарғандыр... Ауыҙынан ҡанлы күбек бөркөп ятҡан Рәмилгә үҙе ярҙам итә алмағанын аңлап, Ҡабраның текә битенән өҫкә үрмәләй егет. Һыҙланыуҙан аңын юғалтмаҫҡа тырышып, унда-бында үҫкән селек, тубылғы ботаҡтарына йәбешә. Яртылыҡты артылғас, бер мотоциклдың үтеп киткәнен ишетеп тауыш биреп ҡарай: ишетмәйҙәр. Торараҡ, инде менеп еттем тигәндә, берәүҙең шығыршоғор арбала йырлап килгәнен ишетә. Тағы ынтылһам, өлгөрәм тип серәшеп йән көсөнә бер үлән һабағына йәбешә лә, тегенеһе тамырынан йолҡоноп сығып, аҫҡа тәгәрләй.

Бахыр Рәмилдең көнө бөткән булған, күрәһең. Арбала йырлап килгән кеше һаңғырау Фәтҡулла бабай була. Бүтән кеше һис юғында Нурғәленең ыңғырашҡанын булһа ла ишетер ине.



Үпкәһе иҙелгән Рәмил, төнө буйы ғазаплanғандан һуң, иkенсе көндө төшкә ҡарай ғына йән биргән. Ә шул тиклем ҡан юғалтҡан Нурғәленең йәшәү көсөнә хатта күпте күргән врачтар ҙа аптыраған. Уға ҡан бирер өсөн ярты ауыл ике тапҡыр барҙы.

Яҡшы хеҙмәт иткән өсөн ун көнгә ялға ҡайтарылған Рәмилдең аяныслы үлеме менән Нурғәленең фажиғәһе генә етмәне. Яңғыҙ улын ер ҡуйынына тығып ҡайтҡастын ҡапыл йығылған Мөслимә инәйҙең ярты кәүҙәһе ҡуҙғалмаҫ булды.

Эскән килеш рулгә ултырып кешенең йәнен ҡыйған Нурғәле ағайға суд булды. Халыҡ судының күсмә ултырышын беҙҙең ауылда үткәрҙеләр. Башҡалар өсөн дә фәһем булһын тигәндәрҙер, күрәһең. Беҙҙең бәләкәй генә ауылдың тарихында бындай хәл булмағанлыҡтан, иҫке клубҡа халыҡ шығырым тулғайны.

Ҡултыҡ таяҡтарына таянып сәхнәгә сыҡҡан Нурғәле ағайҙың һәлпелдәп торған буш салбар балағын күргәс, ауылдаштар йәлләп бер ахылдашып ҡуйғайны. Ике әзмәүерҙәй ир Мөслимә инәйҙе күтәреп алдағы урынға алып барып ултыртҡас, һәммәһе лә шомло итеп шымды.

Ошо тынлыҡта хәсрәтле әсәнең:

— Ғүмере рәхәт күрмә, ҡара йөрәк. Ҡарт көнөмдә таянысым булыр тип үҫтергән баламды ҡара гүргә тыҡтың. Минең кеүек кеше көнлө булып, тилмереп ултыр... — тигән ҡарғышы айырым асыҡ ишетелде. Бойоҡ ҡарашын бер нөктәгә төбәп, һынташ кеүек ҡатып ҡалған йонсоу сырайлы егет иренен ҡанатҡансы тешләне. Хөкөм барышында ла уртын

сәйнәп ултырһа ултырҙы, йәллэтәйем, кешеләрҙең күңелен күрәйем тигән бер ҡылығы ла булманы.

Суд алдынан ата-инәһе Мөслимә әбейгә, бер үк төрмәгә яптырма тип ялынып, һине үҙебеҙ ҡарарбыҙ, тилмертеп ултыртмабыҙ тип анттар әйтеп ризалатҡандар булһа кәрәк. Ишле туған-тыумасаһы булмаған, бала-сағаһыҙ, ирһеҙ ғәрип әбей нимә эшләһен, күнгәндер инде. Хөкөм барышында ла: «Уны төрмәгә тығыуҙан ни фәтүә?! Алла ҡарғышы кешенекенән яманыраҡ була ул. Язаһын бында ла табыр», — тип кенә ҡуйҙы.

Шул яҙҙа Нурғәле ағайға кәләш алып бирергә ниәтләп бура күтәргәйнеләр. Һыңар аяғында һикерәңләп тигәндәй (протезға саҡ өйрәнеп килә ине) шул өйҙө бөтөрөп инде. Мейесенә тиклем үҙе сығарҙы. Ҡара көҙҙә аталарынан башҡаланды. Тик йәш килен урынына өйгә зарлы Мөслимә әбей төштө.

Быҫҡаҡлап ҡына ямғыр яуып торған бер көн ине. Алпан-толпан баҫып тая-тая килгән дәү кешене алыҫтан уҡ абайланым. Артынан, торараҡ ҡалып, бер һыйыр ҙа эйәргәнгә ғәжәп итеп ҡарап килдәм. Яҡынрая төшкәс, ҡураныс кәүҙәле, яртылаш кибеп ҡалған Мөслимә инәйҙе бала кеүек кенә итеп күтәреп алған Нурғәле ағайҙы таныным. Протезда атлауы еңел түгелдер, өҫтәүенә юл да тайғаҡ, шуға ул сайҡалып ала, битенән ҡара тире юлаҡ-юлаҡ булып ағып төшкән. Миңә тиңләшкәс кенә ул тайып китте, ҡулындағы йөгөн төшөрөп ебәрмәҫ өсөн күкрәгенә ҡыҫты. Әбекәй ҙә тарамыш кеүек һарғайып ҡатҡан һау ҡулы менән уның яғаһынан матҡып тотоп алған. Шул мәлдә миңә Мөслимә әбей иҡеһен



дә гүргә өҫтөрәй, ә Нурғәле ағай уны ла, үҙен дә был яҡты донъяла алып ҡалыр өсөн ҡырталаша кеүек күренде.

Мине абайламанылар, сөнки хәлдәре кемдер күҙҙәренә салынырлыҡ түгел ине. Ә мин, хужабикәһе артынан вайымһыҙ ғына эйәреп килгән һыйыр күпер буйындағы дегәнәклеккә әүерәп тороп ҡалғас, малҡайҙы улар артынан яңы төйәгенә ҡыуалап байтаҡ барҙым.

Һандуғас урамы тип аталған яңы урамға тәүгеләрҙән булып һалынған матур йортона, бәхет юрап ҡоролған ояһына Нурғәле ағай бына шулай итеп үҙенең язаһын күтәреп алып инде.

«Гелән түшәктә ятып янбаштары тишелеп бөткәнгә сутырмаҡ юлда һелкетеп йонсотмайым тип күтәреп алып ҡайтҡан бахырсыҡты», — тип һөйләнеләр. «Оҙаҡҡа сыҙамаҫ, әсәһенә алып барып түңкәрер», — тип шикләнеңкерәгән ауылдаштарын һоҡландырып, һис ауырһынмай, матур итеп көттө ул әбейҙе. Тик башына төшкән ҡазаларҙан йөрәге таш булғандырмы Мөслимә инәйҙең, оҙаҡ ваҡыт Нурғәлене ғәфү итмәне.

— Эй, Хоҙайым, улымды үлтергән яуыздың ҡулында тилмерһен тип тағы бер көн бирҙеңме? Ниндәй гонаһтарым өсөн һаман йәнемде алмайһың?! — тип килеп уяна ла, — минең көнөмә ҡалып, дошманыңдың күҙенә тилмереп ҡарап ултыр, — тип йоҡлап китә торғайны. Алты йыл көн һайын ҡарғыш аҫтында уянып, ҡарғыш аҫтында йоҡлап китте Нурғәле ағай. Тик хатта бер ҡат ризаһыҙлыҡ күрһәтеп сытайһасы...

Тиҫтерҙәре кәләш алды, бала-сағалы булды, донъя ҡорҙо. Барымсағының аяғы өҙөлгәстен

башҡа бераүгә тормошҡа сығып киткән һөйгәне Рәйлә апай ике балалы булып кейәүенән айырылып ҡайтты. Инде уларҙан күпкә йәшерәк Сәғиҙә менән мин дә эйәле-башлы булдыҡ. Ҡүп тә йәшәп өлгөрмәнеләр, Тимерханы Сәғиҙәне ташлап китеп барҙы.

Ейер ризығы бөтөп Мөслимә инәй вафат булды. Әжәле алҡымынан алғас, бәхиллеген әйтеп, Нурғәлегә рәхмәтен белдереп киткән тип һөйләнеләр.

Ата-әсәһе, күрше-күлән, дуҫ-иштәре башлыкүҙле итергә уйлап Нурғәле ағайға бисәлеккә ҡыҙ-ҡырҡын димләргә ашыҡты. Бәҫле улъя туплап үҙ аллы ғүмер иткән тәүфиҡлы кешегә ымһыныусылар аҙ түгел ине. Тик ул үҙе, ылғый ытырғынып, серәшеп килде. «Яңлышлыҡ миндә булды. Барыбер һинән башҡаны ярата алманым. Ҡисер мине, элек ниәтләгәнсә бергә-бергә йәшәй башлайыҡ», — тип Рәйлә апай инәлеп йөрөнө.

Бер көндө кис, малды һуңлабыраҡ ҡарап инеп, аш эсергә генә ултырған мәлебеҙҙә Нурғәле ағай килде. Табынға саҡырҙыҡ. Уйламағанда ғына килеп инеүенә, бик ҡатышып йәшәмәһәк тә, аптыраманыҡ. Ҡемдең кемдә ниндәй йомошо булмаҫ. Уңайһыҙланыңҡырағаны һиҙелһә лә сисенеп үтте. Уны-быны гәпләшеп сәй ҙә эстек. Мин ҡашығаяҡ йыуырға тотондом. Ә ул һаман һүҙен башлап китә алмай аптыранды. Шулай ҙа ҡыйыулығын йөҙроғона уҡмаштырып ауыҙын асты:

— Һылыу, һиңә оло бер йомош менән киленгәйне бит әле... Сәғиҙәгә минән яусы булып барһаң нисек булыр ине икән?

Аптыраштан ирем менән бер-беребеҙгә ҡараштыҡ. Был эштән фәтүә сыҡмаҫын белә-



беҙ бит инде. Унан минең яусылығым да... Теге кистән һуң әхирәт еңгәм бер генә һүҙ әйтте:

— Хыянатсы икәнһең!

Шунан мине күңеленән сығарып быраҡтырҙы. Осраһа, урамдың икенсе яғына сыға, күҙмә-күҙ тап булышһаҡ күрә ҡарап үтә. Үҙенең иң бәхетле, иң мөхәббәтле мәлдәренә шаһит булған кешене күреүҙең түҙгеһеҙ ауырлығын аңлағанлыҡтан мин рәнйемәйем. Уны һыҙландырмаҫҡа була ситкә тайпылам.

— Нурғәле ағай, гөрләтеп донъя көтөр мәлеңдә нишләп яҙмышыңды ҡанаты ҡайырылған, күңеле китек кешегә бәйләргә булдың?— тип әйтергә баҙнат итте ирем. — Беҙҙең уйыбыҙса, һиңә тормош дәрте ташып торған, дастуйын ҡатын кәрәк...

— Ул да яңғыҙ, мин дә яңғыҙ тип ике ярсыҡты ҡоршарға йыйыныуым түгел. Һәр яҡтан уйланылды, туғандар, — тип көтмәгәндә төпсөрләп һөйләп алып китте ғәҙәттә аҙ һүҙле Нурғәле ағай. — Йәш ваҡытта тормош үтә ябай, хатта ҡыҙыҡһыҙ тойолоп китә торғайны. Арҡырыһы, буйы, үткәне, бөгөнгөһө, киләсәге — барыһы ла билдәле.

...Өйҙө һалып бөтәм дә, Рәйлә менән өйләнешәбеҙ, йәнәһе. Рәйлә оҡшай ине. Суйыр таштарҙан һикереп ҡояш нурында йымылдап аҡҡан селтер шишмә кеүек ине ул. Унан бишалты балабыҙ була. Ҡатынымдың миңә ҡайһылай итеп асыуһыҙ ғына бурылдарын, үҙемдең уға асыуһыҙ ғына ырылдарымды ла күҙ алдына килтерә алам. Талсыбыҡтай Рәйләнең ике-өс баланан һуң әсәһенә оҡшап түмәр умарта кеүек йыуанайып китеренә хәтле белә инем.

Нурғәле ағайҙың был һүҙҙәренә ихтыярһыҙҙан йылмайышабыҙ: ысынлап та Рәйлә апай әле тумраңлап саҡ атлап йөрөй.

— Ҡөҙгөһөн, — тип дауам итә ҡунағыбыҙ,— ҡапыл һыуытып ебәрһә, йылға таң атҡансы үтә күренмәле быяла кеүек боҙ менән ҡаплана. Уны сатнатмаҫҡа тырышып шыуышып ҡына йөрөһәң, аҫта балыҡтарҙың ҡойроҡтарын анда-һанда болғап ялҡау ғына йөҙөп йөрөгәнен, ылымыҡтарҙың ағым ыңғайына талғын ғына бәүелгәнен күреп була. Һыу аҫты әкиәттәге кеүек тыныс, һил, бөтә нәмә ус төбөндәге кеүек. Шул саҡта хәүеф тойғоһон онотоп китһәң, боҙ сатнап ярыла ла, ҡара һыу аяҡ аҫтындан урғылып сығып һине аҫҡа һөйрәй. Шуның кеүек минең дә тормошомда күҙ асып йомғансы бөтәһе лә аҫты өҫкә әйләнде.

Ғүмерҙә лә төҙәтеп булмай торған үкенесле хаталар була икән. Эскән баштан юл ҡыҫҡартам тип Ҡабрағa боролғас та күңелгә шик төштө ул. Шунда боролорға булған...

Бер генә мәл тотош ғүмеренде хәл итә! Берәүҙәрҙе яҙмыш бындай аяуһыҙ имтихандан аяй, икенселәрҙең башына тондора. Тик һәр кемдең баш осонда эленеп тора ул был ҡылыс. Күҙе йомоҡ яҙмыш ваҡыт-ваҡыт уны һелтәп-һелтәп ала. — Оҙон һөйләп ялҡытманыммы, тигән кеүек Нурғәле ағай беҙгә күҙ йүгертеп алды ла, йотлоғоп тыңлап ултырғаныбыҙҙы күргәс, дауам итте. — Теге ваҡытта дуҫының башына еткән енәйәтсе рәүешендә сәхнәгә менеп ултырғас... Ундай язаны ҡан дошманыңа ла күрһәтмәһен. Мин бөтөнләй башҡа кеше инем инде...

Үҙем үҙгәрһәм дә донъя үҙгәрмәгәндер, тигән инем. Ҡарайым да береһен дә танымаған



кеүекмен. Йәнемә ял бирерҙәй, күҙем туҡталырҙай кеше таба алмайым. Күлгә ау ырғытҡан балыҡсы кеүек ҡарашымды ташлайым да, һөҙөп сығам... Нимә эҙләйем — үҙем дә белмәйем... Миңә йәлләүсе лә, аҡлаусы ла, ярлыҡау ҙа кәрәкмәй. Үҙемде үҙем хөкөм иткәнмен. Был донъялағы төҙәтеп булмаҫ ике ҡазаның — үлем менән ғәриплектең икеһен дә ҡылғанмын. Хөкөм менән яза Рәмилде терелтә, Мөслимә инәйҙе аяҡҡа баҫтыра аламы?

Шул мәлдә бер ҡыҙ баланың ҡарашына абындым: ул минең хәлемә ингән дә күңелемдең урынында юҡлығын, ауыр бушлыҡтың ғына аҫылынып тороп ҡалғанын күргән... Ҡараштары менән наҙ бөркөп ҡото ҡасҡан йәнемде йылытырға тырышып ҡарай. Ул ҡыҙ Сәғиҙә ине.

«Эргәндә шундай кеше булһа, артабан йәшәргә мөмкин булыр ине», — тип уйланым шунда ҡазанан һуң тәүге тапҡыр. Әле лә шул уй арҡан кеүек мине һеҙгә һөйрәкләп алып килде. Сәғиҙә менән үҙем һөйләшеп ҡараным ул, тик һис кенә лә ыҡҡа килерҙәй түгел. Өмөтөм һиндә генә, һылыу.

Шундай кешенең һүҙен ят һуға алмай, ҡара төн йөҙөндә Сәғиҙә янына сығып киттем.

Ҡаранғы. Рәшәткәләргә тотона-тотона саҡ барып еттем. Сәғүрә еңгәләрҙең ихатаһындағы бәләкәс кенә өйҙөң ишеген ҡаҡтым. Тимерхан менән һалып ингән өйҙәрен һатып Сәғиҙә ошонда йәшәп ята ине. Яуап биреүсе булмағас, сосолоп торған сепрәк тотҡаны һәрмәнеп табып тартҡайным, ҡалтайған ишек шығырлап ҡына асылды.

Килеп инеү менән иҫке өйҙөң ҡотһоҙ күренеше йөрәгемде тырнап алды. Сәғиҙә алама

ғына ҡорама юрған ябылған карауатта ҡулын ҡаушырып ултыра. Мине күреү менән һиҫкәнеп ҡалҡынды. Ҡарашында ялтлап киткән йүләр өмөттө күреп ҡойолоп төштөм. Ул миңә Тимерхандан матур хәбәр алып килер бикәс тип ҡараны. Ошо ҡото ҡасҡан донъяһын балҡытып, ярлы монаятын зиннәтләндереп ебәрергә минең бер ауыҙ һүҙем етер ине: «Һағына», — тигән һүҙем. Әгәр ҙә ул һүҙгә үҙем хужа булһам икән...

Тимерхандың иһә хаттары бәхеткә һуғарылған. Йәш кәләше йыл һайын тупылдатып бер малай таба. Үҙе сытырман йәбешеп мал таба: телевизор алдыҡ, һыуытҡыс, кер йыуғыс... Хат һайын бер йыһаз...

Мин ишек бауына йәбешеп, Сәғиҙә урынынан ҡалҡып бер-беребеҙгә текләшкәнбеҙ... Ул ҡарһаланып минең сырайыма сыҡҡан уйҙарымды уҡый. Ҡымтылған ирендәренән, һөмһөрө ҡойолған йөҙөнән йәненең ҡайһы рәүешле телгеләнеүен төшөнәм. Ул уҙ тимәй, мин ҡыймайым. Шулай тора биргәс, баҙнатһыҙлығымдан йәнем көйөп эрзинкәләремде сисеп бырғаным да төпкә үттем. Ишектән сығыр мәлдә генә ирем менән Нурғәле ағай ҡыҫтап тиерлек ҡултыҡҡа тығып ебәргән бер яртыны шапылдатып өҫтәлгә ҡуйҙым. Сәғиҙәм теленең осо менән генә иренен ялай, тик ҡымшанмай. Мейес ҡуйынынан сите кителгән бер каса менән һарғайып ҡатҡан бер бокал эҙләп алдым. Гәзит түшәлгән өҫтәл артына ултырып икеһенә лә тултырғансы араҡы ҡойҙом да төп күтәрә йотмаҡсы булдым. Ҡуҙем атылып сыға яҙҙы, хоҙайым, был урыҫ сытыраймай ҙа ҡалайтып эсә икән?!

Мин сәсәйем, ә Сәғиҙә, дөмөкмәйһеңме шунда, тигәндәй ҡарап тик ултыра. Шул тиклем рәнйенем, етмәһә бер йотом араҡы башыма һикерҙе. Күҙҙәрендә бая тоҡанған өмөткә йәнем үртәлде. Әйтерһең, был донъяла Тимерхандан башҡа кеше юҡ, унан башҡа хәсрәт, шатлыҡ юҡ. Һөмһөҙ итеп текләп баш сайҡап ултырам. Тағы ҡойоп эсәм. Бынһы шып-шыма ғына үтә. Ә ул миңә екһенеп ҡарай. Булһын. Шул кәрәк. Вайымһыҙлығынды бәреп ватмаһаммы?! Өҫтәлгә йән көсөмә шапылдатып һуғам. Китек каса менән ҡатҡан бокал һикереп китә. Бирле ирҙәргә ҡалай рәхәт икән. Яурынымды баҫҡан тауҙы Сәғиҙә өҫтөнә ишеп төшөрәм. Үҙем эстән генә «етмәһә — өҫтәйем», тип һөрәнләп йәҙрә кеүек ауыр һүҙҙәремде бырғайым.

— Яратмай ул һине, яратмай, аңлайһыңмы? Әнисәһен ярата. Бәхетле ул унда, аңлайһыңмы? Бәхетле. Туп кеүек ике малай үҫтереп ята ул унда. Сынъяһауҙан донъя ҡора.

Мин киҙәнгән һайын ул сайҡалып китә. Әйтерһең дә, сикәһенә һуғам.

— Ғүмерҙә ҡабат ҡайтаһы юҡ уның һиңә. Һинең яратыуыңдың уға кәрәге юҡ. Тамсы ла кәрәге юҡ. Аңлайһыңмы? Һин барһыңмы, юҡһыңмы, уны был ҡыҙыҡһындырмай. Ике йыл эсендә бер тапҡыр сәләм дә әйткәне юҡ.

Сәғиҙә ыңғырашып башын ҡапларға маташҡандай итә. Ә мин, үҙемдең аяуһыҙлығыма үҙем әрнеп, үкереп илайым. Илай-илай әхирәтемде ҡосаҡлайым. Ул хәлһеҙ генә ҡарыша, ҡулымды этә, ситкә шылыша. Үҙе һығылып ҡына минең ыңғайға илай.

— Ауырттымы, ҡыйын булдымы? — тип бышылдайым бер уның, бер үҙемдең субырҙап аҡҡан йәшен һөртөп. — Ҡанһыҙмынмы? Ысын-

лап та ҡанһыҙ... Әле генә ошо уҡ һүҙҙәрҙе һин тип өҙөлгән кешегә лә әйттем: «Яратмай ул. Өмөтләнмә».

Ул ҡара күҙҙәрен тонйоратып йәһәт кенә һирпелеп баға:

«Тимерхан?»

«Кеше аңламаһа аңламай икән», — тип йәнә йәнем ҡарая. Тыйылам.

— Үҙе әрнегән башҡаның һыҙланыуын аңларға тейештер? Үҙең һөйгәс, башҡаның тойғоһон да баһалай беләһеңдер? Һин Тимерхандың һөйөүен ялбараһың. Ә үҙеңдән шәфҡәт көткән кешене рәнйетәһең.

— Ир-зат ҡашына йөрөмәм тигән һүҙем бар, — ти Сәғиҙә ыҡҡа килгәндәйерәк булып. — Береһен дә күргем килмәй.

— Берәүҙе күргең килә бит, — тип юрый мыҫҡыл итәм.

— Хаяһыҙ яуызлығыңды белмәгәйнем. — Сәғиҙәнең үпкәләүҙән тауышы ҡалтыранып ҡуя.

— Ә һин үҙең... Алла бәндәһе кеүек кешенең йөҙөн йыртып сығарғанһың.

— Алла бәндәләре күп йөрөй бында...

Минең бүтән кәзекләшкем килмәй.

— Күҙ йәшеңдән күк даръя булды, файҙаһы тейҙеме? Бәхет һин үҙең бит, әхирәт. Нурғәле ағайға һин үҙең — бәхет. Шуны ҡасан аңларһың икән? — Тауышым ялыныслы.

Сәғиҙә башын ҡалҡытып үҙенең хәйерсе, ҡотһоҙ донъяһын күҙҙән үткәрә. Төшөнкө яурындарын ҡалҡытырға итә. Әй ҡыйын уға быны эшләүе. Хәсрәтен һелкетеп ырғытып ҡалҡынырға көсө етмәҫ кеүек.

— Ярар, — ти ул ниһәйәт. — Ярар. Һин ғүмер буйы кешене өгөтләй белдең инде.



Бер аҙнанан ыҡсым ғына туй яһанылар.

— Килен тәүҙә туйға ризалашмағайны. Ҡустыбыҙ беренсе тапҡыр өйләнә бит тип күндерҙек. — Ужым баҫыуына һыйыр эҙләргә барышлай Нурғәле ағайҙың өлкән апаһы үҙе шулай тип һөйләп килде. — Күңелле генә ултырҙыҡ. Ҡусты ла, килен дә бик ҡәнәғәт ҡалды.

Мине туйға саҡырманылар. Шунан сығып ҡына ла Сәғиҙәнең сырайына сыҡҡан нур эс-бауырын өткән ялҡындың яҡтыһы икәнен аңларға була ине. Ә ул шуны аңларымды белгәнгә күрә лә әйттермәгәндер. Уның байы мине бәпәй туйына саҡырҙылар. Ҙурлап, ирем менән икебеҙгә лә күлдәк кейҙереп, атлы ҡунаҡ кеүек итеп ҡуна яткырып һыйлап ҡайтарҙылар. Ә мин ике уңған кешенең төҙөк донъяһына, китектәре бөтәйгән күңелдәренә ҡыуанып ҡайтҡайным. Бына килеп тағы...

Мунса соланының тупһаһына башын һалып онотолған Сәғиҙәне өҫтөрәкләп аласыҡтың урындығына һалдым да өҫтөнә һәләмә юрған ырғыттым. Ни тиклем күңелгә яҡын кешең булмаһын, эскесене ҡәҙер итке килмәй. Шуны аңлау менән ҡыланышым өсөн үҙемә ҡыйын булып китте.

Ҡасандыр донъяны йылытып яҡты тойғолар уятҡан йән дуҫыңдан да күңел ҡайта икән! Абайламай ғына ҡырыҫлана, һаранлана һәм ярлылана барыуыбыҙ шулдыр инде. Тойғоларымды аңлағандай, Сәғиҙә йоҡоһонда ауыр итеп ыңғырашып ҡуйҙы. Ә миңә ҡапыл уның ҡәҙерһеҙләнеп таушалған тәненең аулаҡ мөйөшөнә инеп боҫҡан үҙе, күркәм булмышы, иңрәп тауыш биргәндәй булды. Ул тормошҡа ашмаған хыялдарының харабалары, сел-

пәрәмә килгән өмөттәрҙең ярсыҡтары, уңышһыҙлыҡтар, ғазаптар аҫтында баҫырылып ҡалған да йонсой, күрәһең. Ә Сәғиҙә шул әрнеүҙе араҡыға батырып тонсоҡтормаҡсы була ла, йән яраларына хәмер дауа буламы ни? Эскелек уны тағы ла тәрәнерәк упҡынға һөйрәй, аяуһыҙ ҡорт кеүек көнө-төнө кимереп ҡанһырата. Йә үлтермәй, йә ҡалдырмай әҙәм эшәкеһе итеп мәсхәрәләп йөрөтөүе менән ҡайһылай ҡурҡыныс әле был араҡы тигәнең.

Ә мин йән дуҫыма ярҙам итә аламмы? Ғөмүмән, үҙе теләмәгән кешене әҙәм итеп буламы? Иренең өҙгөләнеүҙәрен, балаһының күҙ йәштәрен һанға һуҡмаған ҡатынды тубыҡланған еренән ҡалҡытыр өсөн ниндәй һүҙҙәр кәрәк?

Үҙемдең көсһөҙлөгөмә йәнем көйөп торған арала мәктәп балаларының шаулашып ҡайтыуы ишетелде. Хәҙер минекеләр ҙә асығып килеп инер. Бер ҡарарға килә алмайынса, абайламағанда тороп шым ғына һыпыртмаһын тип ишеккә тыштан бик һалып, мәшәҡәттәремә тотондом.

Шәмбе — беҙҙә мунса көнө. Аталары Йылайырға ағас ҡырҡырға киткән еренән ҡайтып етмәһә лә, күнегелгән тәртипте бозоп булмаҫ.

Уйҙарымды ситкәрәк шылдырып ҡуймаҡсымын да, хәтирәләр баҡсаға эйәләшкән әрһеҙ кәзә бәрәсе кеүек зиһенгә бәреп килә лә инә.

Элек Сәғиҙәләр менән беҙҙең ике өйгә бер мунса була торғайны. Йәйгеһен күмәкләшеп шуны һылау үҙе бер мәрәкәгә әйләнә ине. Әле шул күҙ алдыма килде. Мунсаға ут тоҡандырғанда төтөнгә сәсәп илап килеп сыҡтым да, рәнйеү ҡатыш әсенеү менән өмөтһөҙлөк



һаҙлығына батҡан Сәғиҙәне йәлләүҙән ысынтылап күңелем тулды.

Дуҫым Сәғиҙә күңеле менән минә ҡарағанда байыраҡ, тормошҡа ғашиғыраҡ булды. Уның хатта баҡа сорлауында ла моң ишетеүенә көлә лә, һоҡлана ла торғайным. Ә ул минең һалҡын ҡанлы, ҡалын тиреле булыуыма ҡыҙыға ине. Холҡобоҙ кеүек үк яҙмыштарыбыҙ ҙа төрлөсә китте. Уныҡы сутырмаҡ юлдан даңғор-доңғор барған арба кеүек. Ә минеке тип-тигеҙ дала буйлап тәгәрләтеп ебәргән йомортҡа ише. Һәүетемсә...

Мин башымды юғалтмай ғына үҙемде оҡшатҡан кешегә тормошҡа сыҡтым. Бер-беребеҙҙән әллә нәмәләр талап итмәгәнгә тыныс ҡына, аңлашып ҡына донъя көтәбеҙ. Унды бөткәс уҡытыусылыҡҡа уҡырға институтҡа инә алмағайным. Һауынсы булып эшләй бирҙем дә, ситтән тороп уҡый башланым. Баласағалы килеш уҡыу ауырыраҡ та, яратҡан һөнәремә өйрәнеүем — ҡыуаныс.

Ә Сәғиҙәнең йә башы күккә тейә, йә күңеле төшөнкөлөк даръяһында тонсоға. Элегерәк уның сағыу тойғоларына ҡыҙығып, үҙемде күҙе насар күргән, ҡолағы насар ишеткән зәғифкә оҡшата биреп ҡуйыла ине. Хәҙер иһә, бар нәмәнең дә самалы булыуы яҡшы икән тип, шөкөр итәм.

* * *

Мунса инеп сыҡҡан Сәғиҙәнең күҙҙәре ысыҡ йыуған ҡара ҡарағат кеүек ялтырап киткән. Ике бите алһыуланған, текә танауына бөрсөк-бөрсөк тирҙәре сыҡҡан. Ул ҡорот ҡатыл-

ған йәш һурпаны ихлас һемереп өндәшмәй генә миңә ҡарап ултыра. Аҡыллы күҙҙәренең һынсыл ҡарашынан ҡаушабыраҡ төштөм. Әле генә әҙәм әшәкеһе булып ятҡан кешенең бер нисә сәғәт эсендә ҡасандыр һөйләшеп һүҙебеҙ бөтмәгән элекке Сәғиҙәгә әйләнеп барыуы аптыратты. Араҡының мәкере шунда ла инде. Гөл кеүек кешене күҙ алдында көл итә лә, яйлап ҡына һулыта бара, һулыта. Ә кеше үҙе һиҙмәй ҙә, бөгөн сусҡа булһа ни (ул үҙенең сусҡа сағын рәтләп иҫләмәй бит), иртәгә йәнә йүнгә инер.

— Ҡасан Нурғәлене ҡайһылайтып ғазаплағаным, баламды бәхетһеҙ иткәнем тураһында нотоҡ уҡый башларһың, эскене ташларға өгөтләрһең тип биҙәр булып ултырам, — ти ул күңелһеҙ генә көлөмһөрәп.

— Эсеүҙе ташлау менән генә күңелеңдең китеге бөтәймәй бит, Сәғиҙә, — тием күҙҙәренә ҡарап. — Эсеүҙең бәхетһеҙлегенә сәбәп түгел, шул бәхетһеҙлектән ҡасыу өсөн бер сара икәнен аңлайыммы ни мин.

Быға тиклем башын иҫәргә һалырғараҡ самалаған Сәғиҙәнең йөҙө етдиләнгәнен күреп күңелемә йылы йүгерә. Тик уның тормошон үҙгәртергә теләге тыуырҙаймы? Шуға айырым асыҡ яуап таба алмайым.

— Үс иткән кеүек тас ҡаршыбыҙға ғына өй һалып, күңелле итеп йәшәп ятыуҙарын көн һайын күреп тороуы бигерәк ҡыйын, — ти ул үҙәк өҙгөс итеп. — Ихтыярымда булһа, был тиклем өҙгөләнеп йәшәмәҫ инем тип тә ҡуям. Аптыраған инде, йәшәү өсөн дә көс юҡ, үлер өсөн дә.

Үҙ-үҙенә йәшәүҙән туйғандар түгел, тормошто үлә яҙып яратып өмөттәре аҡланмаған



ғандар ҡул һалалыр ул, дәрте ташып торғандар. Бер генә лә ихтыярым ҡалмаған.

Һөйөү тигәнең аяуһыҙ нәмә бит ул. Берәүҙе ратһаң, башҡа бер кем дә ҡыҙыҡһындырмай икән. Һинең өсөн ун кеше үлә яҙып йөрөһөн, йөҙө аяғыңды йыуған һыуҙы эсергә әҙер булһын, улар араһында күңеленә ятҡаны булмаһа, бер ҡыҙығы ла юҡ. — Ул аҡланған кеүегерәк һөйләй. — Хоҙай тәғәлә әҙәм балаларын ярты-йорто итеп ярата ла тырымтыраҡай итеп донъяға ебәрә икән, ти. Шунан ул яртылар үҙҙәренең һыңарын эҙләп ғазап сигеп йөрөй икән, ти. Мин дә шул Тимерхандың һыңары булғанмындыр, тимен.

— Ә миңә был әкиәт төптө ялған ғына түгел, зарарлы ла булып тойола, — тип ҡаршы төшәм мин. — Берәй шағир күңеле иләҫ саҡта уйлап сығарған уйҙырма ул...

Кеше яңғыҙ тыуа, яңғыҙ үлә. Һин әйткәнсә ярты булып тыуһа, һыңарын тапҡас, икеһенә бер әжәл килер ине. Кеше бер бөтөн булып, үҙен үҙе бәхетле итеп йәшәргә тейеш. — Сәғиҙәнең миңә ҡаршы әйткеһе килеүен тойоп, туҡтатам. — Юҡ-бар әкиәт хаҡында бәхәсләшеп ваҡытымды әрәм иткем дә килмәй. Өлкәнәйә төшә был донъяла күп нәмәнең һин теләгәнсә генә булмағанын төшөнә киләм. Хыт ул — һинеңсә булмай. Шулай булғас, күп нәмәгә күнәһең.

Нурғәле ағайҙы ғына ал. Ер тырнап илаһа ла, араҡының мискәһенә төшөп ултырһа ла өҙөлгән аяғы кире үҫмәҫ ине. Шуға күрә көсөн булмаҫтайға сарыф итеп, ҡайғырып ултырманы, — тип хәтеренә төшөрәм. Сәғиҙә уйға бата.

Уның етерлек ғазапланғанын, ул ғазаптар-

ҙан туйып, ялҡып бөткәнен, бер үк стенаға башын сүкеүҙән барыбер фәтүә сыҡмағанды аңлағанын күрәм. Зиһене йонсоуҙың сигенә еткән, пахмилдан ауырыуы үҙәгенә үткән, ҡорғаҡһыған күңеленә өмөт ямғыры кәрәк.

— Ҡалайтайым һуң? — тип һорай ул ялынысլы ҡарап.

Мин белмәйем. Тик беҙҙең уның менән ғәйбәт һөйләмәй, кеше сәйнәмәй генә һәр ваҡиғаның төбөнә төшөргә, асылын аңларға тырышып һөйләшә торған холҡобоҙ бар. «Ул ниндәй бөтмәҫ хәбәр һуң ул?» — тип әсәйҙәр аптырай торғайны хатта. Бер-беребеҙҙең фекерен дауам итеп, күңелгә күңел ағылып һөйләшеүҙән ҡәнәғәтлек алып, күп нәмәне аңлап ҡала торғайныҡ. Әле икебеҙ ҙә йәнә шул тулҡынға әлэгеүебеҙҙе тойҙоҡ.

— Бер үк ваҡиғаны төрлө кеше төрлөсә ҡабул итә. Бына минең яратҡан кешем булманымы ни? Булды бит. Иламһырап армияға оҙаттым, хаттар яҙҙым. Ә ул отпускыһында бер мәрйәне ҡултыҡлап ҡайтты. Ул мине ташланы тип һинең кеүек зар илар урынға, мине лә һанламағас, дүрәк икән тинем дә ҡул һелтәнем.

— Эйе шул, шулай еңел генә! — тип көлөмһөрәй Сәғиҙә. — Төндәр буйы илап сыҡҡаныңды иҫләмәйем тиһеңме әллә...

— Илаһам аҙна илағанмындыр. Һинең кеүек ғүмер буйы түгел.

— Һин электән үҙ баһаңды белдең...

— Ә һин белмәнең... Бөтөн бәләң үҙ ҡәҙереңде белмәй, үҙеңде кешенән түбән ҡуйыуыңдан түгелме икән һуң тип әйтеүем.

Сәғиҙә фекеремде төшөнмәй.

— Һин үҙеңде шул тиклем түбән ҡуяһың. Хатта уның шауҡымы һине оҡшатҡан кешеләргә лә барып тейә. Үҙеңде оҡшатҡан кешене оҡшатмайһың. Мин электән шуға аптырай торғайым. Нурғәле ағайҙы ла сатан булған өсөн генә миңә өйләнде тип үтмәҫ тауарға сығарып ҡуйҙың бит һин, шулаймы? — Сәғиҙә уңайһыҙлана.

Мин уны битәрләмәйем. Уның әрнеүҙәрен, ҡурҡыуҙарын ихтирам итәм, үҙемдең артымдан әйҙәйем. Ййлап тағатһаҡ, ғүмер ебеңдең сеймәлгән урынын табырбыҙ. Табырбыҙ ҙа, бик тә сисерлек булмаһа өҙөп ырғытырбыҙ. Һәр тыуған көн әҙәм балаһына яңы мөмкинлек алып килә. Бер абынған ереңдә гелән йығылырға тимәгән дә инде.

— Бына әле сәбәбе аңлашылды, буғай. Тик ҡайҙан килгән һуң ул һиңә шул тиклем кәмһенеү?

— Ҡайҙан килгән ул кәмһенеү? Тыумыштан. Һис юғында үҙемде иҫләй башлағандан.

Уйлап ҡара, Хоҙай үҙе кәмләгән һаҡау Мырай (иҫкә ал, Мырҙағәле түгел, Мырай) балаһын кәмһенеү ҡорто кимереүе ғәжәпме ни?! Атайым кеше алдында ғына башын иҫәргә һалып, гелән мәрәкәләп йөрөй торғайны бит. Ә мин уның ысын булмышын белгәнгә, уны йәлләп тә, оялып та ер тишегенә инерҙәй булып тора торғайным.

Апайымдар әсәйем кеүек үк уны мәңге һанға һуҡманы. Шунлыҡтан уларға еңелгә тура килде. Атай үҙе лә улар алдында асылып бармай торғайны. Ҡөтөүҙә саҡта, янында малдары ла, мин генә ҡалғанда, тәбиғәттең ҡосағына сумып ирәйер ҙә бөтөнләй икенсе, илаһи бер кешегә әйләнер ине. Һандуғасты үҙенә ғашиҡ итерлек моң бар ине бит унда.

Һсын, ул сутылдап һайрап ебәрһә, һандуғас уның яурынына ҡунып тыңлай торғайны.

Беҙ уның менән нисәмә йыл ауыл көтөүсен көттөк. Һис ауырһынманым. Тик һәр кис һайын ҡунысы киҫелгән итек башын һөйрәп, ҡара сиреү булып килгән көтөү артынан туҙанға сәсәй-сәсәй ауылға инеүемде иҫләһәм, әллә нишләп китәм. Бөтә кеше беҙҙе йә йәлләп, йә мыҫҡыл итеп ҡараған кеүек була ине.

Әсәйемдең ғүмер буйы бер нәмәнән дә ҡәнәғәт булмауы, бөтөн донъяға көнсөлләшеп ҡарауы, сәмләнеп, кешегә үс итәм тип серәшеп донъя көтөүе бала сағымдың йәмен бөтөнләй ебәрҙе. Бая күңелле итеп мунса һылағанлыбыҙҙы иҫкә алдың. Хатта шундай ҡыуаныстарыбыҙҙы ла ҡара һөрөм итә белә ине бит әсәйем. «Ғүмер буйы бер мунса ла һалып инә алмаған хәйерселәр беҙ», — тип иламһырай, атайымды игәй, ғүмер буйы кешенең артын һөрттөрәһең тип уны эт итә.

Йылылыҡ, донъяға ҡот биргән күңел йылыһы юҡ ине беҙҙең өйҙә. Яратыу, аҙ ғына булһа ла иғтибар кәрәк булған өсөн һеҙҙән сыға белмәнем бит бала саҡта. Шунан ҡалған ул: мин үҙем ҡотһоҙмон да, ҡайҙа барһам да шул артымдан эйәреп йөрөйҙөр кеүек.

— Бына ни өсөн оҡшағандыр әле ул һиңә иркә Тимерхан, — тип ҡыҫылам.

— Беренсе кластан уҡ оҡшаны. Класыбыҙҙағы ҡара-ҡоро балалар араһында әллә ҡайҙан айырылып торған һары бөҙрә сәсле малайға иғтибар итмәгән кеше юҡ ине. Ленин бабайҙың октябрят йондоҙсоғо уртаһына ҡуйылған бала саҡтағы һүрәтенә оҡшап тора ине ул. Мин шул тиклем мохтаж булған наҙ шул малайҙың өлөшөнә тейә ине. Шуға күрә



бәләкәй саҡта: «Ниндәй хыялың бар?» — тип һораһалар, «Тимерхан булғым килә», — тиер инем...

Икебеҙ ҙә көлөшәбеҙ.

— Мин беләм бит, — ти Сәғиҙә. — Ул мине бер ваҡытта ла яратманы.

— Һеҙ икәүләшеп уны яраттығыҙ. Ул үҙен, һин уны.

— Минең шул саҡлы яратыуыма сыҙамаҫ, барыбер яратып китер тип өмөтләнә торғайным. Бик ҡыйын булып китһә, яңғыҙымдың яратыуы икебеҙгә лә етерлек әле, тип йыуандым.

— Әгәр ул һине ярата башлаһа, һин унан һыуыныр инең.

Сәғиҙә миңә аптырап ҡарай, аңламай.

— Аңлауы ҡыйынраҡ шул, — тим мин. — Яҙмышыңды сеймәлткән баяғы әтнәкә ошонда түгеме икән? Һин үҙеңә бик тә түбән баһа ҡуяһың тинек.

— Шулай тинек шул.

— Оялышыңдан үҙ-үҙеңдән ҡасып ҡотолорға теләйһең. Шуға күрә бер әйтеп тә һалғайның: Тимерхандың булмышында иреп юҡҡа сығыр инем дә, беҙ бер бөтөн булыр инек тип... Ә мин: «Һин юҡҡа сыҡһаң, Тимерхан кемде яратыр һуң, үҙенең шәүләһенме?» — тип көлгәйнем.

— Ә Нурғәле? Һиңә ышанһаң, ул мине бик тә ярата булып сыға бит инде, — тип көлөмһөрәй Сәғиҙә. Шулай ҙа күҙҙәрендә ниндәйҙер өмөт бар. Һис юғында ҡыҙыҡһыныу бар. Донъяға шулай ҡарарға ла мөмкин икән дә баһа тигән ышаныс бар.

— Тимерхан — был тормошта уйһыҙ-ниһеҙ бушаҡ юрта торған кеше,—тим мин. Уға—һи-

неҡ тәрәнлегенҙеҡ кәрәге юҡ ине. Ул, ғөмүмән, тәрәнлек тигән нәмәнеҡ барлығын беләме икән? Юҡтыр. Үҙ ағайымды мин беләм бит инде. Ул уға кәрәкмәй ҙә. Бөтә матурлығы, бәхете елбәҙәклектә бит инде уның. Ә бына Нурғәле ағай — зирәк кеше. Ул һинеҡ үҙеҡ дә белеп етмәгән күҡел хазинаңды күрҙе. Шул байлыҡты һинеҡ үҙеҡә нисек күрһәтергә белмәй йонсой.

Сәғиҙә уйланып ултыра. Бәләкәй саҡта уҡ үҙенә биргән баһаһының бөгөн ысынбарлыҡҡа тап килмәгәнен, иҫке-моҫҡоно ниһәйәт сығарып ырғытып, кәмһенеү һөрөмөнән ҡарайған күҡел тәҙрәләрен таҙартырға кәрәк икәнен, таҙартырға мөмкин икәнен зиһененә һеҡдерергә маташа.

— Бәлки хаҡлыһыҡдыр ҙа, — ти ул ҡапыл ҡайтырға йыйынып.

Мин үҙемдеҡ эстән генә тантана итеүемде унан йәшерергә тырышам. Үҙем шым ғына уның күҡеленеҡ ташландыҡ мөйөшөндә боҫоп ятып, баһырауҙан яҡы ҡотолған матур булмышына күҙ ҡыҫам: «Булдырҙыҡ түгелме һуҡ? Булдырҙыҡ...»

Сәғиҙә урамдан хазина тапҡан кеше кеүек йүгерә-атлай, йүгерә-атлай бара. Әйтерһеҡ дә, минән ут алырға килгән дә, шуны һүндермәйенсә алып ҡайта һалып усаҡ тоҡандырырға ашыға.

«Ҡайтып еткәс, уйһыҙ килеп инмә. Ишек төбөндә ҡолаҡ һалып тор ҙа, ҡапыл ишегенде ас. Шул саҡта үҙеҡ юҡта өйөҡдөҡ ҡайһы рәүешле ҡотһоҙ булыуын абайлап өлгөрөрһөҡ. Һин күренеү менән эйәреп килеп ингән ҡотоҡ бөтөн мөйөштәрҙе яҡтыртып, түшәмде бейегәйтеп ебәрер. Унан һине һағынып етемһерәп



ултырған ҡыҙыңдың йөҙөнә төшөп нурландырыр. Ут йотоп көткән иреңдеҡ күҙҙәрен балҡытыр. Шул саҡ һинеҡ кеше йылыһына мохтаж түгеллегеҡ, үҙеңдеҡ бәхет булыуыҡ айырым-асыҡ күренер», — тинем мин уға. Шуны һынағыһы килә. Шуға ышанғыһы килә. Шуны күрерҙәй күҡел күҙе асылһа ине.

## ҠОРБАН ҠИЛТЕРЕҮ

### I

Ғазаплы йәненеҡ йәшәргә теләге ҡалмаһа ла, балаларын етем итергә хоҡуғы юҡлығын аҡы менән белә ине Фәриҙә. Шуға күрә таянысты киләсәгемдә тапмаммы тигән өмөт менән күрәҙәсегә барып ҡарамаҡ булды.

Ҡала уртаһындағы бейек йорттар артына боҫҡан ике ҡатлы ағас өйҙө һеҡлеһе Сәриә менән саҡ эҙләп таптылар. Кеше күп ине. Сырайҙары борсоулы. Хәйер, күрәҙәсегә бәхетлеләр йөрөмәй инде, йәне яралылар килә. Ә үҙе ҡайғы күргән кешенеҡ күҡеле һиҙгер: Фәриҙәнеҡ һарғайған йөҙөнән үк хәлен аҡлап, иҡ алдан инергә тәкдим иттеләр. Ә бер өлкәнерәге Сәриәнеҡ ҡолағына:

— Был күрәҙәсе әҙәмдеҡ күҡелен уйламай, яҡшыһын, яманын бәреп әйтә лә ҡуя, тиҙәр. Апайыңды бергә алып инмәһәҡ, яҡшыраҡ булмаҫ микән? — тип бышылданы.

Нишләптер күрәҙәсене Мәскәй әбей кеүек шөкәтһеҙ ҡарсыҡ тип күҙ алдына килтергәйнеләр. Зифа буйлы мөләйем ҡатынды күргәс, күҡелдәре күтәрелеп китте. Бындай һөй-

көмлө кеше ауыҙынан насар хәбәр сыҡмаҫ кеүек тойолдо.

Күрәҙәсе:

— Һеҙҙең һорауҙарығыҙға яуапты мин үҙ башымдан сығарып бирмәйем. Берәй үлгән туғаныгыҙҙың әруахына мөрәжәғәт итәм дә, һеҙгә уның һүҙҙәрен еткерәм. Ябай ғына әйткәндә, бынау телефон кеүек булам инде, — тип аңлатҡас, бер аҙ ҡаушанылар. Дүрт йыл элек ҡапыл вафат булған әсәләрен борсорға баҙнат итмәнеләр: уңалып бөтмәгән яраларҙы аҡтарыу булыр. Мәрхүмә өләсәләренең ҡайһыһына өндәшергә белмәй бер-береһенә ҡараштылар. Бағымсы ҡатын:

— Яҙмышты барыбер алдап булмай, — тигәс кенә, Фәриҙә:

— Мәҙхиә! Мәҙхиә өләсәйҙе саҡырабыҙ, — тип тәүәккәлләне. — Әбей уҫалыраҡ булды булыуын. Тик зирәк зиһенле ине.

Ҡараштарын әллә ҡайҙа, үҙенең булмышының төпкөлөнә, төбәгән күрәҙәсенең көсөргәнеп нимәлер тыңлағанын эске ҡалтыраныу менән ҡарап ултырҙылар.

— Хоҙай ғүмерҙе һәр кемдең үҙенә бирә, үҙенең көсөнән килерлек йөгөн дә күтәртә. Аллаһы тәғәләнең үҙ язалары, үҙ талаптары бар. Эргәндәге кешегә һынамаҡҡа йәки язалмаҡҡа ебәрелгән ғазапты еңеләйтәм тип ҡыҫылыу — гонаһ. Ул — хоҙайҙың үҙен һанға һуҡмау, ихтыярына ҡаршы килеү. Ике кешенең йөгөн артмаҡлап, шул ауырлыҡтан иҙелеп, хәлдән тайып барҙың ғүмерең буйлап. Әле килеп миктәгән ат кеүек күтәрттең...

Бағымсының ҙурайып сөм-ҡара булып киткән күҙҙәрендә сәйер ут тоҡанған. Әйтерһең дә, унан үҙе түгел, башҡа берәү ҡарап тора.



Шомло. Шулай ҙа Фәриҙә, бәхәсләшкән кеүек, һорауын ҡыҫтырырға баҙнат итте:

— Яҡыныңа ярҙам итергә ярамай тигән һүҙме инде был? — тине.

— Ҡулыңдан килгән яҡшылыҡты ҡылмау ҙа гонаһ. Тик бөтә нәмәлә лә сама кәрәк. Ярҙамың, яҡшылығың файҙағамы? Яҡшының күңелен үҫтерәме, яуыздың бәйелен аҙҙырамы?.. Ҡыу сыбыҡты ҡаның менән һуғарһаң да, япраҡ ярмаясағын күптән аңларға кәрәк ине. Аңлау менән артыңа боролоп ҡарамайынса ҡасырға ине... Ғәләм һиңә ғүмер бүләк иткән икән, һин уны әҙәмгә генә түгел, Хоҙайға ла ҡорбан итергә тейеш түгел инең!..

Күрәҙәсе һуңғы һүҙҙәрҙе киҫкен, хатта асыулы итеп әйтте. Фәриҙә ирекһеҙҙән һеңлеһенә йәбеште. Ул арала ҡатын оҙонса матур ҡул устары менән битен ҡаплап торҙо ла күҙгә күренмәгән ауҙы йөҙөнән һыпырып ташлаған кеүек ишара яһағандан һуң, ҡабат элекке хәленә ҡайтты.

— Эй Алла, иң кәрәген һорап өлгөрмәнек! Апайым һауыҡһын өсөн нимә эшләргә? — тип өҙгөләнде Сәриә. Тик бағымсы үкенгән тауыш менән:

— Мин дә һеҙ әле ишеткән хәтле генә беләм бит, — тигәс, ни ҡылырға белмәй алдан әҙерләгән аҡсаһын һондо.

— Кәрәкмәй, — тине тегеһе. — Яҡшы хәбәр еткереп ҡыуандыра алманым бит.

Ғәҙәти ығы-зығы менән шау-гөр килгән урамға сыҡҡас, байтаҡ шым барҙылар.

— Һаташҡан кеүек әллә нимә һөйләне лә ҡуйҙы. Ярай, аҡсаһын алманы әле, — тип һөйләнгән һеңлеһе менән ризалашҡан кеүек баш ҡаҡһа ла, күрәҙәсенең сәйер хәбәре Фә-

риҙәнең йөрәгенә ҡармаҡ кеүек ҡаҙалғайны инде. Бер аҙ барғас, Сәриәне аптыратып:

— Мәҙхиә өләсәй гелән ҡырыҫ булды инде. Тураһын ярып әйтә лә ҡуя торғайны, — тип һүҙ башлағайны, өнөн тыҡҡандай ҡапыл туҡтаны. Күңеленең иң төпкөлөнә баһырау һалып йәшереп ҡуйған ҡурҡыныс бер нәмәне ысҡындырып ебәреүҙән өркҡән кеүек тойҙо ул үҙен.

— Беҙ ҙә йөрөйбөҙ инде шырмыйланып, — тигән булып көлкөгә һабыштырҙы ла һеңлеһенең йомшаҡ йылы ҡулын ҡоро тарамышҡа ҡалған устарына ҡыҫты, ҡараштары менән магазиндарҙың ялтыр-йолтор исемдәрен, ҡоймаларҙағы афишаларҙы ҡапшаны. Бөтә иғтибарын күреп, тотоп ҡарап булған матди донъяға тупларға, үҙенән ҡасырға тырышты. Үҙен булмышының хәтер даръяһына табан өҫтөрәгән көс менән тартышты.

Саф һауала оҙаҡ йөрөгәнгәме, яңы тәьҫораттар талсыҡтырғанмы — ул кисте башҡа ваҡыттарҙағы кеүек йоҡоһоҙ оҙаҡ борһаланманы. Мендәргә башы һеңеү менән онотолғайны, үҙе көнө буйы алышып бирешмәгән уйҙар упҡынына ҡоланы. Йылдар буйы онtorорға, уйламаҫҡа, күңеленән төпкө аңға ҡыҫырыҡлап сығарырға тырышҡан рәнйеү, әрнеү, үкенестәре Мәҙхиә өләсәһенең: «Ҡасырға кәрәк ине!» — тип ҡысҡырыуынан өркөп эркелешеп килеп сыҡтылар ҙа тулышҡан шеште йыртып аҡҡан ҡанлы эрен кеүек бөтөн булмышын ҡойондорҙолар. Ҡара тиргә батып һаташҡан Фәриҙә, төн уртаһында ҡаты итеп ыңғырашыуына уянып китте лә, ҡараңғылыҡҡа теклэп оҙаҡ ятты. Егерме йылға тәүге тапҡыр үҙе менән ҡасышлы уйнамаҫҡа ҡарар иттеме, өнөндә ирек бирмәгәс, төшөндә тотҡондан ысҡынған тойғоларын кире бикләргә тәҡәте ҡалмағайнымы — уйҙар тулҡынына бирелеп, яҙмышының даръяһын айҡаны. Дөрөҫөрәге, булмышын икегә бүлде. Бер яртыһы күҙәтсе булып ярҙа ҡалды кеүек... Сит кеше һымаҡ, ҡырҙан баһа биреп торорға...

...Ҡояш кеүек ине Фәриҙә. Көлөп ебәрһә, нурланып торған түңәрәк йөҙө тағы ла балҡып китә, ә былай ҙа мөләйем күҙҙәре бөтөнләй юғалып тора. Ҡайҙа килеп инһә лә кешеләр, йөҙҙәре яҡтырып, һулыштары иркенәйеп, уға табан борола. Көнбағыш кеүек.

Ҡарап торһаң, артыҡ сибәр ҙә түгел, ә күңелде арбай. Наҙ, ихтирам тулы ғаиләлә тыуғанға күрә, һөйөү уға һулар һауа кеүек тәбиғи күренгәндер.

Береһенә ун дүрт, икенсеһенә ун алты булғанда ғашиҡ булышып, шул тойғоно ғүмер буйы һаҡлаған ата менән әсә балаһы бит ул. «Тәү күргәндә һин миңә саҡ ҡына һаҡһыҙ ҡағылһаң да ыуалырға торған нәфис гәлсәр ваза кеүек булып тойолдоң. Эргәңдә тын алырға ла ҡурҡып тора торғайным», — тигән атаһы әсәһенә. Ә әсәһе өләсәй булғас та, төшкөлөккә тамаҡ ялғарға ҡайтҡан бабайын, егете менән күрешмәгә әҙерләнгән ун ете йәшлек ҡыҙ кеүек, төҙәнеп ҡаршылай ине.

Бына ошо һауаны һулап үҫкән ҡыҙ, эргәтирәлә башҡасараҡ тормош, йәмһеҙ ҡылыҡтар ҡайнағанын белһә лә, уларҙың үҙенә ҡағылышы юҡ та, булмаҫ та тип уйлағандыр, күрәһең. Ә, бәлки, булмышындағы наҙ, йылы, һөйөнөс таш йөрәкте лә иретер тип үҙ-үҙенә артыҡ ышанғандыр.

«Ҡыу сыбыҡты ҡаның менән һуғарһаң да сәскә атмаясағын белмәйһеңме ни һин?!» «Ҡыу

сыбыҡ икәнен белмәнем, өләсәй. Биллаһи, белмәнем...»

Белгәйне бит ул, һиҙенгәйне. Алһыу-аҡ сәскәгә төрөнгән алмағас кеүек ине Фәриҙә туй көнөндә. Ҡүңелендәге аңлайышһыҙ хәүеф, сәбәпһеҙ һағышты йөҙөндәге йылмайыу менән йыуырға тырышты. Уйһыҙ йәшлек менән хушлашыу шулай булалыр, тип уйланы. Борсолор өсөн сәбәп юҡ бит. Табын матур, барыһы ла көләс, алсаҡ...

— Ошонда ултырған һыу һөлөгө кеүек ун биш егеттең барыһының да күҙе төшөп йөрөгән иң шәп ҡыҙыбыҙҙы алдың, Мәхмүт, — тип тост әйтте курсташтарының береһе. Унан Фәриҙәгә ҡарап: — Бик һайландың. Бәхетле бул инде, — тип өҫтәне. Көтмәгәндә ҡара янып киткән кейәү, гөрләшеп ултырған табынды хафаға һалып, урынынан торҙо ла йүгерә-атлап сығып китте.

Барыһы ла аптырап ҡалды. Кейәү үңәрҙәре, төп ҡоҙа менән ҡоҙағый уның артынан йүгерҙе. Әле әйтелгән һүҙҙәрҙән хилафлыҡ эҙләп, нимә эшләргә белмәй ултырып ҡалған Фәриҙәне үҙенең туғандары йыуатты. Күңеле ҡырылһа ла, һаман аңларға тырышты ул Мәхмүтте: «Һыу һөлөгө кеүек егеттәр араһынан бер зәғифте һайланың», — тип әйткән кеүек ҡабул иткәндер, тип йәне әсене.

Кейәүҙе, бала кеүек көйләп-сөйләп, саҡ кире алып инделәр. Тик туйҙың шат йөҙөнә, алтынһыу һурпаға төшкән ҡара тараҡан кеүек, һөрөм ятҡайны инде.

Оҙатып килгән иптәштәре уйын-көлкө менән сығып китеп, аҡ келәттә икеһе генә ҡалғас, Мәхмүт, ир менән ҡатын булып үткәрәсәк тәүге төн наҙын көтөп бер аҙ оялған да,



тулҡынланған да кәләшенә тишерҙәй итеп ҡарап торҙо ла:

— Ун бишебеҙҙең ҡалдығын алдың, тип күҙгә ҡарап ҡайһылай мыҫҡыл иттеләр! — тине, усал итеп көлдө. Фәриҙәнең нәфис күңеленә ҡанын сәсрәткәнсе ҡамсы менән һыҙырҙылармы ни?! Ә кейәү, һыҙланыуҙан шаңҡып ҡалған кәләшен, баҡаға ҡағылғандай сирҡанып ситкә этте лә артын ҡуйып ятты.

Нишләп уның менән ҡалды Фәриҙә ошонан һуң? Кеше алдында намыҫланыуҙанмы, әллә күпме аҡса түгеп туй яһаған ата-әсәһен аяуҙанмы? Туй табынында уҡ әсәһенең хәүеф ҡатыш ҡыҙғаныу менән ҡараған әрнеүле күҙҙәрен күргәс тә үҙенең ни тиклем яңылышҡанын аңлағайны түгелме һуң ул? Нимә туҡтатты уны? Әле һуң түгел ине бит. Яратыуҙа юҡ ине.

Бала саҡта яратып йөрөгән егетенең ихтыярһыҙҙан башҡаға өйләнергә мәжбүр булыуына шаңҡып ҡалған һәм үҙе өсөн бәхет бөттө, тип төшөнкөлөккә бирелгәнгә шулай кәмһетеүгә сыҙаны, үҙен бөтөнләй һанламаған кешегә рәнйешен йота алдымы?

Хәйер, яратыу юҡ ине, тип әйтеүе еңел. Ә бит яҙмышын бәйләргә тәүәккәлләгәс, ниндәйҙер тойғолары булған?..

Бәләкәй сағынан ташландыҡ бесәй, хужаһыҙ эт, ҡанаты ҡайырылған ҡош янынан вайымһыҙ үтеп китә алманы. Хатта баҙарҙа ла үтмәҫтәй тауарын тәҡдим итеп өңшәйеп торған әбейҙәрҙе әллә ҡайҙан күрә һалып, алманың ҡортлоһон, көнбағыштың көйгәнен һатып ала торған холҡо бар ине. Мәхмүткә лә шулай ҡаранымы?

Уны тәү тапҡыр күргән мәлен һис онотаһы

юҡ: больницаның хирургия бүлегендә оҙон коридор буйлап арбала алып киләләр ине уны. Бында практика үтеп йөрөгән Фәриҙәнең һушһыҙ ятҡан был йәш кенә зәғиф егетте ҡыҙғаныуҙан йөрәге әрнеп ҡалғайны. «Бала кеүек күкрәгемә ҡыҫып, бөтә бәләләрҙән ҡурсалағым килде», — тип әсәһенә ҡайтып һөйләгәйне. Атаһының таныштарының улы булғанын, ҡулын фажиғәгә осрап өҙҙөргәнен белгәс, уның янына йыш ҡына инеп йөрөй башлағайны.

«Башҡаларҙы кем дә яратыр, был зәғифте минән башҡа кем бәхетле итер», — тигән тойғоно һөйөү менән бутағанмы? Ир булған кешеһен йәлләп түбәнһеткән икән, тегеһенең ғүмер буйы уны ғазаплауы тәбиғи түгелме?

«Алла ихтыярына ҡаршы төшөп, үҙенде унан да мәрхәмәтлерәк тип кинәнеү — тәкәбберлек, — тигән кеүек булды өләсәһе. — Сабыр төбө гелән һары алтын түгел, һары һағыш, ҡара ҡайғы, әсе үкенес тә. Тәүге төндә үк үҙеңде сырмай башлаған ауҙы һирпеп ташлап тороп сығып китһәң, кем һине ғәйепләр ине? Ғөмүмән, кемдең кемдә эше бар. Бөгөн килеп һиңә бәрәү ҙә үҙ бәхетен, үҙ сәләмәтлеген бүлеп бирмәй бит. Бирә лә алмай. Кешеләр бер-береһен бәхетһеҙ итә генә ала. Ә үҙен бәхетле итеү-итмәү — һәр кемдең үҙ ихтыярында».

«Ошо аҡылдарың менән һин шул саҡта ҡайҙа инең, өләсәй?» Шунда ине бит. Ул Мәхмүтте тәү күреүҙән үк оҡшатманы. Тик сөңкөлдәк әбейҙең киҫәтеүенә кем ҡолаҡ һалған?

Ә ул ир ҡатыны тигән исем алған теге күҙ йәшле төндән һуң үҙ-үҙенә үкенеүҙе, икелә-



неүҙе ныҡлап тыйҙы. Артабан егерме йыл буйы бәхетһеҙ икәнен кешегә генә түгел, үҙенә белдерергә лә ихтыяр итмәне. Түҙгеһеҙ булғанда күҙ алдары ҡараңғыланғансы тешен ҡыҫты. Шулай тешләнә-тешләнә, рәнйештәре ҡара ҡанлы эренгә әйләнеп, уртын серетә башлағансы түҙҙе түгелме һуң ул?

«Эш уҙғас, үкенеүҙән ни файҙа?» — тип хәтирәләренән арынмаҡсы була Фәриҙә. Тик тынғыһыҙ аңын нимәгә ҡушырға белмәй аптырай: киләсәге юҡ, бөгөнгөһө — ғазап, ә үткәне...

Ҡешенең яҡты, йылы иҫтәлектәре булырға тейеш. Тормоштоң елегеңә үтерлек һалҡындарында уларҙы бөрәмтекләп кенә иҫеңә алаһың да, ҡыҙыу итеп яғылған мейес ҡуйынына һыйынғандай йылынаһың. Фәриҙә лә ҡотолоу эҙләп ҡыуанысла мәлдәренә ҡасырға маташа. Тик тормошоноң иң бәхетле, иң йәйғорло саҡтарында ла ҡара һөрөм бар, иң ҡәҙерле, изге хәтирәләргә лә нәжес яғылған. Үткәндәрҙең аҡ нурынан көс алам тип, уларҙы яңыртһа, ҡыуаныс менән бергә бысрағы ла ҡалҡа.

...Йәшлектә йәшәү ҡөҙрәте артап торғас, тәүге рәнйешен тиҙ онотто Фәриҙә. Хәйер, берҙән-бер әрнеү булһа, бәлки, оҙағыраҡ әүәләргә лә булыр ине. Тик Мәхмүттең танышып, күрешеп йөрөгәндә мәрәкә тойолған, ныҡ яратыуының күрһәткесе итеп иҫәпләнгән ҡылығы — Фәриҙәне иҫкән елдән дә ҡыҙғаныуы — бергә йәшәй башлағас ҡурҡыныс сир рәүешен алды, оло ғазапҡа әйләнде.

Врач булараҡ, ул Мәхмүттең көнсөллөгөнөң сәбәбе — һыңар ҡулы юҡлыҡтан килеп тыуған кәмһенеү тойғоһо икәнен аңлай ине.

Шуға күрә уның шиктәрен үҙенең сафлығы менән тарата, йылыһы менән имшетә алыуына ышанды. Тыныс, ихтирамлы, ябай ғаиләлә үҫкән Фәриҙә үҙенең ниндәй емергес, ҡурҡыныс сиргә ҡаршы торорға маташҡанын ныҡлап күҙ алдына килтерә алмай ине шул. Тәүҙә ул быны күңелһеҙ, әммә күнергә кәрәк булған етешһеҙлек кенә тип ҡабул итте. Аңлатырға, үҙенең ғәйепһеҙлеген, сафлығын иҫбатларға маташты. Тик үҙеңдең уйнашсы түгел икәнеңде, теләһә ниндәй уйҙар башыңа инеп тә сыҡмағанын нисек иҫбат итергә мөмкин?

«Ни өсөн күрше ир иң тәүҙә һинән, унан ғына минән һаулыҡ һорашты? Урамда осраған егет нишләп йылмайып өндәште? Берәй яҡынлығың бармы әллә? Ни өсөн автобуста иҫерек ир һиңә бәйләнде? Уйнаш икәнең йөҙөңдән күренеп торамы әллә? Бәлки, үҙең форсат биргәнһеңдер?» Иртәнән алып ятып киткәнгә тиклем яңғыраған ошондай кәмһеткес һораўҙар Фәриҙәнең тормошон ҡара һөрөмгә әйләндерҙе. Иренең урынһыҙ шиктәренән, ырғытҡан бысраҡтарынан ни тиклем ялтанып ҡалырға тырышмаһын, «саф алтынға нәжес йоҡмай», тип Аҡмулланың һүҙҙәрен доға итеп күпме ҡабатламаһын, үҙен ытырғаныс итеп тоя. Үҙен генә түгел, күршеһен, урамда осраған һәм нишләптер һирпелеп ҡараған таныш булмаған ир-атты ла үҙенең ғазаптарына сәбәп тип һанап күрә алмай башлай.

Кешеләрҙе тиң күреп, ишле дуҫтар менән аралашып йәшәүҙе мәртәбәгә һанап, күңелле ғүмер иткән ғаилә ҡыҙы бына шулай тормошҡа сығып бер-ике йыл үтеүгә, кешегә һаулыҡ ҡушырға, өндәшергә бикәр булып торған ҡурҡаҡ ҡатынға әйләнде. Тәүҙә таныштарға һүҙ ҡушмай, күрмәмешкә һалышып үтеп китергә тырышыу иҫәүәнлек булып күренһә лә, ғаиләләге тыныслыҡ хаҡына күнде. Тик гелән кеше менән аралашмаҫҡа, башты аҫҡа баҫып, ҡырағайҙарса ҡыланып йөрөргә мәжбүр булыуы ғәрлек ине.

Донъяла ҡатын-ҡыҙҙар менән ирҙәр араһында енси ҡыҙыҡһыныу, енси тартылыуҙан башҡа, иптәшлек, рухи яҡынлыҡ, ихтирам кеүек күркәм мөнәсәбәттәрҙең дә барлығын аңлата алманы ул шиксел иренә. Аптырағас, үҙ-үҙенә бикләнде һәм тәҙрәләре тыштан ырғытылған тиҙәккә бысранған йонсоу, бахыр йортҡа оҡшап ҡалды.

Мәхмүт үҙенең Иблестеке кеүек яуыз аҡылы менән уның бөтә юлдарын да быуып ҡуйҙы, хатта, мөмкин булһа, һулар өсөн һауаны ла үлсәп кенә бирер ине кеүек. Сөнки ул, Фәриҙә ҡайҙа ғына урынлашһа ла, эштән сығырға мәжбүр итә башланы. «Больницала ир ат күп. Поликлиникала баш врач — ир кеше». Икенсеһендә һәйбәт кенә эшләй башлағас, сирле ирҙәрҙе ярым сисендереп ҡарайһың, тип бәйләнде. Балалар баҡсаһына урынлашып, инде тынысландыҡ тигәндә, балаларын алырға килгән атайҙарға быйтаңлауың ихтимал, тип йөҙөн йыртты. Уйында бары тик ғаилә: ире лә балалары ғына икәнен иҫбатлар өсөн башын ташҡа ороорға әҙер ине ҡатын. Әгәр бынан берәй фәтүә сыҡһа.

Хатта тәүге балаларының тыуыуы ла ҡара ҡайғы, шик һөрөмө менән ҡаймаланған. Мәхмүт, тиҙҙән сабыйҙары тыуасағы хаҡында хәбәрҙе ишеткәс, кис буйы уйланып йөрөнө лә:

— Нишләп һин, өйләнешкәндән һуң йыл

ярым буш йөрөнөң дә, әле килеп, атайым беҙҙә ҡунаҡ булып киткәндән һуң ғына ауырға ҡалырға булдың? — тип әйтеп һалды.

«Бала булһа, тынысланыр. Үҙен дә, мине лә сәбәпһеҙ шик-шөбһәләр менән ғазаплауҙан туҡтар», — тигән өмөтөнә йыуанып йөрөгән Фәриҙә көтөлмәгән хаяһыҙлыҡтан һөртөп торған сынаяғын төшөрөп ватты. Уның ҡаушауын үҙенсә юраған ире тағы ла шикләнеберәк төпсөнөргә тотондо.

«Был мәсхәрәне күтәрә, үткәрә алмам», — тип уйлағайны ҡатын. Ҡеше түҙә икән. Батып барыусы һаламға тотонған кеүек, башҡа яҙмыштарҙан үҙенә таяныс эҙләне. Уның ғына түгел, эргә-тирәһендәге бик күп ғаиләләрҙең үҙ-ара мөнәсәбәте насарлығынан ниндәйҙер еңеллек алған бахыр кешегә әйләнде ул.

«Мин иртәнге намаҙҙа ваҡытта әсәйең Ай аллаһы менән зина ҡыла. Уның хыянаты һалған яраны уңалтыр өсөн миңә әсәйеңдең, минең ҡатынымдың, башын ҡырҡып алып килеүең кәрәк». Бынан ике мең йыл элек йәшәгән һәм улына бына шундай йомош ҡушҡан көнсөл ҡарт менән атаһының бойороғон һүҙһеҙ үтәп, әсәһен салған улан хаҡындағы боронғо хикәйәт әҙәм балаһының булмышы быуаттар дауамында үҙгәрмәгәнен күрһәтеп, уға ғазабына сыҙарға көс бирә ине.

«Ярата, шуға туҡмай. Мине туҡмағанда уның үҙенә миңә ҡарағанда ла ҡыйынырак бит», — тип ирҙәрен аҡлаған ҡатындарҙың тәүге ҡарашҡа аҡылһыҙлыҡ булып тойолған сикһеҙ фиҙәкәрлеген үҙе кисереп белә ине хәҙер Фәриҙә.

Мәхмүттең хәленә инергә, уны аңларға тырышыуы арҡаһында ул хатта үҙ-үҙенән шик-



ләнеүгә ҡәҙәр барып етте. Туҡталышта автобус көтөп йә сиратта тороп оҙаҡлаһа: «Ошо ваҡыт эсендә мин ысынлап та берәйһе менән күрешеп өлгөрә алыр инем бит», — тип уйлай ҙа, ире алдында үҙен ни өсөндөр ғәйепле тойоп, ҡайтып инер ине.

Ни өсөн ғәйепле? Был донъяға тыуғаны, йәшәгәне, һулыш алғаны өсөнмө? Ҡеше бындай шарттарға күпме сыҙай ала? Бөтөн булмышынды бағышлап, яҙмышынды бәйләгән хәләлең һине түбәнһетеүҙән ләззәт алғанда нимә эшләргә? Иң бысраҡ, иң әрнеткес һүҙҙәр түкөрөп, бәгереңде сала-сарпы телгеләгән ауыҙ үбергә үрелгәндә, ытырғаныс менән этеп йыҡҡан ҡулдар наҙ талап итеп тәнеңде һәрмәгәндә тағы ла йәмһеҙерәк рәнйетеүгә дусар булмаҫ өсөн, һөйөү ишараты сығарыр өсөн ҡайҙан көс табырға? Ата-әсәһе наҙлап үҫтергән ҡәҙерле баланан күңеле зәғиф бер әҙәм тарафынан типкеләнеп ҡәҙерһеҙләнгән ҡатындың йәшәр өсөн түҙеме күпмегә етә? Ни өсөн ул талашманы, һуғышманы, ниһәйәт, өләсәһе әйтмешләй, ҡасып китмәне? Ҡурҡаҡ инеме? Бисара инеме?

Көрәшеп еңер өсөн дошманыңды күрә алмаҫҡа, уның бысраҡ алымдарын ҡулланырға кәрәк. Ә ул һөйөүҙә, күркәмлектә тәрбиәләнгәйне. Сәйер, хәҙер килеп, уны үҙенең һөйөүе үлтерҙе булып сығамы ни инде?!

Фәриҙә, медициналағы бик күп сирҙәрҙең нигеҙендә психологик сәбәптәр ята, тигән ҡараштың дөрөҫлөгөнә ышана ине. Әле үҙенең тормошона нисек бар, шулай ҡарарға ҡыйыулыҡ тапҡас, ауырыуының сәбәбен дә төшөнгәндәй булды.

Хоҙайҙың йәшәү, балалар үҫтереү, бәхет

өсөн тип биргән ҡөҙрәтен, өҙөлгәнде ялғау, йыртылғанды ямау, йәрәхәттәрҙе уңалтыу өсөн, исрафлап бөткән ул. Аҡылы менән үҙ-үҙен «боҙға һыйынып та йылынып була» тип ышандырырға тырышҡан һайын, булмышы ныҒыраҡ өшөгән. Аңынан ҡыҫырыҡлап сығарылғас, төпкө аңға боҫҡан асылы, нисәмә йылдар ҡанһырағандан һуң, тонсоғоп һүнә башлаған.

Былай йәшәүҙең бер кәрәге лә юҡ, тип ҡарар иткән төпкө аң. Әҙәм зиһененең хәйләләрен, ҡапма-ҡаршылыҡтарын төшөнмәгән һәм сабый тәбиғилеген, сафлығын һаҡлаған төпкө аң ғәҙел туралыҡ менән шул фекерен тормошҡа ашыра башлаған. Йәндең йәшәргә сараһы юҡ икән, уны ҡыҫыҡ ситлектән сығарыр өсөн тәнде емерергә кәрәк. Шулай итеп, йәшәргә ихтыяр бөтөү менән, организм үҙ-үҙен үлтерергә тотона.

Өнһөҙ сабырлығы менән үҙенә үҙе үлем язаһы сығарғанын аңлаған Фәриҙә ниндәйҙер ярҙам, таяныс булһа, батҡан һаҙлығынан ҡалҡып сығырҙай тойоп, иртәнсәк ағаһы менән еңгәһен саҡыртып алды.

Хәле бөтөнләй насарайғанын күреп, уны аҙна-ун көнгә булһа ла больницаға һалып алырға булдылар. Сәләмәтләнеренә бер кем дә ныҡлап ышанмай ине инде. Тик әле йәшәргә лә йәшәргә тейеш булған йәп-йәш туғаныңдың күҙ алдында һүнеүен күреү — һау кеше өсөн түҙгеһеҙ ғазап. Унан, өмөт тигән нәмә йән сыҡҡансы ҡала бит.

Сирҙең үҙе кеүек һорғолт һары стеналы больницаның оҙон коридорынан ағаһы уны бала кеүек кенә күтәреп алып китте. Ябығып, шалтыр-шолтор һөйәк кенә булып ҡалған һеңлеһен күтәреп барыу ир уртаһындағы кешегә ауыр түгел, тик үҙәкте өҙөп әрнетерлек ине. Уларҙың араһында туғанлыҡ хисе бәләкәйҙән үтә көслө булды. Ғаилә ҡороп, бала-сағалы булғас та ҡатнашып йәшәргә тырыштылар. Ағаһы һеңлеһенең ни тиклем ауыр йәшәгәнен һиҙемләһә лә, Фәриҙә үҙе зарланмағас, бер нисек тә ярҙам итә алманы. Мәхмүт менән яҡынайырға, уртаҡ тел табырға маташып та ҡараны. Тик кейәү кешенең зәһәр яһиллығы менән йүнһеҙ бисәләргә хас ваҡсыл мыжыҡлығы уны сығырынан сығара: «Зәғиф булмаһа, Фәриҙәнең хаҡы булмаһа, һеңдергәнсе һуғыр инем инде!» — тип тешләнеп ҡайта торғайны. Бер ваҡыт: «Нисек түҙәһең шуға, һылыу? Яратаһыңмы?» — тип һорап та ҡараны.

«Уның янында ышаныслы, — тигән булғайны Фәриҙә. — Ул бер ваҡытта ла мине ташламаясаҡ. Битемдән көлөп, ситкә йөрөмәйәсәк». Ташламаясаҡ... Ҡорбанын алҡымынан умырып алған йыртҡыс кеүек...

Һеңлеһе ауырыуға һабышҡаны бирле ағаһы көн һайын, тормоштоң үҙе кеүек дәрт, нур, хуш еҫ аңҡытып, ун-ун биш минутҡа ғына булһа ла уның янына инеп сыға. Көслө, йылы устарына уның ҡоро һөйәк булып ҡалған һапһары ҡулдарын йомоп хәбәрен һөйләй, үҙендәге һөйөү нуры менән йылытып, уның ҡороған ағас кеүек ҡатҡан булмышына һут өрөргә тырыша. Шул ваҡыттарҙа Фәриҙәгә был тормоштоң уға тип бүлгән мәрхәмәте ҡалғандыр кеүек булып китә.

Әле үҙен яратып та, йәлләп тә күтәреп алған ағаһының киң күкрәгенә һыйынып барғанда нимәнән мәхрүм булып, өшәнеп ғүмер һөргәнен аңлатырлыҡ хәтирә йәшен кеүек ялт-

ланы ла, зиһенен үкенес менән ҡамсылап үтте. Уны тормош юлынан күтәреп үтеүҙе бәхет һанап, наҙлап йәшәтерлек кешеһе бар ине бит уның. Үҫмер саҡтың иң яҡты иҫтәлеген, тәүге (һәм һуңғы) яратыу, яратылыу шатлығын ҡалҡып сыҡмаҫлыҡ итеп, таш бәйләп аһ-зар, рәнйеш даръяһына үҙе бырағтырғайны. Әле ул һис көтмәгәндә балҡып китте лә сөрөк кеүек ыуалап барған булмышын тотош ялмап алды.

Шул саҡ мейеһенең түренә, асылының үҙәгенә инеп оялап, ҡылығын ғына түгел, уйын шымсылап, аңдып ултырған ире бысраҡ һәрмәүестәрен ҡыбырҙатты. Тертләп, яҡты иҫтәлектәрен ситкә һирпә һалған Фәриҙә үҙенең тәне түгел, йәне ҡол икәненә тағы бер ҡат инанды.

Палатаның ап-аҡ түшәменә текләп ятҡанда ла эске ҡалтыраныуын туҡтата алмай йонсоно.

Булмышының ҡайһы тәңгәлендә ул үҙе, әҡайҙа Мәхмүт? Ошо һорауына яуап тапмай тороп, йәне тынмаясағын тойҙо. «Нимәнән ҡурҡам мин? — тип өгөтләне ул үҙен. — Әжәлең үңәсеңдән алған мәлдә тағы нимәнән ҡурҡырға мөмкин? Әллә ҡолдоң йәне ул үҙе үлгәндә лә ҡол булып ҡаламы? Был донъяла һис бер нәмәң дә ҡалмағас, нисек ҡол булып ҡалыу мөмкин?»

Еңгәһенең шифалы ҡулдарының рәхәт итеп башына массаж яһауынан йоҡомһорағайны, ҡапыл тертләп уянды ла, әсе тауыш менән ҡысҡырып, урынынан торорға маташты.

Медсестралар янына сыҡҡан ерҙән йүгереп килеп ингән еңгәһенә, йәне сығырҙай булып



сабырһыҙланып, мөйөштәге үрмәксе ауын күрһәтте:

— Үҙәк өҙгөс итеп безелдәй... — тине ул ялбарыулы ҡарашы менән бәғерҙе телеп. Ауға эләккән һәм йәшәү өсөн бирелгән бөтөн ҡөҙрәтен һалып әжәл менән алышҡан бисара себенде ҡанын эскән оло ҡорһаҡлы хәшәрәт үрмәксенән аралап алғанды балаларса түҙемһеҙлек менән көтөп алды Фәриҙә. Хәлгенәһе әптән бөткән бөжәкте тәҙрә төбөнә һалғас, күҙе сығырҙай булып көсөргәнеп, мәхлүктең ҡыбырҙауын көттө. Себен бер генә тапҡыр тыбырсынып, ҡатып ҡалғас, төшөнкө тауыш менән:

— Был мин инем бит... — тип бышылданы ла шымды.

Ошо ваҡиғанан һуң үҙенең йәшәйәсәгенә өмөтө һүнде Фәриҙәнең. Бары шул саҡта ғына Мәхмүт менән бергә, Мәхмүт янында бәхеттең мөмкин түгеллегенә лә ышанды. Бына шул ныҡ әһәмиәтле ике фекер зиһененә һеңгәс кенә тын алышы иркенәйеп, күңеле күтәрелеп киткәнен тойҙо. Сөнки ғүмере буйы аңын, шул арҡала йәне менән тәнен дә ҡоршап торған ҡурҡыу бөттө. Әжәл боғаҙыңдан матҡып тотоп алғанда тағы нимәнән, кемдән ҡурҡырға мөмкин?!

Иренә рәнйешен ғүмерендә бер генә тапҡыр күрһәтте ул. Күрһәтергә батырлыҡ тапты — үлер алдынан...

Алмаш-тилмәш эргәһендә ултырған еңгәһе менән һеңлеһе, ауырыу ҡатыны янына килергә бер ҙә атлыҡмаған Мәхмүттән аҙға ғына булһа ла үҙҙәрен алмаштырып тороуын үтенде. Тик бер нисә минуттан Фәриҙәнең ҡот ос-

малы итеп әрнеп ыңғырашыуына йүгерешеп кире килеп инделәр.

— Уф, кейәү, ни эшләттең?

Йөҙөнә ризаһыҙлығы ҡып-ҡыҙыл тап булып тимгел-тимгел яғылған Мәхмүт стена эргәһендә баҫып тора, ә ҡоро һөлдә ҡатыны ҡул суҡтарын болғап уны һаман ситкә, алыҫҡараҡ этергә теләгәндәй...

Укол һалып саҡ тынысландырып алғандан һуң ғазаптарҙан тағы ла төпкәрәк батып киткән күҙҙәренән сыҡҡан йәштәре, күҙ соҡорҙарына тулып торҙолар ҙа, ситенән ашып ике сикәһенән ағып төштөләр.

— Башҡа эргәмә килтермәгеҙ, йәме, — тип бышылданы Фәриҙә бәғерҙәрҙе өтөр зар менән. — Аҡтыҡ йәнемде һурып алған кеүек.

Тәүге һәм һуңғы ризаһыҙлығы шул булды. Йәшәү, бәхет өсөн бирелгән ҡөҙрәтен рәнйеүҙәрҙе онотоу, йәрәхәттәрҙе уңалтыу өсөн исрафлап бөткәс, ҡара гүрҙе яҡты донъянан артығыраҡ күреп китеп барҙы.

II

...Ул киткәндә донъяны томалап рашҡы яуа ине. Әсе ел энә кеүек сәнскәк ваҡ ҡарҙы асырғанып тәҙрәгә бәрә лә бәрә. Ғүмере бөткәнен белгән ҡыш шул рәүешле һуңғы ажарын сәсә. Ә сибек кенә яҙҙың уға ҡаршы торорлоҡ әмәле юҡ та, мәңге булмаҫ та кеүек. Тәҙрәгә ҡарап ятҡан Фәриҙәнең үлемесле ауырыу аяуһыҙ теткеләгән тәне менән йәненә тәбиғәттәге был айҡашыу тағы ла нығыраҡ ғазап килтерә. Был донъяла үҙе өсөн йылы ла, өмөт тә ҡалмаған кеүек тойола уға. Шуға күрә тормош тип аталған ярһыу арғымаҡтың ял-



быр ялына һаман ҡырталашып аҫылынып барыуҙан файҙа юҡ. Наҙ өсөн тип тапҡан балаларын ҡан илатып яуыз атай ҡулына ҡалдырып китеүе әйтеп биргеһеҙ ауыр булғанға күрә генә бығаса серәшеп маташһа, әле һуңғы тәҡәте ҡороп, хәлһеҙ бармаҡтарының ихтыярһыҙҙан яҙылыуын тоя. Һуңғы тапҡыр Ер һауаһының татын тойорға теләгәндәй, ҡомһоҙланып һулыш ала...

Төндәр буйы баш осонда ултырып, ғазаптарын еңеләйтергә тырышҡан еңгәһе Зәлифә уның мәңгелек йәне мәсхәрәләнгән тәнен ташлап сыҡҡанын ана шул һуңғы һулышы өҙөлөүҙән генә абайлай.

Был йортҡа әжәлдең киләсәге ҡотолғоһоҙ икәне алдан уҡ билдәле булһа ла, тағы бер йән эйәһенең, бәхет күрмәй, бөткөһөҙ ғазап эсендә китеп барыуы — үҙәк өҙгөс.

Зәлифә еңгәһе күҙенән эркелгән йәштәрен усы менән һыпыра-һыпыра, Фәриҙәнең һуңғы көндәрҙә гел тыңлағыһы килгән ҡурай моңо яҙылған пластинканың икенсе яғын әйләндереп һалып, эшкә тотона. Яҡыныңды юғалтыу ни тиклем әсе булмаһын, тереләрҙең үләләр алдында бурысы бар, хужаһыҙ ҡалған тәнде хәстәрләп ер ҡуйынына ҡуйырға кәрәк.

Әҙәм балаһы донъяға килгәндә кешенең күплеге кәрәк түгел. Кендеген ҡырҡыр бераү булһа — етә. Яңғыҙлығынан тәм тапҡан кеше ғүмер юлынан да бер үҙе үтә ала. Йән биреүгә лә шаһит кәрәкмәй. Үлем туйында иһә кешенең муллығы яҡшы. Хәҙер был йортҡа ла күҙ йәше, аһ-зар тулыр. Үҙҙәрен мәңгегә килгәндәй тойоп йәшәгән тормошҡа ҡомһоҙ кешеләр әжәлдең ҡотолғоһоҙлоғо алдында бер мәлгә тетрәнеп ҡалыр.

һөйөү йәки нәфрәт, яҙмыш йәки йәшәйеш сеймәлткән төйөндәрҙе асырғанып сисергә маташабыҙ, ә Әжәл уларҙы бер һелтәүҙә киҫеп ырғыта. Барлыҡ бурыстарҙы юҡ итә, барыһы ла үҙенән-үҙе хәл ителә, бөтәһе лә яйға һалына — әлегә тере булғандар өсөн үлем шуға тетрәткес тә, ылыҡтырғыс талыр. Беҙ рәнйеткән, беҙ йолҡкослаған кеше беҙҙән, ниһәйәт, азат булып, буй һәм уй етмәҫлек булып, алдыбыҙҙа ята. Донъялыҡтың бысрағынан, ғазабынан мәңгелектең наҙлы ҡосағына ҡасҡан йәне әҙәмдәрҙең ихтыярынан ҡотолдо.

Инеп-сығып, шым ғына һүҙ ярҙамы, ҡул ярҙамы тәҡдим иткән туған-тыумаса, күршекүлән шул хаҡта уйлай.

Тик, мәңгелеккә килгәндәй уйһыҙ йәшәгән кешеләр ошондай мәлдәрҙә лә ипкә килмәй. Иламһыраған булып, шаулап-геүләп килеп ингән ҡарсыҡ шундай заттан. Уның бойороусан, ҡырҡыу, был осраҡта урынһыҙ дәртле тауышы әле бында, әле тегендә яңғырай, ҡысҡырып-ҡысҡырып үҙ ихтыярын тағырға тырыша. Килене ауырыған бирле был тупһаға бик һирәк баҫҡан ҡәйнә ҡарсыҡ өсөн кеше үлеме мауыҡтырғыс театр уйыны кеүек. Шуға күрә уның был әһәмиәтле ваҡиғаны тиҙ генә теүәлләгеһе килмәй.

— Нишләп шул тиклем ашыҡтырып күммәксе булаһығыҙ, ҡоҙаса? — тип бәйләнә ул мәрхүмәнең еңгәһе Зәлифәгә. — Туғандары килеп өлгөрмәй бит...

Рәхимһеҙ ҡарсыҡҡа күптән асыуы килеп, уны мәрхүмә хаҡына ғына тышҡа сығармай түҙгән Зәлифә сабырлығының аҡтығын йыйып яуаплай:



— Күргеһе килгән туғандарының барыһы ла үҙе тере саҡта күреп, тәрбиәләшеп, хушлашып ҡайтты...

Ҡарсыҡ тәүге ҡарамаҡҡа тыныс ҡына әйтелгән был һүҙҙәрҙең асылына төшөнә һалып хәбәрҙе ҡуйыртмай, шулай ҙа:

— Ире ҡайтҡанын булһа ла көтөрһөгөҙ ул, — тип мыҫҡыллы һүҙ ҡыҫтырмай сыҙамай.

Үлем түшәгендәге ҡатынын ҡалдырып командировкаға киткән Мәхмүт бына-бына ҡайтып төшөргә тейеш.

Мәйет һаҡларға килгән әбейҙәр янына инеп ултырған ҡарсыҡ бында ла толҡа тапмай. Бойоҡ сырайлы тиҫтерҙәренең ара-тирә бышылдашып ҡына һүҙ ҡатып, күберәген доға уҡып ултырыуы уға күңелһеҙ. Шуға күрә, яйы менән файҙаланып, үҙ хәсрәтен бүҫкәртергә керешә: был ауырыу йәшен дә, ҡартын да аямай инде, бына уның да ҡыш буйы быуындары һыҙлап йонсоған, ҡан баҫымы юғары. Хәбәр һөйләгәндә уның ауыҙы тулы алтын тештәре ялтырап-ялтырап китә, йәштәрҙекеләй сағыу тауышы ҡолаҡты ярып бара. Әбейҙәрҙең ни эшләргә белмәй сирылышып бер-береһенә ҡарашҡанып күреп, Зәлифәгә тағы ҡыҫылырға тура килә.

— Һикһәнгә еткәс, һау-сәләмәт булып булмай инде, ҡоҙағый: ана, еләк кеүек йәштәр үлеп китә, ә беҙ бит, ыңғыр-шыңғыр йөрөһәк тә, йәшәйбеҙ әле.

— Ярай, улайһа, — ти ҡарсыҡ. — Мин бөгөнгә ҡайтайым. Һуңғы айҙа нык йонсоноң инде, ҡоҙаса, тағы бер көнгә генә сыҙаһаң.

Икенсе көндө балҡып сыҡҡан ҡояш, күркәм яҙҙың быйыл да яуыз ҡышты еңеп сыҡҡанын хәбәр иткәндәй, бар донъяны алтын-

һыу нурына ҡойондора. Түбәләрҙән тыпырҙашып тамған тамсылар ҙа, шатлығынан йөрәккенәһе ярылырҙай булып һайраған турғай ҙа тормоштоң барыбер тантана итәсәген үҙҙәренсә раҫлап кинәнә. Тик Фириҙәнең ҡайғыһы ғына өс бүлмәле фатирына һыймай, туғыҙ ҡатлы йорттоң ихатаһына ул сыҡҡан. Уның менән хушлашып ҡалырға килгән кешеләр төркөм-төркөм дә, берәм-берәм дә килә.

Был тормошта сәйер бер ҡапма-ҡаршылыҡ бар. Йүнһеҙ бәндәнең аҡтыҡ ҡылғаны яҡшылыҡ була. Ул үлеме менән башҡаларға еңеллек килтерә. Ә тотош ғүмере изгелектән торған кешенең үлеме яуызлыҡҡа әйләнә, сөнки ул үҙен яратҡандарҙы ҡара ҡайғыға һалып китә.

Бер кем менән дә бик аралашмаҫҡа тырышып, шым ғына йәшәгән ҡатындың үлеме ҡасандыр үҙе дауалаған балаларҙы ла, уларҙың ата-әсәләрен дә, хеҙмәттәштәрен дә, башҡа әллә күпме кешеләрҙе лә битараф ҡалдырмаған. Инеүселәр баш ҡағып ҡына һаулаша ла, нурлы ҡояш та балҡыта алмаған, ҡайғы һөрөмөнән ҡараңғыланған бүлмәләргә үтә. Ә мәрхүмәнең ире Мәхмүт, ҡаҡса кәүҙәле, осло күҙле тәбәнәк кенә кеше, инеүселәрҙе үҙенең етерлек кимәлдә ҡайғылы булмағанына уңайһыҙланғандай ҡаршы ала. Ҡисәге кис ҡайтып төшөп, ҡатынының, ниһәйәт, ғазаптарҙан ҡотолғанын белгәс биләп алған еңеллек уны һаман ташламай. Тәрбиәле кеше булараҡ, ул тойғоһоноң хилаф булғанын аңлай һәм уны кешеләрҙән йәшерергә тырыша. Шул уҡ ваҡытта үҙенең ике йөҙлө булырға мәжбүрлегенә йәне көйә. Әле уны иң борсоғаны шул — иң кәрәк ваҡытта бер-ике бөртөк йәш



һығып сығара алырмы, юҡмы? Бының бик еңел булмаҫын төшөнә, сөнки ул ҡотолоу тойғоһо биргән кинәнес кенә түгел, бөтөн булмышын йылытып, әллә ҡайҙан, күңелдең ҡараңғы төбөнән рәхәт бер нәмәнең ҡалҡыуын тоя. Тик әлегә ҡыуанырлыҡ түгел... Уға ваҡыт булыр...

Әлегә ул эске хәлен эргә-тирәләгеләрҙең абайлау ихтималынан һағая, шул уҡ ваҡытта туҡтауһыҙ илаған ҡыҙына йәне көйә.

— Шым, бөтәһе лә илағанда иларһың, — тип ыҫылдай шыпырт ҡына уның янына килеп.

— Илаһын. Әсәйҙең үлеме үлсәп кенә йәш ағыҙыр ҡайғымы һуң ул? — тип ҡаршы төшә ҡыҙҙы йыуатҡан Зәлифә еңгә. Уларҙың берберeһенә йәшерен нәфрәт менән тулы ҡараштары зеңкеп ҡаҡлыҡҡан ике ҡылыс аяуһыҙлығы менән осраша. Әммә икеһе лә һуңғы түҙемлектәрен йыйып, урттарын сәйнәй-сәйнәй, асыулы һүҙҙәрен йота.

— Һин, исмаһам, яҡшы әсәйҙең нисек булғанын белеп, уның наҙында үҫеп, унан изгелеккә, эшкә өйрәнеп ҡалдың. Ғүмер буйы яуыз, үҙ-үҙен генә яратҡан ҡотһоҙ кешеләр ҙә бар.

Ҡырт ҡына боролоп китеп барған Мәхмүт Зәлифә еңгәйҙең ҡыҙына әйткән кинәйәле һүҙҙәрен ишетеп, тешләнеп ҡуйҙы.

Мәрхүмәне әҙерләп бөткәс, һуңғы юлына алып сығыр алдынан ултырыштылар. Йәш кенә мулла һутлы, йомшаҡ тауыш менән йыназа уҡый башланы. Өй тулы кешенең көллөһө лә, илаһи доғаларҙың ҡөҙрәте менән, аңлатып бирә алмаҫтай тантаналы ҡайғы тойғоһона сорналды.

Ихтыярһыҙҙан мөнло ауаздарҙың тәьҫиренә буйһонған Мәхмүт ниндәйҙер мәлдә үҙенең онотолоуын аңғарып һиҫкәнде, зәһәр зиһене янынан зирәкләнде. Ул әҫәрләнеп хистәр тулҡынында тирбәлгән әҙәмдәргә айыҡ аҡылдың тәкәббер өҫтөнлөгө менән күҙ йөрөтөп сыҡты ла, ҡиәфәтенә сабыр ҡайғы ишараты сығарып, ҡарашын аҫҡа төбәне. «Аллаһы әкбәр» өсөн әҙерләп асылған усына ябыҡ пәрҙәләге бер семтем тишектән үтеп ингән яҡты нур төшкән. Шундай наҙлы һәм тәү ҡарашҡа күндәм генә нур — усыңа йом да кеҫәңә һал. Уйына көлөмһөрәп, Мәхмүт ҡулын йомдо: ус төбөндә ойоп ятҡан нур тышҡа һикерҙе. «Хас та Фәриҙә кеүек!» Күңел төбөндә ҡуҙғып ҡуйған ытырғаныулы ярһыуына ҡабат баһырау һалып, Мәхмүт һаман моңланған муллаға сабырһыҙ ҡараш ташланы. Яуырынын баҫып торған был күңелһеҙ мәшәҡәттәрҙән тиҙерәк ҡотолғоһо, өйөн иламһыраған кешеләрҙән, ҡайғынан,ә күңелен ҡатынының рухынан азат итә һалғыһы, тормошон яңыртҡыһы килде. Ҡатынынан, ҡатыны янындағы үҙенән ни тиклем арығанын әле яңы ғына аңлай башланы ир. Йылдар буйы уны көнләшеү, унан көнләшеү, уны юғалтыуҙан ҡурҡып ғазапланыу һәм шул ғазаптары өсөн уны уҡ күрә алмау Мәхмүттең күңелен кипкән, төбөндәге ләме шартлап ярғыланған, шөкәтһеҙ үле күлгә әйләндергән.

Егерме йыл буйы ул Фәриҙәне үҙенә буйһондорорға, ихтыярын һындырырға, түҙемлегенең сигенә еткереп, сығырынан сығарырға тырышты. Унын сабырлығын юйып енләнеүен, йәмһеҙ итеп ҡыланыуын, тәмһеҙләшеүен кинәнеп ҡарап торғоһо килде. Шуға күрә ҡатынының үҙен генә түгел — туғандарын, уға оҡшаған китаптарҙы, гөлдәрҙе, хатта ул яратҡан ризыҡты хурланы. Йөҙөнә йылмайыу ҡунып өлгөрмәҫ — Мәхмүт уны өрөп һүндерә һалыр, шунан рәхәтлек табыр ине.

Ҡатынына таҡҡан ғәйептәрҙең төптө нахаҡ икәнен белеү генә түгел, уларҙы алдан, махсус рәүештә уйлап эшләр ине ул. Сөнки ҡатын-ҡыҙ асылы, ғөмүмән, боҙоҡ һәм зинасыл, тип уйлай, улар затын бөтөнләй әҙәмгә һанамау, түбәнһетеүҙән үҙенә ихтирамы арта, шуны мәртәбә күрә. Шул уҡ ваҡытта үҙенең Фәриҙәнең наҙына, йылыһына, һөйөүенә мохтаж булғанын һәм шул мохтажлығы уны үҙен ҡорбанына бығаулап ҡуйғанын тойоуы Мәхмүтте оторо ярһытып, аяуһыҙландырып ебәрә. Ҡатынының үҙенә хыянат итергә ихтималлығы хаҡында уйлауҙан ғына ла Мәхмүттең сәстәре үрә тора торғайны. Шуға күрә ул мәкерле аҡылы менән Фәриҙәнең бөтә юлдарын алдан уҡ томалап, ҡамап, үҙе әйтмешләй, хыянат менән зина «инфекцияһына» түҙгеһез шарттар тыуҙырып ҡуйҙы.

Ҡатынында берәйһенә ҡарата ытырғаныу тойғоһо уятам тиһә: «Нишләп бер-берегеҙгә мыймылдап ҡараштығыҙ? Боҙоҡ эшегеҙ бармы әллә?» — тип шикләнеүе етә. Фәриҙәнең кешеләр менән ҡатнашып йәшәргә теләген дә еңел генә һүрҙе: «Һинең уйнашсы булмышың арҡаһында өйгә дуҫтарымды ла саҡыра алмайым бит», — тип ғәйепте уның өҫтөнә атҡарып уҡ ҡуйҙы. Хатта ҡатыны ауырымаһын, ауырыһа ла бәлә һалмаһын өсөн дә сараһын күрҙе: «Минең алда гонаһың булһа, башың сирҙән сыҡмаҫ, аяҡ-ҡулың ҡорор, сереп дөмөгөрһөң!» — тип ҡарғап ҡуйҙы. Шул уҡ ва-

ҡытта Мәхмүттең кешегә, бигерәк тә үҙен яҡшы тип һанаған, әхләҡле йәшәргә тырышҡан кешегә, етәкселек итеүҙең ҡайһылай еңел икәнен күреп, күңеле ҡайтып ҡуя. Сөнки Фәриҙә урынында сая, ҡарышҡаҡ, холоҡһоҙ, тиле бисә булһа, уны ҡулда тотоуы ҡатмарлыраҡ буласаҡ икәнен яҡшы төшөнә ине. Шул уҡ ваҡытта ҡатынының, ни тиклем иҙелһә лә, рухы менән уға ҡол булмағанын, сабыр күндәмлек битлеге аҫтында буйһонмаҫ ҡөҙрәте йәшенгәнен тоя, үҙенең көсһөҙлөгөнә ғәрләнә ине.

Бөгөн Фәриҙәнең һуңғы туйына шул тиклем күп кешенең килеүен үҙен, Мәхмүтте, кәмһетеү кеүек ҡабул итте. Һуңғы йылдарҙа күҙен ҡалҡытып ҡарарға ла ҡурҡып йәшәгән бисара бисәнең, ғүмеренең аҡтыҡҡы минуттарында ҡурҡыуын еңеп, үҙен янынан ҡыуып сығарыуына, күргеһе килмәгәнен асыҡтан-асыҡ белдереүенә ҡаны ҡарайҙы, тыны ҡыҫылды.

— Зыярат яҡын түгел, йәмәғәт, — тине шул саҡ мулла. — Ҡояш байығансы йәһәтләйек.

— Йәһәтләйек, — тип хупланы Мәхмүт.

«Нурҙы усҡа йомоп булмай. Уның байы ҡояшты томалап, йондоҙҙо һүндереп була». Ошо фекере менән ул бына нисәмә йылдар ҡатыны менән үҙе араһында алып барған сәйер көрәшенә, ниһәйәт, нөктә ҡуйҙы. Үҙенең барыбер еңеп сыҡҡанын уйлап, күңеле күтәрелде.

Мәрхүмәне, йәне ҡоллоҡтан азат булыуына бер тәүлек тулғанда, ер ҡуйынына һалдылар.

Тағы бер үлемгә шаһит булып һиҫкәнгән тереләр, бер аҙға вайымһыҙлыҡтарынан арынып, үҙ тормоштарына ҡайтты. Был донъяға бәхет биреү, бәхет күреү өсөн килеп, бәхеткә



сарсауҙан үлеп киткән ҡатын ҡыҙыл мәтә өйөмө аҫтында бер үҙе ятып ҡалды.

III

Тереләр өсөн яҙ йыл һайын килә. Фәриҙәнең йыллығын уҡытырға йыйылған көн салт аяҙ ине. Мулла мәрхүмәнең рухына Ҡөрьән уҡып, хәйер өләшкәс, табындағы хәбәр донъяуи юҫыҡҡа китте. Сәйәсәттең буталсыҡлығына, замандың болаһына зарланыштылар.

— Ә минең өсөн үткән йыл бик уңай килде, — тине шул саҡ Мәхмүт. — Диссертация яҡланым, машинамды яңырттым... — Унан кухня ишегенән башын тығып, ҡурҡып ҡына иренән бойороҡ көтөп торған йәш ҡатынына һирпелеп баҡты. — Өйләндем...

## ҺАЛҠЫНДА ҺУНГӘН УСАҠ

Һалҡында һүнгән усаҡ һин,
Ел менән дауылды тота алмаған ҡара ишек,
Ҡаһармандың башын иҙгән һарай,
Үҙ ҡапҡасын йотҡан төпһөҙ ҡойо,
Түшәмде тота алмаған өрлөк,
. . . . . . . . . . . . . . . . . .
Хужаһының аяғын ҡыҫҡан сандали,
Кем һөйәрең һинең, кем һаман һөйөклө?
Кемдәрең бар ине һинең? Һанайыммы?

*(Беҙҙең эраға тиклем III быуатта яҙылған* «Гильгамеш тураһында хикәйәт»тән)

Йомшаҡ диванға йомарланып ҡына сумып ҡыҙғылт һары абажурҙың яҡтыһында ейәнсәренә күлдәк бәйләгән Гөлйөҙөм әле өҫтәлде биҙәп ултырған ләләләргә, әле телевизорға мөкиббән киткән иренә һөйөнөп ҡарап ала.

«Өлкәнәйгән һайын йомшара бара, — тип уйлай ул. — Йәш waҡытында ҡыланмағанды, хәҙер һирәк-һаяҡ булһа ла бүләк күтәреп ҡайта. Йә хушбуй, йә тәм-том, йә сәскә... Юҡ-бар алмай, гел затлырағын, яҡшырағын...»

Ҡыҙҙарын башлы-күҙле итеп, олатай-өләсәй булғас, бер-береһенә тағы ла яҡыныраҡ, әҫерәк булып киткәндәренә ҡыуанып бөтә алмай ҡатын. Йәш саҡта тегеһен булдырам, быныһын еткерәм тип, ятаҡтан ятаҡҡа, фатирҙан фатирға күсенеп, балалар менән булашып, бер-беренде генә түгел, үҙенде онотоп китәһең. Тормош юлдашы, бигерәк тә ҡартайғас, ныҡ кәрәк икән. Тәндең бүҫкәргән йылыһын уртаҡлашып, ниһәйәт, бер-берең өсөн, үҙең өсөн йәшәргә ашығаһың.

Гөлйөҙөм «ҡартайғас» тигән һүҙенә көлөмһөрәп ҡуйҙы. Зиннәтуллаға ҡырҡ биш йәш саҡ тулып тора, ә үҙенә ҡырҡ ике лә юҡ. Тик йәштән генә өйләнешкәстәре, ҡыҙҙары ла егермеләре тулыр-тулмаҫ көйө үҙ ояһын ҡорғас, иртәрәк «ҡартайырға», олатай, өләсәй булырға тура килде. Ә былай Зиннәтулланың башында бер бөртөк аҡ сәсе юҡ, тик түбәһендә тәүҙәрәк йоҙроҡтай көлсә кеүек кенә торған пеләше тора-бара йоҡа ҡоймаҡ ҡәҙәрем булып йәйелде. Зарар юҡ, уның байы күңеле тағы ла күркәмләнә төштө.

Гөлйөҙөм йәнә бер йомшаҡ креслоға сумған иренең ялтыр түбәһенә, бер таждарын япрайтып аҫҡан эре ҡыҙыл ләләләргә ҡараны.

Телевизор эсенә инеп юҡҡа сығырҙай булып ултырған Зиннәт ҡатынынан үҙенә бөркөлгән нур ипкенен елкәһе менән тойоп, ни ҡылырға белмәй йонсоп, ҡара тиргә төшөп борһаланды.



— Быға тиклем һине аяп белдермәй йөрөгәйнем, — тине ул ҡапыл тәүәккәлләп. Ҭауышы ҡарлығып, әллә нисек ят булып сыҡты. Әле генә наҙ тулҡынында иҙерәп ултырған ҡатындың йөрәге жыу итеп ҡалды. Шул арала кисәгеһе төндө таңға ҡаршы күргән ҡурҡыныс төшө күҙ алдынан үтеп китте: сынъяһау йорттарының бер мөйөшө емерелеп төштө лә, атылып килеп ингән ҡара дауыл бөтөн донъяларын зил-зибәр килтерҙе, имеш. «Ағын һыуға һөйләүем дә файҙаһыҙ булды, ахыры», — тип уйланы Гөлйөҙөм балаларса бер ҡатлылыҡ менән, әле нимә булғанын белмәгән килеш үк эсе өҙөлөп.

Ә Зиннәт, әллә нисәмә көндәр буйы әҙерләп йөрөгән йәтеш һүҙҙәрен онотоп бөтөп, башлаған хәбәрен нисек алып барып теүәлләргә белмәй, шымып ҡалды: «Яҙып ҡуйырға кәрәк булған, — тип битәрләне ул үҙен дәресен онотҡан уҡыусы кеүек. — Яҙып ҡуйырға кәрәк булған», — тип тағы бер тапҡыр ҡабатланы, үҙе тарыған бәләнән, ҡатынының йөрәгенә һаласаҡ яранан бер ниндәй матур һүҙ ҙә ҡотҡармаясағын аңлаһа ла.

— Беҙ һинең менән сирек быуаттан ашыу татыу ғүмер иттек, — тип дауам итергә көс тапты ул. Әйтте лә тап ошо һүҙҙәрҙе көмөш туйҙарын байрам иткән ҡыуаныслы, түңәрәк табында ауыҙ тултырып һөйләп торғаны иҫенә төшөп, тағы ла нығыраҡ ҡаушаны. — Һиңә кендегем берешкән кеүек күнеккәнмен. — Шулай тигәс, күкрәк тултырып тын алыр өсөн йәнә туҡтаны, ҡатынына ҡайырылып ҡарарға баҙнат итте. Гөлйөҙөм ҡулындағы бәйләменә сытырман йәбешеп, күҙҙәрен ҙур итеп аҫҡан килеш ҡатып ҡалған. «Әйт тиҙерәк, әйтә һал!

Зарыҡтырма!» — тип һөрән һалып дер һелкетер хәлдә булһа ла, өндәшмәй, — ирҙән уҙыу, сабырһыҙланыу ғәҙәтендә юҡ.

— Мин һине ғүмерем буйы яраттым...

Иренең һуңғы һүҙҙәре Гөлйөҙөмдөң йөрәген әсендереп сыйып үтте, сөнки Зиннәтулланың, күпме йәшәп, бығаса ауыҙ тултырып «яратам» тип әйткәне юҡ ине.

— Мин тормошомдо һинән башҡа күҙ алдыма ла килтерә алмайым. — Был тәтәй һүҙҙәрҙең һуңлап әйтелгәнен, хәҙер хәжәте бөткәнен һиҙенгән ҡатын үҙенә атылған бысраҡтан тайшанған кеүек сайҡалып-сайҡалып китә. Зиннәткә Гөлйөҙөмөнөң үҙенә ышанмағанын күреү ныҡ ҡыйын, сөнки уның ҡатынынан һыуынғаны юҡ. Һыуынһа, еңелерәк булыр ине. Ә былай, Гөлйөҙөмдөң йәнен ҡырҡҡыслаған әсе хәҡиҡәт Зиннәттең үҙен күптән уртаға телгән.

— Һин мине дөрөҫ аңлаһаң ине, Гөлйөҙөм. Ике ҡатынды берҙәй яратыу башҡа һыймаҫлыҡ ауыр. Ә мин шул ҡазаға юлыҡтым бит. Бына бер йыл инде. Һин миңә яҡынһың... Ул миңә яҡын. Осрашабыҙ... Бығаса белдермәнек... Инде йәшереп булмай.

Әле генә бөп-бөтөн булған ҡотло донъяһының күҙ алдында шауҙырлап ҡыйралып аяҡ аҫтына ҡойолоп төшөүенән ҡурҡып ҡатып ҡалған Гөлйөҙөмгә иренең тауышы әллә ҡайҙан, алыҫтан, һаңғырау ғына булып ишетелә.

— Һинең мине аңлауың, ярҙамың кәрәк, Гөлйөҙөм. Һинең миһырбанлы күңелеңде беләм, шуға өндәшергә баҙнат итәм. — Зиннәт яҙып ҡуймаһа ла, ятлап алған икән. Артабанғы хәбәре йыр кеүек, шып-шыма ғына аға.

«Эй хоҙайым, нишләп һаман һөйләй икән? — тип уйлай ҡатын. — Шымһа нимә була икән... Емерелде бит инде».

— Ҡисә уны эшенән «Ашығыс ярҙам» менән алып киткәндәр. Бик ауыр операция яһарға кәрәк икән. Бик ауыр операция... Хатта уны имен генә күтәрә алһа ла... — Һөйгән кешеһен юғалтыу ихтималлығынан ғына ла Зиннәттең һулышы өҙөлә, зиһене бутала. Ә Гөлйөҙөмдөң киреһенсә... Мейеһе йоҡонан уянғандай була, сәғәт кеүек аныҡ эшләй башлай. «Ҡисә эш урынынан» тигәнде ишетеү менән күҙҙәре ҡан ҡыҙыл сәскәләргә төштө, был ләләләр башҡаға инселәнгән булған да уның өҫтәленә яңылыштан ғына килеп ҡунаҡлаған икән. Зиннәтулланың ҡото осоуҙан һулышы быуылғанын да абайланы, ә зиһене хәтирәләрҙә аҡтарынды: балалар ауырығанда, исмаһам, бер тапҡыр ошолай ҡурҡҡаны булдымы һуң?

— Уға аҙаҡтан бик яҡшы тәрбиә кәрәк буласаҡ, тиҙәр... — Зиннәт һаман мөңгөрләй.— Һурпа-маҙар, емеш-еләк. Бер нисә тәүлек эргәһендә ултырырға тура килер, ти врачтар.

«Нимә һөйләй ул?» — тип сабырһыҙлана Гөлйөҙөм. Үҙе өсөн донъяның ҡыҙығы бөткәс, башҡаларҙың хәстәре башына инмәй тора.

...Юрғаны аҫтында йомарланып, боҙ киҫәге кеүек туңып ятҡан килеш көтмәгәндә өҫтөнә ишелеп төшкән ҡазанан ҡотолоу юлын эҙләне ҡатын. Ул үҙен Зиннәтулланан башҡа бер нисек тә күҙ алдына килтерә алмай, шуға күрә ҡулын йәки аяғын ҡырҡып ташларға кәрәк тиһәләр, еңелерәк булыр ине кеүек тойола. Эргәһендә ни ҡылырға белмәй бәхетһеҙ генә булып ятҡан ирен йәлләүҙән дә үҙәге өҙөлдө. Ҡеше йәнле, егәрле, аҡыллы иренә

күңел һалған ҡатынды бик яҡшы аңлай ине ул. Хәҙерге заманда Зиннәтулла кеүек ир-ат һирәк.

Башта ҡайнаған мең төрлө уйҙан, ҡапма-ҡаршылыҡлы тойғоларҙан йонсоған икеһенә лә был ҡара төн икһеҙ-сикһеҙ күренде. Шаңлап ҡалған Гөлйөҙөмгә ни өсөндөр бер ҡаҡып ҡалған Гөлйөҙөмгә ни өсөндөр бер ҡарарға килер өсөн үҙенә таңға тиклем генә ваҡыт бүленгән кеүек тойолдо. «Нишләргә? Нишләргә?» — тип ҡат-ҡат һораны ул үҙенән, әйтерһең дә нимәлер ҡылырға мөмкинлеге бар. Нимә эшләй ала ине ул? Бары тик ҡамасау булмаҫҡа, ситкә тайпылырға.

Һыҙланыуҙан ярым үлек, ярым тере килеш ҡарарын әйткәйне, Зиннәтулла йылан саҡҡан кеүек һикереп торҙо. «Әйҙә бер нәмә лә хәл итмәй торайыҡ, — тип инәлде ул. — Хәҙергә күнәйек. Сара һауыҡһын. Унан күмәкләшеп бер нәмә уйларбыҙ. Тыңла инде мине».

* * *

— Бынау апай төнө буйы керпек тә ҡаҡманы. Үҙе шым ғына илай ҙа илай. Был сирле ҡатын уның кеме һуң ул? — Палатаның саҡ ҡына ҡыҫылып ҡалған ишегенән постағы йәш медсестраның сағыу тауышы айырым-асыҡ ишетелә. Һүҙҙең үҙе тураһында барғанын төшөнгән Гөлйөҙөм, ирекһеҙҙән туҡтауһыҙ сыбырҙап аҡҡан йәштәрен һөртөп, әле һаман иҫенә килмәгән көндәшенең йөҙөнә баға. Апаҡ япма ерлегендә ҡатындың ҡып-ҡыҙыл оҙон тырнаҡтары ҡан таптары кеүек күренә. Был тырнаҡтар тормоштоң тәненә батыра йәбешкәндәр ҙә йәшәү өсөн талашалар кеүек. Ә уның кипшергән ирендәрен әленән-әле һыулы бинт киҫәге менән сылатып ултырған Гөлйөҙөмгә был ныҡ сәйер булып күренә, сөнки үҙенең тамсы ла йәшәгеһе килмәй.

— Бушты һөйләмәгеҙ, — тип аптырай сағыу тауышлы медсестра. — Ирендең һөйәркәһенең иренен һыу тамыҙып ултырсәле?! Ҡит, буштыр!

— Сеү, — тип тыялар уны. — Нишләп бөтөн коридорға ҡысҡыраһың?!

— Ҡитсәле, — тип һаман аптырай ҡыҙ. — Уның урынында мин булһам, «тиҙерәк дөмөкһөн», тип теләр инем, моғайын.

— Тәүбә, тәүбә. Дошманыңа күрһәтмәһен тигән.

Был һөйләшеүҙе ишетеп ултырған Гөлйөҙөм, башына төшкән ҡазаға сит кеше күҙҙәре менән ҡарамаҡсы, үҙ кисерештәрен төшөнмәксе. Ысынлап та, нимә уйлап ултыра ул бында? Нимә теләй?

Күңеленең ҡараңғы бер мөйөшөндә: «Үлһен ине», — тигән теләктең ҡыжмырҙай биреп, ҡыжмырҙай биреп ҡуйғанын тоя ул. Тик нимә генә булмаһын, артабан быға тиклемге бөтөнлөктөң, йән тыныслығының башҡа бер ваҡытта ла кире ҡайтмаҫын белә Гөлйөҙөм. Унан килеп, Зиннәтуллаһы ла йәл. Әле алдында ятҡан ҡатындан башҡа иренең бәхетле булмаҫын, уның өҙгөләнгәнен, бөтөрөнгәнен күреп йәшәү үҙенә еңел булмаҫын да төшөнә. Зиннәтулланы, үҙен, был ҡатынды — барыһын бергә сиселмәҫлек бер төйөнгә бәйләгән яҙмышҡа рәнйеүҙән ни фәтүә?!

Гөлйөҙөм ҡурҡып та, түҙемһеҙләнеп тә ҡатындың ҡыҫҡа ғына тырпай керпектәренең елпенеп ҡалҡыуын көттө. «Нимә тип әйтергә белмәй, бер-беребеҙгә ҡарашып, уңайһыҙланып

нисек ултырырбыҙ икән?» — тип борсола ул. Сараның яҡшы күңелле, һәйбәт кеше булыуын теләй. Хәйер, Зиннәтуллаһының насарҙы оҡшатмаҫына ышана. Тәүҙә үтә һылыулығы менән арбағандыр, тип уйлағайны. Өҫтөндәге аҡ япманан да ағыраҡ булып ятҡан ҡатындың иҫ китмәле сибәрлеген тапмағас (үлем менән айҡашып ятҡан кешегә һынап ҡарау уңайһыҙыраҡ булһа ла тыйыла алманы), күңеле матурҙыр, тип һығымталаны.

* * *

Ҡатын-ҡыҙҙың йәшәүгә ихтыярына хайран ҡалырлыҡ. Төнө буйы һаҡлап сыҡты, иртән иренә иҫһеҙ килеш ҡалдырып китте. Ә кискеһен килеүенә Сара Гөлйөҙөмдө бейек мендәренә һөйәлеп ярым ултырған килеш, ҡәҙимге хәлләнеп ҡаршыланы. Сәсе лә таралған. Ҡашын-күҙен дә тәртипкә килтерергә онотмаған. Төнө буйы уның янында керпек тә ҡаҡмай уҙғарған, унан ҡайта һалып иренә тамаҡ йүнәткәндән һуң эшенә сапҡан, кискеһен әлән-борхан тауыҡ һурпаһы бешереп бында йүгергән Гөлйөҙөм, уның көләмһерәй биреп, һынсыл ҡарап ултырыуын күреп, ҡойолоп төштө. Үҙенең йүнләп таралмаған сәсе, күлдәгенең сырыш итәге өсөн оялды. Ана бит үҙ ҡәҙерен белгән ҡыҙ-ҡатын әжәлдең тырнағында сағында ла матурлыҡ хаҡында онотмай. Шулай булғас, ирҙәрҙең улар тип башын юғалтыуы ғәжәпме ни?

Ә Сара, Гөлйөҙөмдөң уйҙарын белгән кеүек, тәкәббер ҡарашы менән уны баштан-аяҡ ҡапшап сыҡты. Үткер күҙҙәре һурпалы банка төрөлгән таҫтамалды айырыуса тикшереп ҡараны. Имтихан биргән насар уҡыусы кеүек, албырғап төшкән Гөлйөҙөм дә ҡото осоп ирекһеҙҙән ап-аҡ таҫтамалына текләне. «Нисәмә йыл ғаилә ҡарап, ҡунаҡтар саҡырып, туйҙар үткәреп, был көнгә төшкәнем юҡ ине лә баһа, Хоҙайым», — тип эске ҡалтыраныуын тыя алмай ыҙаланды. Ярай әле ҡашығаяғы ғүмер буйы балҡып торҙо, битенә кершән яҡмаһа яҡманы, аш-һыуын тәрбиәле тотто. Был юлы ла һурпаһы ла, таҫтамалы ла йөҙгә ҡыҙыллыҡ килтерерлек түгел ине.

Асығыуы еткән, ахыры, Сараның, һурпаны бик теләп эсте. Унан мендәре аҫтынан ҡайылған ебәк ҡулъяулығын алып бөрләгән кеүек йомро ирендәренең ситтәрен нәзәкәтле итеп һөртөп алғас, үҙенә аңшайып ҡарап ултырған Гөлйөҙөмгә әллә ниндәй матур-матур һүҙҙәр табып рәхмәтен белдерҙе. Тегеһе уларҙың ихласмы, юрыймы икәнен дә төшөнә алмайыраҡ ҡалды. Тишеп ҡараған күҙҙәр менән был хәтле лә татлы һүҙҙәр тап килмәй ҙә кеүек. Шуға күрә һүҙҙәрҙең мәғәнәһенән бигерәк яңғырашына кинәнеп ултырҙы: ҡалай оҫта һөйләй!

— Зиннәт миңә эҫенеп киткән икән, бында уның да, минең дә тамсы ла ғәйеп юҡ, — ти Сара. Үҙе ап-аҡ тештәрен йылтыратып иркә йылмая. — Ир-ат ситкә ҡарай икән, быға беҙ, ҡатындар, үҙебеҙ ғәйепле. Һиндә тапмаған йылыны ирең башҡала эҙләй башлай. Шулай түгелме ни?

«Аҡыллы ҡатын шул», — тип һығымта яһай Гөлйөҙөм ирекһеҙҙән уға баш ҡағып, ризалашып.

— Быны минән дә яҡшыраҡ кем белһен инде, — тип дауам итә Сара. — Ирем минең өсөн

өҙөлөп торҙо, ә мин уны ярата алманым. Уны йәлләй торғайным, тик тәрән тойғо булмаған-ды кеше һиҙә бит ул. Миңә ялынып йөрөнө-йөрөнө лә үс итеп ситкә күҙ һала башланы. Ә мин уның хыянатын ғәфү итә алманым. Айырылдым. — Сара тағы йылмая. Был юлы моңһоу сабырлыҡ менән. Уның әллә нисә төрлө йылмайыуы бар: тәкәббер, моңһоу, рәхмәтле, нәзәкәтле, иркә. Һәр береһе үҙенә башҡа. Бер сәғәт эсендә генә лә Гөлйөҙөм шуны абайланы.

— Һеҙгә күп һөйләшеп арырға ярамай, — тип киҫәтә сирлене укол һалырға ингән ҡара һылыу шәфҡәт туташы наҙлы йылылыҡ менән. Тупыҡ бармаҡлы ҡулдарын ҡаушырып мыштым ғына ултырған Гөлйөҙөмдө, эшкә һанамағанын һиҙҙерергә тырышҡандай, тапай яҙып үтә.

— Ер аҫтында йылан көйшәгәнен дә белә бит ул кеше, — тип көлә Сара ул сығып киткәс. — Бөтә бүлексә беҙҙең хаҡта һөйләй. Медсестралар, ауырыуҙар, ҡайһыһы һине, ҡайһыһы мине яҡлап әрләшеп бөткән...

«Быныһы Сара яҡлылыр инде», — тип уйлай Гөлйөҙөм, күңеле кителеп. — Ҡайһылай дорфа ҡылана». Ул арала палатаға килеп ингән өлкәнерәк шәфҡәт туташы:

— Апай, һеҙ бөгөн дә төнгөлөккә ҡалаһығыҙмы? — тип ихтирамлы ҡыҙғаныу менән Гөлйөҙөмгә өндәшә. Эсе йылынып киткән Гөлйөҙөмдөң һораулы ҡиәфәт менән бер Сараға, бер үҙенә ҡарағанын күреп:

— Ныҡ арығанһығыҙ бит. Ауырыуҙың хәле үтә насар түгел. Ҡайтып ял итһәгеҙ ҙә була, — тип кәңәш бирә. Сара ялыныслы итеп:

— Мин әле яңғыҙ ҡалырға ҡурҡам. Төндә



хәлем тағы насарайһа, нишләрмен?! — тип ҡаршы төшкәс, ҡырҡыу ғына:

— Беҙ төнө буйы уяу, — ти ҙә, Гөлйөҙөмгә боролоп, — ҡалһағыҙ, хәҙер постель индерәм, бынау карауатҡа ятырһығыҙ, — тип сығып китә.

Хәбәрсән Сара, мөкиббән булып, тыңлаусы кеше барында һаман һөйләшкеһе, тағын бер мәхлүкте үҙенең ылыҡтырғыс булмышына арбағыһы килһә лә, дарыуҙар тәьҫиренәнме — тиҙҙән йоҡланы. Тәүлек тигәндә беренсе тапҡыр һуҙылып ятырға форсат сыҡҡас, Гөлйөҙөм дә, йоҡо менән ни тиклем көрәшергә тырышмаһын, оҙаҡламай биреште. Өндәгеһе төшөндә лә борсоғанғалыр, ҡыйын итеп, тертләп уяна-уяна йоҡланы. Уянған һайын, сабыйын ҡурсыған әсә кеүек, Сараны байҡай.

* * *

— Ә мин һине былтыр яҙ уҡ күргәйнем, — тине Сара иртәгәһе кисте илгәҙәкләнеп. — Үҙемдең шул саҡта нимә уйлағанымды әйтәйемме?

Гөлйөҙөм баш ҡаға. Уға был иркә бала кеүек наҙлы ҡатын торған һайын һығыраҡ оҡшай. Ҡарай, ҡарай ҙа Зиннәтулланың ни өсөн ул тип һушы киткәненә төшөнә: «Гел ҡыҙыҡтыр инде бының эргәһендә, театр ҡараған кеүек», — тип кинәнә ул эстән генә.

— Үпкәләмәйһеңме? — тип ныҡыша Сара.

— Юҡ.

— Нисек Зиннәт ғәрләнмәйенсә был ҡатынды эйәртеп йөрөтә икән, тигәйнем. Үҙе олпат ҡына ир. Арыу ғына кейенгән. Етмәһә, мине күреү менән, әйбер ҡараған булып, эргәмә

килеп баҫты ла күҙен таҫырайтып, ашарҙай итеп текләп тора. Ҡөн эҫе булғас, түше нығ асыҡ ҡыҙыл күлдәгемде кейгәнмен. Бөҙрә сәстәрем туҙрап яурынымды япҡан...

Сараның хәбәре зитына тейһә лә, бөҙөркә итеп, китаптан уҡыған шикелле һөйләүенә Гөлйөҙөмдөң көлкөһө килеп китә.

— Ҡолағыма ҡайнар тынын өрөп бышылдай, — тип дауам итә тегеһе. — Бынау ҡарғаны (тураһын әйткәнгә ғәфү ит, ирендең һүҙҙәре булғанға ғына ҡабатлайым, — тип нәзәкәтле йылмайыуы менән эске кинәнесен ҡапларға тырышып, Гөлйөҙөмдөң уңайһыҙланыуҙан, рәнйеүҙән гөлтләп ҡабынған йөҙөнә һирпелеп баға ул), бынау ҡарғаны, — тип ниндәйҙер бер эске ләззәт менән тағы ҡабатлай Сара, — эшенә оҙатам да яныңа киләм, — тине.

Һине шул тиклем йәлләнем. Зиннәтте пыр туҙҙырып ташланым: «Үҙ ҡатынынды ҡарамайынса, башҡаларға темеҫкенеп йөрөйһөң, тимен. Нишләп ҡатыныңа саҡ ҡына әйтмәйһең? Үтә күренмәле итәк кейгәс, исмаһам, балағын сосайтып оҙон ыштан киймәһен! Башындағы өпрәйле ҡыҙыл нәмәһен дә хәҙер үк алып ырғыт. Саҡ ҡына ла зауыҡ тигәнде белмәгән нәмәнде ғәрләнмәйенсә нисек әйәртеп йөрөйһөң?!»

* * *

«Ярата, яратмай... Ярата, яратмай...» Бәйләнсек себен кеүек йөҙәтеп туҡтауһыҙ мейеһендә өйөрөлгән был һүҙҙәрҙән нисек ҡотолорға белмәй килә Гөлйөҙөм. Ҡырҡ ике йыл буйы ла шул ҡәҙәрем ишетмәгәндер ул был «ярата, яратмайҙарҙы». Һуңғы өс көн эсендә ғүмерлеккә етерлек булғандыр, моғайын.



Бығаса мөхәббәт тигән нәмә киноларҙағы сибәр, сағыу кешеләргә генә тәғәйенләнгәндер, ә Зиннәтулла менән Гөлйөҙөмдәй ғәҙәти кешеләрҙең тормошон йәмләгән тойғо башҡасараҡ, үҙҙәре кеүек, ябайыраҡ аталалыр төҫлө күренгән, ахыры, сөнки уның был хаҡта уйланғаны ла булмаған булып сыҡты.

Зиннәтулланың, элгәреге көнгәсә, берәй тапҡыр «яратам» тип әйткәне булдымы икән? Юҡтыр, әйтһә, ғәжәпләнгәне булһа ла хәтерендә ҡалыр ине. Әйтеүҙең кәрәге лә булмағандыр. Тойғоң бар икән, уны аңлатыр өсөн һүҙ нимәгә? Ҡояшты болот киҫәге менән ҡаплап булмаған кеүек, һөйөү ҙә булмышыңды балҡытып, хуш еҫ бөркөп тора бит. Уны күрһәтеү түгел, йәшереүе ҡыйын.

Буш сумкаһын йәлп-йөлп һелтәп, дәрестән ҡыуылған уҡыусы кеүек һуҙмаңлап, ғүмерендә тәүге тапҡыр өйөнә ашыҡмай ғына ҡайтып барған Гөлйөҙөм шуларҙы уйланы. Үҙенең яңы хәленә күнегеп китә алманы ул. Быға тиклем инанып йәшәгән фекерҙәре күҙ алдында үҙгәрә, булмышын йәнсеп яңы уйҙар, яңы тойғолар бәреп инә.

Ҡөндәшлектең ҡайһылай яйһыҙ нәмә булғанын төшөнөп ҡайтып бара ҡатын. Ҡемебеҙ яҡшы, кемебеҙ яман тип кем уҙарҙан ярышырға тура киләсәк икән дә. Был Гөлйөҙөмгә ифрат та сәйер, уңайһыҙ күренде, сөнки күпме ғүмер йәшәп бығаса бер кем менән дә, бер нәмә өсөн дә ярышырға, көрәшергә тура килмәне. Шым ғына, үҙенә күрә генә йәшәне. Ҡеше өлөшөнә ҡыҙыҡманы, уныҡына ла ымһыныусы табылманы. Әҙәм көнләшерҙәй сағыу матурлығы, һиҫкәндерерлек салт

аҡылы, йән әсеттерерҙәй әсе теле булмағанғамы икән?

Йәшләй генә Зиннәтуллаһына күңел һалды ла иренең булмышында таш булып батты. Уны гел алдын ҡуйҙы, ғәйепле сағында ла аҡланы, рәнйерлек мәлдәре лә булғандыр, уларын да йотто, ауырһынманы, шуғалыр ҙа күңелһеҙ саҡтар иҫендә лә ҡалмаған.

Эшләгән ерендә, китапханала ла, кеше хәленә инә белгәне, ихласлығы өсөн яраттылар. Ҡайны-ҡәйнәһенән уңғайны, әле ҡыҙҙары-кейәүҙәре, ҡоҙа-ҡоҙағыйҙары ҡыуандыра. Шуға күрә, тормош шулай була икән тип, яҙмышына шөкөр итеп, уйһыҙ ғына йәшәгән дә ятҡан. Бөтөн донъяһының үҙәгенә ҡорт төшкәнен дә абайламаған.

«Бынау ҡарғаны ғына илтеп ҡуям да...» Гөлйөҙөм, әсенеүле көлөмһөрәп, Зиннәтулланың кәмһеткес һүҙҙәрен ҡабатлай. «Бынау ҡарғаны...» Иренең һөйәркәгә ярарға була, үҙен шулай еңел генә түбәнһетә алыуы нык ғәрләндерҙе ҡатынды. Әле өйгә ҡайтып инер мәлен ытырғанып күҙ алдына килтерҙе. Бөтөн ғүмерен шуны йылытырға, ҡотайтырға бағышлаған, унда йәшәгән барыһына ла рәхәт булһын тип тырышҡан өйөнөң ишеген асып инеүҙән биҙрәп, иренең күҙенә ҡалҡып ҡарай алмам тип ҡурҡып, яҡынайған һайын яйланы. Подъезд ишегенән ингән ерҙән кире боролдо: туҡталышҡа барып автобусҡа ултырҙы ла өлкән ҡыҙына китте. Быға са бөтәһенә лә йылыһы еткән, барыһына ла таяныс булған Гөлйөҙөмдөң өшәнгән күңеле үҙе йылыға мохтаж ине бөгөн.



* * *

...Гөлйөҙөмдөң больницаға йөрөүенең кәрәге лә бөткәйне. Ашарға рәтләп Зиннәтуллаға биреп ебәрһә лә бик еткән. Тик ул үҙен ғазаплауҙан әрнеткес бер ләззәт тапҡан кеүек һәр кис һайын килде лә килде. Тып итеп килеп етә лә өндәшмәй генә ризыҡтарын теҙә.

— Толомондо улайтып нәҙек оҙон итеп сыбыртҡы һымаҡ үреп төшөрмә, бигерәк йоҡа бит, — тип Гөлйөҙөмдөң сәсен рәтләргә булып китте Сара тамағы туйғас. Бөгөн уның кәйефе лә, хәле лә шәп. Зиннәт көндөҙ улын алып килгән, шуға ҡыуанып бөтә алмай.

— Минең хулиганға атай булғыһы килеп йонсой инде, байғош, — тип көлә Зиннәттән Сара. — Ғүмер буйы малай тип хыялландым, тип өҙәләнә. Йәнем көйөп, башҡа килтермәҫкә тип ҡыҙып киткән сағымда шул баланы уйлап тыйылам. Зиннәт өйрәтә башлағаны бирле уҡыуы арыуланды, урам тип сапмай башланы. Йыбанмай сәғәттәр буйы дәрес әҙерләйҙәр. Улымдың зирәклегенә, сослоғона ғәжәпләнеп бер була.

«Минең ҡыҙҙар кәбәк баш ине, эргәләрендә йоҙроҡ болғап торһаң да, баштары эшләмәгәс, эшләмәне. Был балаға аңлатыуы үҙе бер кинәнес», — тип ебәрә. Үҙ балалары тураһында кеше шулай тип әйтәме? — тип әрләп ташлайым, — ти Сара уның хәлен аңлаған кеүек. — Ә Зиннәт теге анекдотты һөйләй...»

Шарҡылдап, рәхәтләнеп көлөп алғандан һуң, йәшле күҙҙәрен Гөлйөҙөмгә төбәй:

— Һиңә лә һөйләгәне барҙыр? Мәктәпкә ата-әсәләр йыйылышына барған бер атай ҡыҙының насар уҡығанын тыңлап ултырған-ул-

тырған да: «Тас әсәһе! Тас әсәһе! Унын кәүек үк алйот!» — тип бот сабып ҡысҡырған, ти.

Зиннәтулланың хаяһыҙлығынан, Сараның аяуһыҙлығынан Гөлйөҙөмдөң тыны быуылып, күҙ алдары ҡараңғыланып китә. Һөйәркәнең күңелен күрер өсөн үҙ ҡыҙҙарын мыҫҡыл итеп ултырған иренә күңеленең иң төбөнән насар бер хистең ҡалҡып сығып үңәсен һыҡҡанын тоя ул. Тик сарбайлап сығыу булмышында юҡ. Сабыр ғына тауыш менән:

— Әлләсе, — тип әйтергә көс таба. — Кәбәк баш булһалар, институтҡа бер ярҙамһыҙ инеп, матур итеп уҡып сыға алмаҫ инеләр. Бер тапҡыр ҙа стипендиянан ҡалманылар.

— Мин дә шулай тинем шул, — тип күтәрмәләп ала Сара. — Был ир-ат ҡуштанланыу өсөн ниндәй генә түбәнлектәргә бармай. Әй, ҡуйсәле, шуларҙы. Тел талдырып, ваҡыт әрәм итеп.

Был ҡаптырманды хәҙер үк анау мөйөштәге сүп биҙрәһенә ташла. Бына мин һиңә сәсеңде йыйырға икенсе бер нәмә бирәм: софистр-твист тип атала. Бәлки, телевизорҙан рекламаһын ҡарағанһыңдыр. Баҙарҙа һатылған арзан тауар түгел, ысыны, бер дуҫ долларға һатып алып ҡайтып биргәйне.

Гөлйөҙөмгә Сараның ҡулдарының иркәләп кенә сәстәре менән булышыуы һәләк рәхәт... Ҡапыл уға әле ошо ҡатындан да яҡын кешеһе юҡ кеүек тойолоп китә. Ниндәйҙер арбау көсө бар бында.

— Зиннәт шулай китмәй ҡаҡшата, — тип көлә уның уйҙарын әллә ҡайҙан һиҙеп алған Сара. — Өйөндә ут йотоп көтөп торған ҡатынды уйлаһаңсы, тип ҡайһы ваҡыт ҡыуа башлайым. Ҡайтҡым килмәй, тағы саҡ ҡына янығыҙҙа булайым инде, тип илай яҙып тубығымды ҡосаҡлай. Илаҡ ирҙәрҙе енем һөймәй, тип уның һайын ҡыуам. Тиле холҡо инде миндә. Аҡыллы бисәләр, ирҙәрен нисек тә эргәләренән ебәрмәҫкә, ысҡындырмаҫҡа тырыша, ә мин дөбөр-шатыр һеперәм дә сығарам. Ә ул мәхлүктәр, ҡыуған һайын сат йәбешә... — Көйәҙ ҡатын башын артҡа ташлап тороп рәхәтләнеп көлә.

«Ҡайһылай бәхетле был Сара!» — тип ирекһеҙҙән уға һоҡланып уйлай Гөлйөҙөм.

— Яратам, ти башлаһалар, енем ҡотора ла китә, — тип күҙ йәштәрен һөртә-һөртә дауам итә Сара. — Үҙең яратҡан берәү булмағас, уларҙың мыжғышып йөрөүенән ниндәй файҙа... Исмаһам, берәүһе күңелемә ятырҙай булһасы... Бер кемде лә яратҡаным юҡ. Ә шул тиклем яратып ҡарағы килә...

«Бер кемде лә яратҡаным юҡ...» — был һүҙҙәрҙе Сара баҫалҡы моңһоулыҡ менән әйтһә лә, Гөлйөҙөм ундағы эске ғорурлыҡты тойоп ала.

Талымлы кешеләр шулай булалыр... Ул быға тиклем бер нәмә менән дә ҡәнәғәт була белмәгән кешеләргә аптырай ине. Фатиры ла насар райондан, насар планировкалы, алған тауарының да гел сифаты насар, насар... насар... Баҙарҙа йәки магазинда тауар ҡарағанда ла ундайҙар әйбергә ерәнгән кеүек, ирен ҡымтып, бармаҡтарының осо менән генә тотона. Үҙе гелән шөкөр итеп йәшәгәс, ундайҙарҙы йә ҡыҙғана, йә аптырай торғайны Гөлйөҙөм. Әле килеп төшөндө: бер нәмә менән дә ҡәнәғәт булмау, талапсанлыҡ — юғары кимәлдең, мәҙәниәттең, затлылыҡтың билдә-

һе икән дә. Ә ул яҡшыны күрмәгән ярлы-ябаға, ҡара һөйәк булғастын, бөтөн нәмәгә рәхмәтле булып йәшәгән дә ятҡан. Бер ғүмер йәшәп, ошоғаса шуны аңламағаны үкенес булып китте.

Ирҙе ҡәҙер итеп йәшәүҙе лә мәртәбәгә һанап яңылышҡан. Баҡтиһәң, кешене ни тиклем һанға һуҡмаһаң, ҡәҙерен белмәһәң, шул тиклем баһаң арта, бәҫең күтәрелә икән. Сараның һөйләүҙәренән кешене яратыу — бахырлыҡ, түбәнселек икәнен аңлағас, Гөлйөҙөмгә донъя оторо шыҡһыҙ булып күренде. Бөтә нәмә мәғәнәһен юғалтты. Үҙенең тормошо... Ҡыҙҙарының тормошо... Әсәләренә оҡшап ирҙәре, балалары, дуҫтары өсөн мөкиббән киткән ҡыҙҙары ла бахыр. Сара, Сара, тип йәнен ярып бирерҙәй булып йөрөгән Зиннәтулла ла ... меҫкен. Сара унан рәхәтләнеп көлә, теләһә — ҡыуа, теләһә — саҡыра. Ә Зиннәтулла ҡыуана-ҡыуана ҡабат уның аяҡ осона килеп йығыла.

— Ананас ҡырҡып аша... — ти Сара. — Киви ҙа ал. Ҡалғанын өйөңә алып ҡайт. Ялатмайым шуны, ташыма, тәме сей помидорҙыҡы кеүек, тип күпме әйтәм, Зиннәт тыңламай бит. Ул шоколад ташып еләтеп бөттө.

Ғүмер буйы иренең һыҡмырлығына, аҡсаны нык ҡыҫып тотоуына күнеккән Гөлйөҙөмгә уңайһыҙ булып китә.

— Затлы ризыҡ ташығансы аяғыңа алып кейер инең, тинем бер аптырағас. Тишек ойоҡбаш менән килгән. Улым күреп йәлләгән дә иплэп кенә килеп бышылдай: «Әсәй, тегеп бир», — ти. Үҙем ямап киймәгәнде, кеше абышҡаһына ямап ултыраммы, тип өр-яңы ҡиммәтле ойоҡбаш кейҙерҙем дә ҡайтарҙым.



Бығаса Сараның һәр һүҙен уйһыҙ йотоп, һеңдереп ултырған Гөлйөҙөмдөң күңеленә шик һала был ойоҡбаш. Беренсенән, Зиннәтулла тишек носки менән мөрхәтһенә торған мәшәү, һапата ир түгел. Ул һәр ваҡыт ҡараулы, хатта фыртыраҡ йөрөргә яратты. Икенсенән, донъя булғас, ни генә булмаҫ, тиер инең, Гөлйөҙөм үҙе сит әйберҙе абайламай ҡала торған ҡатын түгел. Был йәһәттән ул үҙ-үҙенә бик талапсан: ир кеше ваҡ-төйәк һатып алып ваҡланып йөрөмәҫкә тейеш, тип һәр нәмәһен үҙе етештерә.

«Йомшаҡ түшәп ҡатыға ултыртырға, һиҙҙермәҫтән генә әсе тешләп нығыраҡ әрнетергә итәме икән ни был ҡатын?» — тип сәйерһенеп үҙенә нисегерәк кейенергә, ҡайһылай матурыраҡ күренергә өйрәтеп бер булған Сараға, уның һөйләгәндәрен ишетмәй, теклэп ҡарап ултыра Гөлйөҙөм. Сараның ихласлығы, хәстәрлекле әхирәт булып күренергә тырышыуы — барыһы ла уйын, кәмит, ялған ғына булғанын төшөнә башлаған ҡатын сикәнеп урынынан ҡуҙғала.

«Нишләп киләм мин бында көн һайын? — тип аптырай Гөлйөҙөм больница күтәрмәһенән йәйлап атлар-атламаҫ ҡына төшөп барышлай. Ул үҙен йыуынды һыуға ҡойонған кеүек тоя. Йәнен һурып алған кеше кеүек хәлһеҙ, йонсоу...

— Быҙау сәйнәп ташлаған шайыҡлы сепрәк кеүек, — тип ҡуя Гөлйөҙөм. Унан аяғы менән ерҙе тойғас, туҡтап тәрән итеп тын ала. — Аллаға шөкөр, — ти ул ҡапыл. Сөнки бында башҡа бер ваҡытта ла килмәйәсәген аңлай. Уның әле бер кемде лә күргеһе, бер кемде лә ишеткеһе килмәй, барырға теләгән

ере лә, башында йүнле уйы ла юҡ. Уйҙары ла өҙөк-йыртыҡ, хистәре лә сала-сарпы.

— Ә бит был бисә алдай, — тип уйлайым тигәнсе, ҡысҡырып әйтте лә, үҙе үк тертләп китте Гөлйөҙөм. — Ул да алдай. Ә ни өсөн ул алдамаҫҡа тейеш һуң? Нишләп мин уға һүҙһеҙ ышанырға тейешмен? Ҡайҙан һеңгән был минең башыма? — тип аптыраны, тик аңлай алманы, теләмәне лә. Ҡаршыһына килгән Зиннәтулланы ла күрмәне.

— Гөлйөҙөм, — тип өндәште ире ҡағылып тиерлек үткән ҡатынының үҙен абайламағанына сәйерһенеп. Ул Сараның тере ҡалыуына, һауығып килеүенә, Гөлйөҙөмдөң уларҙың мөхәббәтен аңлауына, ул ғына ла түгел, Сара менән дуҫлашып китеүенә ҡыуанысынан башы күккә тейә яҙып йөрөй ине. Әле лә эшенән тура бында елдереүе...

— Гөлйөҙөм, — тип ҡабатланы Зиннәт, ҡатынының һаман өндәшмәй баш баҫып барғанына хәүефләнеп ҡысҡырыбыраҡ әйтте: — Гөлйөҙөм, тием.

Исемен ишетеп һиҫкәнгән Гөлйөҙөм ҡулына алһыу раузалар тотоп балҡып торған ирен күреп туҡтаны. «Был сәскәләрҙе миңә бүләк итһә, мин ҡыуанысымдан нимә эшләргә белмәҫ инем. Ә Сара: «Һабаҡтары ҡыҫҡа. Береһе бөтөнләй бәжеп бара, тиәсәк», — тип уйланы.

Зиннәтулланың өҫ-башына тикшереп ҡараны: матур кейенгән, оялырлыҡ түгел. Унан сәйерһенеп ҡарап торған иренең күҙе менән үҙенә баҡты: калуш кеүек лапшыҡ туфлиҙары, шөкәтһеҙ күлдәге... «Нисек ғәрләнмәй шул ҡатынды эйәртеп йөрөйһөң?»



— Гөлйөҙөм, — тип уға табан атланы ҡатынының сәйер өнһөҙлөгөнә хәүефләнә башлаған ир.

«Нисек ғәрләнмәй шул ҡарғаны эйәртеп йөрөйһөң?» Иренә, килмә, яҡынайма, тигән ишара яһап, Гөлйөҙөм үҙе лә аңғармаҫтан тротуарҙан урамға бер аҙым сигенде.

«Әллә иҫерек инде», — тип шомланған Зиннәт: «Гөлйөҙөм!» — тип асырғанып уға табан ынтылыуға уныһы кире эткән кеүек ҡулын болғап арты менән тағы сигенде. Шәп тиҙлек менән килгән таксиҙың тормоздарының ҡолаҡ ярғыс итеп сыйылдауы, эргәлә торған бер ҡатындың үҙәк өҙгөс итеп ҡысҡырыуы ишетелде.

Һуңғы минутына тиклем һушында булды Гөлйөҙөм. Түңәрәк күҙҙәрен мөлдөрәтеп өнһөҙ-һүҙһеҙ ҡарап тик ятты. Тәнен бөтөнләй һиҙмәй ине. Ауыртынмай ҙа.

— Ул мине ишетәме? — тип һораны Зиннәтулла аптырағас врачтан. — Һөйләшә аламы?

Ә Гөлйөҙөмдөң һөйләшә алһа ла, һөйләшкеһе килмәй ине, йәшәгеһе лә. Барыһы ла ныҡ йәл ине, бары шул ғына. Зиһене тарҡалып барғанын тойоп, мәңгелеккә китеүенә ышанғас ҡына, үҙ-үҙен көсләп: «Мин үҙем хәл иттем», — тип бышылданы.

— Нимә, нимә тиһең? — Уның әйткәнен ишетмәй ҡалған Зиннәтулла ҡатынының тынысе, хатта битараф ҡарашын осратып сәсен йолҡорҙай булып өҙгөләнде.

* * *

Гөлйөҙөмдө аҡ ҡайын төбөндә ҡалдырып ҡайтҡас та, юғалтыуының күләмен, етемлек әсеһен аңғарманы әле Зиннәт. Әле ҡатыны йыйыштырған йәмле өйҙән уның йылыһы, уның ҡото китеп өлгөрмәгәйне. Шифоньерҙа Гөлйөҙөмдөң ҡулдарының йылыһын һаҡлаған (кейем-һалым йыуыуҙы ғүмере машинаға ышанманы) күлдәк-ыштан, ишенә-иш итеп бөхтәләп һалынған носкиҙар үҙен ҡараулы ир итеп тойорға мөмкинлек бирҙе. Унан күңеленең түрендә Сара менән яңы бәхеткә өмөтө баҙлай ине.

Тик килеп сыҡманы. Мөхәббәттәре һалҡында һүнгән усаҡ кеүек төтәп барып тонсоҡто. Элек, Сара тураһында хыялланып йәшәгәндә, Гөлйөҙөм Зиннәткә үтә ябай, күңелһеҙ, ҡайһы берҙә хатта аңрараҡ та тойола ине. Шуға күрә үҙен уның янында йәлләү хисе һәм күп йыллыҡ күнегеүе генә тотоп торалыр тип уйланы. Әле килеп иһә Сараның ҡыланышы артыҡ яһалма, үҙе елбәҙәк, һай кеүек күренде.

Ә Сараға тамағы туҡ, өҫтө бөтөн, тормоштан ҡәнәғәт ир-ат нығыраҡ оҡшай булып сыҡты. Улар икеһе лә ҡасандыр бәхеттәренә ҡамасау тип уйлаған Гөлйөҙөмһөҙ мөнәсәбәттәренең бер мөйөшө кителеп төшкәнен тойҙо. Гөлйөҙөмһөҙ етемһерәп ҡалған, ташландыҡ, хатта зәғиф төҫкә ингән Зиннәткә — өтөп алып барған яндырай Сара, Сараға ҡатынын һағынып болоҡһоған Зиннәт кәрәк түгел ине.

Тәүҙә улар, ғәҙәт буйынса, осраштырғыланы. Тик икеһенә лә йыуаныс бирмәгән күрешеүҙәр тиҙ еләтте.

Сараны башҡа оҡшатыусылар ҙа күп ине.



Ә Зиннәт уңалмаҫлыҡ күңел яраһын араҡы менән йыуырға кереште.

Әле уны яҡты донъяла шешә менән төштәре генә тотоп тора. Һәр төн һайын бер үк төш инә уға. Гөлйөҙөм эргәһенән генә, ҡағылып тигәндәй үтеп китә, тик Зиннәтте күрмәй, әллә күрергә теләмәй. Зиннәт уның артынан асырғанып ҡысҡырып, ынтылып ҡала. Аҙашҡан сабый кеүек, ҡарлыҡҡансы... Шунан үҙенең тауышына үҙе әсенеп уяна. Уяна ла әле күргәне төш, ҡайғылы яңғыҙлығы өн икәненә ышана алмай бик оҙаҡ ята.

Ул бит ғүмер буйы төплө уйлап, ышаныслы итеп йәшәне. Донъяһын да таш диуарҙай ныҡлы итеп ҡорҙо, мал йыйҙы. Ҡатынының да эт кеүек тоғро, ышаныслы, күндәм булғанына иманы камил ине. Ҡеше күңеленең тын алышҡа ла ҡойолған алмағас сәскәһеләй нәфис, кеше йәненең шәм утына ла көйгән күбәләк кеүек ғүмерһеҙ икәнен кем белгән һуң?

Барыһы ла бар ине бит... Барыһы ла юҡ.

## ҠӘҘЕРЛЕ БАЛА

Сәйҙе шартына килтереп, тәмләп кенә эсеп ултырған малай ҡапыл ҡабаланды, сынаяҡ аҫтындағыһын аяғөҫтө килеш һерпелдәтеп кенә һемерҙе лә ишеккә ынтылды.

— Аһа! Ҡайҙа ашыҡтың былай? — тип ғәжәпләнде әсәһе.

— Атам килгән, — тине малай эшлекле тауыш менән. Унан ишек төбөнән кире килеп, бер нисә кәнфитте кеҫәһенә һалды ла сығып та китте.

Гөльямал менән бер-беребеҙгә ҡараштыҡ та, ҡалҡынып тәҙрәгә ҡапландыҡ. Малай, һөйөклө балаларға ғына хас булғанса, үҙ ҡәҙерен белеп, һәлмәк кенә атлап барҙы ла, ҡапҡаның тышында көтөп торған атаһына ололарса ҡул биреп күреште. Уныһы ла етди тотанаҡлыҡ менән бәләкәс кенә ҡулды көрәктәй усына йомоп һаҡ ҡына һелкетте лә ысҡындырманы. Ата менән ул нимәлер һөйләшеп, етәкләшкән килеш түбән осҡа ҡарай китеп барҙы.

— Алпан-толпан баҫып йөрөүҙәренә тиклем бер иштәр...— тип көлөмһөрәне Гөльямал яңынан өҫтәл артына ултырғас.— Ҡана, сәйеңдә эҫетәйем әле...

— Килеп йөрөймө ни?

— Эсеңкерәһә, йә берәй нәмәгә күңеле несҡәрһә, килә. Улын өйҙәренә лә алып ҡайта. Ихтыяр ҡуйғанмын. Балаға атай ҡәҙерле бит. Үҙем һөйләшмәйем. Теге көндән бирле тупһамды аша атлағаны юҡ. Ғаиләһе бар, йәшәһен дә ятһын. Бисара ҡатынына былай ҙа рәхәт түгел.

— Нишләп? Насар торалармы ни?

— Балалары юҡ бит.

— Байтаҡ йәшәйҙәр түгелме һуң?

— Байтаҡ тип, Зариф быйыл мәктәпкә төшә, ете йыл инде.

Гөльямалдың тауышында үсәү ҙә, асыу ҙа, рәнйеү ҙә юҡ. Әйтерһең дә һүҙ бөтөнләй ятмат кешеләр хаҡында бара. Ҡараштары ла салт, көлөп тора. Уларҙа мин килгәнгә ҡыуаныс ҡына бар.

— Ҡуй инде,— тием мин.— Юрый кеүек, ибет.



— Рәнйемәгәйнем дә, ҡарғамағайным да, әхирәт,— ти Гөльямал минең әйтеп бөтөрмәгән уйыма яуап биргәндәй.— Бер нәмәгә лә өмөт итмәгәстен, нимәгә рәнйейһең...

Берәйһе ситтән тыңлап торһа, моғайын: «Ҡайһылай былар урыҡ-һурыҡ ҡына һөйләшеп ултыра»,— тиер ине. Ә беҙгә бер-беребеҙҙе төшөнөр өсөн күп кәрәкмәй. Йылдар буйы осрашмаһаҡ та, кисә генә айырылышҡан кеүек серҙәребеҙ берегә. Мин ауылдан сығып киткәне бирле юлдарыбыҙ айырылһа ла, сит яҡтарҙа яңы дуҫтар табылһа ла, күңелемдә Гөльямалымдың үҙ урыны бар. Башҡа кем менән мин етәкләшеп бала сағыма, йәшлек йылдарыма ҡайтып урай алам?

Мин уға үҙемдең бөгөнөмдөң хәсрәт-һағыштарын түгеп ултырмайым. Ҡәрәкмәй ҙә. Хәйер, ул беҙҙең ығы-зығылы ҡала тормошон аңламаҫ та ине. Шуға күрә Гөльямал өсөн мин ирен һөйгән һәм һөйөлгән, балаларынан шунған, даланы ташып түгелгән ҡатын. Шулай тип уйлауы, донъяла бәхетле кешеләр ҙә бар ул, бына минең Зарифам, тип йыуаныуы яҡшылыр ҙа. Осрашҡан һайын әхирәтемдең был ышанысын нығытам.

— Минең аҙаш та мәктәпкә төшә тиген, ә?—тием дә бер-беребеҙгә ҡарап көлөшәбеҙ. Тәүләп һабаҡҡа тотонған мәлдәребеҙ иҫебеҙгә төшә.

* * *

Ул саҡта беҙҙең төпкөл ауылдың алама ғына мәктәбендә парта тигән нәмә юҡ. Беренсегә килгән балалар оҙон ширлектәргә бишәү-алтау булып теҙелешеп ултырғанбыҙ.

Уҡытыусыбыҙ Миңзада апай тәүге дәрестә башларға тип тороп ҡына баҫҡайны, ишектән бер бәләкәс кенә ҡараҡайҙың башы күренде.

— Әйҙә, Гөльямал, — тине апай мөләйем генә, — ин. Ҡем менән ултырғың килә, үҙең һайла. Йә...

Ҡыҙыҡай янып торған ҙур ҡара күҙҙәре менән тал ботағына теҙелгән турғай балалары кеүек өңрәйешеп ултырған һәммәбеҙгә аҫтан һөҙөп ҡарап сыҡты ла бармағы менән миңә төртөп күрһәтте.

Шулай итеп, аҡһыл-һары сәсле, йәшкелт-зәңгәр күҙле, һөттәй аҡ йөҙлө мине бешкән шоморт сәсле, ҡара йондоҙ күҙле ҡыҙыҡай әхирәткәсә бергә булыр дуҫы итеп һайланы.

Мин кешегә яғылып, һөйләшеп барам. Ә Гөльямал — өндәшмәҫ. Аҫтан ғына һынап ҡарар. Шуға беҙҙең дуҫлыҡҡа күптәр аптырай торғайны. Минән: «Нимә һөйләшкән булаһың инде шул тумһыҡ менән?» — тип һорайҙар. Ә бит икәү генә ҡалһаҡ, күберәк Гөльямал һөйләй, бөтә эс-бауырын асып һала. Гөльямалдың миңә сикһеҙ ышаныуына ғәжәпләнһәм:

— Һиңә лә асылмағас, кемгә күңел бушатайым, — тип ысынтылап аптырай.

— Зарифҡа ла ете шул, — тип ҡабатлай әхирәт. — Июль башында тыуҙы бит. Еләк бешкән мәлдә. Бисәләрҙең Һандыктау яғынан биҙрәләп еләк ташығанын ҡыҙығып ҡарап ҡалғаным иҫемдә.

Гөльямалдың болоҡһоп киткән йөҙөнән тегә һағышлы йәйҙең ауыр хәтирәләренә килеп юлыҡҡанын күрәм.



* * *

...Өфөлә үк ишеттергәйнеләр миңә ул хәбәрҙе. Күңелемдә ҡурғаш кеүек өтөп төшкәйне. Ә ауылға ҡайтҡас, ғәйбәттең өйөрмәһенә эләктем. Осраған береһе: «Был ни тиер икән?..» — тигән кеүек тишеп ҡарап, тәмләп сәйнәй башлай.

Тоноҡ күл кеүек һәүетемсә йәшәгән ауылда иң ҙур мәрәкә — ғәйбәт бит инде. Тик, ғәҙәттә, хәбәр-хәтер бер тирәлә, күптән дандары сығып бөткән кешеләр тирәһендә өйөрөлә: фәләндәр тағы эсеп һуғышҡан, бисәһенең күҙен күгәртә һуҡҡан... Шуға күрә башын текә тотоп, ауыҙы тулы ҡан булһа ла, кеше алдында төкөрмәй, итәк-сабыуын йыйып ҡына йәшәгән Гөльямал — ғәйбәтселәр өсөн шәп емтек.

Әхирәтемә һүҙ тейҙертеү түгел, ауыҙ астырмаҫтаймын да. Был юлы ни әйтергә, ни уйларға белмәҫтәй хәл.

Беҙ бит әхләҡкә юғары талаптар ҡуйылған элекке ауылда тәрбиәләнгән балалар. Үҫкән сағыбыҙҙа әсәйҙәрҙең «йөрөп тапҡан», «уйнаштан тыуған» тип оло ғәйеп күреп ерәнеп һөйләгәндәре аңға ныҡлап һеңгән.

Дөрөҫ, ҙур ҡаланың тәртипһеҙ тормошонда атайһыҙ бала тапҡанға ғына түгел, яңы тыуған сабыйын ташлап киткән әсәйҙәргә лә күнеп бөтөлгән. Урам буйҙарында теҙелеп ултырған хәйерселәргә күҙ өйрәнгән кеүек. Тик был яманлыҡтар тормошомдан ситтә, миңә таныш түгел кешеләр араһында ғына булырға мөмкин шикелле ине. Бөгөн килеп, йәндәй күргән дуҫым шул көнгә төшкән дә, уның ояты нәҫел-нәсәбенең, дуҫтарының йөҙөнә сәр-

кеү булып яғылған кеүек. Шуға үрһәләнәм.
Ҡайтып төшөү менән Гөльямал тип атлығып тороуыма күнеккән әсәйем, мине аяп, һүҙ ҡуҙғатмай. Ә үҙе эстән генә минең уға бармауымды хуплай булһа кәрәк.
Ҡайтып төшкән көндө һуңлап кителде, икенсе көндө мунса яғып, кер йыуып мәшәҡәтләндек. Өсөнсө көндө иртүк тороп мунса һылар өсөн балсыҡ баҫырға тотонған ерҙән, үҙемдең осрашыуҙы кисектерер өсөн яңынан-яңы сәбәптәр тапҡанымды абайлап, соҡорҙан ҡорт саҡҡандай һикереп сыҡтым. Артабан да был йөктө: шик-шөбһәләремде һәм дуҫлығыбыҙға хыянатымды өҫтөрәрлек тәҡәтем ҡалманы. Киттем.
Үҙебеҙҙең Оҙон урамдың бер осонан икенсеһенә сығып, уларҙың Сукешенә күтәрелгәнсе йәнем сыға яҙҙы.
Кеше мыжғып торған ҡала урамынан һуң, сит-ситтәре йәм-йәшел бесәй тәпәйе менән бөҙрәләнгән туҙанлы ауыл урамының һиллеге сәйер. Тик мин бының алдаҡсы бушлыҡ икәнен елкәм менән һиҙәм, һирпелеп баҡһаң, йә пәрҙә һелкенгәнен, йә берәүҙең ҡыҙыҡһыныусан ҡарашын абайлайһың. Ярты сәғәттән минең (ҡайтҡанымдың өсөнсө көнөнә генә!) ҡултыҡ аҫтына күстәнәс ҡыҫтырып, Гөльямалға китеп барыуым бөтә ауылға билдәле буласаҡ.
Ауылда һәр кем микроскоп аҫтындағы кеүек йәшәй. Үҙ тормошонан ҡыҙыҡ тапмай, башҡаларҙы тикшереүҙән ләззәтләнеп, кеше шатлығына көйөп, кеше ҡайғыһына ҡыуанып көн итеүселәр өсөн хиләүәт бында. Ҡалалағы кеүек фатирыңа боҫоп булмай. Әбрәкәйгә нисә инеп сығыуыңа хәтлем күҙ алдында.



Ауыл тип ғүмер буйы йән атһам да, бына ошо яғын өнәмәйем инде, ҡалайтаһың. Аяғыма ауыр гер тағып, ватыҡ быяла түшәлгән юлдан ялан аяҡлап атлағандай һөйрәлгәндә нимәләр генә уйлап өлгөрмәнем.

* * *

Беҙ Гөльямал менән икебеҙ бер ихатаға йәнәш кенә өйҙәр һалып, бала-сағаларыбыҙ, мал-тыуар, ҡош-ҡортобоҙ бергә буталышып йәшәргә хыяллана инек. Әмәлгә күрә, икебеҙҙең дә күрше ауылдағы ике дуҫҡа күҙебеҙ төштө. Был минең йәшлек мауығыуы ғына булды. Ә Гөльямал шул Зәбихуллаһына тормошҡа сыҡты. Матур итеп донъя көтөп алып киттеләр.
Йәйгеһен ҡайтып күрше ауылға кейәүҙәге апайыма барыуым була, әллә ҡайҙан ишетә һалып йүгереп килеп етер ине әхирәтем. Йүгереү тиһәң дә инде: атлауы ла, холҡо ла яйман, һәлмәк уның. Өтәләнеп ашыҡмаҫ, борсолоп-ахылдап төшмәҫ. Оҙаҡ ҡына уйлар ҙа һеңдергәнсе әйтер, эш тигәндә лә «әй, урманға ҡасмаҫ әле» тигәнерәк мөнәсәбәттә булыр.
— Ашҡа килегеҙ, кисте көтмәгеҙ, әхирәт,— тиер, ҡарашынан ҡыуаныс бөркөп. Ҡыҫтаһаң да ултырып тормаҫ: мине тейешенсә ҡабул итер өсөн үҙенсә шулай елдерттереп йөрөүе булыр. Ә үҙенең булмышынан хуш еҫ бөркөлгәндәй. Матур, сибәр тигән булабыҙ беҙ ҡайһы бер кешене. Семәрле усаҡта еүеш көл генә булһа, унан ни файҙа?! Ә Гөльямалдың эске нуры арбап, үҙенә ылыҡтырып тора. Мөхәббәтле кеше балҡышынан билдәле.

Мин, ысынлап та, кисте көтмәйем. Әхирәтемдең артынан уҡ юлланам.

Оло ҡаҙанында тәмле еҫтәр борҡотоп йәш ит ҡайнай. Ҡайтҡанымды ишетеү менән Зәбихуллаһы ишле мал-тыуар араһынан берәй ҡышлау тәкәһен сала һалыр ине. Әйтерһең, мин — аҙналап ятырға килгән атлы ҡунаҡ.

Ҡыйыш-мыйыш йәйелгән һалмаһы, унанбынан сосолоп (ҡамырын йомшаҡ иткәндер инде), өҫтәл тултырып кипшереп ятҡан булыр. Уныһын ҡабат баҫып, ҡатҡыл ғына һалма йәйге килеп ҡырсынып ултырылһа ла ҡымшанмайһың инде. Гөльямалдың аласыҡҡа инеүҙе генә уйлап йөрөгән әрһеҙ тауыҡтарын, ит еҫенә иләҫләнеп аяҡ аҫтында буталған йыуан бесәйен орошҡан булып өйрөлтә баҫып йөрөүенә, шатлыҡ нурлаған йөҙөнә йәнең рәхәтләнеп тик ултыраһың.

Аласыҡҡа ара-тирә Зәбихулла ла инеп сыға. Тормошо ҡот менән тулғанға, ҡатынының әхирәте килгәнгә һөйөнөп ҡарап торған була. Балалары өлкәндәрҙең күңеленән ағылған йылыға кинәнешеп йүгереп йөрөй, әле миңә, әле әсәләренә, әле аталарына барып иркәләнә.

Күңеле бөтөн кешеләр генә бер нисә йылда шундай донъя ҡора: ялпаҡ таштарҙан буралған бейек нигеҙгә эре ҡарағайҙан һалынған яландай йорт, ҡурсаҡ өйө кеүек ҡупшы аласыҡ, келәт, утынлыҡ... Ҡулы оҫта, егәрле ир ине Зәбихулла.

Бәхет, муллыҡ эйәләшкән тормоштарына күҙ тейҙереүҙән ҡурҡып, һоҡланыуымды һүҙҙәргә һалмайым, әхирәтем уны барыбер ҡарашымдағы балҡыштан абайлап тора.

Ошо һил тормошта Зәбихуллаһы менән тигеҙ ҡартайып, бала-сағаларын башлы-күҙле итеп, ейәндәр һөйөп, бер-береһенә мөкиббән ҡарт менән ҡарсыҡ булып, оҙон ғүмер кисерерҙәр кеүек тойола торғайны миңә һутлы тынлыҡты сиңерткә сорлауы ғына боҙған йәйге кистәрҙә.

«Мин тыуғас, әсәм китап астырған. Йондоҙламамда: «Өс иргә етә», — тип яҙылған». Бала саҡта бик хәүефләнеп, шулай һөйләгәнен иҫкә төшөрөп: «Ышан күрәҙәгә», — тип көлөп тә ҡуя торғайным. Эстән генә инде. Ҡысҡырып әйтергә шомландыра ине барыбер. Әле килеп, маңлайыңа яҙылған яҙмышты бер нисек тә үҙгәртеп булмай, тигәндәре дөрөҫмө икән әллә, тип уйлап барам.

Йәшәү дәрте ташып, гөпөлдәтеп атлап йөрөүенән, арыу-талыу белмәй эшләүенән, тирәяҡты яңғыратып көлөүенән үк күренеп торған ғәййәр ир ине Зәбихулла. Уның ҡеүәте эргә-тирәһендәгеләргә лә күсә, уның ипкене ҡағылғандар ҙа тиктомалға күңелдәре күтәрелеп, аҙымдары етеҙләнеп киткәндәй була торғайны.

Шул кеше уйламағанда әрәм булды. Утынға киткән еренән трактор арбаһына һуҙып һалып алып ҡайттылар. Тейәшергә барған бер бәшәлкәһеҙҙең ҡулынан ысҡынып киткән имән утын сикәһенә генә тейгән — бәндә балаһы юҡ.

Юл өҙөлгән йонсоу осор ине, әхирәтемдең ҡайғыһын уртаҡлашырға ҡайта алманым. Шуға, исмаһам, аҙыраҡ күңелдәре асылмаҫмы тип, посылка төйнәштергән булдым. Малайына машина, ҡыҙына ҡурсаҡ, үҙенә шунда юҡ-бар. Күп тә үтмәй, әсәм хат яҙҙы. «Мәсҡүҙә апаң инеп, һинең өсөн миңә рәхмәт әй-

теп сыҡты. «Гөльямалға барһам, ҡыҙындың күстәнәстәрен алдына теҙгән дә илай-илай ҡыуанып ултыра. Ҡайғылы мәлендә онотмағаны өсөн һауаплы булыр», — тине».

Зәбихулланың вафатына ике йыл тулыртулмаҫтан ҡабат кейәүгә сығып аптыратты мине Гөльямал. Һайлаған кешеһен хупһынманым. Белдермәнем инде. Ә ул һаман шул Гөльямал.

— Бер ҙә һыным теймәгәйне, әхирәт, — тип аңлатты аҙаҡтан. — Улына сығырға уйымда ла юҡ ине, атаһы йонсотто бит, ҡороғор.

Атлап йөрөүе, хәбәр һөйләүе генә түгел, ҡылған ҡылығына хәтлем яй шул уның. Шуға ҡайһы бер ҡыланышы минең кеүек өҙҙөмйырттымдарға аңлашылып та бөтмәй. Әле лә сәйерһенеп һүҙһеҙ ҡалдым.

— Зәбихулла үлгәс, күршеләге ҡартлас Сәхип, бисәһе берәй яры киткәнде көтөп кенә тора ла, тып итеп инә лә етә бит. Сәй ултыртҡан мәлде тура килтерергә тырыша. Ингән кешегә ултыр тип әйтмәһәң уңайһыҙ. Ә ул балалар алдында үҙенең әшәке ниәтен ҡыялатып та, туралатып та белгертә. Хаяһыҙлығына хайран булып, аҙап ҡалам. Уның һайын күҙен-ҡашын уйнатып маташа, мөртәт. Ғүмер буйы йөрөмтәл булды бит инде.

— Шунда ҡулыңда нимә булһа, шуның менән ҡаҡ маңлайына тасылдатып, бисәңә әйтәм, тип туҙҙырып сығарһаңсы.

— Бисәһен йәлләнем. Иренең йылмаяҡлығын минән күреп ҡуйһа, үҙең быйтаңнайһыңдыр тиһә, тип тә ҡурҡтым. Аҙғын иргә сыҙап йәшәгән ҡатындар абышҡаларын аҡларға тырышҡан була бит ул. Йөҙ йыртһа, күңелем ҡайтыр. Ә ут күршең менән ҡатнашмай ни-



сек йәшәмәк кәрәк тип тә уйланым. Зөләйха апай үҙе һәләк һәйбәт бит. Әсәм кеүек. Андабында киткәндә гелән балаларҙы бағып ҡала торғайны. Шунын хаҡына түҙҙем.

Бер көн үҙе килеп инде. «Ауылда хужаһы йәшәү ҡыйын инде. Ир-аттың үҙенең уйында араҡы ла боҙоҡлоҡ булғас, бисәләр ҙә шуны көҫәп кемдең ишек ҡағыуын ғына көтөп ята тиҙәрҙер, ҡәһәр һуҡҡырҙары», — тип һүҙ башланы.

«Ҡайһы яҡҡа ҡыялата был?» — тип йөрәгем жыу итеп китте.

«Зәбихулланан ҡайһындай ҡаралды ҡалды. Уны тәрбиәләп тотор өсөн дә ир ҡулы кәрәк, — ти был. — Ҡара әле, Гөльямал, ти, беҙҙең Сәйет донъя көтмәҫлек егет түгел. Атаһы кеүек осҡалаҡлығы ғына бар. Шул малай аҙып-туҙып китмәҫ борон үҙеңә генә эйәләтәһең дә ҡуяһыңмы әллә?»

Шулай тигәйне, Сәйетенән башта, ҡыйшаңнап йөрөгән Сәхибенең күҙе баҡайырын уйлап кинәндем дә, ризалаштым да ҡуйҙым. Боҙоҡ атаһынан үс алайым, тип сыҡһам, малайы униһынан да йүнһеҙерәк икән, хәйерһеҙ, — тип көйәләнде.

Мөһабәт Зәбихулланан һуң, ҡылйыуғыс ҡына Сәйетте үҙһенергә тырышып, йыл ярымдай серәште Гөльямал. Тик тегеһенең мәрхүм Зәбихулланан көнләшеп, уның ҡорған донъяһын хурлаған, уның ҡул йылыһын һаҡлаған әйберҙәрҙе ватҡан булып үҙен ҙурларға маташҡанын күтәрә алманы. Атайһыҙ итәм инде, тип биш айлыҡ балаһын йәлләһә лә, түбән йәнле әҙәмгә күңелен ҡабат йомшарта алманы — ҡыуҙы ла сығарҙы. Тегеһе көн һа-

йын боларып, һаман йәшәргә ирек бирмәгәс, ағалары үҙебеҙҙең ауылдан өй һатып алып, күсереп апҡайтырға мәжбүр булды.

* * *

Гөльямалдың әле йәшәп ятҡан иҫке генә өйөн алыҫтан уҡ күргәс, элекке шыңғырҙап торған йортон күҙ алдына килтереп: «Кемдең малы кемгә насип булмай», — тип уфтандым.

Артыҡ аптыраһам да, нык асыуланһам да, бөткөһөҙ ҡыуанһам да йөҙөмә ҡарап белерлек түгел минең. Гөльямалға ла эсем янып, болоҡһоп барып инһәм дә, борсолоуымды сырайыма сығарманым.

Алама ғына диванының ситенә терәлгән булып, сабыйғынаһын имеҙеп ултырған була. Баланан яңыраҡ ҡотолғанғамы, йөҙө һарғайып киткән. Ат ялы кеүек ҡуйы сәстәренең ап-аҡ икәнен күреп һиҫкәндем. Башын ҡалҡытҡас ҡына уларҙың сөм-ҡаралығы ҡояш нурына йылҡылдап аҡһыл нур таратҡанын төшөндөм.

Мине күргәс, сабыр ғына йылмайып, баш ҡаҡты. Берһегөн үк ҡайтҡанымды ишетеп, оҙаҡлағаныма борсолған булыр. Хәүеф ҡатыш һораулы ҡарашынан шуны һиҙҙем.

— Бөтә ауыл мине сәйнәп кинәнәме, әхирәт? — тине.

— Исеме кем? — тигән булдым боларып ятҡан йүргәктәрҙе ситкәрәк күсереп эргәһенә ултырғас. Ҡарашын бәпәйенән алып баҫалҡы ғына һирпелеп баҡты.

— Зариф, — тине. — Ҡыҙ тыуһа, Зарифа тип ҡушырмын тигәйнем.



Уның исемемдән генә булһа ла йыуаныс эҙләгәненә шул тиклем күңелем булды.

Күңелем тулды. Эркелгән йәш сикәмдән ағып төшмәһен тип, ҡарашымды түшәмгә күтәрҙем, унан өй эсенә күҙ йүгерттем: Гөльямалда ғына балаларҙың кесәйле көршәге ҡуҡырайып өҫтәлгә менеп ултыра алыр. Көлөмһөрәгәнемде абайлап әхирәтем дә көршәккә ҡараны: икебеҙ бергә пырх итеп ебәрҙек. Арабыҙҙа ниндәйҙер юшҡын йораты булһа ла ошо мәлдә шауҙырлап ҡойолоп төшкәндер.

Үҙем дә һиҙмәҫтән һикереп тороп унда-бында туҙрап ятҡан әйберҙәрҙе йыйыштырам: таҫтамалын сөйгә, һабынын кәштәгә, арҡыры баҫҡан ултырғысын өҫтәл эргәһенә... Ә ул күңеле йомшарып йәлп-йөлп килгән миңә йотлоғоп ҡарап ултыра. Үҙенең һапатараҡ икәненә күптән күнгән ул. Башҡалар янында сикһеҙ тәкәббер, сер бирмәҫ дуҫым, минән бер етешһеҙлеген дә йәшермәй, сөнки үҙен нисек тә яратҡанымды белә.

Шулай ҙа:

— Рәсимә үҫкән бит инде, йыйыштырыр әле, — тип әйтеүҙе кәрәк тапҡан була. Ҡыҙлы кеше, йәнәһе.

— Ул ҡайҙа?

— Әсәмдәрҙә. Унда эш тә күп, тамаҡ та һыйлыраҡ. Һин нисек ысҡындың?

Имеп туйһа ла, әсәһенең ҡулында наҙланып, йәшкелт зәңгәр күҙҙәрен сылт-сылт йомоп ятҡан бәпестең өҫтөнә йомшаҡ ҡына йөндән бәйләнгән костюм һалдым.

— Ҡана әле, килешәме икән? Күҙҙәренә төҫ кенә инде әллә?

Сабыйҙы мендәргә йәтешләп һалып башлыҡты кейҙереп маташҡанда Гөльямалдың

ҡулы ҡалтырағанын күреп үҙәгем өҙөлөп киткәйне, бәпестең битенә тәс итеп тамған күҙ йәше йөрәгемде өттө.

Ауыр эштән тумбығып бөткән бармаҡтары менән бауҙы бәйләй алмай һаман аҙапланғас, шаяртҡан булып ситкә эттем. Утын ағасы кеүек итеп ҡыҫып биләнгән сабыйҙы ипләп кенә тотоп күтәргәнемә йылмайып ҡарарға маташты ла, көлөү ҡатыш үкһеп ебәрҙе.

— Эй ошоно, — тигән булды. — Гел генә мине илата ла йөрөй.

Үҙем күтәрермен тинем. Үҙемә ышандым. Минең яҙмыш. Оят икән — үҙемә оят, тинем. Кеше өлөшөнә инмәнем. Яманлыҡ ҡылманым. Кеше ирен әүрәтмәнем. Ул да, мин дә ирекле инек. Хәҙер киләм, күрәм тиһә лә, аяғын да баҫтырасағым юҡ. — Йәш аралаш ашығып-ашығып һөйләй. Хәсрәте эсенә лыҡа тулы булыр. — Мин, мин тинем. Гел үҙемде алдын ҡуйҙым. Ә балаға нисек булырын уйлап еткермәгәнмен.

Хәнифем тыуғас, Зәбихулла икебеҙҙе бергә күтәреп йөрөттө. Ҡайным, ҡәйнәм, әсәм — өлтөрәшеп торҙолар. Туған-тыумаса, күршекүлән йыуаса ташыны. Рәсимәнең тәпәйен йыуырға ла ҡунаҡты өс булә саҡырҙыҡ. Морат тыуғас йүнһеҙ Сәйет ҡыуаныстан ун көн эсте. Зөләйха ҡәйнәм: «Өҙлөгөп ҡуйма, килен», — тип айға яҡын һыйырҙарымды һауышты.

Әле ингән юҡ, сыҡҡан юҡ. Етемлектең сигенә етеп, бер яңғыҙым аяҡ болғап ултырған кеүек. Ҡырҡ көн тулып уҙған баламды тәүләп ҡәҙер иткән һин, Зарифа, шуға күңелем тулды.

«Тыума» тип гелән күҙенә төртөп торһалар, күңеле китек кенә булып үҫер инде был бала, тип ҡаным ҡарая.

— Кеше үҙ бәхете менән тыуа ла инде, әхирәт, — тип йыуатам. — Сабый һөймәлеге менән йыртҡысты ла арбай, тиҙәр. Зөбәржәт күҙҙәрен йымылдатып бер йылмайып ебәрһә, ауыҙҙарын йыйып ала алмай торорҙар әле, — тип, нәфис ирендәрен мәрәкә кәүшәйтеп иларға маташҡан сабыйҙы күкрәгемә ҡыҫтым. — Йән атып торған әсәһе, һөлөк кеүек абзылары, гөл кеүек апаһы, аҙаш инәһе барҙа бирешеп тормо был егет?!

Сабый, ирендәремде сутылдатып һөйләгәнемде аңлаған кеүек ҡарап торҙо ла, ҡапыл йылмайып ебәрҙе.

— Ҡарасәле, Гөльямал, улың көлөп тора ла баһа, — тип ҡыуандым.

— Ысынлап та, — тигән булды әсә йөҙө яҡтырып. — Ҡырҡынан һуң бала йылмайырға тейеш инде былай. Зәбихулла хатта: «Минең балалар ике айҙа «аға-аға» тип һөйләшә башлай», — тип ҡупырайған була торғайны. Ә был бисараға шатланып бағырға ла форсат сыҡҡаны юҡ бит, Хоҙайым, — тип үҙен ғәйепле тойоп әйтеп ҡуйҙы Гөльямал.

— Әйҙә, әхирәт, сәй эсеп алайыҡ, — тине ул бәпесен тәрбиәләп һалғас. Аңлап торам, эсен бөҫкәрткеһе килә. Әле үк яурынынан тауҙай йөгө төшкән кеүек һыны турайып, сырайы асылып киткән.

— Һин өҫтәлеңде әҙерлә, ә мин бынау йүргәктәрҙе сая торайым, — тип мөйөштә өйөлгән сепрәк-сапраҡҡа ымлайым. — Исмаһам бөгөн ҡулыңдан бер эшең төшөп торор.

— Ярар һуң, — тип еңел генә ризалаша ул,

Мәсҡүҙә апайҙың иркә ҡыҙы икәне бер мәлгә генә иҫенә төшкәндер.

Гөльямал — атаһы иллегә, әсәһе ҡырҡҡа баҫҡанда ғына донъяға килгән, һөйөү нурында ҡойоноп үҫкән ҡәҙерле бала. Атаһы — оҙаҡ йылдар ситтә йөрөп, әҙәмсә йәшәүгә сарсап ҡайтҡан кеше — ныҡ егәрле ине. Йәштән генә ике улы менән тол ҡалып, өлкәнәйгәс кенә ҡабат ирле булған Мәсҡүҙә апай ҙа тормоштоң тәмен белеп ғүмер итте. Аш-һыуға, өй ҡарауға оҫталығы менән дан алғайны.

Шуға күрә Гөльямалдарға барырға ярата торғайным мин. Ҡасан барһаң да бер эштәре юҡ. Өйҙәре йыйыулы, ризыҡ мул. Гөльямал китап уҡый. Рәхәт. Ә беҙ ете бала үҫтек. Өй тулы бала, өй тулы эш. Йырып сыҡҡыһыҙ.

Һөт, сабый еҫе генә аңҡып торған йүргәктәрҙе кинәнеп йыуа-йыуа шуларҙы уйланым.

— Әллә нишләп дегәнәк кеүек йәбеште лә ҡуйҙы инде. Әрләп тә ҡараным. Оялтып та маташтым. Йыл буйы тынғылыҡ бирмәне. Унан ҡул һелтәнем. Ҡаршылашырға ихтыярым да, теләгем дә ҡалманы.

Ирендең ҡуйынында йоҡлап китеп, ирендең ҡуйынында уянған һин минең хәлемде аңлай алмайһың инде. Боҙ кеүек һыуыҡ түшәк... Баҙ кеүек өңрәйеп торған һалҡын тормош... Күңел ҡорғаҡһып китә. Бер кемгә кәрәгең юҡ. Ҡыу яңғыҙлыҡ... Ә бит эргәндә берәүҙәр пар күгәрсен кеүек гөрләшеп, икенселәр сат та сот һуғышып йәшәп ята. Йәшәй... Ә мин, әйтерһең, үлгәнмен. Зәбихулла иҫән булһа, мин дә һыуға сарсаған гөл кеүек һулып, ваҡытынан алда ҡартайып ултырмаҫ инем.



Яһаған сәйҙәр онотолдо. Гөльямал һөйләй, ә мин уның ҡотоп һалҡыны бөркөлгән әсе яҙмышынан йәйге эҫелә өшөп, ҡорошоп тыңлайым.

— Ауыл ерендә әлеге шул утын-бесән тип ҡаңғыраһың. Утын алып килешкәйне. Башҡалары ауыҙҙары шапылдап «аҡбаш»лы өҫтәлде уратты, ә был китап шкафынан айырыла алмай. «Ҡайһылай һәйбәт китаптар бар», — тип һоҡланып, биш-алтыһын уҡырға алып торҙо. Артабан да — береһен килтерә, икенсеһен алып ҡайта. Тege-был китап тураһында әйткән хәбәре күңелгә ятышлы, фекерҙәр ҙә тап килеп тора. Бер уйлаһаң, ауылда тормош, яҙмыш хаҡында төплө генә һөйләшкән дә юҡ бит: донъя ҡыуабыҙ. Күршегә инһәң, шул бер хәбәр — һыйырым ҡыҫыр, кәзәм дебетһеҙ, бесәнем наҡыҫ.

Был Ишмырҙаның да үҙәгенә үткән икән:

— Атам-әсәм ҡартайған тип, армияла ҡалмай ҡайтылды. Ә бында рәхәтләнеп һөйләшер кеше лә юҡ, — тип әйтеп ҡуя. Булмышынды аңларҙай йән эйәһе булыуҙың ҡайһылай бәхет икәнен минме һуң инде белмәгән?!

Ҡорһаҡ ҡолона әйләнһәк тә, йәнгә лә, мейегә лә аҙыҡ кәрәк бит. Ул инеп кенә сыҡһа ла күңелле булып ҡалғанын абайланым бер мәл. Әйткән һүҙҙәрен дә тиҫбе тартҡан кеүек әйләндереп-тулғандырып ҡабат-ҡабат уйлағанымды ла һиҙҙем. Шунда сик ҡуйырға кәрәк булған да бит. Ул йәш кеше, апаһы кеүек күреп, әҙәмгә һанап килә, ә мин боҙоҡ ҡатындар кеүек ҡылтымбайланып торһам килешмәҫ тип уңайһыҙланған булдым.

Мине күрһә күҙҙәре балҡып киткәнен алсаҡлығына юрағым. Ауыҙы йырылып килеп инеүен малайлыҡҡа япһарҙым. Миңә, етеп бөткән балаларҙың әсәһенә, күҙе төшөп йөрөйҙөр тип уйларға башыма ла килмәне.

Бер көн эсендәгеһен асып һалғас, елтерәтеп сығарған булдым да... Күңелгә ингәйне инде. Шулай ҙа йыл буйы ҡаршылашырға көсөм етте әле. Унан һуң да, осрашҡан һайын — был һуңғыһы, тием дә, үҙәгем өҙөлә... Тағы һуҙам. Бер яйы сығыр, үҙе китер. Бына-бына кәләш әйттерерҙәр, үҙ тиңен табыр, берәйһенә күҙе төшөр. Унан ҡул һелтәнем: «Аллаһы тәғәлә үҙе беләлер әле»...

Буйға уҙғас, сәсем үрә торҙо. Көнөм ҡараңғыланды. Ҡара көйөп йөрөгәнемде абайлағайны, әйт тә һал. Үҙем ҡарап торам: ҡойроғона басҡан йылан ише ҡайһылайыраҡ борғоланыр икән?!

Башы күккә тейә яҙҙы! Кешенең шул ҡәҙәрлем дә ҡыуанғанын күргәнем юҡ ине. «Атам-әсәмә әйтәм дә, яҙылышабыҙ!» — тип үҙ һүҙен тылҡып ҡайтып китте.

Йәшәй-йәшәй, отола-өтөлә күңел төңөлә. Кешеләргә лә күпте өмөт итмәй, үтә ышанып китмәй ҡарарға күнәһең. Ә тормош ҡайһы берҙә шундай бүләк әҙерләй: уның өсөн хаҡ түләнмәгән, өмөт тә ителмәгән, шуға күрә баһаһы ла ҙур.

Ишмырҙаның ҡыуанысы минең өсөн шундай көтөлмәгән бүләк булды.

— Ҡайһы Ишмырҙа һуң ул? — тип һүҙ ҡыҫтырам. — Егет көйө лә биш балалы ҡатын алып бына йәшәгәндәр бар. Хан улылай күреп ҙурлағанына аптырап ултырам.



Ысынлап та, күпме һөйләргә маташып ҡаранылар, сит ауыҙҙарҙан әхирәтем күңел һалған кеше хаҡында ишеткем килмәгәйне.

— Ишмөхәмәт ағайҙың улы һуң...

Шул саҡта ғына Гөльямалымдың хәлен төшөнәм. Хан улын һайлаһа ла өмөтө булыр ине.

Үҙе шау малайлы ғаиләлә үҫкән Ишмөхәмәт ағайҙың малайҙар тип иҫе китә ине. Ә ҡарышҡандай ҡыҙҙары тыуған да ҡыҙҙары тыуған. Ишмырҙа ун ҡыҙҙан һуң ғына донъяға килгән иркә малай ине шул. Беҙ уның Мәймүнә апаһы менән бергә уҡыныҡ. Шуға күрә ул малайҙы ҡайһылай ҡупайтып, өфөлдәтеп үҫтергәндәрен беләм. Муйылға барғанда, саҡ ҡына атлағас та шыңшый башлаһа: «Мыртыйымдың аяғы талды», — тип алмаштилмәш йәпәләгән була торғайнылар.

— Бигерәк йәш түгелме һуң ул малай, — тием мин иҫәпләп. — Мәймүнәнән һуң Фәғилә, Фәриҙә, Фәниләләре бар ине.

— Ун йәшкә йәш...

Уны эҫендереү уйымда ла юҡ ине инде. Ҡайҙа! Күмәге бер ташланып, өҙгөсләмәҫтәр тимә. Ысынлап та икенсе көндө ике апаһы ажғырып килеп инде.

— Мәймүнә түгелдер ҙә...

— Юҡ, Шәмсиһан менән Фәғиләһе... Өлкән апалары яман уҫал бит уларҙың. «Баланды төшөрт. Атыу көн күрһәтмәйбеҙ. Әллә кемдән булған тыуманды беҙҙең энекәшкә таҡмаҡсыһың!» — былары әйткәндәренең иң ҡолаҡҡа ятырҙайҙары ғына.

Ишмырҙаға ла нык эләккән. Әсәһе йөрәге тотоп йығылған. Атаһы бер килке һенһеҙ ҡалған. Апалары: «Әсәң йәшендәге ҡарт би-

сәне алаһыңмы ни?» — тип ныҡ ғәрләндергәндәр. Минең менән бәйләнгәненә оялып йөрөүелер, башҡа бер ҙә күренмәне.

Был булды аҙна башында. Аҙна аҙағында аша ауылдан быйыл ғына унды бөткән бер бите ай, бер бите ҡояш кеүек һәләк тә сибәр бер ҡыҙҙы алып бирҙеләр.

Шуның менән генә бөтһөн ине лә бит. Туғандары миңә көн күрһәтмәй. Ауыл ғәйбәткә лыҡа тулды. Ике еңгәм берәм-берәм килеп һүгеп китте. Абзыйымдар инде, рәхмәт яуғырҙары, ваҡланып, мине әрләү кимәленә төшөп йөрөмәне, бисәләре аша ғына эш итте. Шулай ҙа, оҙаҡламай йыл була, ишек бауыма ла тотонғандары юҡ.

Әсәм: «Ул тиклем баланы ҡайһылайтып аҫырамаҡ булаһың? — тип әллә нисә тапҡыр килеп иланы. — Әҙәм ғәйепһеҙ булмай. Тик кеше гонаһын аҙыраҡ көн яҡтыһынан йәшерә торғайны. Ә һин...» — тине.

«Уныһы ла дөрөҫ инде», — тип уйлайым Гөльямалға өндәшмәй генә: былай ҙа эсе бошҡан сағында яраһына тоҙ һипмәйем.

Холҡон кешенең зитына теймәҫлек, күҙгә төртөлмәҫлек итеп үҙгәртә алманы ул. Әллә алманы, әллә кәрәк тип тапманы. Барыбыҙ ҙа йәш саҡта йүгән күрмәгән тай кеүек ҡыланып алабыҙ. Тик был бер осор ғына. Унан тормош ары-бире типкесләй, юна башлағас, шымарабыҙ. Дөйөм ҡағиҙәләргә буйһоноуҙың йәтешлеген төшөнөп, исмаһам, күндәм ҡиәфәт сығарырға өйрәнеп, йәшәп ятабыҙ. Ә Гөльямал ҡағиҙәләрҙе һанға һуҡмау ғына түгел, уларҙың барлығын да белергә теләмәне, шикелле. Уның хәленә ҡалған һәр ҡатын ҡотолоу юлын эҙләр ине. Атайлы ғаиләләр ҙә



баланы икенән арттырмаҫҡа тырыша хәҙер. Заманы шундай.

— Һуң булмаҫ борон алдырырға кәрәк, тип үҙем дә уйланым, әхирәт, — ти Гөльямал уйымды уҡығандай. — Аҡылым менән бөтәһен дә аңлайым. Анализдар бирҙем. Көн һайын иртүк больницаға барам да, бер тапҡыр урап сығам: инергә аяғым тартмай. Шунан: «Иртәгә инермен», — тип, ҙур бурыс башҡарғандай еңел һулап, ҡайтып китәм. Үҙем беләм бит инде: иртәгә лә, иртәгәнән һуңға ла инмәйәсәкмен.

Күҙ алдыңа килтер хәлемде, Зарифа: яратып ҡына ашаған, рәхәт кенә итеп һеңдергән ризығыңды «ҡоҫ» тип ҡыҫтаһындар әле.

Айға яҡын үҙ-үҙемде алдап йөрөнөм, унан һуң булып китте.

— Был баш баҫып, бөрөшөп ҡалыр, — тип уйлағандарҙыр инде. Урамдан үтәм, ҡарынымдағы баланы йолҡоп алырҙай булып ҡарап ҡалалар. Тыумаған йән эйәһенә лә шул тиклем тарһынырҙар икән донъяны, Хоҙайым...

Гөльямалдың ярһыуҙан тауышы ҡалтырай.

— Балалар нимә тине? — Һүҙҙе икенсерәк юҫыҡҡа күсерергә ашығам. — Хәнифең ҙурайған бит инде хәҙер.

— Ун бишен тултыра... Ҡара көйөп йөрөнө, теле менән рәнйетмәне, рәхмәт төшкөрө.

* * *

— Ай Алла, — тип бот саба Гөльямал уйҙарымды бүлеп. — Хәнифтең күстәнәстәрен ҡуйырға онотҡанмын бит, әхирәт. Бына шулай ул ҡартайғас.

— Килештерә. Утыҙ туғыҙ йәшендә әбей булып ултырмаһаң инде, — тинем дә һиҫкәнәм: ете йыл элек беҙ уны өлкәнәйеп бөткәс ни ҡылана, тип хөкөм иткән саҡта уға бары утыҙ ике йәш булған. Һөйөп-һөйөлөп йәшәр, наҙланып туймаҫ ваҡыты...

— Өләсәй булғас, әбей булмай нишләйһең? Бәй, мин һиңә, Хәнифтәрҙең улы барлығын да әйтмәгәнмендер әле, — тип һөйләнә-һөйләнә мейес араһынан ҙур ғына йәшник күтәреп сыҡты Гөльямал. — Мыртыйыҡның уҡыуға төшөүенә бөтөн кәрәк-ярағын етештереп ебәргән. Костюм-салбарынан башлап юйғысына тиклем.

Балаларҙан ундым, әхирәт. Аллаға шөкөр. Бер-береһе өсөн үлеп торалар.

— Үҙең илай-илай яратырға өйрәткәс ни. — тип йылмаям уйым менән йәнә теге болоҡһоу йәйгә олағып.

* * *

...Хушлашырға тип килә инем. Алыҫтан уҡ абайланым: Гөльямал ишек алдында енләнгән кеүек аңкы-тиңке йөрөй. Хәүефләнеп, йүгерә-атлай барып индем.

— Ни булды, әхирәт?

Көсөргәнештән ирендәре ҡыҫылып, сырайы ҡатып ҡалған, ҡарауы ҡурҡыныс. Етмәһә, ҡолағыма ярһып илаған бала тауышы салынды.

— Баянан бирле илай, — тине Гөльямал. — Үҙәгем өҙөлә инде хәҙер.

— Һуң?

— Хәниф өйҙә... Мин юҡта бәүетә, инәм, күрмәмеш тә белмәмеш. Шуға яйлап эҫеһен тигәйнем. Әле баянан бирле илаһа ла алмай.



Шул тиклем дә ҡаты бәғерле микән ни? — Ғәҙәттә сабыр әхирәтемдең тауышы ҡалтырай.

— Ҡайҙа, ҡарайым әле, — тинем мин дә эсем бошоп. — Ни йәне менән сыҙай икән, илаһым?!

Бер йәй эсендә һорнайып үҫеп киткән Хәниф, үкһеп бөткән сабыйҙы йәпһеҙ генә итеп күкрәгенә ҡыҫҡан да, үҙе лә ҡушылып илар хәлдә ишекле-түрле йөрөй. Мине күргәс ҡыуанып китте.

— Әсәм әллә ҡайҙа булды, Зарифа апай. Эҙләп сыҡһаҡ бәпәйгә ел һуғыр, тинем... Әллә нишләп илай. Аҫты һыу булғас, яңынан төргән дә булғайным, килештерә алманым, шикелле.

Үҫмерҙең күҙендә сабыйҙы йәлләү, борсолоу күреп эсемә йылы йүгерҙе.

— Ҡалай оҫта биләгәнһең, — тигән булдым туҙраған йүргәк ситенән тәпәйгенәһе алһыуланып сосайып торған бәпесте ҡулыма алып.

— Өйрәнергә тура килә инде, — тине Хәниф. Үҫмерҙәргә хас ҡырыҫлыҡтың эҫәре лә ҡалмағайны булмышында.

Йәтешерәк ҡулды тойоп илауы баҫыла төшкән сабыйы янында икәүләшеп мәш килеүебеҙҙе ишектән инеп ҡарап торған Гөльямал, күҙ төбөнән йәш бөртөгөн һирпеп ташлап, шым ғына кире тышҡа сыҡты.

* * *

— Ана ҡайтты беҙҙең малай, — тине Гөльямал йүгереп килеп ингән улына ҡаршы барып. — Ҡалай оҙаҡ йөрөнөң, балам. Әңер төштө бит инде.

— Атам олатамдарға алып барҙы, — тине Зариф. — Әсәй, ҡара әле. — Ҡеҫәһенән бер ус аҡса сығарҙы. — Олатам бирҙе, — тине бик тә ҡәнәғәт итеп. — Бер пинсейәм, мәктәпкә кәрәк-яраҡ алығыҙ, тине.

— Вис бар, тиһәң ни була...

— Әйттем инде. Баштан-аяҡ яңынан кейендем, тинем. Ә ул: «Ал, ал, улым, яңғыҙ әсәңә бөтөнөһөн еткереү ҡыйындыр», — тигәйне...

— Һин нимә тинең?

— Әсәй кеше яңғыҙ булмай инде, тинем.

Гөльямал менән бер-беребеҙгә ҡарап шарҡылдап көлөп ебәрҙек.

— Һуң үҙең гел шулай тиһең дә инде, — тип һуҙҙы малай иркәләнеп.

— Дөрөҫ-дөрөҫ. Ә ул нәмә тине?

— Ҡалай зирәк бала, үҙебеҙҙең яҡҡа тартҡан, тиҙәр. — Зарифтың күҙҙәре шуҡ ялтырап китте. — Әй, онотоп торам, атайым һине тышта көтөп тора. Һөйләшергә һүҙ бар, ти.

— Ул ниткән һүҙ һуң ул? — Гөльямал ҡапыл ҡырыҫланып китте.

— Теге һыҙыҡ торған ергә үҙенең исемен яҙҙыртайыҡ, тиме шунда. Аңламаным. Әйҙә инде, — Зариф әсәһенең ҡулынан тышҡа һөйрәне.

— Ниндәй һыҙыҡ? — Аптырашта ҡалған Гөльямал миңә ымланы. — Сығайыҡ әле, әхирәт.

— Минең менән нимә һөйләшәһең? Ана улың менән һөйләш, — тип ҡырҡыу ғына өндәште ул тупһала уҡ туҡтап.

— Юҡ-бар һүҙ түгел, Гөльямал. Зариф тураһында. Мөһим эш. Һинең ризалығың кә-



рәк. — Эңер ҡараңғылығынан йомшаҡ ҡына тауыш яңғыраны.

Икеһе ҡапҡаның ике яғына дошмандар кеүек ҡапма-ҡаршы баҫты. Урталарына сиктәрҙе тоташтырған кеүек улдары килеп торҙо.

— Һаумыһығыҙ, Зарифа апай, — тип йылмайҙы тормош тарафынан ҡәҙимге генә таушалып өлгөргән мөләйем ир. Яҡын итеп өндәште. Улының аҙашына ҡарата рәхмәтле йылылыҡ һиҙҙем ҡарашынан.

— Һөйлә. Әхирәттән бер серем дә юҡ. — Гөльямалдың тауышы имшемәне.

— Зариф мәктәпкә төшә бит быйыл, — тигән булды Ишмырҙа. Унан туҡтаны. Тулҡынланғаны күренеп тора.

— Шунан.

— Атам менән кәңәшләштек. Улымды үҙемдең исемгә яҙҙыртһам яҡшы булыр ине, тигәйнек. Ҡәҙерле бала ҡәҙерһеҙләнеп йөрөмәһен ине...

Бындай хәбәрҙе көтмәгән Гөльямал ҡаушап ҡалды. Байтаҡ өндәшмәй торҙо. Барыбыҙ ҙа уға текләгәнбеҙ. Бер нисә генә йыл элек ошо балаға ғүмер бирергә хоҡуғы барлығын бөтә ауыл менән алыша-алыша раҫлаған әсәнең әле нимә әйтһә лә: туҙынһа ла, рәнйешен түкһә лә, үсәһә лә, мыҫҡыл итһә лә — хаҡы бар. Ишмырҙа быны яҡшы аңлай булыр. Хәүефе тын алышынан уҡ һиҙелә.

— Ярар, — тине шул саҡ Гөльямал сабыр ғына. — Яҙҙыр.

Атай кеше еңел һуланы ла әллә ҡайһы арала үҙенә килеп һыйынған улының яурынынан ҡысты.

— Әсәй, — тине Зариф атаһының ҡосағы-

нан ысҡынып. — Әйҙә, хәҙер үк дыкаментымды апсығып бирәйек.
— Дыкаментыңды ла, үҙеңде лә иртәгә силсәүиткә барышлай килеп алырмын, улым, — тип ирештерҙе атаһы баланың сәстәрен туҙҙырып. Үҙе ҡарашын Гөльямалдан айырып ала алманы. Әхирәт тә тәү күргәндәй уға баҡҡан. Аҙашым менән беҙ ошо ике балҡыу ҡараштың нурында рәхәтләнеп ҡойоноп торҙоҡ.

## ТӨНДӘ ЮҒАЛЫРҒА ХОҠУҒЫМ БАР

«Төндә юғалырға хоҡуғым бар...»

*Виктор Цой*

— Доктор, миңә ҡайтырға кәрәк!
Ҡулына бирсәткәләрен кейеп, операцияға әҙерләнгән хирург: «Аҡылдан шаштыңмы?»— тигәндәй сәйерһенеп миңә текләй.
Тик мин аңды-тонде аңларлыҡ хәлдә түгелмен: кемдер тәнемдән тарамыш тартҡан кеүек ғәзиз йәнемде һура. Ҡот осҡос һыҙланыу ялҡыны булмышымды ялмаған. Балаһының ғүмере ҡыл өҫтөндә тирбәлгәндә шулай һыҡрай әсәләрҙең күңеле.
— Миңә тиҙерәк ҡайтырға кәрәк, — тип ҡабатлайым, сабырлығымды юйып.
Ауырыу операция өҫтәлендә көтөп ятҡан мәлдә сестраның былай ҡыланыуы башҡа һыймаҫлыҡ, әлбиттә. Тик мин башҡаса булдыра алмайым. Ҡаушап төшкән хирургҡа:
— Мине үлгән тип иҫәпләгеҙ, Ғимран ағай, — тип ҡысҡырам да, ҡалпағымды, халатымды йолҡҡослап ырғытып, тышҡа ташланам. Урам буйлап йүгерәм, ә күҙ алдымда — улымдың моңһоу ҡараштары. Иртәнсәккә наҙы хушлашыу булғандыр кеүек.
Ун дүрт — шундай ҡатмарлы, хәүефле йәш. Һуңғы ярты йылда Искәндәрем шул тиклем үҙгәрҙе. Йә үтә шашып китә, йә бөтөнләй бөлөп, баҫылып ҡала. Үтер әле тип, сабыр ғына көтөп йөрөй инем. Ә бөгөн иртәнсәк ул бәғерҙәрҙе телгесләр ниндәйҙер әрнеү менән, шул тиклем яратып, күҙҙәремә текләп ҡарап ҡалды. Ә мин... нишләп туҡтаманым һуң? Аллаһы тәғәләгә, әллә нисәнсе ҡат инде, шундай аҡыллы балалар биргәнгә рәхмәт әйтеп, эшемә китеп барҙым.
Йүгерәм. Ноябрь еле еүеш ҡарын битемә килтерә лә сәпәй, килтерә лә... Йүгерәм. Үҙүҙемде өгөтләп маташам: «Нимә булһын, алйот, нимә булһын». Әммә йөрәгемдең эсенә инеп ултырған ҡурҡыу ҡамсы кеүек алға ҡыуалай. Ә хәтерем ошондай һиҙемләүҙең булмышымды ҡасан биләгәнен иҫемә төшөрә.
Бынан ун дүрт йыл элек, ошондай уҡ ҡара көҙҙә, ҡаршыма осраған кешеләрҙе бәрә-һуға ашыҡҡайным: алтынсы ҡаттан осоп төшкән иремдең ғазап тулы һуңғы ҡарашын осратыр өсөн ашҡынғайным. «Юҡ, бында алтынсы ҡат юҡ бит!» — Хәйләһеҙ сабый кеүек, үҙ-үҙемде йыуата-йыуата, дөбөр-шатыр тупһаға йүгереп менән дә шомланып ҡатам. Ишек бикле түгел. Ә бит Искәндәр әле мәктәптә булырға тейеш. Эскә ташланам да йәнә туҡтайым: улым иҙәндәрҙе һап-һары итеп йыуған, өйҙө йыйыштырған.
— Искәндәр! — тип өндәшәм. — Улым! — Бүлмәһенә атылам. Йә хоҙа! Балағынам диванда ята. Хас та йоҡолағы кеүек.

— Искәндәр!

Ҡулы йылы. Пульсын ҡапшайым. Леп-леп тибә лә кеүек, типмәй ҙә. Ҡүбәләк ялҡау ғына ҡанат елпегәндәй...

Нишләнең, улым?! Ашығып, тәнен ҡапшайым. Ҡан-фәлән юҡ. Күҙем өҫтәлдәге яҙыуға төшә.

«Әсәй, ғәфү ит мине. Тик минең йәшәгем килмәй. Һине ҡайғыртмайым тип тырышып ҡараным мин, инде түҙерлегем бөттө.

Рәйсә апай ғәфү итһен. Морфийҙы мин урлағайным...»

Морфий... Ҡәһәр һуҡҡыр, морфий.

Больницанан тиҙ килделәр. Нимә эшләгәндәрҙер, теүәл генә һис хәтеремдә юҡ. Ныҡ тырыштылар. Тик улым һаман иҫенә килмәне. Бөтәһе лә мине тынысландырырға маташты. Ә мин, ҡарт докторҙың йөҙөнән ҡарашымды айырып ала алмай, уның тойғоларын ауланым, өмөт әҫәре күренмәне.

Ун ике йыл бергә операция өҫтәле артында ҡапма-ҡаршы тороп, уны һүҙһеҙ аңларға өйрәнеп бөткәнмен.

— Ул йәшәйәсәкме, Ғимран ағай? — тип һорарға баҙнат итәм. Үҙем йөҙөндә тойғолар көрәшкәнен көсөргәнеп күҙәтәм: йәлләү менән намыҫы айҡаша, хис менән аҡыл. «Һүнгән өмөттө ләүкетеп ебәреү еңел, ә өмөтләнгән сағында ла: «Ҡайһылай сибәр бит әле гәндереп, аҙаҡ яңылышһаң...» — операция алдынан ауырыуҙың туғандары менән һөйләшкәндә һәр саҡ шулай ти ул.

— Сабыр итәйек, Гәүһәр һылыу, — тип арҡамдан ҡаға. — Йәшәүен йәшәй инде, һин быны үҙең дә беләһең. Тик элекке хәленә килерме? Көтәйек.



— Нисек булһа ла йәшәһен, доктор. Нисек булһа ла ризамын, ғүмер буйы арбала этеп йөрөргә лә ризамын, — тип ялбарам.

— Тәүбә, тиң. Буштгы һөйләмә. — Тоғро әхирәтем Рәйсә мине ҡосаҡлап күкрәгенә ҡыҫа.

Төнө буйы улымдың баш осонда ултырам. Керпек тә ҡаҡмай йөҙөнә текләгәнмен, ҡолағым тын алышын аулай. Ә хәтерем йәнә үткәндәрҙе аҡтарырға тотона.

Ун дүрт йыл элек тә ошолай ултырып балаларымдың (өс йәшен яңы тултырғанының һәм ҡорһағымдағыһының) атаһының тын алышын тыңлағайным. Йән бирер алдынан аҙға ғына аңына килеп, үҙен ғазаплағанды хәл итеп өлгөрҙө ул: «Башҡаға кейәүгә сыҡма», — тине.

Ҡуй инде. Танышҡан көндән үк иҫкән елдән дә ҡыҙғанып аптыратҡайны. Берәйһе һүҙ ҡатһа ла: «Ҡем ул?» — тип яҙалар ине. Йылмайып ҡайтып инһәң, шикләнер, моңайһаң, хәүефкә батыр ине. Үҙе дөртләткән ғазап утынан үрһәләнеп, эскегә бирелде. «Һине һөйркәң менән тотам барыбер», — тип, эскән саҡта балкондан килеп инер ине. «Бер кем дә ҡарамаҫлыҡ булып йөрө», — тип, күк тадә ҡарамаҫлыҡ булып йөрө», — тип, күк талаҡтай күгәртеп туҡмарға әүәҫләнде. Ә мин, һантый, үҙемсә мөкиббән булып, һуғырға килгән сағында ла: «Ҡайһылай сибәр бит әле ул», — тип һоҡланып торор инем.

Улымдың йөҙөндә — атаһының һыҙаттары. Шундай уҡ киң маңлай, түлҡын сәстәр, оҙон керпектәр.

Мин йәнә шул керпектәрҙең һирпелеп ҡалҡырын көтәм.

Таң алдынан булған хәтәр мәлдә: ҡараң-

ғылыҡ менән яҡтылыҡ айҡашҡанда, ҡыйын йәне елпелдәп кенә торған әҙәм балаһына. Шул ваҡыт аман ғына үтеп киткәс, өмөтөм ныҒый. Ә мине өйөмә ҡыуалар. «Үҙең аҡылдан шашаһың хәҙер», — тиҙәр. «Үҙенде ҡулға ал, — тип әрләй доктор. — Ила, исмаһам, ила», — тип инәлә, яурынымдан тотоп һелкетә ул.

«Ҡайт инде, — ти Рәйсә. — Оҙатайыммы? Искәндәр янында үҙем ултырырмын. Исенә килеү менән шылтыратырмын. Ҡайт, Гәүһәр. Төшкөлөгөн, бәлки, Ләйсән ҡайтып төшөр».

Хәбәр иткәндәр икән ҡыҙыма. «Ләйсән!» — тигәнгә күңелем имшей. Күҙемә йәш тула. Илай-илай өҫтөмә кейенәм. Илай-илай урамдан барам. Аяуһыҙ әҙәмдәр тарафынан көсөктәре һыуға батырылған кәнтәй кеүек шыңшып ҡайтам, эй хоҙайым. Һалҡын, шомло өйөбөҙгә ҡайтып өшәнмәһен ҡыҙыҡайғынам. Тик Искәндәрһеҙ уға мин нисек ҡот индерермен? Нисек? Ҡапҡаның бауына йәбешеп, тын алам. Тупһала ҡыҙым баҫып тора. Бәләкәй саҡтан тәрбиәләп, баплап үҫтергән оҙон сәстәре туҙырап яурындарын япҡан. Нескә генә, һомғол ғына — талсыбыҡ кеүек. Башын артҡа ҡайҡайтып ишеккә һөйәлгән дә өнһөҙ теклә п тора. «Эй хоҙайым, ҡайһылай матур минең балаларым!»

Йөрәгемде ҡоршаған ут ҡулсаһы тағы ла ныҒыраҡ өтөп ала. Ниҙер шомландыра мине ҡыҙымдың ҡиәфәтендә, маңлайына бәйләп ҡуйған аҡ таҫма ла, өҫтөндәге таныш түгел оло курткаһы ла... Ә күҙҙәре... Уларҙа һағыш та, әрнеү ҙә түгел, ниндәйҙер ят тойғолар, миңә таныш түгел тойғолар. Ниһайәт, Ләйсәнем урынынан ҡуба ла, йүгереп килеп, мине ҡосағына ала. Ҡосаҡлауында ла хәүеф тоям: ҡайғым уның күңеленә яғылмағандай, арабыҙҙа ҡоршау торғандай. Ҡалҡып, ҙур ҡара күҙҙәренә текәләм, уларҙа ниндәйҙер ят осҡондар. Ә йөҙө ап-аҡ, йонсоу.

— Нишләнең, балам? — тием эсем өҙөлөп.

— Мин ҡотҡарырмын һеҙҙе, әсәй. Икегеҙҙе лә ҡотҡарырмын, — ти ул. Тауышы ла, һүҙҙәре лә сәйер. Яурынымдан ҡыҫып, өйгә алып инә. Сәсемдән һыйпай. Ҡулдары шифалы уның. Шуның өсөн дә врач булырға теләне, медицина институтына инде бит ул.

— Бөтәһе лә яҡшы булыр. Бөтәһе лә яҡшы, — тип ҡабатлай ҡыҙым. Тауышы ла шифалы, наҙлы. Үҙ ҡаным, үҙ йәнем. Күңелемә һил. Үҙемде кисәнән бирле борсоған һорауымды әйтәм:

— Нишләп үҙ-үҙенә ҡул һалды икән һуң? — тим. — Нишләп йәшәгеһе килмәне икән? Нишләп? Мин бит һеҙ бәхетле булһын тип тырыштым. Ҡулымдан килгәндә лә, килмәгәндә лә тырыштым. Хатта атайығыҙҙың үлеүенә лә ҡыуандым бит эстән генә, үҙемә лә белдермәй генә. Һеҙҙе иреш-талашта, быҫраҡлыҡта, ҡоҫҡолоҡта үҫтергем килмәй ине. Һулар һауағыҙ, эсер һыуығыҙ саф булһын тип, уҡыуымды ташлап, ауылға ҡайттым.

Ләйсәнем ябыҡ ҡулдары менән үҙ-үҙен ҡосаҡлап алдымда тора. Ул барыһын да белә кеүек, тик яуап бирергә ашыҡмай. Ә минең көтөргә түҙемлегем юҡ. Искәндәрҙең көндәлеге барлығы иҫемә төшә. Дөбөр-шатыр тартмаһын аҡтарам. Бына ул алһыу тышлы ҡалын дәфтәр. Ҡасандыр уны мин үҙем башлағайным, сабыйымдың тәүге шуҡлыҡтарын теркәп барыр өсөн. Ашығып аҡтарам: был-

тырҙан бирле бер нәмә лә яҙмаған. Ап-аҡ биттәр... Ап-аҡ. Иң һуңғы биттә генә кисәге көн һәм шиғырҙар:

Я люблю ночь
И это мое право —
любить ночь.
И это мое право —
уйти в ночь.

*Виктор Цой.*

Төнгә китеү — минең хоҡуғым, ти улым. Ошо һүҙҙәре менән иренемдән ысҡынырға торған рәнйеүҙәргә бик һала. Эйе, уның хоҡуғы! Тик ни өсөн юғалырға теләнең һин төн ҡосағында?

— Көндәлеген һөт менән яҙған ул, — ти Ләйсән. — Утҡа тотһаң, хәрефтәре күренер.— Ҡыҙым алдыма тубыҡланған да ҙур күҙҙәре менән күңелемде айҡай. Туҡта, кемгә оҡшаған һуң ул ошо мәлдә?

— Ул бит романтик. Революционерҙар кеүек яҙам тип көлә ине.

— Газ ялҡынында тотһаң да күренерме?

— Уҡығың киләме? Нимәгә? Уның ниңә йәшәгеһе килмәгәнен мин былай ҙа беләм.

«Белһәң, нишләп ғазаплайһың мине, балаҡай!» Ни өсөндөр китер серен белһәм, ҡайтарыр серен дә асырмын кеүек. Күкрәгенә баҫҡан ташын ҡалҡытһам, һулышы иркенәйер.

— Искәндәр миңә яҙғайны. Шуға ҡайтҡайным бит. Өлгөрөрмөн тигәйнем. — Бары хәҙер генә ҡыҙым илап ебәрә. Ярһып, үкһеп илай. Тик минең генә көтөр сабырлығым юҡ: «Һөйләй һал, балам!»

— Донъя шундай бысраҡ, әсәй... — тип үкһей ул. — Шундай әшәке... Искәндәр Анжеликаны яратып йөрөй ине бит.

— Беләм. Әсәһе һатыусы... Ат кеүек ерән ҡыҙ...

— Шул тиклем мөкиббән китте. Шиғырҙар яҙа, баҫҡан эҙҙәренә табына.

— Тәү тапҡыр ғашиҡ булғанда шулай инде.

— Ә тегеһе көлә генә... Шундай дәртле, ҡыҙыу, яндырай ҡыҙыҡай. Утты, һыуҙы кисеп өлгөргән...

— Искәндәр ҙә төшөп ҡалғандарҙан түгел инде. Киноартист кеүек...

— Анжелика шуға ла ситкә тибәрмәне инде. Бесәй-сысҡан уйнаған кеүек. Йә ымһындыра, йә ҡыуа. Үткән ялда ҡунаҡҡа саҡырған. Гел өлкән егеттәр. Искәндәр араларында иң йәше. Тәүҙә эсеп иҫереп алғандар. Унан— «групповуха».

— Нимә, нимә?

— Күмәк секс. Искәндәр Анжеликаны алып китмәксе булған. Бынан көлә, мыҫҡыллай башлағандар. Унан егеттәр бөтөнләй шашып киткән, йыртҡысланып алып, ҡыҙҙарҙы мәсхәрәләгәндәр...

Шундай бысраҡлыҡ...

Әммә икенсе көндө Анжелика Искәндәргә: «Миңә был тормош нығыраҡ оҡшай, ә һин эшкә ашмаған һеләгәй», — тигән.

Рәнйеү зиһенемде томалай.

— Бер бысраҡ ҡыҙ өсөн тормоштан ваз кисергә, мине ташларға...

— Ул шул тиклем һыҙланды, әсәй. Аңлайһыңмы? Шул тиклем әрнене ул.

— Аңлайым, балам. Аңлайым. Бөтә әрнеүҙәрегеҙҙе үҙемә алһам ине. Бәләкәй саҡта, абынып китһәгеҙ, инәғош ише ҡанат йәйеп

торор инем, ҡурсалар инем. Хәҙер нисек аяйым һуң? Тәүге һөйөү ғазабынан, дуҫтар хыянатынан, яуыздар яман атынан...

Тик уларҙың барыһы ла онотола бит, балам. Теш һыҙлауы кеүек... Түҙергә, үткәрә белергә генә кәрәк. Шул хаҡта әйтмәнем, өйрәтмәнемме ни һуң? Теш һыҙлауын, көндөң яманын үткәргән кеүек.

Күрше бүлмәлә телефон шылтырай. Һикереп торам, тик ҡыҙым етеҙерәк. «Рәйсә апай, хәлендә һораша», — ти ул.

— Бөтәһе лә һәйбәт, — ти әхирәтем. — Элеккесә.

— Хәҙер барам, — тием.

— Һинең килеүең кәрәкмәй. Ял ит. Төнгөлөккә килерһең, — ти Рәйсә. — Кәрәк булһаң шылтыратырмын. Ышанаһыңмы миңә? Минең һине алдағаным юҡ бит.

Шулай шул.

— Хәҙер сәй эсәбеҙ ҙә, һин ятып йоҡлайһың, — ти ҡыҙым. Уның сынаяҡҡа йоҡо дарыуы һалғанын күрмәмешкә һалышам.

Ҡара төндә ҡара һағыштан уянам. Күҙемде асмаҫ борон уҡ ҡайғым үҙенә йолоп ала. Ҡурҡып ҡына керпек аҫтынан бүлмәләге яҡтылыҡ сығанағына ҡарайым. Өҫтәлдәге май шәм ялҡынына... Ҡыҙым балаҫҡа аяҡ салып ултырған да нимәлер шыбырҙай. Өҫтөндә ниндәйҙер сәйер кейем.

— Нишләйһең, балам? — тип һикереп тороп ултырам.

Ул яуап бирмәй. Үҙе бында ла, булмышы әллә ҡайҙа кеүек.

— Нишләйһең, Ләйсән? — Ҡурҡыуымдан ҡысҡырып ебәрәм.



Ул яйлап ҡына миңә башын бора. Күҙҙәренә аң нуры кире эркелә.

— Нишләйһең?

— Доға ҡылам, әсәй. Ҡурҡма, мин һине ҡотҡарырмын.

Донъялыҡтан ваз кискән ҡараштар. Әрнеү, һағыш, йәнә һөйөү тулы кеүек, әммә шул уҡ ваҡытта был тормоштан өмөтөн өҙгән күҙҙәр. Ҡайҙа күргәнем бар минең ошондай күҙҙәрҙе? Кемгә оҡшатам ҡыҙымдың һулып барған сәскә кеүек һүрәнке, һылыу йөҙөн?

— Мария Дэви, илаһиәм минең, — тип шыбырҙай ҡыҙымдың ирендәре. — Һаҡла, ҡурсала әсәйем менән ҡустымды, Мария Дэви. Гонаһһыҙ йәндәреңде ҡурсала...

Мария Дэви, Мәрйәм ана, Мария Дэви... Шунда ғына уны кемгә оҡшатҡанымды ла, сәйер уйсанлығының, ятһыныуының сәбәбен дә төшөнәм.

— Өфө вокзалында «аҡ монахтар»ға ҡушылырға өндәп йөрөгән ҡыҙ һин инеңме? Рәйсә апайың күреп ҡайтҡайны.

Ләйсән баш ҡаға.

— Һинән быны һис көтмәгәйнем, балам, — тинем һыҙланып. — Һин бит аҡыллы кеше, нисек ышана алдың уларға? Үҙен Иоан Свами тип йөрөткән Кривоногий ҙа, Мария Дэви тигәнең дә енәйәтсе ти бит. Милиция эҙләй.

Кривоногий — зомби әҙерләй торған эксперименттарҙа ҡатнашҡан, кеше психологияһына ҡот осҡос йоғонто яһай ала торған әхләкһеҙ ғалим. Ул һеҙҙең ихтыярығыҙҙы үҙенә буйһондора, һеҙҙән «үлтер» тиһә, бер ни уйламай үлтерергә әҙер мәхлүктәр яһай. Гәзиттәрҙә уҡымаһыңмы ни?

Балаһын юғалтыуҙан ҡото осҡан әсә хи-

сенә буйһоноп, анды-тондо ҡарамай алышҡа ташланғайным — сигенергә мәжбүрмен. Ҡыҙымдың ятһынған ҡарашын күрәм, уның минән тағы ла нығыраҡ алыҫлашҡанын тоям.

— Әсәй, әле һинең ауыҙың менән Иблес һөйләшә, — ти ул, боҙ һалҡыны бөркөп: хәҙер-хәҙер күңелен шап итеп ябыр ҙа бик һалып та ҡуйыр. Зиһенем, ҡойроғона баҫҡан йылан кеүек үрһәләнә лә, хәйләһен таба.

— Өгөтлә мине, — тигән булам юхаланып. — Бәхәсләш. Бәлки, мин дә инанырмын. — Эй, бала, шундуҡ ышана бит әле. Сырайы имшей.

— Ергә килгән һәр бер бәйғәмбәрҙе шулай эҙәрлекләгәндәр, бысратырға маташҡандар. Муса бәйғәмбәрҙең мөғжизәләренән мыҫҡыллап көлгәндәр, Христосты язаға биргәндәр. Мөхәммәтте ҡылысҡа тотонорға мәжбүр иткәндәр.

— Зомби, — тип ҡыҫылмаҡсы булам.

— Зомби, — тип эләктереп ала Ләйсән. — Зомби... Донъя тулған зомбиҙар менән. Наркомандар — зомби. Наркота өсөн әсәләрен һуйырға әҙерҙәр. Эскеселәр араҡы өсөн балаһын һатырға әҙер. Коммунистар, фашистар — үҙ идеяһы хаҡына миллиондарҙы уйһыҙ ҡорбан иткән. Ә һин зомби тип ҡурҡаһың. Көндөң көнө араҡы шешәһе эсенән миллиондарса кеше үлтереүсе сыҡҡанда, Юсмалостың 144 мең «зомби»ҙан торған ғәскәре ҡурҡынысмы ни?

Гөрф итеп тоҡанған ҡыҙым елп итеп һүнә:

— Ҡурҡма, әсәй, — ти ул шым ғына. — Беҙҙең «зомби»ҙарҙың башындағы программаһы берәү генә — заман ахырында үҙебеҙҙе ҡорбан итәсәкбеҙ.



«Ниңә ул ҡорбандар минең өйөмдән сығырға тейеш?» — тип ярһыйым эстән. Тышҡа сығармайым әрнеүемде, һаман алышам ҡыҙымдың рухы өсөн.

— Заман ахырын бер кем дә белмәҫ тип яҙылған Тәүратта. 24 ноябрҙә донъя бөтә тиеү — төптө ялған.

— Замандың ахыры еткән генә түгел — башланған бит, — ти ҡыҙым әсенеп. — Күрмәйһеңме ни — тирә-яғында күпме мәғәнәһеҙ үлем, гонаһ, хаяһыҙлыҡ. Ә һеҙ шуны аңларға, танырға теләмәйһегеҙ.

— Кешеләргә шуны аңлатам тип, минең балаларым үҙҙәрен ҡорбан итергә тейешме ни?

Үҙемдең көсһеҙлөгөмдән күңелем тула.

— Эй, хоҙайым, — тип илайым. — Мин гонаһлымын. Аталары үлгәс, ҡыуандым бит. Балаларымды сафлыҡта тәрбиәләрмен, бәхет өсөн үҫтерермен, тинем. Ә уларға был донъяның кәрәге юҡ. Балаларымдың йәшәгеһе килмәй.

Күрше Миңлебикә кеүек аҙып-туҙып, икмәккә туйҙырмай үҫтерергә кәрәк булған һеҙҙе, — тием ҡаным ҡарайып. — Бирьяҡтағы Тимерхандар кеүек эсеп, һуғышып, туҡмаҡлап аҫырарға кәрәк булған. Ана бит, эсәләр, һуғышалар, төрмәгә береһе инә, икенсеһе сыға. Бер ҙә үлергә йыйынмайҙар. Тормошҡа сат йәбешеп яталар.

Ә минең балаларымдың йәшәгеһе килмәй, бысранғылары, әрнегеләре килмәй.

— Иҫеңдәме, әсәй, бәләкәй саҡта уйынсыҡтарыбыҙҙы тотоп уйнарға сыға торғайныҡ. Йомарт булығыҙ, башҡалар менән уртаҡлашығыҙ, тип өйрәтә инең... Ә башҡалар беҙҙең уйынсыҡтарҙы ала, тик үҙҙәренекен бирмәй.

Беҙ ултырабыҙ ҡустым менән ауыҙ асып. Талап алайыҡ тиһәк: «Ҡуйығыҙ, балам, кешене яҡшылыҡ менән генә еңеп була», — тип тыйһың. Һин шул саҡтан уҡ изгелек өҫкә сыҡһын өсөн үҙ-үҙеңде ҡорбан итергә өйрәттең.

— Ярар, — тием. — Һиненсә булһын. Тик үҙеңде минең урынға ҡуйып ҡара ла кәңәш бир.

Ҡыҙым, алдыма теҙләнеп, тубыҡтарымды ҡосаҡлай.

— Ғорурланыр инем, — ти ул. — Аңлайһыңмы, әсәй. Элек беҙҙең кеүектәр революцияға киткән. Ҡешелеккә бәхет бирәм, тип башын һалған.

— Ә бөгөн «аҡ монахтар»ға китәһегеҙ! — тием үртәлеп. — 24 ноябрҙә донъя бөтмәһә, нимә эшләрһегеҙ?

— Ҡайтырмын, әсәй, — ти Ләйсән. — Ҡайтырға тырышырмын. Ә һин миңә нимә тәҡдим итерһең? Гонаһҡа батҡан әшәке донъяныммы? Екһендергес әшәкелекте...

Нимә әйтәйем? Өндәшмәйем. Һүҙһеҙ генә ҡыҙымды билдәһеҙлеккә оҙатып ҡалам.

— Ҡайтырмын, — ти Ләйсән хушлашҡанда. — Тик иҫеңдә тот, минең дә «төндә юғалырға хоҡуғым бар».

— Барҙыр, балам. — Ризалашам. Әрнеһәм дә, башҡа сарам юҡ. Үҙем яуап эҙләйем... «Үлмә, тип төнгә юлымды быуҙың. Артабан нисек йәшәрмен һуң?» — тип улым күҙен асыр. «Гонаһҡа батҡан донъяның бысрағын ҡаным менән йыуырға әҙер инем, ҡаршы төштөң», — тип ҡыҙым ҡайтып инер. Инер. Мин быға ышанам.

Нимә тип әйтермен? Уларға яуап табырға тейешмен.



## БАҺАДИР

Бибинур, булмышындағы танһығы ҡанған ҡатындарға ғына хас булған һиллекте сайпылтмаҫҡа тырышҡандай, йомшаҡ ҡына баҫып, тышҡа сыҡты. Июнь таңының ҡуйы томанын йылы һөт кеүек ҡуш услап алып битенә һыпырҙы ла, эсендәге мөлдөр наҙына күңеле ҡытыҡланып, сыңғырҙатып көлөп ебәрҙе. Дәү кәүҙәһен йөҙҙөрөп кенә атлап, ҡоймалағы биҙрәләрен алды. Биҙрә шылтырауына аҙбарҙағы һыйырҙары тауыш бирҙе. Һарыҡтары быҡырҙашып урынынан торҙо, дебет кәзәләре мекерҙәп ялан кәртәнең ҡапҡаһы эргәһенә эркелде, кетәктә тауыҡтары ҡытҡылдашты.

Бибинур кәртәгә һыйыша алмай торған буралай һыйырының осаһынан шапылдатып яратты ла сүгәләп еленен йыуҙы. Маңлайын һыйырының йылы бөйөрөнә терәп, гөбөрҙәтеп һауа башланы.

Ул арала шығырҙап солан ишегенең асылғаны ишетелде. Ишек бер асылды, бер ябылды. Ире Тимербулаттың башын ҡырын һалып эшлекле ҡиәфәт менән ҡарап торғанын күҙ алдына килтереп, Бибинурҙың эсе йәнә һөйөнөскә тулды: «Шығырҙай, — ти инде. — Саҡ ҡына өйҙә тормаһаң, донъяның рәте китә. Эхма...» Ысынлап та хужа кешенең дәртле һыҙғырып ишек күгәнен майлауы ишетелде.

«Исмаһам, бөгөн йоҡланҡыраһа нимә булған инде, тынғыһыҙ», — тип яратып ҡына орошто ҡатын балаларының атаһын эстән генә.

— Сәсеүҙе бөтөп ҡайттығыҙмы, Тимербулат улым? — Быныһы күрше бабай өндәшә. — Быйыл бигерәк һуҙҙығыҙ.

— Ҡисә кискеһен генә ҡайтып йығылынды. Ярай бисә мунса яғып ҡуйған. Сыуаш утарында ун көн ҡыялдыҡ бит.

— Ерҙәре һаҙамыт шул. Саҡ ҡына һибәләп үтһә, ингеһеҙҙер. Ярар, һабантуйға өлгөрттөгөҙ инде.

Һөйләшкән арала ла Тимербулат тик тора белмәне, ларҫ-лорҫ йөрөп тауыҡтарҙы асып ем һипкәне, Аҡтырнаҡҡа аш ҡойғаны ишетелде.

«Йыл әйләнәһенә шул олоғара кирза итеген сисә белмәне инде», — тип көлөмһөрәй Бибинур. Өлкән һыйырын һауып бөтә һалып, һөткә мөлдөрәмә тулы ҙур биҙрәне һарай ишегенән Тимербулатҡа һондо. Ҡырылып бөткән алама пинжәген эләктереп, үҫмер малай ише генә баҫып торған ирен күреп булмышына йәнә наҙ йүгерҙе: «Үҙенән оло күҫәген тотоп алған була ла шул...» Тимербулат иһә, хужаларса тамағын ҡырған булып, ҡырҡыу ғына өндәште:

— Йә, йәһәтлә. Әсмә әбей ҡыуып китте инде...

Танаҡайының имсәге йомшаҡ, холҡо ла тыныс — һауыуы бер ләззәт. Бибинур, күҙҙәрен генә көлдөрөп, иренә яратып ҡараны ла икенсе биҙрәне лә һондо.

— Аласыҡҡа ултырта тор. Мин башмаҡтың ҡойроҡ аҫтына керәлин һөртөп ебәрәйем. Һыйыр мөгөҙө тейеп ярылып ҡайтҡан, ҡортлап китер.

Тимербулат һыйыр ҡыуып китте. Бибинур аласыҡта мәшәҡәтләнде. Һөтөн йылытып, сепарат ҡороуға тупырлашып берәм-берәм малайҙары тороп сыҡты.



— Йоҡлай бирһәгеҙ ни була? Уҡыуға тиһәң, ятыр инегеҙ әле, — тип һуҡранған булһа ла, һәр береһенә яңылыштан ғына ҡағылғандай булып, мөлдөрәмә наҙынан бишеһенә лә өлөш сығарҙы әсә.

Ул арала самауыр борҡоп ҡайнап сыҡты. Ҡинйә улы менән уртансыһы сепарат табаҡсаһындағы ҡаймаҡҡа тейеште. Йыуынғыс янында суптырҙап, тыңлауһыҙ сәстәрен һыулап тарап мәшәҡәтләнгән өлкән улына сәй ултыртырға ҡушып, башҡаларын да ашыҡтырып, йәһәт йөрөнө Бибинур: «Ҡояш ҡалҡҡансы өйҙәге эште бөтөрә һалайыҡ...»

— Әсәй, һабантуйға һин дә бараһыңмы?— Ҡыҙҙар кеүек яғымлы икенсе улы Байбулат иғтибар менән әсәһенең йөҙөнә ҡараны. — Сәпсим бөткән тиерлек тә инде... Йәшкелтһары урыны ғына ҡалған. Икенсе күҙенде лә килештереп кенә буяйбыҙ за...

— Тик күлдәгенден оҙон еңлеһен кей. Белэгендәге күк ҡайтмаған... — тип ҡушылған өлкәне, атаһының килгәнен күреп, башлаған һүҙен йотто. Тимербулат, улының әйткәндәрен ишетеп уңайһыҙланды, сикәләре ҡыҙарып, күҙҙәрен йүгертеп, боршаңланы.

«Ҡылғанына үкенеп йөрөһә лә, сер бирмәй бит әле», — тигән уйынан йөрәккенәһе семетеп алған Бибинур:

— Йә, ҡана, атайығыҙ ҡулын йыуһын да сәйгә ултырһын. Атайығыҙҙың үҙенең ултырғысын ҡуйығыҙ. Теге ҡайрағын алып килегеҙ, өйҙә саҡта бысаҡты үткерләтеп ҡалайыҡ, — тип малайҙарҙың һәммәһенә эш тапты. Үҙе, усаҡ алдындағы сәйнүктән эҫе һыу һалып, йыуынғыстың һыуын тамамланы, кинйәһенә

таҙа таҫтамал тоттороп, атаһы янына баҫтырҙы.

Йырлап ултырған самауыр тирәләй урынлаштылар. Тимербулат, ҡабарып бешкән дәү сүрәк икмәкте күкрәгенә терәп телеп, улдарына өләште. Тегеләре йәш ҡаймаҡ өҫтөнә бал яғып тәмләп ашарға кереште.

— Төпкө һарайҙағы буҡты түгеп, яҡшы иткәнһегеҙ. Йыуынды һыу соҡорон да матурлап күмгәнһегеҙ, — тип малайҙарының үҙе юҡта эшләгән эштәрен барлап маҡтаны Тимербулат. Тегеләре пырхылдап көлөштө. Өлкәне ялп итеп әсәһенә ҡарап алды ла күҙҙәрен емелдәтеп: «Һөйләйемме, әсәй?» — тип шыҡ ҡына һораны. Оло самауыр янында кәбән кеүек ултырған Бибинур ҙа улдарына ҡушылып ауыҙ йырҙы.

— Көлөгөҙ, әйҙә, көлөгөҙ әсәйегеҙҙән.

— Һин юҡта бер мәрәкә булды, атай. Бер көндө әсәйем төн уртаһында тороп иҙән йыуа башланы. Тишек-тошоғон ҡырғыслап тороп йыуа. Унан мейестең көлөн алып сығып иләне. Икенсе көндө төшкә тиклем иҙән аҫтындағы баҙҙы таҙаланы. Ярҙамлашайыҡ тиһәк, яҡын да юлатмай. Унан түшәк-мазар ҡағырға, кер йыуырға тотондо. Шунан беҙгә кәртә таҙаларға ҡушты. Үҙе һәр тиҙәкте ваҡлап тиерлек кәритәгә тултыра, беҙ картуфлыҡҡа түгәбеҙ. Йыуынды һыу соҡорон аҡтара башланы, тауыҡ кетәген таҙартты, ишек алдын һеперҙе. Өс көн, өс төн ултырып та торманы, йүгереп кенә йөрөнө. Әсәм инде ни хәл итер, таҙалар ер ҡалманы, тип тора инек, Ғайнан еҙнә килеп инде. «Машинам боҙолдо. Асыҡтым», — тип. Сәйгә ултырҙыҡ. «Ҡалай бөтөрөнгәнһең, ҡайынбикә. Ауырыйһыңмы әллә?» — тип һорай әсәмдән. «Эй, кейәү, Тимербулат бүләк иткән алтын алҡамдың һыңарын юғалтҡанмын бит. Эҙләмәгән ер ҡалманы, юҡ», — тип әйтеүе булды, Ғайнан еҙнә: «Ҡайҙа, ҡайҙа, ҡайынбикә», — тип әсәйемдең уң ҡолағы артынан алҡаһын әйләндереп тә ҡуйҙы. Алҡа эҙләйем тип донъя таҙартҡан икән әсәйем.

Малайҙар һене ҡатып көлдө. Тимербулат та ҡатынына йылыҡас ҡарашып һирпеп: «Эй, һапата», — тигән булды ла ауыҙ йырҙы.

— Көлөп рәхәтләнегеҙ инде әсәйегеҙҙең ауһарлығынан, — тип ҡәнәғәт гөрһөлдәне Бибинур ҙа күңеле бөтөнлөктән башы күккә тейеп. Өҫтәл түрендә тубығына кинйәбоҙон атландырған ире ҡояштай балҡып ултыра. Ҡалған дүрт улы ла, ҡояшҡа баҡҡан көнбағыш кеүек күҙҙәрен балҡытып, аталарына боролған. Өйҙөң ҡотон арттырып, самауыр йырлай, табын тулы ризыҡ, ихата тулы ҡошҡорт, кәртә тулы мал. «Минең фил кеүек кәүҙәмә кем ҡыҙыҡһын», — тип, ҡарт ҡыҙ булып ҡалдым тип, ҡасандыр күңел төшөнкөлөгөнә бирелә башлаған Бибинурҙың ошондайын хөрлөккә ҡыуанмаҫлығы бармы?

Өй эштәрен теүәлләп, барыһы сынъяһауҙан кейенеп, Әсмә әбейҙән донъяға күҙ-ҡолаҡ булыуын һорап, һабантуйға киттеләр.

Малайҙар ҡапҡаға тиклем генә бергә түҙеп барҙы ла сығып сапты. Ап-аҡ күлдәк, ҡапҡара салбар, лаклы туфлиҙар кейеп алғас, сборға йыйынған пионерға оҡшап киткән Тимербулат башын-түшен кирә биреп алдан атланы. Йәйге ҡояшта йылҡылдап торған ял-

тыр көлдәгән кейгән Бибинур иһә, иренә ихтирам күрһәтеп, дүрт-биш аҙым арттан бара. Атаһы менән әсәһе лә гелән шулай йөрөй торғайны. Алдан тау кеүек булып мөһабәт кәүҙәле атаһы атлай, уның артынан ябыҡай ғына әсәһе йүрмәләй.

«Беҙ ҙә шулай, — тип уйлай Бибинур. — Тик бына... — ти ҙә үҙе лә аңғармаҫтан һаман йоҙроҡ эҙе бөтмәгән күҙ төбөн һыпыра. Буяп та ҡараны, тик кеше барыбер абайлар инде. — Тик бына Тимербулаттың кәүҙәгә бәләкәс булыуы ғына...» — тип инде нисәнсе ҡат әсендә ҡатын. Хәйер, Бибинур былай ҙа ҡәнәғәт. Иренең кәмһенеүе генә йәнде ҡыя. Хатта ваҡыт-ваҡыт күк талаҡ итеп туҡмап ташлауына ла риза булыр ине. Тик күңеле генә бөтөн булһын балалары атаһының. Шуға күрә бер-бер артлы уҫлаптай биш бала табып бирҙе бит Тимербулатына. Улдары бөтәһе лә йөҙҙәре менән атаһына, кәүҙәләре менән әсәһенә оҡшап тыуған.

Бибинурҙы Тимербулатҡа йәрәшкәс, ҡыҙҙың атаһын: «Нишләп ат кеүек ҡыҙыңды шул итек башына биреп әрәм итәһең?» — тип мәрәкәләгән ти бер мәғәнәһеҙе. «Янғуразовтарҙың ҡулдары ла, холоҡтары ла алтын, шуға нәҫелдәрен эреләтәйек тинем», — тигән мәрхүмең. Шаярып әйткән һүҙе раҫҡа сыҡты. Тик кеше һүҙе кеше үлтерә шул. Ир-ат ҡотортмаһа, ҡатынына ҡул күтәрер инеме Тимербулат. Ҡәүҙәгә ҡатынынан бәләкәс булыуына эсе көтөрҙәгәнен һиҙеп, юрый һөсләтәләр мәлғүндәр, шунан ирмәк табалар, аҙаҡтан мәрәкәләп йөрөйҙәр. «Һеҙҙең ләғер бисәләрегеҙ, бер төртһәң осоп барып төшә. Ә мин Бибинурымды тәмләп тороп, рәхәтләнеп



туҡмайым», — тип маҡтана Тимербулат, тип көләләр.

Уйға батып китеп барған Бибинурҙы уҙып, Тимербулат эргәһенә туҡтаған кырандастан дуҫтары Сәлимйән менән Сәкинә ҡул болғаны.

— Әйҙәгеҙ, — тип һөрәнләне инде ҡыҙмасаланып алған ир. — Тимербулаттың ҡорос аты һабантуйға барырға эшкинмәй бит инде. Мөрхәтһенеп кенә минең дөлдөлгә ҡунаҡлағыҙ әле.

— Һинең ҡурсаҡ арбаң әхирәт менән мине күтәрһә... — тип мәрәкәләне уның тумалаҡ ҡына ҡатыны.

Һабантуй яланына тиҙ үк барып еттеләр. Һәр кем, иш-тошон табып, табын ҡора башланы. Бибинурҙар ҙа, кырандастан аҫалы балаҫты алып, шау сәскәле балан ҡыуағы аҫтына түшәне.

Түрәләр һабантуйҙы асты. Ҡолхоз рәйесе, телмәр тотоп, алдынғыларҙы бүләкләй башланы. Иң тәүгеләрҙән булып майҙан уртаһына Тимербулатты саҡырҙылар. Бибинур рәйестең, ирен ҡабат-ҡабат ҡотлап, арҡаһынан тапап-тапап яратыуына, матур-матур һүҙҙәр әйтеп, көллө халыҡ алдында ҙурлауына йөрәкһенеп, күҙҙәре йәшкәҙәп ҡарап торҙо. Малсыларҙы бүләкләй башлағас ҡына кырандас артына кереп боҫто, алдынғы быҙау ҡараусы тип исемен ҡат-ҡат ҡысҡырғандарын ишетһә лә, сыҡманы. Үҙен килеп тапҡан Сәкинәгә: «Әйе шул, күҙем күгәреп шунда сығып баҫмай ни», — тип ҡул һелтәне. «Рәйестең үҙенең көйәҙ бисәһе, күҙенең зәңгәрлеген күрһәтәм тип ҡашына тиклем күккә буяп йөрөй ҙә инде», — тип көлдө әхирәте.

Ҡөршәк ватҡанды, ҡолғаға менгәнде ҡарап,

йүгереү-һикереүҙә беренселекте алған малайҙар өсөн ҡыуанып йөрөгән Бибинурҙы ҡатындар табынға саҡырҙы: «Ирҙәр уйынға әүрәгәндә аулаҡлап ултырып алайыҡ», — тиештеләр.

— Әхирәт, мине таныйһыңмы? — тине табындағыларҙың береһе Бибинурға. — Һай, үткән ғүмер, бер партала һигеҙ йыл бергә ултырған кешең танымаһын әле...

Үзбәкстанда йәшәп, үҙе лә үзбәк ҡатынына оҡшап бөткән бала саҡ әхирәте Гөлйыһан икән. Ҡосаҡлаштылар. Гөлйыһанға барыһы ла ҡыҙыҡ ине, әле береһен, әле икенсеһен һорашты: «Эй һағынам, ҡыҙҙар», — тип иламһыраны. Үҙҙәренме, унымы йәлләгән башҡа бисәләр ҙә мышҡылдашты. «Һин тегендә һағынаһың, беҙ бында йонсойбоҙ. Ҡуй, илама. Үҙеңә ҡара ла беҙгә баҡ. Һин һаман ҡыҙҙар кеүекһең, ә беҙ әбей булып бөткәнбеҙ», — тиештеләр.

— Бынауындай көндә һыҡташып ултырып ни, — тип геүләне күңелсәк Сәкинә. — Әйҙә, тотоғоҙ. Бер йотҡандан әллә ни булмаҫ. Ана, ирҙәр көн дә эсә.

Ирҙәр тигән һүҙ сыҡҡас, Бибинур күҙҙәре менән генә Тимербулатын эҙләне. Күренмәне. Ул да, берәй табынға эләгеп, иҫереп ятмаймы?

— Һинеке лә күренмәй, минеке лә, әле баштан иҫереп йөрөмәһендәр, — тип хафаланып Сәкинәгә ҡараны.

— Һинекенең бүләк сәғәтен йыуалар. Закуска алып киттеләр, — тине тегеһе вайымһыҙ ғына.

— Әллә абышҡаһы йығылып ҡалыр тип көйөнөп ултыра инде Бибинур?! Һиңә нимә,



ҡултыҡ аҫтына ҡыҫтырҙың да алып ҡайттың, ана минең әрҙәнә ауһа... — тип шарҡылдашты бисәләр.

— Гөлйыһанға һөйлә әле, Сәкинә, теге мажараны, — тине береһе.

— Ҡайһы, урыҫты дөмпәҫләгәндеме?

Үткән көҙ, Ҡыуандыҡ баҙарына шәл һатырға барҙыҡ Бибинур менән. Рәхмәт төшкөрө, Тимербулат ат егеп Хуторға ҡаршы алырға килгән. Быҫҡаҡлап ҡына ямғыр яуа. Көнө буйы йөрөп йонсолған. Әхирәт менән икебеҙҙе брезентҡа төрөп ултыртҡайны, йоҡлағанбыҙ. Яман итеп аҡырышҡанға уянып китһәк, әзмәүерҙәй ике урыҫ Тимербулатты типкеслә, береһе атты тотоп тора. Бандиттарҙың береһе арбаға табан килә башлағайны, Бибинур күбәләй булып тороп баҫты ла ерән урыҫтың йән еренә генә тибеп ебәрҙе. Тегенеһе эт кеүек сыйнап осоп барып ятты. Быны күреп, ат башы тотҡан дәүерәге ажарланып килә башлағайны, һикереп төшкән Бибинур тегене ерҙән умырып алды ла күтәреп тороп Ҡаҫмартҡа бырғаны. Тимербулатты дөмпәҫләгәне быларҙы күреп аңшайып тора ине, әхирәт уны ла бер бармағы менән генә төртөп юл эргәһендәге канауға аунатты ла абышҡаһын арбаға күтәреп ултыртып алды. Шунан елдереп ҡайтып киттек.

Бисәләр геүләшеп көлөштө. Ә Гөлйыһан аптырап Бибинурҙың күгәргән күҙенә ымланы:

— Шунан туҡмалып йәшәйһеңме?

— Ир ләһә... — тип яуапланы Бибинур бошмай ғына.

Уның ошо бер генә һүҙендә быуындан-быуынға, өләсәйҙән әсәйгә, әсәнән ҡыҙға күсә, тапшырыла килгән аҡыл: ирҙе ир итеү, хөр-

мәтләү, бары шул юл менән генә тормошоңдо бөтөн итеү тойғоһо һалынғайны.

— Ирҙәр килә, эсегеҙ, — тип шыйылдап ҡысҡырҙы Сәкинә. Шул ыңғайға быға тиклем ҡыҫтатып ултырған бисәләр барыһы ла бер юлы, үҙҙәре лә һиҙмәҫтән, араҡыларын ауыҙҙарына түңкәрҙе.

— Ай алла, эсмәйем тигәйнем бит әле, — тип ыуаланды Бибинур.

— Нишләп, әхирәт, әллә ҡалдың дамы? — тип күҙ ҡыҫты Сәкинә.

— Юҡ та, Тимербулат ай ярым сәсеүҙә йөрөнө бит, өлгөрмәнек. Тик быйылдан да ҡалып булмай инде. Ҡартайғансы бер ҡыҙ кәрәк.

— Иптәш кәрәк, кәрәк. Малайҙар, үҫкәс, килендең һүҙенән сыҡмай ул, — тип йөпләне ҡатындар.

Ул арала көрәште ҡарайым тип киткән сәмле Сәғиҙә, йәне көйөп, кире килде:

— Кит инде, ғибрәт. Теге элекке йыл да, былтыр ҙа тәкәне алған Магнит урыҫы тешен ыржайтып майҙанда бер үҙе тороп ҡалды. Әҙәм мәсхәрәһе!

— Нишләп ҡатнаштыралар шул кәсепсене. Үҙебеҙҙең колхоздыҡылар ғына көрәшә, тиһен дә ҡуйһындар. Бер нәмә эшләмәй, һабантуйҙан һабантуйға йөрөп, тәкә йыя ти бит ул.

— Үҙебеҙҙең ирҙәргә оят инде. Шул бер ерән урыҫты ла бөрөп һала алмағас.

Ерән урыҫ тигәнгә тертләп киткән Сәкинә Бибинурҙың бөйөрөнә төрттө:

— Һин күтәреп йылғаға ырғытҡан ерән урыҫ кеүек тә түгел бит быныһы, — тип әйтеп һалды. — Тәүәккәлләйһеңме әллә?



— Ҡуйсәле, ҡуй, әҙәм көлдөрөп...

— Нишләп көлһөндәр ти, ҡыуанырҙар. Ғәрлек тә инде, өс йыл рәттән бер әрәмтамаҡ өсөн тәкә һимертәбеҙ. Һинең урында мин булһаммы...

— Ҡуй әле, ҡуй, бөтә ғаләм алдында итәгең асылып, тарбаңлап ятмай ни... — тип ҡаршылашты Бибинур.

Быларҙың һөйләшеүен ишетеп, башҡа бисәләр ҙә Бибинурҙы ҡыҫымға алды. Бер рюмка араҡы башына йүгергән ҡатынды ай-вайына ҡарамай көрәш майҙанына алып киттеләр.

Теге батыр тағы берәүҙе күтәреп бәргән дә үтә һауалы ҡиәфәт менән майҙанда тора. Уның һап-һары керпектәре аҫтынан мыҫҡыллы секерәйеп торған күҙҙәре менән суҡмар танауы бигерәк тә нык оҡшаманы Бибинурға.

Майҙансы Мотаһар ҡарт: «Йә, тағы кем көсөн һынап ҡарай, азаматтар? Батырҙар бөткәнме ни һуң беҙҙә, йәмәғәт?» — тигән булып әйҙүкләп йөрөһә лә, башҡа теләүсе табылманы. «Ҡалай мәсхәрәләп ҡарап тора, дуңғыҙ, — тип яһилланды Сәкинә. — Их, ҡеүәтең миндә булһасы, Бибинур. Танауын ҡыйшайта һуғып, күрмәгәнен күрһәтеп ҡайтарыр инем».

— Баш аша ташлап була инде былай, — тип ҡуйҙы самалап ҡарап торған Бибинур икеләнеберәк.

Ул арала Мотаһар ҡарт тәкәне алып сығырға ымланы.

— Туҡтағыҙ әле, сабыр итегеҙ! — тип сырылдап уртаға ырғыны ярһыуынан ярылырға етешкән сәмле Сәғиҙә. Кире халыҡ араһына ташланып, баҙнатһыҙланып торған Бибинур-

ҙың беләгенән элэктерҙе. Уға Сәкинә ярҙамлашты. Тегеһен ҡуҙғата алмағандарына асыуы килгән икенсе ҡатын арттан килеп этеп ебәргәйне, уртаға сыҡҡандарын һиҙмәй ҙә ҡалды өс ҡатын. Ни булды, тип аптырабыраҡ торған халыҡ уларға ҡарап көлә башлағайны, Бибинур ҡыҙҙы ла китте. Һаман да беләгенә аҫылынып торған әхирәтен һелкте лә:

— Ҡана әле, Мотаһар ағай, — тип ҡарттың ҡулынан таҫтамалды алды. Бер ни аңламай ғәжәпләнеп торған урыҫ баһадирының ҡаршыһына баҫты. Мотаһар ҡарт һыбыҙғыһын ауыҙына ҡабып та өлгөрмәне: «Был урыҫ таҫтамалы менән бөрөп тотһа, итәгем күтәрелер инде», — тип ҡурҡып торған Бибинур батырҙы баш аша ергә бәреп тә ҡуйҙы. Майҙан тирәләй ҡупҡан шау-шыу, аҡырышыу, һыҙғырыуға, тирә-яҡҡа таралған халыҡ ни булды тип аптырашып, йүгерешеп килде. Һеңгәҙәп ятҡан урыҫты саҡ торғоҙоп, иптәштәре, Мотаһар ҡартты уратып алып, көрәштең ғәҙел булмағанын иҫбатлай башланы. Ҡарттың улар менән ризалашмай сараһы юҡ ине. Кеше араһына инеп йәшенгән Бибинурҙы йәнә өҫтөрәкләп уртаға сығарҙылар. Әммә мәсхәрәгә ҡалған урыҫ бәһлеүәне, башы ауыртыуға һылтанып, ҡабат көрәшеүҙән баш тартты.

— Джентльмен булараҡ, бүләктән ҡатын-ҡыҙ файҙаһына баш тартам, — тип киң күңелле булып ҡыланмаҡсы ине лә, ҡатын сәмләнеп: «Нињә, әйҙә ғәҙел итеп көрәшәйек һуң?» — тип әйтеп һалды. Әммә үҙенә өҫтән аҫҡа ҡарап торған ҡатынға бер һирпелеүҙән үк тубыҡ аҫтары ҡалтыранған урыҫ үҙенең көсһөҙлөгөн танырға мәжбүр булды...



Ҙур тәкәне Бибинурға етәкләттеләр. Бисәсәсә сыуылдашып уны ҡосаҡланы, үпәсләне, рәхмәт яуҙырҙы, әбейҙәр, бабайҙар арҡаһынан һөйҙө. Ир-ат шау-гөр килеп Тимербулатты күккә сөйҙө.

«Батыр тәкәһенең итен ауыҙ иттерәһегеҙ инде», — тип геүләшкән ауылдаштарының барыһын кискелеккә ашҡа саҡырҙылар. Мәрәкәләшеп, Сәлимйәндең кырандасына ултырышҡанда Тимербулаттың ғазаплы йылмайыуҙан сытырайған йөҙөн абайлап, йөрәге сәнсешеп киткәйне Бибинурҙың. Тик унан да, бынан да тарткылағастары, онотолдо. Һәпте юҡ иҫереп алған Сәлимйән: «Еңеүселәрҙе елдертеп алып ҡайтам», — тип, юл буйына атын саптырҙы. Унда ла арба мөйөшөнә генә ҡунаҡлаған Тимербулатҡа һүҙ ҡушырға форсат булманы. Ҡайтыу менән ире аяҡ терәп ҡарышҡан тәкәне һарайға һөйрәп алып китте. Бибинур өҫ-башын алыштырырға өйгә инде. «Сала һалһын да, эсәк-ҡарынынан тултырма ла бешерергә тура килер, шул тиклем халыҡты туйҙырырға ла кәрәк бит», — тип ыуаланды.

— Атаһы, — тип өндәште бысаҡ тотоп аласыҡтан сыҡҡан Бибинур. — Тимербулат!.. Һин ҡайҙа?

Һарайға бикләнгән батыр тәкәһенең баҡырыуынан башҡа тауыш-тын ишетелмәне. Ҡапыл шомланып, һарай ишеген бәреп килеп инде Бибинур. Инде лә ҡото осоп ултыра төштө. Кейәү егете кеүек матур итеп кейенгән Тимербулаты һарай өрлөгөнә тағылған дилбегәлә бәләкәс кенә булып аҫылынып тора ине.

## ЙӘШЛЕКТӘН КИЛГӘН СӘЛӘМ

Шыҡһыҙ киске ҡыш. Бөгөн урамда халыҡ та аҙ йөрөй. Мәүлихаының киоскыһы алдында берәм-һәрәм генә туҡтап торалар ҙа ары китәләр. Эш көнө бөтөп бара. Ә алда ҡырҡ мәшәҡәт. Аҙыҡ-түлек магазинындағы танышы колбаса ҡалдырырмын тигәйне, шуны инеп алаһы, улының быймаһын төпләтергә бирәһе, өйҙәгеләрҙең тамағын туйҙырғас, аҙ-маҙ кер йыуаһы... Етмәһә, нишләптер эсе боша.

Ҡискелеккә нимә бешеререн уйлап торған мәлендә киоск алдына бер олпат ир килеп туҡтаны. Әйбер кәштәләрен ҡараған кеше булып тора, ә үҙе һиҙҙермәҫкә тырышып Мәүлихаға күҙ ташлай. Шунан һынсыл ҡарап:

— Һеҙ Мәүлиха Нәҙерғолова булаһығыҙмы? — тип өндәште.

Был кешенең сәйер ҡарашынан, ҡыҙ сағындағы фамилияһы менән өндәшеүенән ҡаушаған ҡатын һүҙһеҙ генә баш ҡаҡҡас, теге кеҫәһенән бәләкәс кенә фотоһүрәт сығарып һондо:

— Танымайһығыҙмы?

Ҡулы менән ынтылырҙан алда һүрәткә күҙ һирпеп кенә алған Мәүлиха: «Аһ, Урал бит», — тип ҡысҡырып ҡуйҙы ла, ҡапыл елкенеп фотоны тартып алды, оҙаҡ ҡына текләп торғас, әллә күпме хис-тойғо, әрнеү менән һығылды.

— Урал...

— Ҡыҙыҡһынһағыҙ... — Ят кеше кеҫәһенән тағы бер төргәк сығарҙы. — Мин һеҙгә бер нәмә алып килгәйнем.

Мәүлихаының бынан ҡырҡ йыл элек фронтҡа, Уралға, яҙған хаттары ине был. Ҡырҡ йыл элек яҙылған хаттар...

Сәсенә сал йүгергән ҡатындың ҡарағусҡыл йөҙөнә ҡуйы ҡыҙыллыҡ йүгерҙе, ирендәре дерелдәп китте. Ҡалтыранған бармаҡтар төргәкте тағатты ла йәнә төрҙө. Аҙыраҡ тынысланa төшкәс кенә Мәүлиха был кешенең кемлеген, хаттарҙың уға ҡайҙан килеп эләгеүен һорай алды.

— Журналист мин. Өлкә гәзитендә хәбәрсе булып эшләйем. Фронтта һәләк булып ҡалған шағир йөрәкле батыр егет хаҡында очерк яҙырға күптән уйлап йөрөй инем. Юл төштө лә, ауылында булдым. Әсәһе иҫән икән. Хаттарҙы ҡомартҡы итеп ҡәҙерләп һаҡлай. Әле лә, бер үк юғалта күрмә тип ҡат-ҡат иҫкәртеп кенә бирҙе.

— Әгәр ҙә, — тине Мәүлиха тотлоға биреп, — әгәр ҙә, мөмкин булһа инде, — артыҡ тулҡынланыуҙан һүҙҙәр ҙә буталды. — Миңә уларҙы бер нисә көнгә ҡалдырып тора алмаҫһығыҙмы?

Ә үҙенең зәңгәрлеге тоноҡлана төшкән күҙҙәре ялбарыуҙан ялтырап китте.

* * *

— Һаумы, аҡҡошом. — Туҡта, нишләп егет кешегә улай тип яҙған һуң әле?.. Күлгә ҡайтҡан аҡҡоштарҙы күрергә барған кистә Урал үҙенең яратып йөрөүен белдергәйне. Шул саҡ ул баштарын терәшеп ғорур ғына йөҙгән ҡоштарға ҡарап, аҡҡош ғорурлығы тураһында хикәйәт һөйләне.

Мәңге бергә булырға вәғәҙәләшкәйнеләр бит улар ана шул кистә. Мәңге... Бәхетле,

йәш булғанға мәңгелек улар өсөн күҙ асып йомған ара кеүек тойолғандыр, күрәһең...

Хаттың ҡайһы бер урындарында күкшел таптар йәйелеңкерәп киткән... Күҙ йәшеме? Фронттан алған тәүге хатына елпелдәк шәм яҡтыһында бына ошоларҙы иҫләй-иҫләй яуап яҙған ҡыҙҙыҡымы, дары еҫенә сәсәй-сәсәй был юлдарҙы ҡат-ҡат уҡыған егеттекеме?

Һағыныу йәштәреме, һөйгәненең ғүмере өсөн ҡурҡыу билдәләреме? Һуғыштың беренсе йылының көҙөнә үк ауылға бер нисә «похоронка» килгәйне инде. Тик йәш саҡта бөтә ҡайғының да ситләп үтеренә ышаныс көслө. Ана бит: «Һин ҡайтҡанда ҡаршы алырға ниндәй күлдәгемде кейермен икән?»

«Ҡайһылай ҙа алйот, елбәҙәк булғаным...»

Ҡатын оялып китте, шунан байтаҡ уйланып ултырҙы. Алйотлоҡ түгел инде ул, иркәлек. Урал бигерәк осондора торғайны шул. «Зәңгәрһыу күлдәгеңде кейһәң, мин һинең күҙҙәреңде емелдәп торған фәйрүзә ҡашҡа оҡшатам»,— тигәйне һабантуй көнө. Матур әйткән! Шунан Мәүлихаға арнап яҙған шиғырын уҡығайны. Нисегерәк ине һуң әле ул шиғыр? Тырышып уйланһа ла ул юлдарҙы хәтеренә төшөрә алманы. Ә бит ҡасандыр бер ваҡытта ла онотмаҫ кеүек ине.

Бер йәшкә мансылып, бер моңайып оҙаҡ уҡыны Мәүлиха. Ундағы һәр һүҙ иҫтәлектәр уята: элеккеләр күҙ алдына килеп баҫа.

...Шиғырҙы иҫләмәксе була. Ә ул саҡта аҡ сатин күлдәгенең еңен терһәгенә тиклем төрөп ҡуйған, ҡара сәсен ҡыя тараған, һомғол буйлы егеттең ялҡынланып, йоҙроҡтарын һелкеп шиғыр уҡығанына хайран ҡалған ҡыҙҙың ҡолағына һүҙҙәр яғылып бармай ине шул.



Ул һушһыҙ булып Уралдың һылыу йөҙөнә: матур ҡырлас танауына, ап-аҡ тигеҙ тештәренә, уттай баҙлаған күҙҙәренә ҡарай ҙа үҙен шундайын да егет оҡшатҡанына шым ғына һөйөнә, үҙенең дә баһаһы артып киткәндәй була.

Хыял ҡанаттарында әллә ҡайҙарҙа гиҙгән Урал менән бер ҡатарҙа торорлоҡ түгел ине шул әле Мәүлиха. Ә Урал һөйгәнен үҙ юғарылығына күтәрергә бик тә тырышты. «Уҡы һин, Мәүлиха, күберәк уҡы»,— тигән була, шунан үҙенә оҡшаған китаптарҙы барлай...

...Һабантуй көнө, эйе, шул көндө, баҫманан сығып барышлай яҙа баҫып һыуға ҡолап төшкәйнеләр. Уралдың күҙҙәрен ташбайтып былт итеп ҡалҡып сығыуына Мәүлиха пырхылдап көлөп ебәргәйне. Сәстәренән сөмбөрҙәп һыу ағып торған, башы-күҙе мәтегә буялған ҡыҙға ҡарап егет тә түҙмәне. Бер-береһенә бармаҡ менән төртөп күрһәтә-күрһәтә, һыу уртаһында торған килеш, эстәре ҡатҡансы көлөшөп, яңынан бер сумып сығырға тура килгәйне.

Элеккеләрҙе хәтерләп Мәүлиха ҡысҡырып көлөп ебәрҙе лә, үҙе үк һиҫкәнеп китте. Шунан ҡалҡып сәғәтенә ҡараны — туғыҙ. Ире Мотаһарҙың һөмһөрө ҡойолоп ишек асҡанын күҙ алдына килтергәс, ҡатынды бөгөнгө мәшәҡәттәре солғап алды. Ҡабалан-ҡарһалан ғына тороп хаттарҙы сумкаһына тыҡты. Эштән һуң өс сәғәт буйы ҡайҙа булдым тиер икән? Ә хаттар килеп сыҡһа... Йә тағы оло ғауға ҡубыр... Ишекте бикләгән еренән ҡабат асып төргәкте ҡалдырырға тура килде Мәүлихаға.

Икенсе көндө ғәзәтләнгәнсә бөтәһен дә тәрбиәләп үз юлына оҙатырға йәне түҙмәне. Арлы-бирле йомортҡа ҡурып, сәй ултыртты ла, эшенә йүгерҙе. Ваҡытты тиҙерәк-тиҙерәк тип ҡыуалап үткәрҙе, ҡышҡы ҡалала тәүге уттар ҡабыныу менән киоскыһын ябып, мөйөшкә, электр мейесе янына сүкәйҙе лә зиһене менән йәшлегенә юлланды.

...Был хатты яҙған кисте арманһыҙ булып бесәндән ҡайтҡайны. Өркәк аты йөктө ауҙарып, хитланып, иларҙай булып килгәнендә һеңлеһе менән ҡустыһы ҡаталарын ҡуңалтаҡ ҡына кейеп, ялан өҫ, ялан баш килеш баҫтырышып һөйөнсө һорап сыҡҡайны. Хистәре тулышыуға сыҙамай шул төндә үк яуап яҙырға ултырғас, әсәһе кәрәсинде тәләфләйһең тип орошоп ятҡырғайны.

Хаттарҙы Мәүлиха аҙна буйы уҡыны. Уҡыған һайын үҙенең элекке сағынан көнләште. Бына ул ен кеүек шаян. Бына ул ут кеүек сая. Һуштарҙы алырҙай һылыу. Матурлығын белгәнгә лә шул ҡәҙәре алдын-артын ҡарамай үҙе булып йөрөй алғандыр. Урал алыҫта саҡта ла ул яратҡан Мәүлиха, пар аҡҡоштоң ғорур һыңары, булырға тырышҡан. Урал ҡанатландырған ҡош булырға... Иң ауыр саҡта ла: «Урал яратасаҡ», — тип үҙен аямай эшләгән, «Урал күрһә һоҡланыр ине», — тип көлгән, йырлаған, бейегән, Урал өсөн, Урал оҡшатҡанса йәшәгән.

Аҙаҡҡы хат. Урал ҡаты яраланып госпиталдә ятҡанда, ай ярым буйы өнһөҙ-хәбәрһеҙ интектергәндән һуң килгән хатҡа яуап. Күпме наҙ, һағыныу, әрнеү. Был хатты ебәреп ун биш-егерме көн үткәс, Урал ҡайтып төшкән. Ә ул ҡайтырҙан аҙна элек кенә Мәүлиха



ФЗО-ға киткәйне. Ҡайһылай әсенгәйне Уралдың ауылдан һалған хатын алғас. (Алыҫ йылдарҙа ҡалған әрнеү бөгөнгөләй яңырып Мәүлиханың былай ҙа ауырыу йөрәген ҡыҫты.)

Анды-тоңдо ҡарамай, ҡаланан ҡасып ҡайтты ла килде ҡыҙ. Уралдың әсәһе Бәлхиҙә урамда осратып улына булған бөтә наҙын бирерҙәй итеп арҡаһынан һөйгәйне. Шул ҡайтҡанында ҡалдырып киткәндер егет был хаттарҙы. «Батырҙарса һәләк булды», — тигән ҡағыҙ килгәнсе яҙған өс хаты юҡ бит.

Был үлем Мәүлиханың бөтә донъяһын томаланы.

Ҡояш һүнде. Тормош хәҙер элеккесә бара алмай ине инде. Фронтҡа китте. Тик барыбер, Урал һәләк булыу менән ул яратҡан Мәүлиха үлмәне әле. Дәһшәтле мәхшәр эсендә лә йырын-моңон, булмышын һаҡлап ҡалды. Сержант Мотаһар Иҙрисов ана шундай Мәүлихаға ғашиҡ булды. Еңеүле яҙҙа, Варшавала ике орден, өс миҙал кавалеры санинструктор Нәҙерғоловаға тәҡдим яһаны. Башҡортостанға улар парлашып ҡайтты. Тик ҡайҙа юғалды һуң ул саҡтағы Мәүлиха? Ҡайҙа булды зәңгәр күлдәкле фәйрүзәләй ҡарашлы, ҡырмыҫҡа билле ҡыҙыҡай һәм сая һалдат?

Бер ҙә кешенән кәм йәшәмәнеләр кеүек. Алты бала үҫтерҙеләр. Мотаһар үҙе лә үҫте. Шоферҙан транспорт паркының начальнигына тиклем үрләне. Тауышы көрәйҙе, күкрәге киңәйҙе, ифрат ныҡ үҙгәрҙе. Элекке сержант Иҙрисовтан Мәүлиханы ҡыҙғаныу ғәҙәте генә тороп ҡалған хәҙер.

Ә бына Мәүлиханың уҡаһы ҡойолған, ҡанаты ҡайырылған! Ауырлыҡтарҙан тиер инең,

фронт дәһшәттәренән тағы ла нығыныбыраҡ ҡайтҡайны лаһа улар.

Үткәндәрҙә ҡалған ҡыҙыҡай бөгөнгө Мәүлихаға аптырап, танымай ҡараған кеүек. Ят күреп ҡарай. Уның йәшлекте киоск мөйөшөндә бөрөшөп кенә ултырып хәтерләүен аңлай алмай. Тәүге көндән үк күңелен өйкәй башлаған был уйҙар бөгөн ҡатындың бөтә булмышын биләп алды. Үткәндәрҙең сағыу яҡтыһында үҙен бигерәк бахыр итеп күрҙе.

Һуңғы ике-өс көндә урамда йәштәш ҡатын-ҡыҙға иғтибарлап ҡарап, уларҙың өҫ-башын, ҡиәфәтен абайлай башланы. Уларға ҡарай ҙа, үҙенә күҙ һала, аптырай. Шул тиклем дә матур кейенергә яратҡан кеше сысҡан төҫөндәге, үҙен тағы ла ҡартыраҡ күрһәткән был килешһеҙ пальтоны нимә тип алып кейгән инде? Шунан ҡапыл иҫенә төштө, уны бит бынан биш йыл элек Мотаһар менән бергә һайлап алғайнылар. Мәүлиха тәүҙә көрән төҫтәгеһен кейеп ҡарағайны. Эргәләге бер бисә лә, һатыусы ҡыҙ ҙа уға ҡыҙығып ҡарап: «Бигерәк килешә, ал ошонођон», — тип ҡат-ҡат әйткәйне. Ә Мотаһар, бынауын алабыҙ, тип ҡырт киҫкәс, ҡарышырға ҡыйманы Мәүлиха.

«Ғүмер буйы минең менән иҫәпләшмәҫкә ҡырталашты, нишләп улайтты әле? — тип әсенеп уйланды ҡатын. — Яратып өйләнгәйне бит, яратып йәшәгән кеүек ине. Бер ваҡытта ла улай эшләмә, былай эшлә тип бойорманы ла». Тик Мәүлиха үҙендә һәр ваҡыт уның талапсан, ризаһыҙ ҡараштарын тойҙо. Ҡөлһә, иренең һөмһөрө ҡойолғанын абайланы. Йыр башлаһа, Мотаһарҙың тартылып ҡыҫылған ҡара күҙҙәрен күреп ауыҙы ябылды,



елкенеп бейергә төшһә, ҡыйыш баҫаһың тигәндәй мыҫҡыллы йылмайыуына йәне ҡыйылды. Биреште. Буйһондо. Ярарға тырышты. Ғаиләлә татыулыҡ булһын тип түҙҙе. Әкренләп кенә сигенә, сигенә барып үҙ йөҙөн юғалтҡан. Үҙенең эске донъяһы, теләк-талаптары бөтөнләй ҡалмаған кеүек. Үҙе тураһында үҙе лә онотҡас, кем хәтерләп торһон инде...

Урал кеүек ҡушарлап осҡоһо килмәгәнме Мотаһарҙың? Әллә Мәүлиханың алыҫ осоп китеүенән ҡурҡып бәйҙә тотто микән? Пар аҡҡош булып оса алмаҫын һиҙҙеме?

Балалар ҙа әсәй менән иҫәпләшмәҫкә өйрәнгән. Саҡ ҡына үҫә төштөләрме, үҙ донъяларына йомолалар. Бөтә ғаилә менән ултырып күңел һалып һөйләшкәндәре лә юҡ бит.

«Әйҙә, унынса булһын тинем, тел осомда һүҙем булһа ла тыйылдым. Ә хәҙер...» Ҡатын, үҙ-үҙенә әйтергә ҡурҡҡан фекерен аяуһыҙлыҡ менән тамамлап ҡуйҙы. — Ә хәҙер кешегә лә һанамай. Берәү ҙә һанламай. Иптәштәр юҡ... Ҡайҙа эшләһәм дә өнәмәй, магазиндан магазинға күсертеп бынауында килтереп тыҡҡас ни...»

Күҙ йәштәренә быуыла-быуыла әрнеп уйлаһа ла, нисә төндәр буйы осон-осҡа ялғай алмаған уйҙарының сигенә сыҡты Мәүлиха. Шиктәре, һораուҙары, рәнйеүҙәре бер фекергә төйнәлгәс, ваҡыт һуңлығына ҡарамай күңеле булғансы илап та алғас, сафланып киткәндәй булды. Йәйлап тороп йыйынды. Шәлен дә килештереп, ҡыландыра биреп ябынды, күҙен-ҡашын төҙәтте, ирененә ал йүгертте. Ҡәҙимге генә булып киткәнен күреп, көҙгөгә ҡайырылып-ҡайырылып ҡараны. Уралдың хаттары ятҡан сумкаһын ҡултығына ҡыҫтырып,

һауа еҫкәп, төнгө ҡалаға һоҡланып, аҡҡош мамығылай йәш ҡарға кинәнеп баҫып байтаҡ араны йәйәү барҙы.

Ишекте асырға килгән ҡыҙы: «У-у... беҙҙең әсәй көн дә һуң...» — тимәксе ауыҙын аса башлағайны, ниндәйҙер үҙгәреш барлығын һиҙемләп, әйтәһе һүҙен йотто. Гәзит тотоп, үксәһе йәмшәйгән тапочкаһын лаштыр-лыштыр һөйрәп килеп сыҡҡан Мотаһарҙың да йыйырылған ҡаштары Мәүлиханың фәйрүзәләй балҡыған күҙҙәрен күргәс, үҙенән-үҙе яҙылды, ғәжәпләнеүҙән ул да өнһөҙ ҡалды.

## ЯҢЫНАН ТЫУҒАН КӨН

Миллионынсы тапҡыр аңыма киләм, минең менән бергә һулҡылдап торған әрнеү ҙә уяна. Унан тиҙерәк ҡотолорға тырышып, эргәмдәге ултырғыстан бәләкәй генә тумалаҡ дарыу төймәләрен инде нисәнсе тапҡыр икәү-өсәүһен бер юлы йотам да булмышымдан ҡабат ҡасып сығып китәм: мин юҡҡа сыҡһам, әрнеү ҙә бөтә. Ул, моғайын, аңымдың бер мөйөшөнә һыйынып, минең кире ҡайтҡанымды аңдып торалыр. Әммә мин дарыуҙы күберәк, күберәк эсәм һәм булмышымдағы ҡараңғы упҡынға торған һайын тәрәнерәк сумам. Ҡасанға тиклем ҡабат ҡалҡып сығырға көсөм етер, — миңә быны һынау ҡыҙыҡмы икән ни?

Үҙ эштәренең оҫтаһы булған йәллəттәр, ғәҙәттә, мөхбүсте аяҡтарын ергә тейер-теймәҫ кенә итеп тимер ырғаҡҡа аҫып ҡуйып язалап ләззәтләнәләр, тиҙәр. Үлмәй-ҡалмай, тейә-теймәй... Үҙ йәнем менән шулай шаярам ҡатил кеүек мин дә...



Үләм... Ҡалам...

Ҡалам... Үләм...

Юҡ, ҡалам...

Бына ҡалҡам, ҡалҡам... Ғүмеремдә тәүге тапҡыр үҙемә баш, үҙемә түш булып ятам... Быға тиклем ниңә йәшәгәнмен, кем өсөн — береһе лә юҡ...

Улым юҡ, ирем юҡ, туғандарым юҡ.

Юҡ.

Япа-яңғыҙмын. Япа-яңғыҙ. Бөтөнләй урынһыҙ иҫкә төшкән анекдоттағы алйот грузин кеүек: «Адин, савсэм адин...» Психотерапия буйынса лектор шул көләмәсте һөйләгәс, тәгәрәп ятып көлгәйнек...

«Һин яңғыҙ ҡалдың. Һине ташланылар. Бесәй балаһын ташлаған кеүек япа-яңғыҙынды... Һин ҡайғыраһың. Һиңә ҡыйын! Ә ниңә, ни өсөн?

Туҡта әле, һине бит донъялағы иң яҡын, иң яратҡан кешең — үҙең менән бергә ҡалдырҙылар! Өҫтәүенә, ошо яҡты донъяны ла ҡалдырҙылар.

Донъя һәм һин...

Ә һин бөтөнләй яңғыҙһың, ярҙамһыҙһың, әйтерһең дә, яңы тыуған сабыйһың. Барыһын да яңынан башла. Әйе, яңынан... Һин — яңы кеше!»

Әйтеүе еңел! Ә үҙ-үҙеңде ғазаплап ятыу еңелме? Мин арыным: илап арыным, ҡайғырып арыным, һыҙланып арыным, үҙемдән үҙем арыным.

Ҡабығынан һөйрәлеп сығырға маташҡан йылан кеүек ыҫылдап, урынымдан ҡалҡтым. Үҙем тигән бәхетһеҙ әҙәмгә екһенеп ҡарап торам. Күҙгөнән миңә һөйкөмһөҙ, ҡайғылы,

8 Заказ 343

ылбырап бөткән ҡарт бисә текәлгән. Былдай хәшәрәтте мин дә ташлар инем, әйләнеп тә ҡарамаҫ инем. Ошондай ҡотһоҙ мәхлүк менән бәхетле булыу мөмкин дә түгел. Миңә, ысынлап та, ытырғаныс ул ҡатын, ытырғаныс — унан көйгән сей ит еҫе килә, үлем еҫе... Уҡшытҡыс еҫтән тонсоҡмаҫ өсөн, тороп, тәҙрәне асам, урамға атлығам.

Ҡала уянған. Ҡешеләр, бәхетле кешеләр, эшкә ашыға. Уларҙың ағымына ҡушылып, автобус туҡталышына барам да кире боролам.

Тығылышып атлығыр ерем юҡ. Мине эштән дә ҡыуғандарҙыр инде. Нисә көн булды һуң? Нисә көн? Ваҡыт һанайым тип үткәнемә ҡайырылһам, яңынан ихтыярым һына, йәнем үрһәләнә. «Күпме ваҡыт үтһә лә, барыбер түгелме ни?» — тип үҙ-үҙемде тынысландырам. Ниңәлер парикмахерскийға инәм. Минең берәй тере, һау-сәләмәт кешене күргем, уның менән һөйләшкем килә. Бер кем дә юҡ. Ишек төбөндәге буш креслоға ултырам да тағы көҙгөләге үҙемде ентекләп ҡарайым. Толомлап үрелгән ауыр ҡалын ҡара сәстәр, ныҡ итеп ҡымтылған төҫһөҙ нәҙек ирендәр. Ә инде төпһөҙ ҡойо кеүек ҡара күҙҙәргә ғүмерҙә лә нур ҡунмағандыр...

Залдың теге яғынан йыбанып ҡына атлап эргәмә килеп баҫҡан оҫта, ултырғысым артына баҫа ла, эйелә биреп, көҙгөләге ҡиәфәтемде ҡарай. Инде нисәмә йыл ошо бер үк парикмахерға йөрөһәм дә, был юлы ул мине танымай тора:

— Һеҙҙе нисек?

Ул ҙур түшле, сибәр, таҙа ҡатын. Ҡабарып бешкән йомро икмәк кеүек. Яңы мейестән алынған кеүек... Миңә ул бисәнән йылы ипкен бәрелгән һымаҡ. Мин ошо ҙур, көслө, йомшаҡ йылыға ышанам, шуға сумам...

— Бәхетле итегеҙ... — тип әйтеп һалам үҙем дә һиҙмәҫтән. Унан һуң артымдағы ханымдың сигенә биреп ҡуйғанын һиҙепмелер, ялыныслы тауыш менән, — зинһар! — тип бышылдайым...

Ул сәйерһенеп ситкәрәк баҫа, башҡа оҫталар ҙа, эштәренән туҡтап, минең яҡҡа борола. Ә минең таныш парикмахер ҡатындың мендәр кеүек ҙур, йомшаҡ түштәренә башымды йәшереп, үкереп илағым килә...

* * *

...— Улығыҙҙы ерләргә киләһегеҙме? — тип һораны телефон трубкаһынан кинәт яңғыраған ҡырыҫ, асыулы тауыш.

— Нимә булды уға? Нишләп ауырығанын әйтмәнегеҙ? Ҡасан?.. — тип ҡысҡырҙым, әммә минең менән һөйләшергә теләмәнеләр. Әллә бәйләнеш өҙөлдө, әллә трубканы ташланылар. Интернаттың номерын ҡабат йыйып ҡарайым — ҡыҫҡа-ҡыҫҡа зыңдар ғына. Ай, улым — шундай яратып, көтөп алған сабыйым! Атаһы, башын эсемә ҡуйып, көн һайын уның тибешкәнен тыңларға ярата торғайны. Түп-түңәрәк ҙур күҙле, арбағыс бер бәпес ине ул тәүҙә. Ҡулыбыҙҙан да төшөрмәй, шул тикләм күңелле итеп ҡараныҡ. Туғыҙ айлыҡ сағында атлап китте, тештәре лә ваҡытында сыҡты, ауырып йонсотманы. Бала түгел, хазина ине ул...

Йәш тә ике айлыҡ сағында балалар врачы абайланы уның сәйерлеген. Унан атаһы, туғандар, таныштар... Мин генә ышанырға те-

ләмәнем. Артыҡ иркә бала шулай булалыр, аҡыл керһә, төҙәлер, тип гел киреһен һөйләнем. Ә ул ҙурайған һайын боҙола барҙы. Тыйып тотҡоһоҙ тилбер, ҡулсыр, хәүеф тигән нәмәне иһә бөтөнләй аңламай. Туҡтауһыҙ йығыла, башын яра, ҡайнап торған һыуға ҡулын тыға — илай ҙа, көлә лә белмәй. Үҙе һаман һөйләшмәй. Мәғәнәһеҙ ҡараштары менән текләп тора ла, яңынан бөтәһен ҡырырға, емерергә тотона. Ватыу, боҙоу, йыртыу, юҡ итеү программаһы һалынған машина кеүек ине ул. Күрһәтмәгән табип, имсе, сихырсы ҡалманы тирә-яҡта. Биш йәшенә тиклем барыбер өмөтләндем. Нәмәләр генә эшләтмәнем, ҡайһылай ғына ҡыланманым — файҙаһыҙға. Шунан махсус интернатҡа бирергә риза булдым. Өс сәғәтлек кенә юл, аҙна һайын барып йөрөрмөн, тинем... Ризалашмаған булһамсы, бәлки, улым әле иҫән булыр ине.

Алъяпҡыс менән күҙен һөртөп торған парикмахер ҡатын ҡапыл ынтылып мине күкрәгенә ҡыҫа: «Йөрәккәйем...» — тип башымдан һыйпай, үҙе һыңҡылдап илай.

* * *

Интернатҡа шылтыратып ала алмағас, өйгә йүгерҙем. Ярай әле Сибәғәттең ялы. Ул — ир кеше, минең кеүек ҡойолоп төшмәҫ, нишләргә белер. Бер үҙем түгелмен бит, икәүләп күтәрһәк шундайын ҡайғыны...

Ҡайтһам, өйҙә юҡ. Аптырап, күрше әбейгә индем.

— Күрмәнеңме, Мөғлифә инәй?

— Абайламаным, — ти ҡарсығым. Күҙемә ҡарамай.



Шундай-шундай хәлгә тарыныҡ бит, тип һөйләп бирәм. Беләһең бит, әйтә күр инде!

— Уф аллам, әйтһәм әйтәйем дә ҡуяйым микән, — тип өтәләнә әбекәйем. — Һеңлеңдең ятағына барып килмәһәң...

Мөғлифә инәй һаман күҙҙәремә күтәрелеп ҡарамай.

Уйымда насарлыҡ юҡ, сығам да йүгерәм. Ысынлап та, Рәсимә һылыуым бар бит әле минең. Бер туған апайымдың ҡыҙы. Сибәғәт менән үҙебеҙ ауылдан алып килеп училищеға урынлаштырҙыҡ, беҙҙә йәшәп уҡыны, хәҙер кондитер булып эшләй. Беҙҙең хәсрәтле өйөбөҙгә ул килеп ингәс, донъя яҡтырып киткәндәй булғайны.

— Татлыҡас, — ти уға Сибәғәт еҙнәһе. — Татлыҡас... Һин үҙең дә бөҙрә торт кеүек...

Ә Мөғлифә инәйгә һеңлем ниңәлер оҡшамай:

— Эйәләтмә шуныңды, — ти ул. — Йөрөтмә. Улыңды интернатҡа тапшырғансы йөрөттөң бит инде, етәр...

Улымды алмаш-тилмәш ҡарашҡаны өсөн мең рәхмәтлемен һеңлемә.

«Әлдә һин бар, һылыуым. Һин булмаһаң, нишләр инем?» — тип бөткөһөҙ ҡабатлағаным бар. Ә ул йомроҡас яурындарын һикертеп, башын ҡырын һалып бер көлә лә күбәләк кеүек тағы арабыҙҙа осоп йөрөй бирә, йә еҙнәһе менән шаяра, йә миңә килеп иркәләнә. Бала ғына шул һаман...

Рәсимә йәшәгән ятаҡҡа йүгереп, ашығып барып индем. Өйҙә генә булһа ярар ине аҡыллым. Вахталағы ҡарсыҡтан һорайым: «Йоҡлайҙарҙыр әле, үҙең асып ин, — тип асҡыс тоттора. — Уятып торма...»

Йәйендеке кеүек ҙур ауыҙлы ошо ҡарсыҡтарын электән оҡшатмай инем. Мәкерле итеп йылмайып ултырыуы бигерәк екһендергес тойолдо.

— Юҡ, кәрәкмәй, — тип аҫҡысты кире һалмаҡсы булам. — Торғандарҙыр, һуң бит инде хәҙер.

— Ал, ал, — тип бәләкәс кенә аҫҡысты ныҡышып усыма йомдора ул. — Шаҡып мәшәҡәтләнеп тормаҫһың инде. Ас та ин.

Йыландан арбалған ҡуян һымаҡ, бер ни тиклем ҡаушап торғандан һуң, астым да индем һеңлемдең икенсе ҡаттағы бүлмәһенә. Ҡосаҡлашҡан килеш матур итеп иҙрәп йоҡлап ята ине минең донъялағы иң яҡын икешем. Өҫтәлдә — яртылаш буш коньяк шешәһе. Ишек яңағына һөйәлдем дә ҡаттым, уны ябырға башыма ла килмәй. Ҡапыл үтәнән иҫкән елгә тәҙрә форточкаһы шапылдап ябылғанға Сибәғәт уянып китте лә матур күҙҙәрен шар асып миңә ҡараны. Улымдың күҙҙәре...

Сабыйымдың мәйетен ерләүҙе көткән әруаҳы һөйрәп алғандыр инде мине был вәхшәттән. Нисек сығып киткәнемде лә, ҡайһылайтып йыйынғанымды ла хәтерләмәйем. Ныҡытып ҡаҙаҡлап ҡуйылған бәләкәй табут алдында ғына үҙемде үҙем аңғара башланым.

— Ниһәйәт, ҡотолдо бисараҡай, был донъяла өләшенә төшкән сикһеҙ ғазаптарҙан ҡотолдо, — тип ҡат-ҡат ҡабатлай интернат директоры, йонсоу йөҙлө, ябыҡ ҡына ҡатын. Ул хәүефләнеп минең ҡараштарымды аулай, үҙе ошо фекерен сүкеп-сүкеп мейемә һеңдерергә тырыша. — Был донъя тотош ғазап ине бит, гонаһһыҙ сабыйға...



— Берәй ергә барып төңөлөрө билдәле ине инде. Һуңғы көндәрҙә бигерәк шашты, — тип һүҙгә ҡушыла йәмһеҙ, сырыш битле, зәңгәр танаулы тәбәнәк ир. Тупаҫ тауышынан уның миңә шылтыратҡан кеше икәнен таныйым.

— Ишектә бәүелгән ерҙән ҡолап, аяғын ауырттырҙы, ашханала өҫтөнә ҡайнаған һыулы кәстрүлде ауҙара яҙҙы...

— Былары үткән аҙнала булғайны, — тип бүлдерәм уны. — Нишләп табуты ябыҡ?

— Үткән аҙнала ҡалдырған эфлисундарығыҙҙы ла ашап бөтмәгәйне әле, — тип һүҙгә ҡушыла тәрбиәсе ҡатын.

— Табутты... — тип ҡысҡырам мин, түҙемлегем бөтөп...

Директор ҡатын ҡулымдан тотоп, йәнә күҙемә ҡарарға тырыша, үҙенең ҡарашы туҡмалған эттеке кеүек.

— Улығыҙҙың үлемендә беҙҙең дә ғәйеп бар, һеңлем, — ти ул һүрәнке тауыш менән. — Ҡайһы аралалыр завхоздың бүлмәһенә инеп, электр розеткаһының тишегенә тимер сым тыҡҡан...

«Үҙегеҙ ҙә, врач булараҡ, улығыҙҙың ғүмерлек яфа сигеп йәшәйәсәген, үлемдең үҙенә лә, һеҙҙең өсөн дә ҡотолоу икәнен яҡшы аңлайһығыҙ. Тауыш ҡуптармағыҙ инде», — тип әйтергә теләй ул, тик мине аяп ҡына өндәшмәй. Әммә бынау тупаҫ завхоздың мине иң яуыз дошманы кеүек күреп, хаяһыҙ ҡарап тороуына башҡа түҙерлек хәлем юҡ...

Зыярат матур урында, ҡайынлыҡта. Ап-аҡ булып еләк сәскә атҡан. Минең дә ошонда ҡалғым килә.

«Уға барыбер хәҙер яҡшыраҡ», — тип бы-

шылдай директор ҡатын, һаман минеме, үҙенме был фекергә күнектерергә тырышып.

* * *

...Беҙ кире ҡайтыуға Сибәғәт менән Рәсимә лә килеп етте. Уларға, тәү ҡат күргәндәй, иғтибарлап ҡарайым: икеһе лә шундай матурҙар, йәштәр! Үҙемдең өҫ-башыма, улымдың ҡәбере тупрағына ҡатҡан ҡулдарыма ҡарайым...

— Мин тиҙерәк ҡайтыр инем, — тип бышылдайым эргәмдә торған тәрбиәсегә. Ул оҙаҡламай бер төйөнсөк алып сыға: улғынамдың әйберҙәре! Ул ашап өлгөрмәгән әфлисундары ла шунда ята...

— Балаларға бирегеҙ, — тип кире һонам уларҙы...

— Һеҙгә машина таптым, — ти директор ҡатын. Уларҙа мине йәһәтерәк оҙатып ебәреү ҡайғыһы. Күҙ көйөгө булып, ғәйептәрен хәтерләтеп тороусының китеүе хәйерлерәк.

Юлдаштарым, йәш кенә ир менән ҡатын, балаларын ошо интернатта ҡалдырып ҡайтып бара. Ҡатыны сеңләп-сеңләп илай, ә ире уны тынысландырырҙай һүҙ таба алмай. Моғайын, ундай һүҙҙәр юҡтыр ҙа...

Ҡайттым да бикләндем. Бер кемде лә күргем килмәй. Бер кемде лә... Шырлыҡҡа боҫоп, яраһын ялап ятҡан бүре һымаҡ. Бынау Сибәғәте генә килеп инмәһен, бер кем дә мине борсомаһын ине...

Ятам. Аң тигәнем өҙөк-йыртыҡ, аҡыл тигәнем килделе-киттеле. Ятам, бер кемгә лә кәрәгем юҡ. Миңә лә бер кемдең дә кәрәге юҡ. Ә бит мин туҡтаһам, бөтә донъя туңҡәрелер



кеүек тойола ине — йөк аты һымаҡ, туҡтауһыҙ саба, ашыға инем. Ни тиклем күберәк, яҡшыраҡ эшләһәм, ни тиклем күберәк белһәм, камилыраҡ булһам — шул тиклем оло бәхеткә яҡынаям кеүек тойолғайны. Ә бәхет һаман, һаман килмәгәнгә, моғайын, мин етерлек дәрәжәлә уңған, яҡшы түгелмендер, тип тағы ла нығыраҡ тырышам. Ҡайһылай яңылышҡанмын! Тормош миңә хәҙер асыҡ ҡәбер һымаҡ, һәм берәйһенең тәү башлап тупраҡ ырғытыуы ғына кәрәк. Тәү башлап был тупраҡты өҫтөмә Сибәғәтем һәм һеңлем Рәсимә — ике иң яратҡан кешем ташланы.

* * *

Эргәмә йыйылған парикмахер ҡатындарға ҡурҡып ҡына ҡалҡып ҡарайым. Улар үҙҙәре әлек миңә һәр саҡ ятһынып, битарафлыҡ менән ҡараған кеүек ине. Әле иһә береһе арҡамдан һөйҙө, икенсеһе сәсемдән һыйпаны... Хәлемә инергә, күңелемде табырға тырыштылар.

— Минең үҙемдән ҡасҡым килә. Шуның өсөн ҡиәфәтемде берәй нисек үҙгәртәйек. Сәсемде булһа ла...

Бисәләр мине әйләндереп-тулғандырып, ентекләп ҡараны. Сөм-ҡара толом иҙәнгә осто, ҡалған сәстәрем яурыныма төшөп ятырлыҡ итеп бөҙрәләтелде. Сабаталай ҡалын, һөрөм төҫлө ҡара ҡаштарымды ҡыҙҙар яңы тыуған сабый ай рәүешенә килтереп йолҡтолар. Ҡамыш кеүек төҙ керпектәрҙе буяп «тырпайттылар», хатта иҙән һепереүсе йәш ҡыҙ, мәрәкәләп, улар өҫтөнә шырпы һалып ҡараны —

тора! Бик оҙаҡ мәшәҡәтләнгәндән һуң, иренгә яраҡлы буяҡ һөртөп, биткә кершән менән ал яғып, һуңғы нөктәне ҡуйғандан һуң мине көҙгөгә бороп ултырттылар. Унан өрөлөп торған иренле, бейек, матур маңлайлы, төҙ танаулы һылыу ғына бер ҡатын керпектәре менән сәнсеп алырҙай итеп ҡарап тора ине.

— Был «елбәҙәк» башҡа берәй хәсрәт яңылыш аҙашып килеп инһә лә туҡталмаҫ, тиҙерәк сығып тайыр, — тине оҫта ҡәнәғәт тауыш менән.

Кассир ҡатында минең яңы ҡиәфәтемә тап килерҙәй күлдәк тә табылды. Иртән иртүк килеп ингән ҡатын төш еткәндә генә парикмахерҙан бөтөнләй икенсе кеше булып килеп сыҡты. Хәҙер иң ауыры — булмышымды ҡиәфәтемә ярашлы итеп үҙгәртеү бурысы ҡалды. Уныһын үҙемдән башҡа берәү ҙә булдыра алмаясаҡ.

Елбәҙәк ҡатын ни эшләргә тейеш? Иң тәүҙә аҡса табырға! Быныһы иң еңеле булып сыҡты — эргәләге ювелир магазинына инеп, никах балдағымды һатып сыҡтым. Артабан ул аҡсаны елбәҙәктәрсә туҙҙырырға кәрәк ине. Быныһы ла үтә ҡатмарлы булманы. Бер сумка аҙыҡ-түлек, шампанский алып, «кендек инәләремде» — парикмахерҙарҙы яңынан тыуған көнөмә саҡырҙым.

Шау-гөр килеп өҫтәл әҙерләнек. Мине, яңы тыуған сабыйҙы, түргә ултырттылар. Үҙ-үҙен генә яратып, бәхет өсөн йәшәргә тейешле көйәҙ ҡатынға бик күп ҡиммәтле кәңәштәр әйтелде. Кәрәкле кәңәштәр, сөнки миңә яңынан атларға, көлөргә, хатта уйларға өйрәнергә кәрәк ине.

Ҡунаҡтарым ихласлап, оҙаҡ ултырҙылар



Тауышҡа Мөғлифә инәй ҙә килеп инде. Башта мине танымай, бик шикләнеп ҡарап торҙо. Унан бот сабып, илай-көлә ҡосаҡлап алды. Яңы дуҫтарым хушлашҡанда француз косметикаһы бүләк итеп, йоҡларға ятҡанда магнитофонымдағы яңы кассетаны тыңларға ҡушып сығып китте.

Бер-ике уртлам ғына шампанский эскәндән күтәрелеп алған кәйефле Мөғлифә инәйҙең бер ҙә минең янымдан сыҡҡыһы килмәне. Ул, себеше янында өйөрөлгән тауыҡ кеүек, йә бөҙрәләремде тота, йә, ситкәрәк китеп, ҡыҫҡа итәкле күлдәгемә, буй-һыныма бик тикшереп ҡарап тора.

— Сибәғәт килгәйне... — Инде мөмкиндер, әрнеүе баҫылғандыр тип уйлағандыр әбекәйем.

Был исемдең йөрәгемде семтеп алғанын күрһәтмәҫкә кәрәк. Йомшарҙыммы, иламһыраныммы — бөттөм... Әүәлге мең хәсрәтле булмышым бынау бөҙрәләр япҡан елкәмә яңынан менеп атланасаҡ.

— Ундай кешене белмәйем мин, инәкәйем, — тинем, йөҙөмә мөмкин булған тиклем тилекәй ҡиәфәте сығарырға тырышып. — Ә таныш булмаған кешеләр мине ҡыҙыҡһындырмай.

Күршем, минең аҡылым камиллыҡҡа буйтым шикләнеп, сығып китте.

Яңы булмышымды кешеләр янында һынап ҡарарға кәрәк ине. Икенсе көндө магазиндарҙа йөрөп, яңы кейем-һалым алдым. Йоҡларға ятыр алдынан ҡунаҡтарымдың хушлашҡанда әйткән һүҙен онотҡаным иҫемә төштө. Магнитофонды ҡабыҙыу менән үк яңы матур көй яңғыраны.

Ул көй яғымлы ҡатын-ҡыҙ тауышы менән миңә шуларҙы еткерергә ынтыла:

— Һин матурһың! Һин яңынан тыуҙың! Яңы, йәш, сәләмәт ҡан һинең тамырҙарың буйлап аға. Өр-яңы, сәләмәт тормош алһыуланып балҡыған битеңә ҡуна. Яңы тормош ҡып-ҡыҙыл төҫ булып һинең матур ирендәреңә тула, — тип ҡабатлап, мине рәхәт итеп иҙрәтә! Йонсоп, миктәп бөткән ҡәҙерһеҙ йөк атынан үҙ баһаһын белгән иркә ҡатынға әйләнергә өйрәтә ине мине был наҙлы тауыш. Мин үҙемдең ысынлап та икенсе кешегә әйләнә алырыма ышана яҙҙым. Ә ниңә — бик күптәр шулай еңелсә генә йәшәй бит? Хәйер, бәләкәйҙән үҙемдең маҡсатымды тормошҡа ашырыр өсөн ихтыяр көсөмдө йәлләмәҫкә күнеккәнмен. Ҡөрәшеп ҡарайыҡ, тинем үҙ-үҙемә, көрәшеп ҡарайыҡ! Әлбиттә, үҙ-үҙең менән көрәшеүҙән дә ауырыраҡ нәмә юҡ икәнен бик яҡшы беләм мин хәҙер.

Оҙон-оҙаҡҡа ниңә һуҙылырға, тинем дә, икенсе көндө үк эшемә йүнәлдем. Шаҡ ҡатырғыс яңы ҡиәфәтемдә... Ҡыҫҡа итәктә, бейек үксәлә уңайһыҙ ҙа, йәпһеҙ ҙә кеүек. Әммә тәүге мөһим имтиханды уңышлы үтергә кәрәк. Был минең беренсе еңеү йәки еңелеү буласаҡ. Иң тәүҙә деканатҡа инергә кәрәк. Бәлки, мине эштән ҡыуғандарҙыр ҙа. Расписание эргәһендә өймәкләшеп торған бер төркөм талиптарҙы күргәс, иҙән аҫтына төшөп боҫорҙай булдым. Башыма ҡан һикерҙе. Арҡыс-торҡос баҫмаҫҡа, тырпайып торған тубыҡтарҙы ҡапларға маташып итәкте тартҡыламаҫҡа, тип үҙ-үҙемә бойороҡ бирә-бирә, үлеменә табан атлаған һалдат һымаҡ, туп-тура өҫтәренә барам.



Улары, үҙ күҙҙәренә үҙҙәре ышана алмай, ауыҙҙарын асып ҡатҡан.

— Сәләм! — тип ҡулымды күтәреп, бармаҡтарымды шаян ҡыбырҙатам. Артығына хәлем етмәй.

Бәхетемә күрә, деканатта мине бигүк белеп бөтмәгән йәш ҡыҙ ғына. Ҡайғылы ваҡытымды иҫәпкә алып, бик ҡыйын булһа ла, мине отпускыға ебәргәндәр икән. Хеҙмәттәштәремдең хәстәрлегенән күңелем йомшара. Бына быныһы насар — ебергә ярамай миңә, тип уйлап та өлгөрмәйем, ишекте киң асып беҙҙең кафедраның мөдире, минең түрәм, профессор Сумаҡов килеп инә. Бәлки, иғтибар итмәҫ, тип уйлайым мин. Ҡотолғоһоҙ осрашыуҙы саҡ ҡына аҙаҡҡараҡ ҡалдырғанда йәтеш булыр ине. Тик минең кеүек шәп сағыу ҡатындарҙы абайламай мөмкинме һуң? Ул тәүҙә танымай, былай ғына ҡыҙыҡһынып баға. Унан, ҡалын ҡаштары өҫкә күтәрелгән һайын, алтын тирәсле йәмһеҙ, ҙур күҙлеге лә маңлайына мәрәкә булып һикереп менеп ултыра.

— Һаумыһығыҙ, Вәли Яҡупович! — тип өндәшәм мин.

— Гөлзифа... — ти ул тыны ҡурылып. — Был һеҙме, Гөлзифа Тимеровна?

Элекке тыйнаҡ, ҡырыҫ Гөлзифа Тимеровна менән нисек һөйләшергә белер ине, ә быныһына нимә тип әйтергә? Уның ҡатмарлы тойғолары йөҙөнә үк сыға. Профессор тамам юғалып ҡала, ә мин түҙә алмай ҡысҡырып көлөп ебәрәм! Профессор сигенә! Ура, беренсе еңеү!

...Иң ҡыйыны дуҫтарым менән осрашыу булырын башыма ла килтермәгәнмен. Элекке

Гөлзифаны оҡшатҡан кешеләрҙе минең әлеге булмышым, әлбиттә, бик ныҡ аптыратты, хатта шаҡ ҡатырҙы. Тәүҙә улар үҙгәрештәрҙе ҡиәфәтемә генә япһарып, күңелемә инергә маташҡайны. Елбәҙәк ҡыланышым, килделеттеле хәбәрем тәүҙә рәнйетте, унан хәүефләндерҙе, буғай. Миңә ҡалһа, уларҙың: «Был бахыр ҡайғыларынан аҡылға бер төрлөрәк булып киткән, ахырыһы», — тип уйлауҙары уңайлыраҡ ине әлегә.

Шулай итеп, минең яңы булмышым элекке таныштар, дуҫ-иштәр, хеҙмәттәштәр менән яңыса мөнәсәбәттәр урынлаштырыуҙы талап итә ине. «Ярар, — тинем мин, — күнегерҙәр». Иң мөһиме — «бөгөнгө мин» талиптарға нығыраҡ оҡшайым. Элекке төҫһөҙ «ҡарға» урыныңа юҡка-барға ла көләргә әҙер торған шаян уҡытыусы пәйҙә булыуына йәштәр бик тиҙ күнекте. Тик үҙем генә яңы булмышыма инә алмай, протезға өйрәнә алмай йонсоған ғәрип кеүек, бик оҙаҡ яфаланмаһам инде...

Үҙ-үҙең менән йәшенмәк уйнауҙан да мәғәнәһеҙерәк уйын бармы икән, тип бөтөнләй бирешергә уйлап та ҡуйған мәлдәрем булмаңы түгел.

Бер көндө — улымды ерләгәндә июнь башы ине, тимәк, ике ай үткәс, август баштарында — мине кафедраға, телефонға саҡырҙылар. Ҡабул итеү имтихандары менән булашып, баш тубалдай булып йөрөгән мәшәкәтле саҡ ине, тәүҙә Сибәғәттең тауышын таныманым.

— Гөлзифа? Ә һеҙгә ниндәй Гөлзифа кәрәк? — тип һораным мин ҡәнәғәтһеҙләнеп. Анра бала-сағаларын институтҡа индереүҙе үтенеп, үҙәккә үтеп бөткәйнеләр. Шуларҙың береһе бимазалайҙыр, тип уйланым.



Яңылышыуым һәм ҡаты һөйләшеүем ҡапыл ҡаушап төшмәҫ өсөн бик уңайлы булды. Ирем исемен әйткәс тә:

— Һеҙ яңылышҡанһығыҙ. Мин Гөлзифа Тимеровна түгел. Ул хәҙер бында эшләмәй, — тип яуап бирҙем. Көтөлмәгән хәбәр Сибәғәтте аптыратты, күрәһең. Ул ышанырға ла, ышанмаҫҡа ла белмәй, мине ҡайҙан табырға мөмкин икәнен һорашты.

— Һеҙ уның яҡшы танышымы? Нисек ишетмәнегеҙ икән? Ул үлде бит, — тип әйтеп һалдым. — Һеҙгә шундай ҡайғылы хәбәр еткереүем ҡыҙғаныс, әлбиттә. Ғәфү итегеҙ, зинһар!

Һөйләшеүемде ирекһеҙҙән ишетеп торған хеҙмәттәшем ҡаушауҙан сәсәп китте. Ә мин, борсоғаны өсөн ғәфү үтенгән Сибәғәткә үҙемдең ихлас рәүештә уның ҡайғыһын уртаҡлашыуымды белдереп, трубканы һалдым. Эштән һуң Мөғлифә инәйгә фатирҙы сосораҡ һаҡларға кәрәклеген киҫәтеп сығырға тура килде. Алмашыр өсөн уңайлыраҡ фатир килеп сыҡҡансы һәм аҙыраҡ күңелем тынысланғансы тип, ике аҙнаға институт профилакторийына күскәйнем. Әлбиттә, юл яҙлыҡтырырға маташыу тәүҙә уйымда ла юҡ ине. Ысынлап эҙләгән кешегә мине табыуы ауыр түгел. Шулай ҙа... Шулай ҙа минең уны күрергә бер ниндәй теләгем дә, көсөм дә юҡ ине. Хәлемде аңлап, хоҙай ҡурсалағандыр инде — йәй буйы осрашманыҡ.

Әбейҙәр сыуағының иҫ киткес матур, йылы бер көнөндә, институтта үткәрелгән ғилми конференциянан һуң, сит ҡаланан килгән ике ҡунаҡты ресторанға оҙатып барған сағымда, тап килештем улар менән. Һөйләшә-һөйләшә

ҡаршыға килгән Сибәғәт менән Рәсимәне абайламай үткәнмен. Ә улар тәүҙә минә бөтөнләй танымағандар, булһа кәрәк. Үтеп киткәс кенә ҡыйыр-ҡыймаç әйтелгән «Гөлзифа»-ға боролоп ҡараһам, торалар минең «йән киçәккәйҙәрем». Һеңлем ауырлы. Иремдең еңенә аçылынған.

— Был һинме, Гөлзифа? — ти Сибәғәт.

— Һеҙ яңылыштығыҙ. — Китергә боролдом. Илтифат һаҡлап алғараҡ киткән ҡунаҡтарымдың береһе сәскә һатыусынан алһыу раузалар алып өлгөргән. Иренемдең ҡалтырауын сәскәләр менән ҡапланым. Элеккеләй башты түбән баçып, бөлөнөп китеп барһам, был икәү шулай үтеп тә китер ине. Мин меçкенде йәлләп, бер нисә һүҙ һөйләнеп алған булырҙар ине, бәлки. Ә инде ҡояш кеүек балҡып, ике ирҙе ҡултыҡлап китеп барған Гөлзифаны былай ғына үткәреп ебәрә алмай ине минең элекке ирем Сибәғәт. Үҙенә һаман аçылынып торған бисара һеңлемдән ҡулын һелкетә тартып алды ла тып итеп алдыма килеп баçты.

— Ғәфү итегеҙ, бер һүҙ әйтеү өсөн генә, — тип үтенде ул юлдаштарымдан. — Нимә булды һиңә, Гөлзифа?

Ғәжәпләнеүҙән бигерәк, ниндәйҙер алйотларса һоҡланыу бөркөлә ине буп-буш күҙҙәренән. Уның шулай тулҡынланыуы, ҡаушауы миңә ҡыҙыҡ та, ҡыҙғаныс та тойолдо.

— Гөлзифа үлде, тигәйнем бит инде мин һиңә, — тинем ҡырҡыу итеп. — Улы менән бер ҡәберҙә ятып ҡалды. Һағынып иçкә төшөрһәгеҙ, зыяраттарына сәскә һалып китегеҙ. Ә мин — бөтөнләй башҡа кеше.

— Улай булғас, танышайыҡ, — тигән булды ул, йылмайырға тырышып.



— Анау меçкен ауырлы ҡатынды көттөрмәгеҙ инде, көскә аяғында баçып тора бит, бисараҡайың. Бигерәк төçө ҡасҡан бисәндең. Ҡатындар ирҙәре яратһа ғына сибәр була ул, ҡәҙерлеләрем...

* * *

Бәпәйҙәре тыуһа ла, ирем менән һеңлем бергә оҙаҡ йәшәй алманы. Күп тә үтмәне, Рәсимә икенсе кешегә кейәүгә китте. Әлбиттә, яңы иргә ул балаһы менән һыймай ине. Алты айлыҡ улын күтәреп Сибәғәт ҡайҙа барһын, миңә килеп йығылды. Үҙеңдеке — үҙәктә икән. Ғәфү иттем. Хәҙер иремдең һәм һеңлемдең малайын ҡарап декретта ултырам. Аллаға шөкөр, был ял оҙайлы булыр, ахыры. Сибәғәт менән үҙебеҙ ҙә ҡыҙ көтәбеҙ.

## КӨЙГӘН АҒАС СЕРЕМӘЙ

Яңы өйҙөң ҙур тәҙрәләренән кинйә улы Рәмил менән буласаҡ килендәре Йәмиләнең пәрҙәләр элеп йөрөгәне күренә. Бына Йәмилә кәкрәйгән ҡаҙауҙы төҙәтеп ултырған Рәмилдең яурыны аша килеп ҡосаҡлап алды. Уныһы башын артҡа ташлап, балҡыу ҡараштары менән һөйгәненә баҡты. Эңер ҡараңғылығынан уларға ҡыуанып ҡарап торған Мәрхәбәнең ҡапыл эсе янып китте: был күренеш хәтерендә тормошоноң иң әрнеүле мәлен яңыртты.

— Әсәй, балаçты ла бөгөн түшәп ҡуябыҙмы?

Уртансы ҡыҙы Нәсимәнең һаҡ ҡына ҡағылыуына һиçкәнеп киткән Мәрхәбә, еңел һулап эсе үкенесен һирпеп ташланы ла, егерме

йыл буйы ал-ял белмәй, тырышып-тырмашып яҡынайтҡан бөгөнгө ҡыуанысына сат йәбеште.

Әле алдында мөһабәт булып ҡалҡып торған йорт хыялындағыһынан бер ҙә ҡайтыш түгел. Түшәме терәүле иҫке өйҙөң урындығына теҙелешеп мыш-мыш килеп йоҡлаған береһенән-береһе бәләкәс балалары янында йоҡоһоҙлоҡтан йонсоп ятҡан ваҡыттарында ошо хыялы уға рәхәтлек бирә, күңелен йылыта торғайны. Ул өйҙө нисегерәк итеп матурлау хаҡында тәфсирләп уйлай-уйлай балаҫтар һуҡты, өҫтәл ябыуҙары сикте. Ниһәйәт, йорт әҙер булды. Бөгөн иртәнсәк уға күсенә башланылар.

Иң алдан һап-һары ҡарағай тупһаны ап-аҡ бесәйен тотоп ейәнсәре аша атланы. Унан һигеҙ тәҙрәнең һәр береһенә инселәп үҫтергән шау сәскә гөлдәрен тотоп ҡыҙҙары, килендәре инде.

Көнө буйы яңы өйгә әйбер ташып арманһыҙ булһалар ҙа, күңелдәре күтәренке.

— Башҡа нәмәне күсереп бөтһәк, түшәйек һуң, — тине Мәрхәбә үҙенә һораулы ҡарап торған ҡыҙына. — Икәүләп апсыҡмаһаҡ, яңғыҙ кешегә күтәргеһеҙ бит ул.

— Ҡейәүең менән түшәрбеҙ. Һиңә бөгөнгә етер инде. Иртәгә һабантуйға сығырға хәл йый, — тине Нәсимә әсәһенә яратып ҡарап.

Ыҙаланып үҫтергәнгә күрә, балаларының барыһынан да уңды Мәрхәбә. Көллөһө лә һәйбәт күңелле, арыу кеше булып сыҡтылар, «әсәй» тип үлеп торалар. Ошоларҙы уйлап ҡыҙын күкрәгенә ҡыҫып яратҡыһы килеп китте. Тик теләгенә аяҡ салған нәмәне: ҡырыҫлығынмы, артыҡ тотанаҡлығынмы еңә алманы. Үҙенең тартынсаҡлығына ризаһыҙлыҡ, хатта үкенес тойғоһо кисерһә лә наҙлы һүҙҙәр урынына:

— Ял ит тиһең дә, балам, әле һыйырҙар ҡайтмаған. Әллә нишләп һуңлайҙар бөгөн? — тигән булды. Әсәһен яҡшы белгән Нәсимә уның ҡырыҫлығын абайламаны ла, яҡты булмышынан ағылған наҙға иркәләнеп:

— Үҙебеҙ өйҙә саҡта һинән һыйыр һауҙырып тормабыҙ инде, — тип йылмайҙы. — Апам менән икәүләп тырыштырырбыҙ.

— Буралай ике һыйырҙы ошо ап-аҡ ҡына, матур ғына ҡулдарығыҙ менән ҡасан һауып бөтөрһөгөҙ икән һуң? — тип көлөмһөрәне Мәрхәбә. Ғорурлығы тауышына сыҡҡайны. Ғүмер буйы һыйыр имсәге тартып ҡатып бөткән суҡмарҙай ҡуллы Мәрхәбәнең ике ҡыҙы ла нәфис кенә ҡуллы врач булып киткәнгә ҡыуаныстан ине был. Йәнә лә, хужалы кешеләрҙең дә һәр береһе баҙнат итә алмағанды, үҙенең яңғыҙ башына ике өлкән һыйыр, ишле ваҡ мал аҫрай алыуына маһайыу ҙа ҡушылғайны.

Ҡыҙының:

— Бирешмәбеҙ. Арыһаҡ, ярҙамға еңгәмде саҡырырбыҙ, — тигән яуабынан һуң, Себерҙә эшләгән еренән иртән иртүк ҡайтып төшөргә тейешле өлкән улын уйлап, йәһәтләне.

— Ағайың килеп инеүгә өй сынъяһау булып балҡып торһон, йыйыштырып бөтөп ятайыҡ.

Мәрхәбәнең матурлыҡҡа мөкиббәнлеген, бар оҫталығын, хыялын, күңелендә ҡайнаған тойғоларын һалып һуҡҡан балаҫын ялandай өйҙөң иҙәненә түшәп ебәргәс, барыһы ла һоҡланыуҙан бер килке өнһөҙ торҙо.

Ҡүркәм йәйҙең гүзәллеге күскәйне балаҫ-ҡа: күпереп үҫкән йәм-йәшел бәпкә үләне араһына алһыу-аҡ туҡранбаштар һыйынған, бер яҡ ситен кәрешкәләр ҡаймалаған, урта бер ерҙән һуҡмаҡ кеүек булып ҡаҙ үләненең ваҡ ҡына һары сәскәләре теҙелгән.

— Кит, әсәй, быға нисек ҡыйып баҫмаҡ кәрәк?! Ишегалдындағы сирәмде күсергәнһең дә ҡуйғанһың! — тине өлкән ҡыҙы Ғәрифә. Башҡалары уға ҡушылды.

«Ошо мәлде Ғирфан күрһә икән...» Бөгөн нисәнсе ҡат инде ошо уй Мәрхәбәнең башында гөлтләп ҡабына ла һүнә. Ғирфан менән барлыҡ ҡыуаныстарын уртаҡлашҡыһы киләме, әллә барыбер хур булманыҡ, тип үсәгеһеме — үҙе лә аңлай алмай.

— Бөгөн атайҙы күреп ҡалдым әле. — Әллә ҡайһы арала инептер һүҙһеҙ генә торған Нәғим әсәһенең уйын уҡығандай, шулай тип әйтеп ҡуйҙы. — Мине танымаға, шикелле... Әллә күрмәнеме, баш баҫып үтте лә китте. Ныҡ бөлөнгән. Һуҡмыш та ине.

— Һаулыҡ ҡушһаң, саҡырһаңсы.

Бөтә балаларының да үҙенә «әсәй нимә әйтер», тигән кеүек һораулы ҡарап тороуынан ҡаушаңҡыраны Мәрхәбә.

— Килер инеме икән? — тине Рәмил. Атаһы киткәндә имсәк бала булып ҡалғанға күрәме, уның күңелендә ҡыҙыҡһыныуҙан башҡа бер тойғо ла юҡ. Уға өлкән ағаһы атай кеүек булды шул.

— Ихласлығыбыҙға барыбер ышанмаҫ ине. — Ғәрифә иһә тере етем ҡалғанда буйтым аңды-тоңдо белерлек ине, шуға күрә күңелендә ғүмерлек рәнйеше ҡалды. — Мыҫҡыл итеп саҡыралар, тиер ине.



— Оялмайынса килеп ултырмаҫ инде, — тип уға ҡушылды Нәсимә. — Йүнһеҙ.

Нәсимә һәр саҡ шулай киҫкенерәк булды. Тик әсәгә ҡыҙының был һүҙҙәрен ишетеү барыбер ҡыйын.

— Йүнһеҙҙән ҡуш бармаҡ кеүек балалар тыуамы ни? — тип ҡаршы төштө ул. — Улай тимәгеҙ. Беҙ уға хөкөмдар түгел. Һәр кемдең үҙе теләгәне менән үҙенсә йәшәргә хаҡы бар. Унан, икәү көткән донъя сатнанынмһә, һис ваҡытта ла бер генә кеше ғәйепле булмай.

Мәрхәбә быны балаларына тәрбиә булһын өсөн генә һөйләмәне, егерме йыл буйы йоҡоһоҙ төндәре, болоҡһоу көндәрендә ҡат-ҡат урап, ҡат-ҡат тағатҡан уйҙарының һығымтаһы ине был.

Ризалаштымы балалар, әллә әсәләренә ҡаршы төшөүҙе кәрәк күрмәнеләрме — һүҙ ошоноң менән бөттө. Әммә Мәрхәбәнең былай ҙа иләҫләнеп торған күңеле әптән урынынан ҡупҡайны инде.

Ятҡас та тиҙ генә йоҡлап китә алманы. Бая, атаһына ике тамсы һыу кеүек оҡшаған кинйәһенең кәләшенә яратып баҡҡан ҡарашын күргәндән һуң хәтеренә төшкән ваҡиға шул йылдарҙың ауыр тойғоларын ҡабат өҫтөрәп сығарҙы. «Шул саҡта туҙынып китмәй, әйҙә ҡайтайыҡ, өйҙә һине балаларың көтә, тип етәкләп алып ҡына сығып китһәм, бөгөн, моғайын, бөтәһе лә һәйбәт булыр ине».

* * *

...Тәҙрә пәрҙәһенең саҡ ҡына тартылып етмәгән мөйөшөнән Ғирфандың ун бер-ун ике йәштәрҙәге малай менән шахмат уйнағаны

күренә. Был — уҡытыусы ҡатындың улылыр, күрәһең.

Ғирфан былай ҙа ҡалын ирнен бүлтәйтә биреп ҡыҙыҡ итеп уйланып ултыра ла, фигураны шап иттереп күсереп, ҡәнәғәт ҡиәфәт менән устарын уҫҡа һуғып ышҡып ала. Тәҙрәгә арты менән ултырған малайҙың йөҙө күренмәй, әммә яурындарын һикертеп, башын сайҡап ҡуйыуынан уҡ күңеле бөтөн икәнен аңларға мөмкин.

Тышта көрткә баҫып ҡарап торған Мәрхәбәнең йылы, яҡты өй эсендәге был хөрлөктән йәне әсеп китә, сөнки Ғирфандың үҙ балалары менән ошолай иркенләп ултырып берәй уйын уйнағанын йәки әңгәмәләшкәнен иҫенә төшөрә алмай.

Бына мейес ауыҙын ҡаплаған шаршау эсенән уҡытыусы ҡатын үҙе килеп сыҡты. Ул һылыу йөҙөн балҡытып Ғирфандың яурынынан ҡосаҡланы. Тегенеһе эйәген уның ҡулына терәп бесәй кеүек иркәләнде, йылмайып ҡайырылып ҡараны. Уларҙың дәртле наҙ тулы ҡараштары осрашыуҙан ялҡылдап киткән ялҡын быяла үтәһенән гөрф итеп бөркөлөп, инде китергә уйлап торған Мәрхәбәнең битен өтөп алды. Ҡатын ошо ҡыҙыулығы менән өйгә бәреп килеп инде лә ҡаушауҙан ҡатып ҡалған Ғирфанға бар рәнйешен атып: «Башҡа ҡайтып күренмәһәң дә була», — тип сығып китте.

Сабыр тәбиғәтле Мәрхәбә шул кистәге үҙенә үҙе аптырай: «Һыйыр тулаһа — аттан яман, тигәндәре шулдыр инде», — тип ҡуя.

Үҙен ялмап алған ялҡынға сыҙай алмайынса урам буйлап йүгергәнен, һарай башындағы бесәнгә ҡасып туйғансы илағанын һаман



да өшәнеп хәтерләй. Тик өйгә ҡайтып ингәс, сабыйҙарының йәшле күҙҙәрен күреп, бөтөн хәсрәттәрен ситкә һирпте. Ни тиклем ауыр саҡта ла уларҙы онотоп бөтөрөнөргә үҙенә рөхсәт итмәне башҡа Мәрхәбә.

Һәр береһенә йылы һүҙен табып, һөйөп, яратып, бәпләп йоҡлатты. Имсәк ҡапҡан килеш ҡуйынында иҙерәгән Рәмилен сәңгелдәгенә һалманы. Ошо ыуыҙ ғына сабый ҡайғы даръяһына батмаҫ өсөн таяныс булып тойолдо.

Йоҡо ҡайҙа инде! Яртыһын урындыҡ, яртыһын мейес алып торған иҫке өйҙөң шыҡһыҙлығы матур итеп йыйыштырылған мәктәп өйө менән сағыштырғанда бигерәк тә ныҡ күренә. Быйыл ғына институт тамамлап ҡаланан ҡайтҡан Ғирфанға был хәйерсе тормош ҡот осҡос тойолғандыр, әлбиттә. Өй тулы ваҡ бала: ни дәрескә әҙерләнә алмай, ни йүнләп ял итә алмай. Йонсоғандыр. Унан кире, мал ҡарау, утын-бесән әҙерләү кеүек ауыл эштәрен Ғирфан элек тә өнәмәй ине. Дипломлы йәш белгескә көнө-төнө ферма юлы тапаған, кейеменә генә түгел, тиреһенә силос еҫе һеңеп бөткән бисә менән йәшәргә лә ғәрлектер. Ғирфанды аңларға һәм аҡларға тырышып, ғәҙел булырға маташып ятҡан Мәрхәбәгә үҙе лә йәл. Күҙҙәренә тағы йәше төйөлә.

Шулай хәсрәткә батып ятҡанға, ҡыҙы Ғәрифәнең тороп йөрөгәнен абайламаған икән. Өндәшкәс, тертләп китте.

— Әсәй, иртәнсәк эҙләп ҡаңғырма. Эшкә кейгән итегең менән куфайкаңды мейес буйына индереп ҡуйҙым.

Ғирфан, тиҙәк еҫе һеңгән, тип Мәрхәбәнең

эш кейемдәрен өйгә индертмәй. Шунлыҡтан ҡараңғынан тороп фермаға киткән ҡатынға соланда боҙланып ҡатҡан бишмәте менән итеген кейергә тура килә ине. Балалар шуны күреп йәлләп йөрөгән икән. Ҡыҙғынаһының төн йөҙөндә шуны иҫләп, әсәһен ҡайғыртып йөрөүенә күңеле булды Мәрхәбәнең.

Ә бит үҙе Ғирфандың был ҡылыҡһыҙлығына артыҡ иғтибар ҙа итмәгәйне. Әллә уны беренсе синыфтан уҡ яҡшы белгәнгә, кәмселектәрен дә, күркәм сифаттарын да аңлағанға, ире үҙен кәмһетә, тип уйлау башына ла килмәгәйне ул саҡта. Хатта институт дипломы алһа ла Ғирфандың үҙенән аҡыл йәһәтенән артыҡ йыраҡ китмәгәненә иманы камил ине ҡатындың.

Нимә, нимә, уҡыуға бер ҡасан да барымы булманы иренең. Хатта институтта ла уның төшөнмәй ултырған ҡайһы бер мәсьәләләрен аңлатып ебәргеләй ине Мәрхәбә.

Ул үҙе мәктәптә иң алдынғы уҡыусы булды. Гел күренекле урында йөрөнө, төрлө фәндәрҙән үткәрелгән олимпиадаларҙа ҡатнашты. Ә Ғирфандың башы «өслө»нән сыҡманы. Уның байы сослоғо менән йылғырлығы биш кешегә етерлек ине. Арбау оҫталығы ла. Юғиһә, сәүкә күкәйе кеүек һипкелле, йомро битле малай елле егеттәр рәтендә йөрөй алмаҫ ине.

Елле тигәндән, һигеҙенсе синыфта уҡып йөрөгәндә ҡыҙыҡ ҡына хәл булды. БыҒаса ҡыҙҙар менән ултырмайбыҙ, тип ҡыу ғәләмәт сиккән малайҙар, үҙҙәре үк теләк белдерҙе. «Имтихан бирә торған йыл. Ярҙамдары тейер», — тип шул Ғирфан ҡотҡо һалған икән. Үҙе тиҙ генә Мәрхәбәне һайлаған.

Быға Мәрхәбә тәүҙә бик ныҡ ғәрләнгәйне. Ғирфанды эшкә һанамай маташыуы булғандыр. Аҙаҡтан оҡшатып киткәнен һиҙмәй ҙә ҡалды.

Ҡыҙ педагогия училищеһына барырға уйлағас, Ғирфан да ҡалманы. Бергәләп уҡый башлағайнылар, Мәрхәбәгә ҡайтырға тура килде, әсәһе ҡазаға осрап һуҡыр ҡалды. Ә Ғирфан, бер ингәс, этеп-төртөп булһа ла уҡып сыҡты, дөрөҫөрәге, уҡытып сығарҙылар.

Бала саҡ мауығыуы тәрән тойғоға әйләнгән Мәрхәбә егеттең хеҙмәттән йөрөп ҡайтыуын да көтөп алды. Өйләнештеләр. Башланғыс кластарҙы уҡытып йөрөгән ирен институтҡа инергә лә үҙе өгөтләне ҡатын. Дөрөҫ, ситтән тороп уҡыр, тип иҫәп тотҡайны. Тәүҙә ыжлап та бирмәгән ире тора-бара ныҡ дәртләнеп: «Уҡығас, уҡығас, өҫтөнә ятып уҡырға инде», — тигәс, ихтыяр ҡуйҙы. Дүрт баланы ҡарауҙы өҫтөнә алып, ирен «белем эстәргә» ҡалаға ебәрҙе. «Бына торған Эстәрле, аҙна һайын ҡайтып торор».

Бисәләр шунда уҡ:

— Ай-һай, Мәрхәбә, күңелең киң дә... Тик Ғирфаның юғары белемле булып алһа, һине һанлар микән?! — тип шикләнгәйне.

Борсолманы ҡатын. Үҙенә ышанғайны. Ә бит бына нисек килеп сыҡты.

Бер гәзиттән уҡыны ул аҙаҡ. Береһе белемен арттырып, икенсеһе артта тороп ҡалғанда бындай хәлдәр йыш була икән. «Юғарыраҡ баҫҡысҡа күтәрелгән кешенең офоғо киңәйә, мөмкинлектәре арта, шуға күрә ул үҫмәй ҡалған хәләл ефетенә киләсәккә юлды быуып торған тышау кеүек ҡарай башлай, унан ҡотолорға тырыша», — тип яҙылғайны унда.

Хәҙер үкенә Мәрхәбә. Шунда үҙенә лә тәүәккәлләргә булған. Йырып сығыр ине бер нисек. Ун йыл уҡыһа ла уҡыр ине. Исмаһам, Ғирфан ҡатнашҡан кешеләр менән аралашып, Ғирфан ҡайнаған тормошта буталып йөрөр ине. Ә ул, беребеҙ булһа ла күтәрелһен тип, ире менән үҙен үрелеп үҫкән, айырылыуҙы белмәҫ ҡуш ағастай күрҙе. Ир күңелен яҡшылыҡ менән арбап була, тип отолдо. Бергә булам, тиһәң, бергәләш, шыуышып булһа ла йәнәшәһенән үрмәлә. Шул аҡылды мәлендә биреүсе булмағаны ҡайһылай үкенес.

«Рәмил дә, килен дә уҡыуыбыҙҙы ташламайбыҙ, тигән булалар ҙа, — тип алыҫ көндәрҙең фәһемен бөгөнгөгә алып килеп бәйләп ҡуя Мәрхәбә. — Ир кеше уҡыр ул. Ә бына бәпәйҙәре булһа, әсәгә ауырға тура килер. Балаларын үҙем көтөп, уҡыуҙарын тиң бөтөртөрмөн инде».

Шулай итеп әле иртәгә, һабантуйҙан һуң ғына һоратырға барасаҡ килененең бәпесен ҡарарға уйлап та ҡуя Мәрхәбә. Ҡиленсәк булаһы ҡыҙҙың илгәҙәклеге лә, наҙлылығы ла оҡшай уға. «Ирҙе тота белер был һылыу. Минең кеүек иҫәүәнләнеп үҙ ҡулы менән яттарға тотторол ебәрмәҫ», — тип хуплай.

Ә Ғирфан теге кистән һуң кире ҡайтманы. Нисек сығып китергә белмәй баш ватып йөрөп, Мәрхәбәнең ҡылығын һылтау итеп алдымы, әллә кинәт кенә хәл иттеләрме?

Нисек булһа ла булды. Ҡатын өйҙә булмағанда әйберҙәрен генә инеп алды ла, уҡытыусы ҡатын менән матур итеп йәшәнеләр ҙә киттеләр. Уларҙың ҡултыҡлашып эшкә барыу-ҡайтыуҙарын, эшләпә кейгән ҡатындың башын Ғирфандың яурынына һала биреп килештереп үтеүҙәрен ауыл халҡы ирмәк күреп көлә торғайны. Мәрхәбә башҡа барып, туҙынып, тәмһеҙләшеп йөрөмәне. Әммә ауылдаштары биш балаһын тәрәүле өйҙә ташлап сығып киткән ирҙе яратманы ла ҡуйҙы. Ғирфан менән уҡытыусы ҡатын илла-алла менән уҡыу йылын бөтөрөп ситкә китергә мәжбүр булды. Теге ҡатындың тыуған районында, татар яғында төпләнмәксе булғандар икән, тип һөйләнеләр.

Иренең ҡайтырына өмөтөн өҙгән Мәрхәбәне Ғирфандың туғандары бик оҙаҡ ҡурсаланы. «Ағайым оҙаҡҡа сыҙамай ул, еңгәй. Ҡайтыр. Ул яҡтарҙы оҡшатмай, дорфалар, ти. Станцияға быларҙы ҡаршы алырға еҙнә тейешле кешеләре мәшәү, йүнһеҙ ат егеп төшкән, ти. Юл буйы шул малҡайҙы: «На, ялҡау «Башҡорт», — тип ярып килде. Тешемде ҡыҫып саҡ барып еттем, тип яҙған ағайым», — тип һөйләгәйне бикәсе.

Сәмсел Ғирфандың кире боролоп китмәй ул ауылға барып йәшәп ятыуына ҡарап, яңы ҡатынын бик яраталыр, күрәһең, тип һығымталағайны Мәрхәбә. Шуға уның бына-бына ҡайтып төшөрөнә артыҡ өмөтләнмәне. Ә бикәсенең һүҙе дөрөҫкә сыҡты. Яртылаш. Бер йыл сыҙанымы, юҡмы, ул ҡатынын да ташлап ҡайтты Ғирфан. Былай өйгә килеп күренмәне. Аша ауылда бер тол ҡатынға йортҡа кергән, тинеләр. Бик әрнене Мәрхәбә балаларының атаһының был ҡылығына. Үҫәләрме, ни хәлдә йәшәйҙәр, тип бер ҡыҙыҡһынмаһа, бер ҡыҙыҡһыныр ине кеше!

Ул арала балалар ҙурайҙы, тормош еңеләйҙе. Ҡумаклашып Мәрхәбә йылдар буйы бәхеттең һынланышы кеүек күҙ алдына килтер-

гән йорт өсөн тәүҙә нигеҙлек, унан буралыҡ, иҙән-түшәмлек тупланылар. Әле бына балалары үҙҙәре бала-сағалы булып ситкә һибелгәндә уларҙы яландай өйҙә ҡунаҡ итермен тигән хыялы тормошҡа ашып тора.

«Рәмилдең туйын үткәргәндә йөҙ ҡыҙартырға, ҡоҙа-ҡоҙағыйҙарҙы тырым-тыраҡай өләшергә тура килмәйәсәк, — тип уйлай Мәрхәбә ҡыуанып. — Бәлки...»

«Бәлки» ти ҙә, уйын быуа. «Саҡырһаҡ, бәлки, Ғирфан да килер. Бәхетең булып, табын түрендә хужаң менән парлашып ултырһаң ине ул», — тигән хыялын хатта үҙенә лә белгертергә ирек ҡуймай. Шулай уйға сумып ята торғас, июндең ҡыҫҡа төнөн алһыу таң ҡыҫырыҡлап, торор ваҡыт та етә.

...Иртәнге сәйҙе яңы өйҙә, аҫалы балаҫ өҫтөнә түшәлгән оло табын янына түңәрәкләп ултырып эстеләр. Оло улы ла ҡайтып өлгөрҙө. Һөйләшеп һүҙҙәре бөтмәне. Унан гөрләшеп һабан туйына киттеләр. Ҡискә табан ҡыҙ һората барырға булғас, ныҡ оҙаҡламанылар, уйын-көлкө һүлпәнәйеү менән өйгә ыңғайланылар. Хәйер, йәштәр ҡалды, Мәрхәбә ашыҡты: әллә нишләп түҙгеһеҙ итеп эсе яна. Түңгә күтәрелеп, ауыл күренеү менән «Жигули»ҙың рулендә ултырған оло улы:

— Әллә Гөлфайза инәй беҙҙең мунсаны яҡҡан инде?! — тип ҡуйҙы.

Ҡапыл йөрәге һертләп киткән Мәрхәбә үрелеберәк ҡарап:

— Мунса төтөнөнә оҡшамаған ул. Өй тапҡырынан сыға түгелме?! Тиҙерәк ҡайтайыҡ әле, — тип хәүефләнде.

Яңы өйҙөң асмалы тәҙрәһенән ҡара төтөн урғылып сыға. Ишеккә йүгерҙеләр. Уны кемдер балта менән шаҡарып асып ингән. Өйгә инеү менән танауға бензин еҫе лә бәрелде. Төтөн. Күҙ асҡыһыҙ. Ҡулға нәмә тура килә шуның менән ҡаралдыларҙы, стеналарҙы ялмаған ялҡынды һүндерергә керештеләр. Ул арала дөбөр-шатыр кешеләр килеп тулды. Ярты сәғәт эсендә янғынды һүндерҙеләр һүндереүен дә, күҙ алдында ҡот осмалы күренеш асылды. Иртәнсәк кенә сәскәле болон шикелле сағыу, сынъяһау өй ҡара торомбашҡа оҡшап ҡалған. Барлыҡ ҡаралды янып бөткән тиерлек.

Өйгә күҙ-ҡолаҡ булырға тип ҡалған Гөлфайза әбей ҡара көйгән Мәрхәбә янында ни ҡылырға ла белмәй өйөрөлә.

— Ҡартуфлыҡҡа ҡорт сүпләргә генә төшкәйнем. Бер өрәк кеүек бәндәнең баш баҫып туғай яғына үткәнен абайлау менән кире сыҡҡайным...

— Ниндәй өрәк ул? — тип һиҫкәнде әсәһенә йөрәк дарыуы эсереп торған Ғәрифә. Әллә ҡайҙан килеп инеп Нәғим менән һөйләшеп торған ике милиционерға барып әйтте. Әбейҙән ул шикле кешенең ҡиәфәтен һораштыра һалып, ирҙәр туғай яғына ашыҡты.

Бер аҙҙан бәләкәс кенә канистр тотоп Нәғим кире килде.

— Туғайға сытыр араһына бырғап киткәндәр, — тине ул. — Табылһын ғына, үҙен бензин һибеп үртәйем мин ул ҡәбәхәтте!

Башҡаһы башҡа — иҫке өйҙөң нигеҙе буйында башын һәлендереп ултырған Мәрхәбәгә ҡарауы йәл ине. Һабантуйҙан һуңғараҡ ҡалып ҡайтҡан Рәмиле һөйгәне менән алдына килеп тубыҡланғас ҡына башын ҡалҡытып:

— Ярар, ҡайғырмағыҙ. Донъя малы — дуңғыҙ ҡаны ул — тигән булды. «Их, Ғирфан күреп өлгөрмәне...» — тигән үкенес килде йәнә күңеленә.

Ул арала милиционерҙар бер өлкән генә ирҙе ике яҡтан беләгенән матҡып тотоп алып килде. Өлкәнерәктәр, яҡынайыу менән, был йонсоу бәндәлә Ғирфанды сырамытты.

— Юҡтыр. Булмаç, — тип шыбырҙаштылар.

— Ул, ул. Ғәйебен таныны инде, — тине милиционерҙарҙың береһе. — Бына бит кейемендә бензин еçе аңҡып тора. Ҡойонғанһың да инде, абзый, ә! Әллә үҙеңә лә ут төртмәксе инеңме?

— Төртөрһөң дә, — тип көтмәгәндә телгә килде бүре кеүек уçал ҡарап торған Ғирфан. — Шыңғырҙап торған ҡандай донъяны ҡалдырып киттем, әле килеп «атай» тип һүҙ ҡушыусы юҡ. Шуға үс итеп эшләнем.

Бер һүҙ ҙә әйтә алмай шаңҡып ҡарап ҡатҡан Мәрхәбәнең ялҡынһынған тәненә бер биҙрә боҙло һыу түңкәрҙеләрме ни?! Һиçкәнде. Әйтерһең дә, алдындағы томан таралды ла, ул йылдар буйы әсенә-үкенә һағынған Ғирфандың сөрөк булмышын ап-асыҡ күрҙе. Бер һүҙ ҙә өндәшмәй кире боролдо, әле һаман төтәй бирееп торған өйгә инеп китте. Ҡазаның ҡуләмен байҡаны. Ҡаралдыға, йыһазға ҡарарлыҡ та түгел. Ә бына стеналар ныҡ янмаған, ялҡын алтынһыу бүрәнәләрҙе көйҙөрөп кенә өлгөргән.

— Көйгән ағас серемәй, — тип ҡуйҙы Мәрхәбә булмышында ниндәйҙер сәйер еңеллек тойоп. Гүйә ғүмер буйы йөрәген өткән утлы ҡулса юҡҡа сыҡты.





## БӘХТЕЙӘР

*Хикәйәт*

Таң һыҙылып килгәндә бер һыбайлы урман ялпыһына һыйынып ҡына иҙерәп йоҡлаған йәйләүҙән һыпыртып сығып китте.

Оло башын сайҡап ирәбе юртҡан тосораҡ ботло айғыр ҙа, йүгәне менән эйәргә бәйләнгән бейә лә, унының артынан ҡалмаҫҡа тырышҡан ҡолонсаҡ та, эйәрҙәге ун дүрт йәшлек үҫмерҙең маҡсатын уртаҡлашҡандай, күндәм елдерә. Ялтыр күҙҙәре, хәйләкәр мороно, кәкре ҡойроғонан уҡ елбәҙәклеге күренеп торған эте лә, холҡон ситкә ҡуйып, тояҡ эҙҙәренә баҫып ҡына саба. Ә инде йылан башы һымаҡ ырылған эйәр ҡашына ҡунаҡлаған шоңҡарҙың тәкәбберлеге — булмышынан.

Эйәренә ҡуша ҡойолғандай нык, төҙ ултырған һыбайлы йәйләүҙән сыҡҡан оло юлдан бер саҡрымдай бара биргәс, ҡапыл ҡайырылып, тау һуҡмағына төштө. Бер аҙҙан юлһыҙ-ниһеҙ аҫҡа, һөҙәккәрәк тартылды, унан йәнә ташлы һуҡмаҡҡа боролдо. Уйы — әҙ яҙлыҡтырыу, үҙен ҡыуа төшәсәк кешеләрҙе албырғатыу. Гел генә ташлы һуҡмаҡтан үрмәләр ине лә, ҡолонсаҡтың ҡатып бөтмәгән тояҡтары йәл. Айғыр менән бейә өсөн борсолмай былай — саф тоҡомло башҡорт аттарының тояҡтары саҡма таш ише ҡаты була.

Иртәнге һалҡында сос барырға, йәйләүҙән алыҫҡараҡ китергә тырышҡан үҫмер ҡояш күтәрелеү менән ирәүәнләнеп китте. Тумалаҡ тауҙар араһындағы яланға килеп сыҡҡайны, билбыуарҙан үҫкән бесән араһынан фырлап ике ҡор күтәрелде. Һыбайлы, һунар ҡомарына бирелеп, уҡ-һаҙағына уҡталғайны ла, икенсе нәмәгә әүрәне. Ат тояғы аҫтынан ғына ике ургуян һикереп сыҡты ла, туйтаңлап тауға ырғылды. Йүгереүҙәре шул тиклем мәрәкә. Һиләүәт тормоштан шартларҙай булып һимергәндәр — саҡ баралар мыйҡылдап.

Алабай түҙмәне: ҡуяндарҙы баҫтыра төштө. Һыбайлы ла сыҙаманы, әсе һыҙғырып айғырын ҡыуҙы. Ҡуяндарҙың береһе, ситкә тайпылып, тубылғы араһына сумды. Ә икенсеһе, уң ҡолағының осона ап-аҡ тап төшкәне, тау күкрәгенән һыҙылған һуҡмаҡ буйлап елдереүен белде. Әгәр ҙә эте көнө буйы әлһерәп сапмаған булһа, бер ырғыуҙа ялпаштыра ине мәхлүкте. Былай ҙа артҡы тәпәйенән ана эләктерәм, бына эләктерәм тип бара. Ике йән эйәһе баҫтырышып һә тигәнсе тау башына артылды ла күҙҙән юғалды. Улар артынан сапҡан һыбайлы ла өҫкә менеп етте. Ҡараны ла шарҡылдап көлөп ебәрҙе. Ҡылый күҙ оҙон аяҡтарына буталып, йомғаҡ кеүек тау түбәненә тәгәрләй, ә эт, был ни ғәләмәт тигәндәй, телен һәлендереп тик тора. Әйтерһең дә, аңшайып ҡатҡан аңра малай.

Һыбайлы бер аҙ тау башынан асылған матурлыҡҡа хайран ҡалып тормаҡсы ине, мәгәр, сәфәренең хәтәрлеге иҫенә төштө. Шуға күрә атының бөйөрөнә тибеп түбәнгә юртыр-



9 Заказ 343

ға уҡталды, тау битләүен тотош ялмап алған сейәлеккә туҡталмай булдыра алманы. Тамылйып бешкән емештәр суғым булып, әйешеп ултыра. Үҫмер атынан һикереп төшөп бер ус сейә ҡапты. Ләззәтләнеп: «Зәңге ҡас, Иҙел кис, иҫке ауыҙға яңы аш», тип һамаҡлап йәнә, йәнә татлы һутты имде. Бары шунда ғына үҙәге өҙөлөп асыҡҡанын да, талсыҡҡанын да тойҙо. Тау итәгендәге тарбаҡ имән янына аттарын ебәреп, кеҫәһенән көлсә сығарҙы. Сейә ҡушып ашаһаң, ҡайһылай тәмле!

Күҙе генә эленгәнмелер, байтаҡ йоҡлағанмы — эргәһендә генә меңгөрләшкәнгә уянды. Ҡыуаҡ араһынан тауыш килгән яҡҡа ҡараны: йөрәге жыу итеп китте. Ике һыбайлы ҡамсылары менән ботаҡтарҙы үҙ яғына тартып, аттан төшмәй генә сейә ашай.

— Бала кешеһе бынан уҙып китә алмағандыр. Ошо тирәне яҡшылап ҡарайыҡ, — ти уларҙың ҡартырағы. Икенсеһе, өҙәңгеһе менән атының бөйөрөнә тибеп, аҫҡараҡ төштө лә малай боҫҡан ҡыуаҡтың иң суғым ботағын һындырып алды. Шул тиклем ашауға тейешмәйсә, эйелеп ҡараһа, эҙләгәнен табыр ине, билләһи.

— Ошо юлдан китһә, Оморҙаҡ ҡартҡа барып еткәнсе туҡтамаҫ. Ҡара тырыш бит ул. Йөрөй инде бынау эҫелә кеше ҡаҡшатып, — тип һөйләнде сейә тештәрен фырылдатып өрөп.

— Ураүҙан киткән булып Һеләүһендәрҙең ҡулына эләкһә ярар ине, — тине өлкәне.

— Байбисәнең бүләге — бер дүнән — беҙҙең дә эсте тишмәҫ ине, ә?! — тине йәшерәге.

Бүләк хаҡында иҫләп йәһәтләнеләр. Ҡото табанына төшкән юламан иһә улар байтаҡ



киткәс кенә ҡыбырҙарға баҙнат итте. Артабан барыуҙың хәүефле икәнен, үҙен ҡыуа төшкән һыбайлыларҙың теләһә ҡасан кире боролоу ихтималын уйланы ла ныҡлап ял итмәксе булды.

Ул һыҙғырыуға әллә ҡайҙа ситкә китеп тамаҡ йүнәткән Алабайы ҡойроғон ялпылдатып килеп етте. Аттары иһә түбәнгә үк төшөп, сөптөрҙәп кенә аҡҡан шишмә буйында утлаған икән. Үҫмер үҙен Хоҙай ғына аралап алып ҡалғанына ышанды. Тәүге тоҙаҡҡа ҡапмағанына күңеле күтәрелде.

Баҫтырыусылар көн кискә ауышҡас, һәлпәнләп кенә юрттырып уҙҙы. Береһе сейәлеккә туҡталмаҡсы ине лә, өлкәне ихтыяр итмәгәс, эйелеп бер нисә суғым ботаҡты һындырып алып ары сапты. «Бисәләрҙе ебәрер кәрәк», — тигән тауышы ишетелде. Түҙемһеҙләнеп уларҙың үтеүен көткән юламан тиҙ генә айғырын эйәрләне. Ял итеп алған аттар солоҡсо Оморҙаҡ ҡарттың биләмәһенә тиҙ үк килеп етте. Үҫмер уларҙы аулаҡтараҡ тышаны ла, этенә шым ятырға ҡушып, ҡарттың йыуан ҡайын төбөндәге ситән аласығына яҡынлашты. Сит-яттар ҙа, бабай ҙа күренмәй. Алан-йолан ҡаранып торған үҫмер, яурынына төшкән ҡулдарҙы тойоп, һикереп китте, тик һуң ине инде. Улар ҡыпһыуыр кеүек матҡып тотоп алды. Баҙап ҡалған үҫмерҙең ҡолағына:

— Сослоҡ етмәй, егет, сослоҡ етмәй, — тигән яғымлы тауыш һары май кеүек яғылды.

— Олатай, — тине ул, ҡыуаныcынан балҡып.

— Ҡарт кешене мәшәҡәткә һалғаның өсөн ҡолағыңды борор кәрәк, — тип геүелдәне

ҡарт. — Көнө буйы һине баҫтырып йөрөгән уҙамандарҙы ҡаршылау-оҙатыуҙан бушамаһым.

— Сәхиулла бабай менән Үлмәҫйәнде күрҙем мин, — тине Үҫмер.

— Уларҙан һуң кемдәр генә килмәне. Һуңғыларын яңы оҙаттым. Әйҙә, эскә инәйек әле. Һелкәүҙәренең саҡ килеп етеүе бар. «Көҫәпҡол тархандың төпсөгө Бәхтейәрҙе тотоп алып ҡайтыусыға — бер дүнән», — тигән хәбәр кемдең күңелен елкендермәй тиһең. «Танау аҫты кипмәгәнен белмәй, кәләш эҙләп сығып киткән ул малайҙы һә тигәнсе тотабыҙ», — тип шапырыналарҙыр әле үҙҙәре.

Ҡарттың шуҡ ҡына күҙ ҡыҫып әйткән һуңғы һүҙҙәре Үҫмерҙең сәменә тейһә лә, ҡылтаймайса сыҙаны. Күпте күргән ҡарттан күпте һорашырға кәрәк ине уға.

Аласыҡҡа уйынсаҡ кәйеф менән инеп киткән ҡарт, Бәхтейәр менән (Үҫмер Көҫәпҡол тархандың төпсөк улының үҙе ине) һөйләшкәндән һуң етдиләнеп, хатта хәүефләнеп сыҡты. Үҫмергә яратып ҡына түгел, ихтирамлап, тиң күреп ҡарай. Ә Бәхтейәрҙе танырлыҡ та түгел: йомшаҡ күндән нағышлап тегелгән затлы кәзәкейен, итектәрен сисеп, һәләмәләр кейгән. Үҙ кейемен таҫлап төрөп, төйөнсөктө эйәренә таҡҡас, етеҙ һикереп атына атланды.

— Бик ышанғың килгән кешеләргә лә сиселмә. Тархан улын эҙләргә сыҡҡан ялсымын, тип таныт үҙеңде. Әсәйеңдең бүләгенә ҡыҙытып танығыусылар күп булыр. Оморҙаҡ бабаңа тиклем дүнәнле булырға атлығып торғанда... — тип йылмайҙы. — Аттарың шәп. Уларға ла күҙ атыусылар күп булыр инде. Ярар, хәйерле юл. Төндә Тимер Ҡаҙыҡҡа ҡарап бар. Ул



гелән уңда ҡала килһә, дөрөҫ бараһың. — Ҡарт көрәктәй ҡулдары менән Бәхтейәрҙең арҡаһынан һөйҙө лә айғырҙың осаһына һуҡты. — Шыпа яңғыҙ булмаһаң, ҡана ла һуң, — тине үкенеп.

Ярһып бейеп торған аттарын ҡеүәтләп, төн ҡосағына инеп киткән Бәхтейәрҙең артынса һоҡланып та, ҡыҙығып та, хәүефләнеп тә ҡарап ҡалды бабай. Күп кисерештәр үткәргәнгә, йөрәк майы һыҙылып ҡына әрнеп, булмышына шом һалды.

Ҡайын туҙына Оморҙаҡ бабай төпсөрләп һыҙып биргән билдәләргә ҡарап барҙы ла барҙы Бәхтейәр. Төн уҙып, таң һыҙылғас, талсыҡҡан айғырынан төшөп, бейәһен эйәрләне. Көндөң яман эҫеһендә генә ялға туҡтап ала ла тағы алға китә. Яҡтыла аулаҡтаныраҡ барғанғамы, шикле кешеләр осрамаһы. Яңғыҙлыҡтан ялҡып, йән дуҫы Алламоратты ҡат-ҡат уйланы. Әсәһе үлем түшәгендә ятмаһа, әле эргәһенән юрттырып, әле бер, әле икенсе нәмәнән мәрәкә табып, көлдөрөп килер ине.

Бары тәбиғәттең хөрлөгө, хайуандарының тоғролоғо ғына күңелен төшөрмәҫкә ярҙам итте. Ат ҡайһы бер әҙәмдән дә аҡыллыраҡ бит ул. Мөлдөрәп күҙеңә ҡарап торғанында бына-бына телгә килер ҙә күңелендәген асып һалыр кеүек.

Бер заман йөҙ йылға кисеп, йөҙ тау артылғандай тойола башланы. Өйҙән сығып киткәне бирле һанап, ҡамсы һабына киртеп һалған билдәһе етегә тулыуға тирә-яҡ тәбиғәт ҡырыҫланды. Ҡарағайҙар тәүҙә берәм-һәрәм осраштырһа, хәҙер икһеҙ-сикһеҙ урманға әйләнде. Бәхтейәргә еңгәһе Гөлйөҙөм ошо

урмандар, ҡарағас сайыры, ҡырмыҫҡа айыуының мәрәкәләре хаҡында йыш һөйләй торғайны.

Төбәп килгән еренә яҡыная барған һайын Бәхтейәр соcлоғон арттыра барҙы. Уҡ-һаҙағын йәтешләне, сарыҡ кунысына йәшергән хәнйәрен йыш-йыш ҡапшаны. Был яҡтарҙа үтә лә һаҡ булырға кәрәклеге көсөргәнеш бирә, шуға тиҙ арыҡҡандай. Хәйер, Оморҙаҡ бабайҙың һыҙмаһына ҡарағанда, тағы ла байтаҡ юл үтәһе бар әле.

Ҡарайып, шомландырып күренгән ике оло тау былай яҡын да кеүек. Юламан, исмаһам, бер төндө тынысыраҡ ерҙә үткәреп, хәүефле билдәһеҙлек алдынан ял итмәксе булды. Йылға буйындағы әрәмәлеккә туҡтап, атынан эйәрен ала башлағайны, үҙәк өҙгөс ҡысҡырыу ишетеп һағайҙы. Бала тауышы! Шул тиклем ғазаплы ауаздар.

«Ҡараттар!» — тигән уй зыу итеп башынан үтте. Иң тәүге теләге — тиҙерәк алыҫҡараҡ китеп ҡотолоу булды. Ә теге бахырсыҡ йән өшөткөс итеп аҡыра. Әҙәм түҙгеһеҙ ғазаптан ғына сыға ундай әрнеүле тауыш. Бәхтейәр балтаһын йәтешләп тотто ла шул яҡҡа ҡарай сапты. Туғай үләне шәп, ат бауырынан, уралып ята. «Яза урынына уҡ кеүек барып инермен дә, исмаһам, бер йәлләттең йәнен ҡыйып үлермен», — тип ниәтләп бара юламан. Аҡлан кеүек ергә килеп сыҡһа — ҡамышлы, һаҙамыт ерҙә бер торна ҡысҡырынып оҙон муйынын болғай. Ә йоҙроҡ ҙурлыҡ ҡына бер йәнлек уның муйынын ҡармап алған да ажарланып сәйнәй. Әллә ниндәй яуызлыҡҡа әҙерләнеп килгән Бәхтейәрҙең күңеле әҙәм аламалығы тап булмауға йылынып китте. Елде-



реп килгән ыңғайға йәнлекте торна муйынынан йолҡоп алып ҡараһа — йәтсә. Гонаһһыҙ ҡошто ыҙалағанға, үҙенең ҡотон алғанға үсәп, уны әллә ҡайҙа бырҡтырҙы. Ҡанһыраған торнаның яраһын ҡараны. Ҡурҡыуҙан, ғазаптан әлһерәгән ҡош ҡарышырға уйламаны ла. Йәрәхәте үлемесле түгел ине.

Был мажаранан йөрәкһенгән Бәхтейәр ҡуналҡаға туҡтау уйынан дүнде. Аттарын ашатып, ҡымыҙ эсеп алды ла, яңынан ҡуҙғалды. Шуныһы йәтеш: ай тулып килә. Тик төндәрен һалҡынайта. Йәйҙең көҙгә ауышыуы үҙен һиҙҙерә. Бәхтейәр инде нисәнсе тапҡыр Оморҙаҡ ҡартҡа рәхмәт уҡып, уның һырмаһына төрөнә. Өйҙән сығып киткәндәге кеүек ҡупшы йөрөһә, бөлөр ине. Үҫмер йылынып өсөн атының муйынынан ҡосаҡлап ятты ла, теҙгенде бушатып, айғырын үҙ ыңғайына ҡуйҙы.

Ҡупме йоҡлағандыр, бер мәл тертләп уянып тирә-яғына ҡаранды. Талсыҡҡан айғыры йыуан ҡарағайҙың төбөнә үк туҡтаған. Алабай менән ҡолонҡай ергә ята һалған. Бейә лә башын һәлендергән килеш аяғөҫтө юшап тора. Бәхтейәр ойоған аяҡтарын саҡ яҙып ергә һикереп төштө. Ҡукрәктауға алыҫ ҡалмаған. Аттар хәл алһа, бер ынтылыу менән барып етерлек. Аттарын тышаулап ебәргәндән һуң үҫмер тирә-йүнде байҡарға кереште. Урын бик аулаҡҡа оҡшаған. Аҫҡараҡ төшһәң, соҡор икән. Унда билдән сырмалсыҡ үҫкән. Сөмбөрҙәп кенә шишмә ағып ята. Уң ҡулдараҡ сосайып торған ҡая янында әтмәкәй ашап йөрөгән ерҙән бер бәләкәс кенә мәмерйәгә тап булды. Ҡукшелләнеберәк торған Ҡукрәктауға ҡарап, уның аръяғында үҙен нимәләр көткәнен самалап торған Бәхтейәрҙең

башына бер уй төштө. Артыҡ-бортоҡ әйберҙәрҙе, бейә менән ҡолонсаҡты, шоңҡарҙы ошонда аулаҡта ҡалдырыу хәйерле.

Төшкә тиклем артабанғы сәфәренә әҙерләнде. Бер нисә тапҡыр бейәне бәйләп, турһыҡты тултырҙы. Балыҡ тотто. Ҡор атып алып, усаҡта ҡыҙҙырып ашаны. Ризыҡ наҡыҫлланғандан-наҡыҫлана. Артабан нисек булыр? Нимә бар был тауҙар аръяғында? Нимә көтә? Бейәһе имен булғанда һаумал ҡымыҙға аптырамаҫ, тик кире килергә форсат ҡасан сығыр әле? Ҡөн үҙәгендә мәмерйәнең рәхәт һалҡынында ятып хәл йыйып алды ла, Алмасыуарына атланып, артабан китте.

Тауҙы артылыу менән бөтөнләй башҡа донъяға эләккәндәй булды. Ҡарағай урманы өҫкә ауып килгән кеүек. Бәхтейәрҙең тыуған яҡтарындағы кеүек иркенлек, яҡтылыҡ юҡ. Хәүефле, шомло, шул уҡ ваҡытта иҫ киткес матурлыҡ. Бәләкәй генә шарлама йылға буйлап бара торғас, ҡаяға килеп төкәлде. Шул тиклем текә, бейек. Башыңды ҡалҡытып ҡараһаң, таҡыяң ҡолап төшөрлөк. Тәбиғәттең шундай ҙа мөғжизәһе була икән! Үҫмер бөтөнләй аптырап ҡалды. Ошо тиклем тау-таш араһынан ҡоҙағыйҙарының йәйләүен нисек эҙләп табырға? Тыуған яҡтарында әле яландар гөрләп тора ине. Ә бында һүҙ ҡатырлыҡ кеше-маҙар күренмәй. Күҙ бәйләнә башлағайны инде. Бәхтейәр артабан барырға ҡыймады. Айғырын ебәрҙе лә урман ситендәге йыуан ғына бер ҡайында үҙенә урын әҙерләне. Оҙон үлән араһында, йылға буйында, ергә ятырға шикләнде. Һаҡланғанды — һаҡлармын, тигән.

Сәйер ҡыштырҙауға уянып киткәйне, башындағы етеү сәстәре ҡапыл үрә тороуҙан таҡыяһы төшә яҙҙы. Ҡот алынмаҫлыҡ түгел, үҙенә һәндерә яһап ятҡан ҡайындың бер яҡ ботағына аҫылған ҡымыҙлы турһыҡҡа табан бер йөнтәҫ ҡараҫҡы үрелә. Айыу тиер инең, килбәтһеҙ түгел, мышнағаны ла ишетелмәй. Бәхтейәр ҡурҡышынан таш һын кеүек ҡатты. Шул саҡ болот араһынан аҙға ғына ай күренеп ҡалды. Уның яҡтыһында йөнтәҫ тире аҫтынан килеп сыҡҡан нәфис кенә, бәләкәс кенә ҡул күренде. «Бисура! — тигән уй ялтлап үтте Бәхтейәрҙең башынан. — Бәрей ҡыҙы!» Абыстай былдай саҡта уҡый торған доғаны ла өйрәткәйне. Тик кәрәк саҡта иҫкә төшәмени ул!

Ағас телен саҡ әйләндереп, исмаһам, бисмилла, тип ҡысҡырмаҡсы итә — тауышы юҡ. Шул арала һырма кеҫәһендә ҡулы бер йомро нәмәне ҡапшаны — ҡарағай тубырсығы. Ә теге матур ҡул оҫта ғына итеп турһыҡтың бауын сисеп маташа. Күҙ терәп торған берҙәнбер ризыҡ — ҡымыҙҙы бисураға биреп ебәрергә әллә, тип йәне көйөп, теге тубырсыҡты бисмилла әйтеп тороп бәргәйне, бәрей хас ҡыҙҙар кеүек сәрелдәп ситкә һикерҙе, тик барыбер турһыҡты ысҡындырманы. Уны ҡурҡытыуына дәртләнгән Бәхтейәр ағастан һикереп төшкөләгәнсе, ҡараҫҡы ҡаяға табан йүгерҙе. Үҫмер ҙә унан ҡалманы, сарығын сисеп ялан аяҡ ятҡанына ҡыуанып, шаптыршоптор йылғаны кисеп сығыуға бәрей ҡаяға терәлде лә осоп та китте. Күҙ менән ҡаш араһында осоп, ҡараңғыла юҡҡа сыҡты. Таң һыҙылғансы һәндерәһендә өшөүҙән дә, хәүефтән дә ҡалтыранып сыҡҡан Бәхтейәр яҡтырыу менән төшөп эҙҙәрҙе ҡарарға кереште.

Үләнде кистән үк үҙе тапап бөткән, йылға буйында ҡырсын, ҡая эргәһендә — таш. Ҡайҙан булһын инде бында эҙ. Ентекләп ҡаяны ҡарап сыҡты. Яҡында ғына үҫкән бер ҡарағайға ла менеп төштө. Берәй ек кенә булһа ла күренһәсе! Төндә һаташҡанмын тиер ине — турһыҡ юҡ. Аптыраҡ. Бер ҡыразда үҫкән ҡурай еләге менән генә тамаҡ ялғап, артабан китергә тура килде. Ҡайҙа ҡарама — урман да урман. Исмаһам, бер кеше осраһасы! Бер ерҙә ҡырмыҫҡа айыуының әүһелдәгәнен ишетеп ҡалды, әллә нисә тапҡыр ҡоралай өркөттө. Ә бер йылға буйында — ун боттай булыр — ҙур ҡабан сусҡаһы янына барып сыҡты. Уныһы һарыҡай ғына балаларын ҡурсалап, башындағы күкшел төктәрен тырпайтты ла әллә нисек китеп барҙы. Ташланһа — бөттө баш ине.

Тоноҡ ҡына бәләкәй йылғала туҡтап балыҡ тотмаҡсы булды. Ҡымыҙ һыуһынды ҡандыра, әллә ни асыҡтырмай ҙа. Тик юҡ шул, юҡ ҡымыҙ. Эстән генә төнгө бәрей ҡыҙын әрләй-әрләй, Бәхтейәр балыҡ тоторға әҙерләнде. Алмасыуарының ярһып кешнәгәненә яр башына йүгереп сыҡты. Ян-яҡҡа ҡаранды. Айғыры үрәпсеп, тыпырсынып, ялына йәтсә кеүек йәбешкән бер әҙәмде ырғытырға маташа. Тегеһе лә бирешмәй. Итегенең үксәһе менән аттың бөйөрөн тызып, үҙ ихтыярына буйһондорорға тырыша. Бына Алмасыуар, әкиәттәге дөлдөл кеүек тояҡ аҫтындағы үләндәрҙе тупрағы-ние менән сәсрәтеп, ҡаршы яҡтағы ҡарағайлыҡҡа сабып инеп китте. Атының яһиллығын белгән Бәхтейәр ҡараҡты үсәп шарҡылдап көлөп ебәрҙе. Ҡурҡыштан ыштан төбөң бысрана хәҙер! Алмасыуар иһә



күҙенә аҡ-ҡара күренмәй йыуан бер ҡарағайға ҡарап туп-тура сабып барҙы ла инде бәрелде тигәндә, ҡапыл янтайҙы. Һыбайлының бото ярайһы ғына умырылды булырға тейеш. Әммә ул үләмме, ҡаламмы тигәндәй ялға сытырман йәбешеп, атҡа һеңгән кеүек ултыра.

Алмасыуарҙың ят еҫтән ытырғаныш шартлар хәлгә килгәнен күңеле менән һиҙгән Бәхтейәр, малҡайҙың сабырлығын һынау етте, тип уйланы. Һары бейәгә оҡшатып кешнәп ебәрҙе. Дауыл шикелле ажғырып сапҡан айғыр, керпек елпер бер мәлгә генә шып туҡтаны ла тауыш килгән яҡҡа ҡапыл боролдо. Үҙенә ҡаршы сыҡҡан хужаһының эргәһенә килеп етеү менән төкөрөктәрен сәсеп, йән асыуы менән осаһын сойорғотҡайны — өҫтөндәге ҡараҡ әллә ҡайҙа осоп барып төштө. Рәнйегән ат ул бахыр мәхлүкте иҙә тапап ташламаһын йә тибеп осора күрмәһен, тип тиҙерәк айғырҙың муйынынан ҡосаҡлап алды Бәхтейәр. Ҡолағына иркә һүҙҙәр бышылдап, һыйпаштырып тынысландырҙы. Малҡайҙың тын алышы тигеҙләнгәнен тойғандан һуң ғына уғры янына барҙы.

Салҡатан килеш ергә ялпашып барып ятҡан дошман — Бәхтейәрҙең үҙе кеүек ун дүрт-ун биш йәштәр тирәһендәге малай ине. Һапһары сәсле урыҫ малайы. Өҫтөнә хәрби кейем кейгән. Һәйбәт буҫтауҙан тегелгән салбар, аяғында итек. Ҡарат малай! Ҡоҙағыйҙарҙың йәйләүҙәрен талап йөрөгән ҡанһыҙ яҙалаусыларҙың береһе. Алдында хас дошман ятҡанын белә тороп та Бәхтейәргә һәләк ҡыйын булып китте. Тегенең танауынан ағып сыҡҡан ҡыҙыл ҡандан күңеле болғанды. Иплэп кенә күкрәгенә башын терәне: йөрәге леп-

леп тибә кеүек. Унан берәмтекләп һәр ағзаһын теүәлләп сыҡты. Бер ҡулының быуыны сыҡҡанға оҡшаған, уң аяғы һынған, шикелле. Шулай мәшәҡәтләнгән арала ла сос ҡолағы яҡында ғына ат кешнәгәнен ишетте. Алмасыуар ҙа ҡолаҡтарын ҡайсылатып һағайған. Ахыры, караттар, малайҙың юғалғанын абайлап, кире боролған. Тәүге ынтылышы малайҙы ошонда ҡалдырып китеү булһа ла, ниндәйҙер тойғо Бәхтейәрҙе тотҡарланы. Оҙон үлән араһында табалармы, юҡмы. Ҡеше итә алаларма, юҡмы — уныһы ла бар. Һәр кем дә быуын ултыртыуға маһир түгел. Өләсәһе осҡа булмаһа, Бәхтейәр үҙе лә бер ни белмәҫ ине. Ни булһа булды, өлпәй сәсле урыҫ малайын елпелдәтеп күтәреп атҡа арҡыры һалды ла бейәһен ҡалдырған аулаҡ төбәккә һыпыртты Бәхтейәр.

* * *

Шешенеп барған быуынын һамаҡлай-һамаҡлай имләп маташҡанда урыҫ малайы һушына килде. Зәңгәр күктең ике тамсыһы тамған кеүек ине күҙенең ағына. «Матур була икән дә урыҫ күҙе», — тип һоҡланып баҡты Бәхтейәр. Тегенең ирен ҡыбырҙатыуынан һыу һорағанын аңлап, турһыҡтан бер нисә тамсы ҡымыҙ тамыҙҙы. Үҙе, нисәнсе ҡат инде, йәйләүҙән киткәндә ике турһыҡ сәлдергәненә ҡыуанды.

«Әлегә етер», — тип ымлап белдерҙе. Атаһына килгән урыҫтарҙан — тылмас-писарҙан — уңайы килгәндә бер аҙ русса өйрәнгәйне. Гелән ҡабатлап тормағас, онотолған. Шуға дөрөҫ әйтеренә шикләнде, «тик ят» тигәнде ишара менән генә аңлатып, ҡул быуынын йәнә иләп кенә һыларға кереште. Шулайтып, ярһыуын баҫып, алдаштыраһың да, ҡапыл тартып, урынына ултыртаһың. Тик малай уғата сыҙамһыҙ булып сыҡты: ҡолаҡ ярғыс итеп аҡырып ебәрҙе лә ҡабат иҫен юйҙы. Әммә Бәхтейәрҙең уның ыңғайына ихтыярһыҙланып торорға форсаты юҡ ине. Һул аяғының быуынын да шул рәүешле төшөргәс, һынған кеүек күренгән уң аяғын ентекләп ҡараны. Ҡапшауға беленмәй, бәлки, сатнаған ғыналыр тип, алдан әҙерләгән ағас ҡайырына йәтешләп осоҡланы. Хәҙер эштең иң етдие ҡалғайны. Малайҙың гелән үҡшыуына ҡарағанда, мейеһе күскәнгә оҡшай. Еп алып тейешле үлсәмдәрҙе алғас, шигенең раҫҡа сығыуын белде. Яралының һушына килгәнен көтөп, башын сепрәк менән һығып бәйләне. «Ҡалған йәрәхәттәре ундай хәүефле түгел, ямауы өҫтөндә», — тип балыҡ тоторға төшөп китте. Йәрекһеҙҙән мәшәҡәт тыуып тотҡарланған икән, исмаһам, тамаҡты һыйлы тоторға кәрәк. Йылға тамағындағы һай ғына урында ике саталы ағас сәнске менән бәрҙе сәнсеү бик йәтеш икәнен кисә үк абайлағайны.

Шешкә тиҫтәләгән балыҡ теҙеп, бик тә ҡәнәғәт төҫ менән кире сығыуына теге малайҙың ярайһы ғына хәлләнгәнен күрҙе. Турһыҡтағы ҡымыҙҙы байтаҡ ҡына бүҫәрткән. Ике күҙен фәйрүзәләй емелдәтеп ҡырын ята. Ҡиәфәтендәге хәүефте йән көскә тырышып сығарған йылмайыу ишараты менән көпләргә маташа. Урыҫтың көсһөҙ генә тауыш менән әйткән һүҙҙәрен: «Рәхмәт һиңә», — тип аңланы башҡорт.

Бәхтейәр балыҡтарын батмус ҙурлыҡ дегәнәк япраҡтарына төрөргә кереште. Ҡалҡынырға маташҡан малайға: «Ҡуҙғалырға ярамай, мейең һелкенгән», — тигәнде аңлатып, үҙ эше менән булды. Шул арала барлы-юҡлы белгәнен иҫенә төшөрөп, «ат ҡарағының» исемен һорашты. Степан икән. Ағаһы — караттар башлығы хорунжий, имеш. Етемдәр. Шуға Степан ағаһына эйәреп йөрөй. Урыҫ малайы батшаның: «Боласы башҡорттарҙы баҫтырғандарҙың барыһына ла боласыларҙан тартып алынған мал-мөлкәтте үҙләштерергә рөхсәт», — тигән фарманы барлығы, үҙҙәренең бында батшаға хеҙмәт күрһәтеүҙән бигерәк, байлыҡ артынан йөрөүҙәре, мул итеп ер биләргә, алпауыт булырға хыялланыуҙары тураһында, әлбиттә, өндәшмәне. Ҡарат малай ифрат алсаҡ булғанын күрһәтергә ни тиклем тырышһа ла, Бәхтейәрҙе алдай алманы. Үҫмер уның күкшелләнеп торған күҙ төптәренә күләгә кеүек боҫҡан һағайыуҙың һәр саҡ уяу булғанын абайлап ғәжәпләнде. «Ҡайһылай иҫәүән, минән ҡурҡасы, — тип уйланы. — Уға зыян итергә уйлаһам, имләп ҡыяламмы һуң?» Намыҫы таҙа булмаған кешенең ҡурҡыуы икәнен аңларға саҡ ҡына иртәрәк ине әле Бәхтейәргә.

Ә Степан быға саҡ үҙе күргән башҡорттарға һис тә оҡшамаған үҫмергә ныҡ аптыраны. Бәхтейәрҙә ҡурҡыу ҙа, нәфрәт тә, яҡшатланыу ҙа юҡ. Тәүҙә аяҡ-ҡулын һелкетә тарта башлағас, башҡорт унан үс ала, язалай, тип уйлағайны. Быуындарының һыҙлауы баҫылып, шеше ҡайтҡанын абайлағас, Бәхтейәрҙең имләүенең шифаһын белде. Ййлап-яйлап һораша, тыңлай торғас, аңланы: үҫмер алыҫтан, язалаусы командалар йөрөмәгән яҡтан килгән, әле бер нәмә лә күреп өлгөрмәгән.

Ҡыскә табан бейәһен менеп һунарға киткән башҡорттоң берәй яҡташына осрамауын аллаһынан ҡат-ҡат ялбарып ятты малай. Тиҙерәк аяҡҡа баҫырға ла был ихлас башҡорттан тиҙерәк ҡотолорға кәрәк. Әле үк шылыр ине, аҡһап-туҡһап йыраҡҡа китә алмаясағын белә, ә яҡында ғына утлап йөрөгән Алмасыуар яғына ҡарарға ла ҡурҡа. Бәхтейәр иһә оҙаҡ йөрөмәне, биленә бәйләп ҡуйған ике ҡор менән бер көр ҡуянды ергә ырғытты ла усаҡ тергеҙергә тотондо.

Урыҫ малайы менән оҙаҡ ҡыялырға тура килерме тип хафаланғайны. Тегеһе эт йән икән. Икенсе көндө үк шап-шаҡтай булды. Хатта Бәхтейәргә эйәреп балыҡҡа төштө. Ул сәнсеп ырғытҡан балыҡтарҙы йыйып, бер сыбыҡҡа теҙеп ултырҙы. Аҙаҡтан һағышланған да, маҡтанған да итеберәк: «Ә беҙҙә балыҡ күберәк. Беҙҙең поместье эргәһендә күл бар. Унда бер көн йәтмәне ырғытып һөҙәбеҙ ҙә биш көн буйы балығын сүпләйбеҙ», — тип һөйләнде. Уны тыңлап уйланып килгән Бәхтейәр, ҡапыл һирпелеп ҡараны ла, үҙе лә һиҙмәҫтән ҡырыҫ ҡына: «Ундай бай ерҙәрҙе ташлап, бында ниңә килдең һуң?» — тип һораны. Степан мутлыҡ өҫтөндә тотолған уғры кеүек тимгел-тимгел булып ҡыҙарынып, шымып ҡалды. Бынан һуң һүҙҙәре байтаҡ ҡына берекмәне. Эшһеҙ торорға яратмаған Бәхтейәр Степанға тамаҡ яраштырырға ҡушты, ә үҙе Алмасыуарына атланып, үҙҙәре осрашҡан яҡҡа китте. Был тирәне белгән берәй кеше осрамаҫмы, теге бисура яҡтыла күренмәҫме, тигән өмөтө лә, тәғәйен йомошо ла бар ине. Ат

бышҡырғанды ишетеп, караттар килә тип киткәйне теге көндө. Шул ат Степандыҡы булырға тейеш. Ысынлап та, оҙон тороҡло ҡара бейә малай бәйләп киткән ерҙә сарсап, астан ҡаҡланып торған икән. Бәхтейәр ҡараңғы төшкәндә генә уны алып килде.

Икенсе көндө иртүк ҡабат ҡуҙғалдылар. Юл айырсаһына тиклем бергә барҙылар, унан Степан атын тау яғалап киткән таҡыр юлға ыңғайлатты: караттар командаһын эҙләп китте. Бәхтейәргә команда эҙәрләгән кешеләрҙе табырға кәрәк ине. Шуға үлән баҫҡан берләм юлды һайланы. Ҡоҙағыйҙарҙың йәйләүе ошо тирәлә булырға оҡшай. Һандыҡ шикелле шаҡмаҡтау, юл эргәһендә үҫкән өс ҡолас етмәҫ ҡарт ҡарағай — былар хаҡында еңгәһе һөйләгәне бар кеүек. Бары тик юлда ярылып ятҡан ат тояғының эҙҙәре генә шомландырҙы. Күптән түгел тиҫтәләгән һыбайлы үткән! Шуларҙы самалап торҙо ла карат малай киткән яҡҡа боролдо. Ул да туҡтаған да Бәхтейәргә ҡарап тора. Ҡараштары осрашҡас, йылмайышҡан булдылар. Бәхтейәрҙең ҡабат осрашҡанда әлегеләй ҡунаҡсыл, алсаҡ булмаясағын Степа бик тә һәйбәт аңлай.

Саҡ ҡына бара биргәс, Бәхтейәрҙең танауына төтөн, көйөк еҫтәре килеп бәрелде. Ҡотло йәйләү тормошон, мал-тыуар, ҡош-ҡорт тауышын, бала-сағаларҙың сыуылдашыуын үҙәге өҙөлөп һағынған үҫмер атын ҡыҙыулатты.

Барған һайын йөрәкһене, шуға күрә һаҡлыҡ тигәнде онотоп, атын йән-фарманға ҡыуаланы. Әммә көйөк еҫе барған һайын уҡшытҡысыраҡ була барҙы, күңелендә шом артты. Аҡыллы мал, ҡурҡыныс тойғанын белдереп, ҡолаҡтарын ҡайсылатты, үҙен көсләп, хужаһы ҡыуғанға буйһоноп ҡына сапҡан кеүек булды. Тик сигенергә форсат юҡ. Ни булһа ла булыр, тип ярһып килеп еткән Бәхтейәр оло йәйләү ултырған киң болондағы барса тирмәләрҙең янып көл-күмергә әйләнгәнен күрҙе.

Тирә-яҡта янған кәүҙәләр аунап ята. Янып бөтмәгән тирмә кейеҙҙәре төтәй. Малай ҡот осҡос вәхшәтте күҙ алдына килтерҙе: урман уртаһындағы түңәрәк болондо тәүҙә ҡамап алғандарҙыр, күрәһең. Унан үрт һала башлағандар. Ҡатын-ҡыҙ, ҡарт-ҡоро, бала-саға үрһәләнеп тегеләй-былай йүгергәндер. Ситкә сығам тигәндәрен атып йығып, ҡылыс менән сабып торғандарҙыр, ахыры. Ун-ун бишләгән янып бөтмәгән мәйет ерҙә аунай. Бәхтейәр, атынан төшөп, ергә тубыҡланды. Ни уйларға, кемгә мөрәжәғәт итергә былдай ауыр мәлдә?! «Эй, тәңре, үҙең күктә булһаң да, күңелең ерҙә түгелме ни?» — тип башын ергә сүкеп-сүкеп үкһене. Ерҙән дә шул уҡшытҡыс еҫ килә. Үҫмер аҡылын юйған кеүек ҡапыл һикереп торҙо ла ҡасып китергә, күрмәҫкә теләгәндәй, урманға ҡарай йүгерҙе. Нимәгәлер абынып, ялпашып барып ятты, боролоп ҡараны ла, үҙәк өҙгөс итеп ҡысҡырып, аяғын тартып алды. Өс-дүрт йәштәрҙәге ҡыҙ баланың ҡылыс менән уртаға сабылған кәүҙәһенә әләгеп йығылғайны. «Ҡотҡар мине», — тигән кеүек Алмасыуарҙы саҡырып алды ла, көсхәл менән эйәргә үрмәләп, атының муйынынан ҡосаҡланы. Аҡыллы мал, килгән яғына боролоп, йән-фарманға елдерҙе. Урман эсенән сығып, баяғы юл айырсаһына еткәс кенә



10 Заказ 343

ҡалҡып ҡарар хәлгә етте Бәхтейәр. Атын бая Степан киткән юлға төшөрҙө. Аҡылдан шашмаç өсөн уға берәй әҙәм затын күрергә, күңелендәген бушатырға, эсенеүен баçырға кәрәк ине. «Әйҙә, малҡай, берәй тере кеше янына алып бар мине», — тип ялбарҙы. Байтаҡ шулай аңҡы-тиңке барғандан һуң, алда бер ҡараçҡы абайлап, эсе йылынып китте. Атын ашыҡтырҙы. Дуçмы алда, дошманмы — барыбер. Һүҙ ҡушырлыҡ бәндә балаһы булһа, еткән. Эске ҡалтыраныуын тыйып, аҙыраҡ тынысланыр өсөн малай йән көсөнә тештәрен ҡыçты, күҙҙәрен сытырҙатып йомдо. Йән-фарманға сабып барған Алмасыуарҙың тертләп үрәпсеүенә күҙен асты ла ҡырағай тауыш менән ҡысҡырып ебәрҙе. Алдында ҡаҙыҡҡа ултыртылған башҡорт егете ине. Ҡот осҡос ғазаптары ҡиәфәтенә сыҡҡан... Ҡыҙғаныуҙан, ҡурҡыуҙан, тетрәнеүҙән аҡылын юйыр хәлгә еткән Бәхтейәрҙең бөҙрәләнеп торған ҡап-ҡара сәстәренә сал йүгерҙе. Зиһенен уның балалығы аяны. Атының ялына сытырман тотоноп йығылған килеш онотолдо үçмер. Алмасыуар үҙе юл табып, ҡараңғыла ғына уны аулаҡ төйәккә алып ҡайтып еткерҙе. Һушын юйғайнымы, мәрткә киткәйнеме — һис ни тоймаңы Бәхтейәр. Алмасыуар һаҡ ҡына ергә ятты, Алабайы килеп битен яланы, хужаһының килеүен һиҙенгән шоңҡары тынысһыҙланды. Бер аҙҙан малай һаташа башланы, өҙәңгегә сырмалған аяғын тартҡыланы, үкһене. Этенең ялауы әсә иркәләүе булып төшөнә ингәс, буçлығып-буçлығып илап арыған Бәхтейәр үлемесле сарсауҙан иçенә килде. Ирендәрен саҡ-саҡ ҡыбырҙатып, этенә турһыҡты алып бирергә ҡушты.



Түҙгеһеҙ итеп күкрәге яна, әйтерһең дә, ағыулы уҡ йөрәген үтәнән-үтә тишеп сыҡҡан да яранан ҡан һарҡый. Ошо ялҡын үçмергә онотолорға ла, иларға ла, йоҡларға ла, ашарға ла ирек бирмәй. Ҡешеләрҙе үҙ-үҙен аямай үлемгә барырға мәжбүр иткән нәфрәт өтөп алып бара ине Бәхтейәрҙе. Инде, шым-шым ғына йөрөп, Тимербикә ҡоҙағыйын эҙләп табырға ла шыпырт ҡына йәнтөйәккә юлланырға булдыра алмай ул. Хәҙер уның дошманды осратҡыһы, ҡон ҡайтарғыһы, яза үткәргеһе килә. Йәлләттәрҙе үлем күҙенә ҡаратып, ҡан ҡалтыратһа, бәлки, баçылыр йөрәгенең ҡанһырауы. Бына хәҙер генә аңлай ул карат малайының күҙендәге ҡурҡыуҙы, хәҙер төшөнә: ҡулы ҡанға батҡан вәхшиҙең үҙ йәне өсөн ҡалтырауы булған икән ул. Был төйәктә дуçтарҙы табыуы ҡыйын булһа ла, дошманды осратыу еңел ине. Уның артынан ҡанлы эҙҙәре ярылып ята. Бәхтейәр был юлы ҡаҙыҡҡа ултыртылған кеше янынан атын шәп ҡыуып уҙып китте. Әммә киләһе саҡрымда ҡарағай ботағында бәүелгән мәйет янында туҡтамай булдыра алманы. Хаҡ мосолмандың, үҙ башҡортоноң үлгәндән һуң да шулай мәсхәрәләнеп тороуына түҙә алманы. Ағасҡа менеп, хәнйәре менән арҡанды ҡырҡып төшөрҙө лә урман эсенәрәк алып инде, хәнйәре менән ҡаҙған ҡәбергә һалды. «Тар тип рәнйемә, ағай, — тине, күҙенә йәш алып. — Уҡыған доғаларым хоҙай алдында хәлеңде еңеләйтһен».

Бер саҡрымдан йәнә ҡаҙыҡҡа ултыртылған ҡот осҡос мәйетте осратты. Унан — аçылғанын, Саҡрым һайын язаланған башҡорт! Бәхтейәр генә ерләп бөтә алмай ине уларҙы. «Ҡотҡарышырға булмаһа, ерләшергә генә

булһа ла йый, башҡорт иле, ғәййәр улдарыңды!» — тип оран ташлар ине — кем ишетер?!

Бәхтейәр язалау командаһын кисләтеп кенә эҙләп тапты. Илле-алтмышлап ҡан эскес йылғаның матур бөгөлөш яһаған йәтеш кенә бер урынына ҡунаҡсаға туҡтаған. Хәүеф-хәтәрҙән шикләнмәй иркенләп урынлашҡандар. Әллә нисәмә усаҡ яҡҡандар. Ит ҡуралар. Еҫе Бәхтейәрҙең тамағын ҡытыҡлай. Ярһыуҙан, йөрәкһенеүҙән ашауҙан яҙған үҫмерҙең был еҫтән күңеле болғана.

Ҡараңғы төшөп тәүге йондоҙҙар ҡалҡыуға Бәхтейәр, йылға ярында үҫкән таллыҡҡа боҫоп, иҫерек караттарҙың һыулауға төшкәнен көтә башланы. Урыҫтар иләмһеҙ тауыш менән аҡырып йырлай, боғаҙ йыртып һүгенә. Бына бер ибәтәйһеҙ дәү урыҫ алпан-толпан баҫып, Бәхтейәр йәшенгән яҡҡа ыңғайланы. Йылға ситенә килеп, тубыҡланып, ерәнгес итеп уҡшыны, мығырҙап битен йыуҙы. Дошмандың үгеҙҙекеләй кәүҙәһенә ҡарап, үҙенең көсөн самалабыраҡ икеләнеп торған малайға нәфрәте тәүәккәллек бирҙе. Ул ҡалҡынырға маташҡан иҫеректең муйынына боғалаҡ ырғытты ла, ҡапыл тартып, салҡан йыҡты. Ҡурҡышынан кинәт айнығып киткән урыҫ, муйынын быуған арҡанды бушатырға тырышып, йән көсөнә айҡаша башланы. Бәхтейәр арҡанды йыуан ғына ағас төпһәһенә уратып тарттырып ҡуйҙы ла, ғырылдығы сыҡҡан драгундың ауыҙына кейеҙ ялпыһын нышып-нышып тығып ҡуйҙы. Көндөҙ, ҡан көҫәгән мәлендә, ул, караттарҙы ни рәүешле ғазаплаясағын уйлап, ҡайнаған ҡанын баҫҡайны. Әле башҡа караттар абайламаҫ элек язаны атҡарыу фарыз ине. Ашығырға кәрәк. Бәхтейәр аптырап ҡалды. Дошмандың шул дәүмәле ҙур булыры башҡа инеп тә сыҡмаған. Ләззәтләнеп язалар өсөн уны алыҫҡа алып китергә кәрәк. Ярар, икенсеһен урынерено еткереп язалармын, тип уйланы үҫмер. Быныһын быуып ҡына үлтермәксе булды. Ҡан эскестең ҡурҡыуынан ғына булһа ла, кинәнес тапмаҡ булды, алҡымына үрелгән килеш йөҙөнә баҡты. Бәхтейәрҙең тимер ҡыпһыуыр кеүек ҡымтып алған бармаҡтарының көсөн тойған урыҫ йән әсеһенә асырғанып аҡырып ебәрҙе. Дөрөҫөрәге, уның атылып сығып барған күҙҙәрендәге ҡурҡыу малайға донъя яңғыраҡан кеүек тойолдо. Таҫырайған күҙҙәрендәге үлемесле ялбарыуҙан Бәхтейәр тертләп китте. Бармаҡтарының кәре ҡайтҡанын тойҙо. Ҡото осоп аңланы: көнө буйы баҫтырыҡлап, ҡулға төшөрөү менән йолҡҡослап ырғытырҙай булып килгәйне, әле иһә үҙендәге ниндәйҙер бер ҡеүәтле көс уға дошманын үлтерергә ирек бирмәй. Йәлләү тиһәң, йәлләү түгел, ихтыярһыҙлыҡмы, ерәнеүме? Аллаһы тәғәләнең бәндәләргә йән өргән мәлендә зиһендәренә һеңдергән мөҡәддәс ҡануны — үлтермә тигән бойороғо — тотҡарлай ине сабыйҙы кешелеклелекте аша атлап уҙыуҙан. Көсһөҙлөгөнә ярһып, малай урыҫты сырмап ҡалды ла, күҙ йәштәренә төйөлөп, урманға ҡарай өҫтөрәне. Ҡарт ҡарағай төбөндәге ҡырмыҫҡа иләүен туҙыратып, уның өҫтөнә һуҙып ҡалды, шунан йәнә һунарға китте. Таң һыҙылғансы алты йәллатте ошонда теҙеп ҡалды ла, арыуҙан, талсығыуҙан, ҡәнәғәтлек тойғоһонан тынысланып, сәйер яза урынынан алыҫҡараҡ китергә ашыҡты.

Бәхтейәрҙең мәйеттәр сафы аша уҙырға ихтыяры етмәне, шуға күрә Алмасыуарын үҙ

ыңғайына ҡуйҙы. Аҡыллы малҡай берәй туҙ-ҙырылмаған йәйләүгә алып сыҡмаҫмы, тип өмөтләнде. Лертелдәп кенә юртып барған айғырының арҡаһында йонсоу бәүелеп бара торғас, йоҡомһорап киткәнме, ҡаршыға килгән һыбайлыларҙы һуңлап ҡына абайланы. Ҡейемдәренә ҡарап, уларҙың язалаусылар икәнен таныу менән атын борҙо. Тик һуң ине инде. Ҡараттар уны ҡыуа төштө. Бәхтейәр Алмасыуарҙың дошман атына бирешмәҫенә ышана ине, ысынлап та ҡыуғын төшкәнен һиҙгән айғыр ҡуш аяҡлап саба башланы. Әммә бер ерән урыҫтың аты ла шәп булып сыҡты. Хужаһының тос ҡына булыуына ҡарамаҫтан, ярайһы ғына ырата. Уның артынан тағы берәү саба. Атына ҡарап, Бәхтейәр икенсе һыбайлының Степан икәнен таныны. Ерән урыҫ шаҡтай яҡынайҙы ла Бәхтейәргә тоҫҡап атып ебәрҙе. «Мине үлтереп, атымды алырға итә, мәлғүн», — тип уйланы үҫмер. Шунан башына килгән хәтәр уйҙан, малайлығына барып, көлөп үк ебәрҙе. «Әһә, мин һине ҡыҙыҡ итәйем әле!» Атын тотоп яҡыныраҡ ебәрҙе лә, теге атыу менән йәнтәслим артҡа йығылып киткән булды. Степандың: «Үлтерҙең, үлтерҙең», — тип әрнеп ҡысҡырғаны ишетелде. Ерән урыҫ, эре тештәрен ыржайтып, кинәнеп көлөп ебәрҙе. Уларҙы күҙәтеп барған үҫмер аяғын өҙәңгенән ысҡындырып, атының ҡорһаҡ аҫтына инде. Ялт-йолт иткән аяҡтар араһынан саҡ-саҡ күренә ине. Степанға ул хатта телен күрһәтеп мыҫҡыл итеп барған кеүек тойолдо. Үлтерҙем, тип ҡыуанған урыҫ та, башҡорт малайының был ослоғона ғәжәпләнеп, телен шартлатты. «Ҡеше түгел, шайтандар был», — тип төкөрөп, кире боролдо.



Урман араһына инеп ҡотолдом инде, тигән Бәхтейәр иһә көтмәгәндә икенсе хәтәргә юлыҡты. Үҙҙәренең ҡырмыҫҡанан таланып үлем хәленә килгән һалдаттарын эҙләп тапҡандан һуң, үс алыусыны юллап сыҡҡан ҡараттарға осраны. Әле генә үҙен баҫтырғандар яғына боролоп сабыуҙан башҡа сара ҡалманы. Үҙе саба, үҙе берәй берләм һуҡмаҡ осрамаҫмы тип ҡаранып бара. Бына алдағы команда ла күренде. Ҡыйғыулап сапҡан һыбайлыларҙа үҙҙәренекен танып, Бәхтейәрҙең Алмасыуарын күреп, йәнә боролдолар. Үҫмер ике ут араһында ҡалды, уға шырлыҡҡа инеүҙән башҡа сара ҡалманы. Туҡтауһыҙ сабыуҙан талсыға башлаған айғыр баяғыса ырата алмай. Нишләргә? Хәйлә менән алдыраыуҙан башҡа сара юҡ. Малай аты сабып барған ыңғайға бер ботаҡҡа ынтылып аҫылынып ҡалды ла тейен кеүек ағас башына үрмәләне. Йөгөнән бушанып, еңеләйеп ҡалған атҡа сабыуы анһатыраҡ булыр. Ул арала йәнә башҡаларҙан айырылып алға киткән теге ерән урыҫ күренде. Быраса күрә-күрә килгән аттың күҙ менән ҡаш араһында юғалыуына аптырап торҙо. Атынан төшөп эҙҙе ҡараны. Тик ҡарағай энәләре ҡалын булып ергә ҡойолған ерҙә тояҡ эҙе ҡалырлыҡ түгел. Арлы-бирле йөрөп әйләнгәндән һуң, йәмһеҙ һүгенеп, ағас төбөнә ултырҙы ла тәмәкеһен ҡабыҙҙы. Төтөнөн борлатып ебәргәс, картузын сисеп, маңлайын һыпырҙы, аяғын һуҙып, йәтешләп ултырып алды. Ул ултырған ағастың башына ҡунаҡлаған Бәхтейәргә мәрәкә булып китте. Үҙе лә һиҙмәҫтән дошманының ялтырап торған ҡыҙыл пеләшенә лысҡылдатып төкөрҙө лә ҡуйҙы. Тертләп һикереп тор-

ған урыҫ мылтығына йәбеште. Үҙе үрелеп-үрелеп ҡарана. Хәҙер күрә лә, тубырсыҡ кеүек бәреп төшөрә был мине, тип уйланы Бәхтейәр уға уғын тоҫҡап: кем алдан өлгөрөр? Лып итеп йығылып киткән урыҫтың үлеме, тереме икәнен белеп тә өлгөрмәне — арттағы ҡыуғынсылар килгәне ишетелде. Бәхтейәр тиҙ генә ағастан һикереп төштө лә януар сослоғо менән шырлыҡ араһына инеп юғалды.

Ажарланып урманды һөҙөп сыҡҡан караттарҙан, тамырҙары тарбайып, ярым ауып үҫкән ҡарағас төбөндәге бүре өңөнә инеп, илла-алла менән саҡ ҡотолоп ҡалған Бәхтейәр атын табып алғансы ҡараңғы төштө. Әптән арып-йонсоп бөткән малай, таң менән аулаҡ төбәккә юлланырға ҡарар итеп, төндө урманда үткәрҙе. Ҡараңғыла ла тәүәккәлләр ине, бәлки, аҙашып, караттар өҫтөнә барып сығыуҙан шикләнде. Икенсе көндө, алан-йолан ҡаранып, һаҡланып ҡына барҙы, юлға сыҡмай, урман ситләтеп кенә юртты. Шулай килә торғас, бер түңәрәк ерҙә ҡаршыһына килгән ғәскәрҙе абайланы. Ҡейемдәренән, атта ҡыя ғына ултырып килеүҙәренән күренеп тора: башҡорттар. «Йә хоҙа, — тип елкенде малай, — үҙебеҙҙекеләрҙе лә күрер көн бар икән. Башҡорттар ҡалған икән әле донъяла».

* * *

Бәхтейәрҙе ике ҡулынан шыҡырайтып тоттолар ҙа елтерәтеп яҙа майҙанына алып киттеләр. Ул тәүҙә үҙен аҫырға йыйыналарҙыр тип уйлағайны. Шуны теләне. Бары тик тимер ҡыҙҙырып ғазапламаһындар ҙа ҡаҙаҡҡа ултыртмаһындар, эй, Хоҙайым.



Майҙанға халыҡ бик күп йыйылған. Барыһы ла хәрбиҙәр. Араларында башҡорттар менән мишәрҙәр ҙә байтаҡ күренә. «Батшаның тоғро эттәре», — тип уйланы үҫмер. Тимәк, бер башҡорт ялпыһы өсөн йөрәге янған кеше булмаясаҡ. Һуңғы көндәрҙәге кисерештәре зиһенен шул тиклем теткеләгәйне, Бәхтейәр үҙенең үлеменә лә йүнләп ҡайғыра алмағанын тойҙо. Күҙ алдынан әсәһенең йөҙө сала-сарпы үтеп киткәндә генә болоҡһоғандай була ла... Ҡуберәк уны: «Нисек тә мәсхәрәгә ҡалмай, сыҙам үлергә...» — тигән уй борсой.

Майҙан уртаһында торған ҙур түмәрҙе күргәс, ул башын киҫергә йыйыныуҙарын аңланы, тиҙҙән балта тейәсәк муйыны тартышып ҡуйҙы. Әммә үҙен юл буйы алдаштырып, һөйләндереп килгән ярамһаҡ башҡорттарҙың мыйыҡлыһы ауыҙын йырып түмәр эргәһенә бер ҡосаҡ шыйыҡ сыбыҡ ташлағас, ҡыуаныстан башы әйләнеп китте. Уны эш боҙған малай-шалайға ғына һанап, сыбыҡ менән ярырға булғандар ҙа баһа. Йыйылған халыҡтың мәрәкәсел, шаян йөҙөн абайлап, ҡандан ялыҡҡан һалдаттарҙың көлкө ҡарарға, кинәнеп ауыҙ йырырға килгәндәрен аңланы.

«Улай бик теләгәстәре рәхәтләнһендәр, тик көлөп эстәре ҡатһа, үпкәләштән булмаһын», — тип ҡарар итте рухы күтәрелеп киткән үҫмер. Нимә-нимә, шыйыҡ сыбыҡты Бәхтейәрҙең байтаҡ татығаны бар. Артыҡ ауыртмаһын өсөн ҡайһылайыраҡ ҡыланырға кәрәклеген дә яҡшы белә. Ҡөсөргәнмәҫкә кәрәк, тәненде ҡурыштырмаһаң, сыбыҡтың зәһәре үтә алмай.

Ул арала кәп ҡорһаҡлы, кәүҙәле урыҫ офи-

церы уртаға сыҡты, Бәхтейәргә төртөп күрһәтә-күрһәтә нимәлер һөйләне. Шунан үҙен тыңлап хахылдағын сыҡҡан һалдаттар араһынан шешенеп бөткән берәүһен тартып алды. Бәхтейәр шунда уҡ таныны: аяҡ-ҡулын сырмап, ҡырмыҫҡа иләүенә һалып киткән драгундарҙың береһе ине был. Уға ҡарап каpаттар бот сабып көлдө. Ҡаҡса ғына башҡорт малайына бирешеп торған өсөн мыҫҡыл иттеләр, күрәһең. Шунан Бәхтейәрҙе төрткөләп түмәр эргәһенә алып килделәр. Сапҡыланған ағас йөҙөнә лыҡашып ҡатҡан ҡанды, йәлләт балтаһының эҙҙәрен күреп, үҫмерҙең күңеле болғанды, күҙ алдары ҡараңғыланды. Быңа уның ҡулын ысҡындырҙылар, күлдәк-ыштанын һыпырҙылар. Унан теҙ сүктереп түмәрҙе ҡосаҡларға ҡуштылар. Тегеләй ҙә, былай ҙа ҡыландырып, туҡмарға уңайлап яткыра алмай йөҙәнеләр. Теге мыйыҡлы башҡорттоң еңен һыҙғанғанда мут ҡына күҙ ҡыҫыуын күреп, малай: «Был юрый тамаша ҡоралыр, ныҡ һыҙырмаҫ», — тип ирәйеберәк киткәйне лә, күҙҙәренән ут сәсрәнеме ни?! Юрамал ғына тажылдарға йыйынған Бәхтейәр ҡолаҡ ярғыс итеп аҡырып ебәргәнен үҙе лә һиҙмәй ҡалды. Тейен етеҙлеге менән тороп тамаша ҡылыусылар араһына һикерҙе, майҙандан ҡасмаҡ булды. Ҡөлөшә-көлөшә тотоп алып ҡабаттан түмәргә йыҡтылар. Шул саҡ малай берәүҙең сағыу тауыш менән үҙәк өҙгөс итеп: «Бәхтейәр!» — тип ҡысҡырғанын ишетте. Ҡалҡып баҡҡайны, ҡыҙғаныс итеп ҡарап торған зәңгәр күҙҙәр менән осрашты. Степан... Үҙен язалағанды таныш урыҫ малайының шаһит ҡылып тороуы Бәхтейәрҙең ғәрлегенә тейҙе. Мыйыҡлы йәлләт баштағы мәрәкәнең ҡа-



батланыуын көтөп торған яуҙаштарының өмөтөн аҡларға нисек кенә тырышмаһын, сыбығын ни тиклем айбарланып һелтәмәһен, үҫмер ҡабат өнөн-тынын сығарманы.

Ярһып киткән язалаусыны малайҙың иҫтән яҙғанын абайлаған урыҫ офицеры саҡ туҡтатты. Өҫтөнә бер-бер артлы ике күнәк ҡоҙоҡ һыуын ҡойғас, Бехтейәр ыңғырашып күҙен асты, башын ҡалҡытырға маташты. Уны ике ҡултығынан тотоп ҡайҙалыр алып киттеләр.

— Ҡөҫәпҡол тархан үҙе килеп өлгөрмәне, — тине һөйрәп барыусыларҙың береһе.

— Нишләр ине икән? — тине икенсеһе.

— Уртын сәйнәп булһа ла сыҙар ине, — тине тәүгеһе. — Батшаға тоғролоғон нисек итеп иҫбатларға белмәй йөрөгән сағы бит ҡарт төлкөнөң. Бола ҡуптарыусылар араһында уның туған-тыумасаһы, дуҫ-ише күп булған. Шуларҙы ла артыҡ ел-дауыл тигеҙмәй аралап алып ҡалырға кәрәк хәҙер уға.

— Шул төлкөлөгө менән үҙ төйәген уртйәберҙән ҡурсып килә лә бит инде.

Иҫе инерле-сығырлы булып килгән үҫмерҙең зиһененә был һөйләшеүҙең мәғәнәһе бик әкрен барып етте. «Тимәк, атайым бында. Улайһа, ике ағайым да бында була инде. Бәлки, улар ҡоҙағыйҙарҙы әрсәләп алып, берәй аулаҡҡа йәшергәндәрҙер». Был уйҙан һыҙланыуҙары саҡ ҡына булһа ла баҫылған кеүек булды.

Ҡултығынан арҡанға аҫып, Бәхтейәрҙе тәрән соҡорға төшөрҙөләр. Ваҡытында башҡорттар бында мәғдән сығарған булғандарҙыр. Еүеш һалам өҫтөнә хәлһерәп килеп туңҡайғайны (башҡаса бер нисек тә ятырлыҡ ту-

гел) йылы, йомшаҡ бер нәмәгә тейгән аяғын, ҡапыл тертләп, тартып алды.

— Ҡурҡма, ағай, был мин, Ишмырҙа,— тигән хәлһеҙ генә тауыш ишетелде. Туғыҙ йәштәрҙәге малай. Бахырҙы бик нығ ыҙалағандар. Башы-күҙе гөпөк шешек икәне ҡараңғыла ла абайлана. Бәхтейәр йәтешләберәк ултырырға маташты ла, сытырайып ыңғыраштты. Теткеләнеп бөткән арт һаны, арҡаһы түҙгеһеҙ һыҙлай. Теге малай, шылышып, Бәхтейәргә яҡынлашты:

— Ҡалай аҙаплағандар, ағай! — тип йәлләп бышылданы.

— Һине лә ҡыҙғанмағандар бит, мырҙа!

— Һинән ниндәй сер таптырҙылар? Әйттерҙеләрме, юҡмы?

Һәр кем үҙ күңелендәге менән ҡыҙыҡһына.

— Ә һин әйттеңме? — тине Бәхтейәр.

Унын һүҙенән малай өрккән йәнлек кеүек ситкә тайпылды. Өндәшмәне. Бер аҙҙан һуң ғына:

— Тырнаҡ аҫтына ҡаҙау тыға башлағас түҙмәнем, — тип бышылданы. Үҙенә саҡ ҡына булһа ла аҡлау табырына ышанғандай, шешенеп сыҡҡан һуҡ бармағын күрһәтте. Унан үҙәк өҙгөс төшөнкөлөк менән һамаҡлап ҡуйҙы. — Белмәгән булһамсы мин ул серҙе, белмәгән булһамсы...

Яралары бәғерҙе телгеләп һыҙлаһа ла, Бәхтейәр был ҡылыс буйылай ғына баланың күңел йәрәхәте үҙенеке менән сағыштырғыһыҙ тәрән икәнен тойҙо. Унын ярлыҡау ялбарып, өмөт ҡатыш ҡурҡыу менән ҡарап торған күҙҙәрендә сатҡы баҙлатҡыһы килде.

— Бәлки, ғәйебең улай ҙур ҙа түгелдер, мырҙа. Үҙеңде яҙалама, — тине. — Был донъяла ике генә ҡайғы бар, — тип әсәһенең йыш ҡабатлай торған һүҙҙәрен иҫенә төшөрҙө: — Үлем менән ғәриплек. Ҡалған бөтәһен дә төҙәтеп була. Был шештәр менән яралар уңалыр, ямауы өҫтөндә. Иң мөһиме — беҙҙе аҫманылар, киҫмәнеләр... — Ҡалғанын әйтергә көсө етмәне, кисә күргән ҡурҡыныс мәйеттәр күҙ алдына килеп, тамағына төйөр ултырҙы.— Аллаға шөкөр, — тип кенә бышылдай алды.

— Ә Тимербикә инәйемде аҫырҙар, Зөлхизә апайымды, мәсхәрәләп, эттәргә ташларҙар, — тип үкһене малай, сабый аяуһыҙлығы менән барыһын да исемләп әйтеп. — Абзыйҙарҙы ҡаҙыҡҡа ултыртырҙар.

Ишмырҙа, күҙҙәре ағарып, балсыҡ стенаға башын сүкей-сүкей үрһәләнде.

Таныш исемдәрҙе ишетеп, Бәхтейәр ауыртынғанын да онотто, ҡалҡынып малайҙы ҡосаҡлап алды.

— Сеү, мырҙа, шаулама, — тине яурынынан һыйпап. — Әйт әле, ниндәй Тимербикә? Уны ни эшләп аҫырға тейештәр?

Малайҙың өҙөп-йыртып һөйләүенән шул аңлашылды: Ишмырҙа Бәхтейәр эҙләгән Тимербикә ҡоҙағыйының аҫрауға алған улы икән. Йәйләүҙе караттар туҙҙырғандан һуң улар, егермеләп кеше, бер мәмерйәгә барып йәшенгәндәр.

— Тимербикә инәйемдең дүрт улы, Зөлхизә апайым. Ҡалғандары туған-тыумаса, хеҙмәтсе егеттәр ине. Сығалар ҙа караттарға һөжүм итәләр, ҡон ҡайтарып ҡайталар. Әллә нисә тапҡыр әсир төшкән башҡорттарға ҡасырға ярҙам иттеләр, — тип урыҡ-һурыҡ һөйләне малай.

Әммә караттар көндән-көн ҡанһыҙланған,

уларға «вернай башҡорттар» ҙа килеп ҡушылғас, һуғышыу әптән ауырлашҡан. Һуңғы тапҡыр мәмерйәнән сыҡҡан егеттәрҙең алтауһын тотҡандар. Шунан һуң байбисә кәрәкһеҙгә сығып йөрөүҙе ныҡлап тыйған.

— Мин дә һорамай киткәйнем. Зөлхизә апайыма көртмәле йыяйым тип кенә... Унда яҡында ғына төшәлеп ята. Ҡире менеп бара инем инде, әллә ҡайҙан килеп сыҡтылар. Һиҙмәй үтеп китеп баралар ине, ҡарағайҙың ботағы мурт бит, һынды ла — ҡоланым. Иң арттағы һыбайлының аты сак өҫтөмә баҫманы, — тине Ишмырҙа. — Араларында берәү мине сырамытты. Улар беҙҙе эҙләп арманһыҙ булып бөткән икән. Бында инәйемдән башҡа караттарға ҡаршы ҡарыулашҡан бер кеше лә ҡалмаған.

Тәүҙә, туҡмаһалар ҙа, аяҡ-ҡулдан аҫып ҡуйһалар ҙа, өндәшмәнем. Бында алып килгәс, урыҫтарҙың иң яуыз йәллә тенә бирҙеләр. Шунда сыҙаманым инде. Унда ла тәүҙә әйтмәнем, ҡыҙған тимер менән арҡама ырыу тамғаһын баҫҡанда ла түҙҙем әле, — малай аянысла итеп Бәхтейәргә ҡараны: «Нимә әйтер?»

— Тимербикә ҡоҙағыйҙы бик яусан кеше тиҙәр ине бит. Һинең әләккәнеңде белгәс тә мәмерйәнән киткәндәрҙер инде, — тигән булды үҫмер. Һүҙҙәренә үҙенең дә ышанғыһы килде. «Бәлки, атайымдар уларҙы ҡотҡарып йөрөйҙөр» тигән бәләкәс кенә өмөт тә бар ине. — Мин уларҙы эҙләп килгәйнем бит, Ишмырҙа. Мин бит һеҙгә ҡоҙа булам. Гөлйөҙөм апайыңдың ҡәйнешемен.

Малай ышанырға ла, ышанмаҫҡа ла белмәй баш ҡаҡты. Күп туҡмалыуҙан, йән һәм



тән ғазабынан йонсоп, зиһене томаланып та бөткәйне.

— Ҡайһы тирәлә ул мәмерйә? — тип һорағас, йәнә тертләп китте лә, әйтмәйем, тигәндәй баш сайҡаны.

— Һай, иҫәүән. Ҡараттарға әйткәнһең бит инде. Дошман белә, ә туғаныңдан йәшерәһеңме?

«Атайым бит тархан кеше. «Вернай». Мине барыбер йолоп алып ҡалыр. Шул саҡта, әгәр ҙә ул ысынлап та язалаусылар менән бер юлдан йөрөһә, ҡасып китер әмәле сығыр» — тигән уй йөрөттө үҫмер. Мәмерйәгә юлды бик тәфсилләп һораштың.

Ишмырҙаны үҙе менән бергә ҡасырға өгөтләне.

— Юҡ, ағай, — тине малай. — Тылмас әйтте: «Дөрөҫөн һөйләп бирһәң, суҡындыралар, уҡырға ебәрәләр, урыҫ яһайҙар, — тине — Әфисәр булырһың, бай йәшәрһең», — тине. Башҡорт булып йонсоном мин, урыҫ булғым килә.

Бәхтейәрҙең уны ныҡлап өгөтләргә хәле юҡ ине. «Ййы сыҡҡас, сараһы күрелер әле», — тип уйланы.

Яралары үҙәккә үтеп һыҙлай. Шулай ҙа йоҡо баҫҡан. Сей иткә әйләнгән арҡаһына ауырттырып тейгәнгә уянып китте. Дөм-ҡараңғы. «Ағай, һиңә өндәшә», — тип бышылданы Ишмырҙа. Ысынлап та бер ҡараҫҡы эйелгән.

— Бәхтейәр! — Тауышынан Степанды таныны үҫмер. — Бәхтейәр, арҡанға йәбешеп сыға алаһыңмы?

— Ишетәм, алам, — тип ярһып яуапланы

үҫмер. Һикереп торҙо. Ҡыҙыулыҡтан ауыртыныуын да онотто. — Әйҙә, Ишмырҙа.

— Юҡ, — тип стенаға һыйынды малай. — Юҡ.

Илла-алла менән сығып еткәс тә, Степан Бәхтейәрҙе урман яғына өҫтөрәне. Йыуан ағас төбөндә эйәрле торған Алмасыуары хужаһын алыҫтан уҡ танып тауыш биргәс: «Котолдом!» — тигән уй зиһенен яҡтыртып үтте үҫмерҙең.

— Һин миңә яҡшылыҡ эшләнең, — тине Степан. Өҫтөндәге кейемен сисеп Бәхтейәрҙең яурынына һалды. — Мин дә һиңә яҡшылыҡ эшләргә тейешмен, — тип билендәге ҡылысын да сисеп бирҙе. — Дуҫ булайыҡ.

Ҡарат малайының ҡылысын алған ыңғайға Бәхтейәрҙең күҙ алдына уртаға сабылған сабый кәүҙәһе килде. Ҡылыстан шуның ҡаны тамып торған кеүек тойолдо.

— Дуҫ түгел, — тине. — Яу һуҡмағында осрама миңә. Яҡшы саҡта үҙ илеңә кит. Осраһаң, аямам. — Унан көс-хәл менән атына менеп ултырҙы. Ауыртыуҙан һушын юғалтаяҙҙы. Әрнеүҙән ҡыҫылған күҙҙәре менән зәһәр ҡарап: — Нишләп килдең бында?! — тип ярһыулы бышылданы ла: — Әйҙә, малҡай, — тине. — Мине бынан алыҫҡараҡ алып кит.

Уның артынан ҡарап ҡалған Степандың ҡысҡырып-ҡысҡырып илағыһы килде. Сей яра килеш билдәһеҙлеккә сабып киткән башҡорт малайы уға ни өсөндөр бик бәхетле тойолдо. Бәхтейәрҙе ҡыуып еткеһе, уның менән бер ҡатарҙан сапҡыһы, бергәләп балыҡ тотҡоһо, шоңҡар сөйгөһө килде.

«Нимәгә һеҙгә шул тиклем ер? — тип һорағайны ул теге көндө Бәхтейәрҙән. — Малдан тапатып, тәләфләп бөтөрәһегеҙ. Иген сәсһәң, күпме кешене туйҙырырлыҡ ер әрәм булып ята». Шулай тигәндә Степан үҙенең хаҡлығына, ҡыуған юлының дөрөҫлөгөнә ышана ине. Быға тиклем үҙенә осраған башҡорттарға «гололобый басурман» тип түбәнһетеп ҡарауҙы ла тәбиғи һанай ине. Үҙе кеүек үк сос, зиһенле башҡорт малайының ихласлығы, үҙен ғорур, тиң итеп тотоуы уға ысын башҡорттоң булмышын күрһәтһә, ҡап-ҡара сәсле шуҡ малайҙың күҙ алдында сәстәре ағарып үсле ҡон ҡайтарыусыға әйләнеүе урыҫтарҙың вәхшилектәренә күҙен асты.

«Аллаһы тәғәлә һәр кемгә йәнтөйәк, булмышына ярашлы шөғөл биргән. Һәр кемдең үҙ күңеленә ятышлы моңо-көйө бар. Бына һеҙҙең йырҙарығыҙҙың моңо юҡ, ҡайһы береһе ҡолаҡты ярып килеп инә. Ә беҙҙең йырҙар, бәлки, һеҙгә ялҡытҡыс тойолалыр, — тигәйне ул саҡта Бәхтейәр. — Мин бит үҙеммен тип кәперәйеп, һеҙҙе хурламайым. Нәфсемде тауҙай ҡабартып, һеҙҙең балыҡлы күлегеҙҙе барып баҫмайым. Һин дә йәшә, мин дә йәшәйем, тип ихтыяр итәм.

Бына мин һинең балтырыңа ярып ингән ҡарағай шырауын тартып алдым. Алмаһам, ул ярһып, эренләп сығыр ине. Тире аҫтына ингән бәләкәс кенә сүп тә әрнетә. Ә һеҙ башҡорт тәненә һөңгө кеүек килеп ҡаҙалдығыҙ. Беҙ нишләргә тейеш? Нишләргә беҙгә?»

* * *

Туп-тура мәмерйәгә сапҡыһы килһә лә, был хәлендә унда барыуҙың фәтүәһеҙ икәнен аңлай ине Бәхтейәр. Яраларҙы был килеш ҡал-

дырһаң, иртәгә бөтә тән ярһып шешеп китәсәк. Унан төн йөҙөндә аҙашыуың да, караттарға йәнә барып ҡабыуың да бар. Шуға Алмасыуарҙы үҙ иркенә ҡуйҙы. Ул аулаҡ төйәккә алып барыр...

Ә малҡай хужаһының хәле мөшкөллөгөн аңлағандай, ҡәҙерле йөгөн бимазаламай тигеҙ генә юртып барҙы. Таң һыҙылғайны ҡайтып еткән саҡта. Алабай уларҙы әллә ҡайҙан ҡыуанnetwork өрөп ҡаршы алды. Атынан саҡ шыуып төшкән Бәхтейәр ергә һуҙылып ятты ла ҡойроҡ болғап эргәһендә өйөрөлгән этенә ялынды:

— Яла, Алабай, яла. Ҡотҡар мине, — тип уттай янып барған арҡаһына ымланы. Яраларҙы уңалтыр өсөн әле эттең шайығынан да шифалыраҡ дауа таба алмай ине.

Икенсе көндө иртәнсәк кенә мәмерйәне эҙләп сығып китте Бәхтейәр. Уға тиклем бейә һауҙы, тамаҡ ялғаны. Бәхетенә күрә, турһыҡты бушатһалар ҙа, сисеп алмағандар икән. Ишмырҙа Зөлхизәне ауырый тигәйне. Ҡымыҙ килешер.

Малайҙан юлды тәфсилләп һорашҡан кеүек булғайны. Йылға буйлап барһаң, аҙашмаҫһың, тигәс, урауыраҡ булһа ла, бормаланып ятҡан тау йылғаһына эйәрҙе. Тейешле урынға яҡынлашҡанын алдан уҡ белде. Атыу тауыштары ишетелә, эт өрә, кешеләр ҡысҡырыша. Караттар, әлбиттә, Бәхтейәрҙе көтөп тормаған, мәмерйә эргәһенә килеп тулған.

Алмасыуарын аулаҡҡараҡ йәшергәс, Бәхтейәр дошман лагерына яҡыныраҡ килде. Бер йәтеш кенә ағастың башына менеп, тирә-яҡты күҙәтә башланы. Ысынлап та, мәмерйә дошманға ҡаршы оҙаҡлап һуғыш алып барыр



өсөн ифрат уңайлы ине. Уға ике тау араһына ҡыҫылған тар ғына һуҡмаҡ алып бара. Күтәрелгәс тә мәмерйә ауыҙына етмәйһең — сосайып торған оло ташҡа барып төкәләһең. Артабан, моғайын, арҡан буйлап ҡына күтәреләһеңдер. Тар ғына ауыҙын таш менән көпләһәң, белмәгән кеше мәмерйәне ғүмере таба алмаясаҡ. Ҡанлы яуҙар мәлендә быуаттар буйы башҡорттарға ышаныслы ышыҡ булғандыр был таш өй.

Караттар мәмерйәгә бер нисә тапҡыр һөжүм итеп маташҡан, буғай. Бәхтейәр ҡарап торғанда ла бер ынтылдылар. Был юлы һыбайлы башҡорттарҙы ебәреүҙе ҡулай күрҙеләр. Бәхтейәр яугирҙар араһында атаһы менән ағаларын эҙләне. Күренмәнеләр.

Дүрт һыбайлы аттарын шәп-шәп ҡыуып, хәүефле урынды тиҙ генә үтмәк булды. Әммә мәмерйәнән уларҙы бер-бер артлы уҡ менән атып йыҡтылар. Таш өй алдына сығып баҫҡан аҡ һын (Бәхтейәрҙең үткер күҙҙәре унын ҡатын-ҡыҙ икәнен абайланы) иң арттағыһының атын үтәнән-үтә тишә атты. Үлемесле яраланған малҡай үҙәк өҙгөс итеп кешнәне лә йәнтәслим барып төштө. Ә һыбайлыһы һылтыҡлай-һылтыҡлай, эйелә-сүгәләй аҫҡа йүгерҙе.

— Үәт көс, үәт таһыл! — тип аптыраны Бәхтейәр телен шартлатып. Был уҡсының Тимербикә ҡоҙағыйы булыуына тамсы ла шикләнмәне. Артабан ағас башында ултырыуҙан файҙа юҡ ине. Был яҡтан мәмерйәгә сыҫҡан да үтеп инә алмаҫлыҡ. Икенсе йәшерен юл булырға тейеш. Ишмырҙа юҡ, тине тиеүен. Ул йә белмәй, йә белһә лә өндәшмәгән. Тимәк, караттарға ла әйтмәгән. Йәшерен ти-

шекте эҙләүҙән башҡа сара юҡ. Әлбиттә, был аҡыллы фекерҙең үҙ башына ғына килмәгәнен төшөнә ине үҫмер. Ҡараттар ҙа темеҫкенеп тау-таш ҡыҙыралыр. Шуға күрә һаҡ ҡына барҙы.

Бер аҙҙан ҡара көртмәле түшәлеп үҫкән ергә килеп сыҡты. «Ҡөртмәле йыйырға төшкәйнем», — тигәйне Ишмырҙа. Тирә-яғына ҡараштырҙы. Малайҙың эҙен юлланы. Ҡайҙан ғына табаһың инде. Арыраҡ бара биргәйне, был урындар бик тә таныш кеүек күренде. Тәүге көндө ошо тирәләрәк ҡунды түгелме? Ошо шишмәнән һыу эсте. Ошонда муйыл ашаны. Бәхтейәр йылға тауышына ҡолаҡ һалып торҙо ла, шул яҡҡа атланы. Урмандан сығыу менән теге таш стена кеүек күккә олғашҡан текә тауҙы күрҙе. Ә бына уның һәндерә яһап ҡунған ҡарт ҡайыны. Шул төн иҫенә төшөү менән Бәхтейәрҙең зиһенендә йәшен ялтланымы ни:

«Тимәк, теге төндә бисура тигәнем Зөлхизә ҡоҙаса булған». Их, шунда ҡото осоп суҡайып ултырғансы, сосораҡ булып тотоп алһасы...

Ҡайынға һөйәлеп торған Бәхтейәр бәрей ҡыҙының күккә ашҡанын иҫенә төшөрҙө лә, шул эҙҙәрҙе юллап йүгермәксе ине, боҫорға мәжбүр булды. Биш-алты карат, көртмәле ашай-ашай, тирә-яҡты байҡап йөрөй. Бәхтейәрҙең эргәһенән генә үтеп йылға буйында туҡтанылар. Һыу кисергә сикәнделәрме, аша сыҡманылар, ҡаяға оҙаҡ ҡына ҡарап мыңғырҙаштылар. Бәхәсләшәләр ине булһа кәрәк.

Бер сыйылдағырак тауышлыһының ғына:

— Юҡ, бында ҡанатлы булырға кәрәк, юҡ, — тигәне ишетелде. Ҡабат боролоп урманға инделәр ҙә ятып тороп көртмәлегә тейештеләр. Аптырағандан ҡарашы менән ҡаялағы һәр екте һәрмәгән Бәхтейәргә уларҙың убырлығына екһенеп, серәкәй емтеге булып ултырыуҙан башҡа сара ҡалманы. Саҡ-саҡ сыҙаны. Һаман һыҙлаған яраларынан бигерәк, башына килгән бер фекер уны бимазалай ине.

«Мәмерйәнең йәшерен юлы ошонда килеп сығырға тейеш. Моғайын, ул нык юғарылалыр. Теге юлы Зөлхизәне арҡан менән тартып алғандарҙыр».

Тегеләр, ниһәйәт, туйҙы, ахыры. Мөңгөрҙәшеп киткәндәре ишетелде. Шыпырт ҡына барып, яҡын-тирәлә кеше булмағанына ышанғас, Бәхтейәр ҡая янына килде. Буйы етерҙәй ерҙәрен ҡапшап ҡына түгел, ялап, еҫкәп тигәндәй сыҡты. Юҡ инде, юҡ. Унан ҡаяға терәлеп үҫкән ике ҡарағайға ла менеп ҡараны. Аяғы менән дә, ҡулы менән дә таштарҙы эткеләне. Ул арала эңер төштө, ҡараңғылыҡ ҡуйырҙы. «Бәлки, төндә сығып ҡасырға уйлайҙарҙыр», — тигән өмөт менән үҫмер Алмасыуарын яҡынғараҡ алып килеп йәшерҙе лә, әлеге ҡарт ҡайын төбөнә боҫоп, ҡаяға текләне. Күҙе сығырҙай булып күпме генә ҡарамаһын, бер кем күренмәне.

Төн һил үтте. Тимәк, мәмерйәләгеләр ҡасырға йыйынмай. Бәлки, берәй ярҙамға өмөт итәләрҙер. Моғайын, атаһы менән ағалары, караттарҙы албырғатып, уларға ҡушылырға йыйыналыр. Был уйҙан Бәхтейәрҙең күңеле күтәрелеп китте. Шулай ҙа ҡул ҡаушырып ултырырға ярамай. Ул йәнә ҡарағайға үрмәләне. Уның кәкрәйеп үҫкән ботағы буйлап бар-

һаң, сосайып торған ташҡа саҡ ҡына аяҡ терәрлек урын бар. Шуға баҫып өҫкәрәк ынтылмаҡсы булды. Башҡа ваҡыт булһа, тейен кеүек кенә һикерәңләр ине лә, әле ҡапылыраҡ боролһаң да үҙәк өҙгөс әрнетә.

Теге ташҡа аяғын терәгәндән һуң Бәхтейәр өҫтәгеләрен эткеләп ҡараны. Әмәленә күрә икенсе аяғын да ҡуйырлыҡ ер тапты. Сусаҡтауҙа шоңҡар аулап йөрөгәндәге тәжрибәһе бик тә ярап ҡалды. Тырнаҡ аҫтарын ҡанатаҡаната өҫтәге бер ташҡа сытырман йәбешеп аяғын күсермәксе булғайны, таш эскәрәк шылғандай тойолдо. Иплләп кенә этеп ҡарағайны, ысынлап та ярыҡ хасил булды. Тар ғына, әммә бик тырышһаң, бәлки, баш һыйыр. Йөрәге дарҫлап, күңеле ашҡынып торһа ла, тыйылды Бәхтейәр. Тәүҙә төшөп тирә-яҡты ҡараштырҙы. Ҡараттар темеҫкенеп йөрөмәйме? Ул арала күк дөһөрләгән кеүек тауыш ишетелде. Ысынлап та көн болотлораҡ. Ямғыр яуып тайғаҡлатһа, бөтөнләй менеп булмаҫ тип, тәүәккәлләне. Башы һыйҙы бит! Хәҙер иплләп кенә кәүҙәне тартып алырға кәрәк.

Бәхтейәр үҙен эстән дә хәүеф һағалағанын яҡшы төшөнә. Инеп тә етер, атып та йығырҙар. Шыуышып бара биргәс үҫмер сүкәйерлек ергә килеп сыҡты. Байтаҡ ҡына тирә-яҡҡа ҡолаҡ һалып ултырҙы, унан кире боролоп үҙе ингән тишекте көпләне. Хәҙер артабан мүкәйләргә лә була.

Ҡыуыш киңәйгәндән-киңәйә барып, ҡәҙимге турайырлыҡ ҙурайҙы. Бәхтейәр тауыш сығармаҫҡа тырышып, аяғын шыуҙырып ҡына атланы. Ҡараңғыла саҡ упҡынға ҡоламаны, таштарҙың шыптырҙап ҡойолоуынан ғына абайлап ҡалды. Был тирәлә һуҡмаҡ шул тик-



лем тарая, арҡанды ташҡа ныҡ терәп, шыуып ҡына барырға кәрәк. Бына бер мәл алда аҙ ғына яҡтылыҡ шәйләнгәндәй булды. Бер боролманы үткәс, ҙур ғына ҡыуышҡа килеп сыҡты. Эйелеп ҡараһаң, ер аҫты күле ялтырай. Күл янындағы боҙбармаҡтарға терәлеп, әзмәүерҙәй дүрт егет һуҙылған. Тәүҙә Бәхтейәргә улар ял итеп ятҡан кеүек тойолған ине, торараҡ аңланы...

Тыштағы атыу тауыштары бында ярайһы ғына ишетелә. Тимәк, мәмерйә ауыҙы бынан алыҫ түгел. Бәхтейәр бер таш артына барып боҫто ла шым ғына:

— Тимербикә ҡоҙағый, Зөлхизә, Гөлйөҙөм еңгәм һеҙгә сәләм ебәрҙе, — тип өндәште. — Ҡоҙағый, атмағыҙ! Мин төпсөк ҡоҙағыҙ Бәхтейәр булам.

— Яҡтыға сыҡ! — тине ҡатын-ҡыҙ тауышы ҡырҡыу ғына.

— Атмағыҙ, — тине Бәхтейәр тауышҡа ҡарай аҙымлап. Үк-һаҙаҡ тотоп мәмерйә тишеге янында ултырған өлкән йәштәрҙәге ҡатын үткер күҙҙәре менән үҫмерҙең йөрәген быраулап алғандай итеп ҡараны.

— Нисек индең бында? Беҙҙе ҡайһылайтып таптың? — тип талапсан итеп һораны, тауышында үлемесле талсығыу ишетелде.

— Ишмырҙа өйрәтте. Беҙ унын менән яза соҡоронда бергә ултырҙыҡ. — Ышанмаһан, ҡара, тигәндәй, ул күлдәген күтәреп тетелеп бөткән арҡаһын күрһәтте.

— Ишмырҙа тәғәйен ергә барып етә алмағанмы ни? — тип әсенеп һораны бейбисә. Шунда ғына Бәхтейәр малайҙың үҙенә лә, караттарға ла барыһын да һөйләп бөтөрмәгәнен

төшөндө: «Тимәк, ул көртмәле йыйырға сыҡмаған...»

— Ярҙам көтөр урын юҡ инде улай булғас... — Тимербикә ауыр һулап башын һәлендерҙе. Оҙаҡлап ҡайғырырға форсаты юҡ ине. — Ышанырғамы һиңә, егет? — тип өндәште. — Һатлыҡ түгелһеңме?

— Зөлхизә ҡоҙаса ҡайҙа? — тип борсолоп һораны Бәхтейәр. — Гөлйөҙөм еңгәм икегеҙҙе алып ҡайтырға тип ебәргәйне!

— Был үлем ҡапсығынан ҡотолоу юҡ икәнен аңламаныңмы ни, балаҡай? Күрмәйһеңме ни, меҥ күҙ менән беҙҙең үлемде көҫәп, ҡаныбыҙға сарсап торалар. — Уның һүҙен раҫлағандай, аҫтан гөрһөлдәү тауышы ишетелде.

— Әллә туп килтергәндәр инде?

— Бөгөн төш алдынан ата башланылар.

— Тиҙерәк ысҡынырға кәрәк, ҡоҙағый. Мин килгән юлды әле белеүсе юҡ. Урманда айғырым ял итеп тора. Аулаҡта ҡолонло бейә бар. Сығып ҡотолорға һуң түгел әле.

Шул саҡ ҡараңғы мөйөштән ыңғырашыу ишетелде. Тимербикә уҡ-һаҙағын ҡуйып шунда ашыҡты. Артынан ынтылған Бәхтейәргә мәмерйә ауыҙын һаҡларға ымланы.

— Нишләй, балам? Хәлең нисек? — Әсәнең тауышында бөтҡөһөҙ наҙ ҡатыш әсенеү ишетелде.

— Янып барам, әсәй. Бер йотом ғына ҡымыҙ булһасы, ибет, — тигән хәлһеҙ генә тауыш ишетелде.

— Кем менән һөйләшә инең, әсәй? Ишмырҙа ҡайттымы, әллә ағайымдармы?

— Юҡ шул әле, — тине әсә. — Бына-бына килеп етерҙәр инде.



Бесән өҫтөнә түшәлгән бүре толоп өҫтөндә моңһоу ай кеүек һылыу ҡыҙ ята. Болот кеүек ҡара сәстәре туҙраған, аҡ маңлайында бөҙөркәләнеп тора. Уң битендә матур миңе бар.

«Гөлйөҙөм еңгәмдән дә матур икән», — тип уйланы Бәхтейәр. Үҙе тонйорап торған ҙур күҙҙәрҙең ҡарашынан ҡаушаны.

— Ҡымыҙ бар ҙа ул, ҡоҙағый. Аҫта ҡарағай төбөндә ҡалған, — тип мығырҙаған булды.

— Ҡоҙа беҙҙе үҙҙәренә алып ҡайтырға килгән. Гөлйөҙөм апайың ебәргән, — тип йәйләүҙең бер тирмәһенән икенсеһенә ҡунаҡ саҡырырға килгән йомошсо малай кеүек кенә итеп таныштырҙы ла, ирекһеҙҙән үҙе лә көлөп ҡуйҙы ҡоҙағый. Ә Бәхтейәр, шундай һылыу ҡыҙ янында ылбырап бөткән күлдәк-ыштанда торғанын абайлап, ер тишегенә инерҙәй булды.

— Хәҙер турһыҡты алып инәм, — тип рөхсәт һорағандай бейбисәгә баҡты. Балаһына еңеллек килерҙәй булһа, аҡтыҡ ҡанын да бирергә әҙер булған әсә риза ине, әлбиттә.

— Абай йөрө, — тип кенә әйтеп ҡалды.

Ҡымыҙ эсереп ҡыҙының күңелен күргәндән һуң, инде ҡасан йүнләп йоҡлағанын да онотҡан бейбисә ял итергә ятты.

Ҡараттарға күмәк булып күренер өсөн үҫмер тәүҙә мәмерйә алдында күлдәксән килеш ултырҙы. Унан башына бүрек, өҫтөнә һырма кейеп баҫып торҙо. Унан яулыҡ ябынып ялпылдап йөрөп алды.

Ҡымыҙ хәл бирҙеме, яңы кешене күреп күңеле күтәрелдеме, Зөлхизә, ҡалҡыныбыраҡ, ултырып, Бәхтейәрҙән апаһы тураһында һорашты. Унан үҫмер мөмкин тиклем мәрәкәрәк итеп үҙенең мажараларын бәйән итте.

Бисура хаҡында һөйләгәндә Зөлхизә хатта көләп тә ебәргеләне. Ул көлгәндә бәләкәс кенә миңе битендә хасил булған соҡорҙа юғалып тора, әйтерһең дә, аҡ тулҡында йөҙгән ҡара аҡҡош һыуға сумып-сумып ала. Ә көләүе ҡырсынташҡа һибелгән көмөш тәңкәләрҙең сылтырауы кеүек. Өйҙән сығып киткәне бирле тәү тапҡыр үҙен бик тә бәхетле итеп тойҙо Бәхтейәр.

— Берәй мәкер уйланылар, ахыры, былар, — тип, эңерҙә ҡабаланып килеп торҙо бейбисә. Мәмерйә ауыҙына барып оҙаҡ ҡына ҡарап торғандан һуң, ҡайҙалыр төпкә, таш өйҙөң ҡараңғылығына инеп юғалды. Байтаҡ ваҡыт үткәндән һуң көмрәйеп, бәлтерәгән хәлһеҙ ҡарсыҡҡа әйләнеп, тәнтерәкләп килде лә, һаҡта торған Бәхтейәр эргәһендә тубыҡланды. Аҫтағы усаҡтарға ҡараны. Үҫмерҙең һораулы ҡарашын абайлап: «Уландарымды зыярат ҡылдым, балаҡай, — тине. — Улар алдындағы һуңғы бурысымды үтәнем».

— Балаларыңдан тороп ҡалып зарығып ултырмаһаң ине ул, — тине Тимербикә. Унан, ауыр кисерештәрен бар ихтыярын йыйып ситкәрәк этеп ҡуйғандай, кинәт ҡалҡынды.

— Атың ҡайһы тирәләрәк тора, ҡоҙа?

Бәхтейәр Алмасыуарҙы йәшергән урынын, бейәне ҡалдырған аулаҡ төйәкте һүрәтләп бирҙе. Әмәлгә күрә, унһы бик алыҫ түгел икән, тура төшһәң, бер тауҙы ғына артылыр кәрәк.

— Һин атыңды ҡарап кил. Былар ҙур табын ҡора. Шау-шыуҙары баҫылғас, төн уртаһындараҡ ҡуҙғалырбыҙ, — тип әйтеп тә өлгөрҙө Тимербикә, ҡолаҡ төбөнән һыҙғырып үткән уҡтан ситкә тайшанырға мәжбүр булды. Ҡайһы аралалыр бер төркөм «тоғро» башҡорт уҡ етер ергә килеп йәтешләп урынлашып өлгөргән.

— Былар беҙгә тынғы бирмәҫкә оҡшаған. Бар, һин ашыҡ, — тине бейбисә.

Төн аяҙ, тын ине. Арҡанды төшөрөр алдынан Бәхтейәр, башын сығарып, байтаҡ ҡына тирә-яҡты тыңланы. Ҡисәге кеүек аулаҡҡа оҡшамаған. Һәр ағас төбөндә бер ҡараҫҡы һағалап торалыр, атын да тапҡандарҙыр, ҡотолоу юҡтыр кеүек тойолдо малайға. Әммә тәүәккәлләргә кәрәк ине. Ярғанат кеүек кәйелеп кенә төштө: бер бөртөк таш та тәгәрләмәне, бер ботаҡ та сыртлап һынманы. Һуңғы осорҙа үҙ нужаһын ситкә ҡуйып, бары тик хужаһы ҡушҡанға ғына буйһонорға күнеккән хайуанҡай Бәхтейәрҙе тотанаҡлы ғына бышҡырып сәләмләне.

— Тағы бер ынтылһаҡ, ҡотолабыҙ, Алмасыуар. Инде бөтәһе лә һинән тора. Хәҙер һинең эйәргә башҡорт иленең иң ғәййәр бейбисәһе менән иң һылыу ҡыҙы ултырыр. Үҙебеҙҙең йәйләүгә уларҙы ел кеүек елдереп алып ҡайт, — тип бышылданы унын ҡолағына үҫмер.

Айғырҙы теге ҡайын төбөндә ҡалдырҙы, бәйләмәне:

— Һыҙғырһам, килерһең, — тип киҫәтте. Әлегә бөтәһе лә уйлағанса барыуына күңеле күтәрелеп кире ингәйне, Тимербикә ҡоҙағыйы бик хәүефләнеп ҡаршы алды.

— Тегеләр килә лә ябырыла бит әле, — тип аҫҡа ымланы. Ҡара түңгәк кеүек булып ятҡан бер нисә ҡараҫҡыны абайлап, Бәхтейәр бейбисәнең мәргәнлегенә тағы бер һоҡланды.

— Һурпа эсеп, хәмер һемереп, донъяларын түңәрәкләтеп алдылар. Хәҙер улар төн ҡосағында ҡара яу булып ағыласаҡ. Аҙлығыбыҙҙы ла һиҙҙеләр, ҡамауҙа тороп та ялҡтылар, — тине Тимербикә. — Ҡоҙаң менән төрлө яуҙарҙа күп йөрөнөм мин, ишеткәнһеңдер. Батша мәнфәғәтен өҫтөн ҡуйып, ихтилалға күтәрелгән башҡа халайыҡтарҙы ҡанға батырып йөрөгән саҡтар ҙа булды. Яҡшы беләм. Ҡәлғәләрҙе ҡамап айҙар буйы сыҙам ятҡан ғәскәрҙә бер көн шундай ярһыу ғәйрәт тупланa, һәр яугир тотоп тыйғыһыҙ хәлгә килә. Уны үләмме, ҡаламмы тигән уй борсомай, тешләнеп алға, алға ынтыла, утҡа ташлана, дарьяға һикерә. Шундай хәлдә, ахыры, аҫтағылар. Беҙ улар күҙендәге һуңғы суп... Ынтылыштарындағы һуңғы ҡаршылыҡбыҙ.

Бейбисәнең тауышы битараф, әйтерһең дә, ул яҙмышына тотошлай баш һалған. Уның тыныслығы Бәхтейәрҙе ярһытып ебәрҙе. Ул ажарланып китеп яңынан күтәрелә башлаған шәүләләр өҫтөнә мәмерйәнең тығыны булған олоғара ташты этеп ебәрҙе. Уныһы ваҡ таштарҙы артынан эйәртеп, дөбөрҙәп төшөп китте. Аҫта аяныслы аҡырышҡан тауыштар ишетелде.

— Ҡоҙағый, — тине Бәхтейәр ҡәтғи итеп. — Хәҙер һеҙ Зөлхизә ҡоҙаса менән китәһегеҙ. — Тауышының бойороусан ҡырҡыулығына үҙе лә аптыраны. — Мин быларҙы бер аҙға туҡтатып торормон. — Тимербикәнең ҡаршы әйтергә самалауын абайлап, ризаһыҙ ҡиәфәт менән башын сайҡаны. — Һатыулашыр мәл түгел. — Унан дауам итте. — Алмасыуар — бик тәкәббер ат. Исемен әйтеп, яратып ҡағылһағыҙ, ҡатын-ҡыҙҙы рәнйетмәҫкә була



тыңлар. Аулаҡ төйәккә барып еткәс, шоңҡарымды сөйөгөҙ. Ҡотолғанығыҙҙы шунан белермен. Мине көтмәгеҙ. Бейәне эйәрләп алығыҙ ҙа беҙҙең яҡҡа сабығыҙ. Барғас та боҫоғоҙ. Бер кем белмәһен. Батшаның ҡолағы сос, ҡулы оҙон.

Ылбырап бөткән күлдәк-ыштанлы малайҙың күҙ алдында ир-егеткә әйләнеүенән ҡаушабыраҡ ҡалған Тимербикә яңы ғына улдарын ерләгән әсә әрнеүе менән ялынды:

— Һине ут эсендә ҡалдырып китһәм, әсәйеңдең күҙенә нисек ҡарармын?

Бәхтейәр былғаса ҡайһылайтып әйтергә белмәгән серен бәхәстең нөктәһе кеүек асып һалды:

— Ҡараттар араһында атайым да бар. Ул мине йолоп ҡалыр.

Юлсылар ҡараңғылыҡҡа инеп юғалыу менән Бәхтейәр тейен кеүек етеҙ һикереп (ә яралары һаман һыҙлай) кире менде лә, ингән юлын көпләп, мәмерйә ауыҙына ашыҡты.

Юҡҡа ғына ҡабаланмаған икән. Ҡараттарҙың алғы төркөмө мәмерйә алдындағы ышыҡҡа килеп еткән. Тимер ырғаҡ ташлағандар ҙа, ҡаршылыҡ күрһәтеүсе булмағас, арҡан буйлап менергә маташалар. Бер бәләкәс кенә карат инде менеп еттем тигәндә, Бәхтейәр арҡанды хәнйәре менән киҫеп ебәрҙе лә бер түгел ике кешенең ергә лап итеп барып төшөүен кинәнеп тыңлап торҙо. Унан мәмерйә мөйөшөндә ятҡан ҙур бер ташты тәгәрләтеп алып килде, тар һуҡмаҡ буйлап мунсаҡ кеүек теҙелгән караттар өҫтөнә этеп ебәрҙе.

Бер үҙенең шул хәҙәрлем һалдатҡа ҡаршы тора алмаясағын аңлай ине ул. Берәй мәргәненең уҡ атымы ерҙән яралауы ла бар.

Шуға күрә сосайып күп йөрөмәҫкә, ырғаҡ ырғытҡан һайын арҡанды киҫеү менән генә сикләнергә булды. Өс-дүрт тапҡыр маташып ҡарағандан һуң тыштағылар шымды. Ә Бәхтейәр ваҡыт үткән һайын Зөлхизә һылыуҙың үлемдән йыраҡҡараҡ китеүен уйлап һөйөндө.

Таң һыҙыла башлағас, үҙенә лә шым ғына китергә мәл еткәнен аңланы. Мәмерйәнең йәшерен тишегенән башын тығып ҡарау менән шатлығынан көлөп ебәрҙе: күктә унының шонҡары талпына. Арҡан буйлап төшә башлағайны, урман араһынан һайт-һайтлап сабып сыҡҡан һыбайлыларҙы күреп ҡалды.

«Үҙебеҙҙең башҡорттар, — тип еңел һуланы. — Араларында атайым да барҙыр». Урыҫтарҙы абайлап һағайҙы. Ҡире менеп арҡанын тарта һалып алды. Ул арала мәмерйәнең эске яғынан да килеп етеп, таштарҙы дөбөр-шатыр шылдыра башланылар. Үҫмер нимә эшләргә лә белмәйенсә өҫкә үрмәләне. Ялан аяҡтары менән һәрмәнеп әллә ҡайҙан һикәлтәләр тапҡандыр, ниндәй көс уны ҡаяға йәбештереп ҡуйғандыр — үҙе лә аптыраны. Бармаҡтарының ҡара ҡанға туҙыуын да абайламай һалҡын ҡаяның күкрәгенә әсәһе күкрәгенә һыйынып хәтәрҙән ҡасҡан сабый кеүек йылышты.

Сосайып торған бер таш аҫтында ҡәҙимге баҫып торорлоҡ урын бар икән, шунда етеп, йөҙө менән боролоп баҫты. Башҡа юл юҡ. Өҫтә таш. Аҫта ла, унда ла, һулда ла — үлем. Бәхтейәр һаҡ ҡына аҫҡа ҡараны. Әллә күпме карат башын саңҡайтып уға текләп тора. Үҫмер, һыҙғырып, күктәге шонҡарын саҡырҙы. Ул арала мәмерйә эсендәгеләр аҫтағыларға: «Башҡа бер кем дә юҡ!» — тип ҡысҡырҙы.



Ошо итек башындай малай арҡаһында төн йоҡламай, ал-ял белмәй мәж килеп йөрөүҙәре бөтәһенә лә мәрәкә тойолдо. Һауаға шарт та шорт атып шатлыҡтарын белдерҙеләр, хахылдашып көлөштөләр. Ҡыҙмаса баштарҙың береһе: «Ана бит, бик йәтеш сәп», — тип әйтеп һалды. Сәмләнешеп ҡояштың тәүге нуры төшкән аҡ һынға тиҫтәләгән мылтыҡ тоҫҡалды. Ә шонҡар, әйтерһең дә, хужаһын ҡурсаларға тырышты, ҡанаттарын йәйеп, үҫмерҙең яурынына ҡунды.

Ҡараттар араһында булған Степан Бәхтейәрҙе шунда уҡ танығайны. Ҡеше күҙенә салынмаҫҡа тырышып артҡараҡ, ағас араһынараҡ инеп торҙо. Шул саҡ ағаһының:

— Степан! Шайтан малай, Степа! — тип аҡырғанын ишетте. — Ҡил әле бында! Был һин ҡасырға ярҙам иткән башҡорт түгелме?

Ағаһының ҡан һауған күҙҙәренә йыландан арбалған ҡуян кеүек текләгән малай ихтыярһыҙҙан баш ҡаҡты:

— Эйе...

— Ағай-эне, туҡтағыҙ! — тип тыйыҙы ағаһы. Унан Степанға ҡарап ыҫылданы: «Һин хәҙер уны атып төшөрәсәкһең». Атын ҡайырып ҡасырға маташҡан туғанының яғаһынан һөйрәп төшөрҙө лә йөнтәҫ йоҙроғон танауына килтереп терәне: «Минең йөҙөмә яҡҡан оятты юй!»

Көсһөҙләгөнән күҙенә йәш тулған Степан төҙәмәй-нитмәй атып ебәрҙе. Шул саҡ Бәхтейәрҙең яурынына ҡунған шонҡары саңҡылдап аҫҡа йомолдо. Былай ҙа саҡ-саҡ эләгеп торған үҫмер ҡапыл тайшанды ла ҡошо артынан осто.

Бик оҙаҡ осҡан кеүек тойолдо Бәхтейәргә,

хатта ҡанат елпеһә кәйелеп күккә күтәрелер ҙә, Алмасыуарҙың муйынынан ҡосоп һил тормошҡа елгән Зөлхизәне ҡыуып етер кеүек хис итте. Әммә ерҙең тартыу көсө уны аҫҡа һөйрәне, тормоштоң аяуһыҙ ҡануны ергә осло ҡайраҡ таштар түшәп ҡуйҙы. Үҙәккә үткес ауыртыуҙан аҙға ғына һушын юйған Бәхтейәр күҙен асҡанда, үҙенә зәп-зәңгәр күк эйелгән дә, унан тып-тып ямғыр тама кеүек тойолдо.

«Бәхтейәр!» — тип йән әрнеткес тауыш менән иңрәй кеүек ине бар тирә-яҡ. Ә, теге урыҫ малайы икән дә...

— Һин бында нишләп килдең? — тип күптәнге һорауын тағы шыбырҙаны Бәхтейәр.

— Мин һине үлтерергә килдем, — тип ярһып үкһене Степан. — Һине үлтерергә...

Бәхтейәр карат малайына шундай итеп ҡарай, әйтерһең дә, һүнеп барған муйыл ҡара күҙҙәре менән йәнен һурып ала.

— Һин һүндең генә, Бәхтейәр, ә мин үлдем. Мин дөмөктөм, Бәхтейәр, ишетәһеңме?! — тип уны аяуһыҙ һелкетә Степан аҡылдан шашҡан кеүек.

Урыҫ малайын ситкә этеп, Бәхтейәр янына теҙләнгән дәү башҡорт ҡылысҡа күнеккән ҡулдары менән наҙлы һыйпап, ҙур ҡара күҙҙәрҙе йомдора, танымаған кеүек, етеү аҡ сәстәрҙе аралай:

— Улым, төпсөгөм...

Эргәһенә ятып, башын сүкеп-сүкеп илаған Степанға екһенеп ҡарай:

— Өнөңдө тыҡ, дуңғыҙ, — ти ул. — Тыныслан. Яуызлыҡ менән хыянаттың ғүмере оҙон була. — Мыҡты яурындарын көмрәйтеп ғазаплы бышылдай. — Беҙ оҙаҡ йәшәрбеҙ әле.



## ЙӨКМӘТКЕҺЕ


Партбилет . . . . . . . . . . . . . . 5
Һөйөүем доғаһы . . . . . . . . . . . . 22
Ҡәҙерһеҙ . . . . . . . . . . . . . 42
Түлһеҙ . . . . . . . . . . . . . . 59
«Ҡайт, ҡотом, ҡайт...» . . . . . . . . . 88
Ҡорбан килтереү . . . . . . . . . . . 117
Һалҡында һүнгән усаҡ . . . . . . . . . 143
Ҡәҙерле бала . . . . . . . . . . . . 165
Төндә юғалырға хоҡуғым бар . . . . . . . 190
Баһадир . . . . . . . . . . . . . . 203
Йәшлектән килгән сәләм . . . . . . . . 216
Яңынан тыуған көн . . . . . . . . . . 224
Көйгән ағас серемәй . . . . . . . . . 241
Бәхтейәр . . . . . . . . . . . . . . 255



Литературно-художественное издание

**Гиззатуллина Гульсира Мирзаевна**

**СТО ОДНА ЖИЗНЬ МОЯ**

Рассказы и новеллы

*(на башкирском языке)*

Мөхәррире **Сабир Шәрипов.** Рәссамы **Марат Байназаров.** Биҙәүсе мөхәррире **Азат Мөхтәруллин.** Техник мөхәррире **Венера Абдрахманова.** Корректорҙары **Әлфиә Ҡәримова, Әлфиә Дәүләтшина.**

ИБ № 5801

Йыйырға бирелде 18.12.96. Баҫырға ҡул ҡуйылды 25.03.97. Ҡағыҙ форматы $70 \times 90^1/_{32}$. Тип. ҡағыҙы № 2. Әҙәби гарнитура. Ҡалҡыу ысул менән баҫылды. Шартлы баҫма таб. 11,11+0,182 форз. Шартлы буяу отт. 11,37. Иҫәп-баҫма таб. 10,87+0,26 форз. Тиражы 5000 дана. Заказ № 343. Хаҡы ирекле.

Башҡортостан «Ҡитап» нәшриәте. 450001, Өфө, Левченко урамы, 4а. Өфө полиграфия комбинаты. 450001, Өфө, Октябрь проспекты, 2.